РОССИЯ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ
ЮҒАРЫ ПРОФЕССИОНАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫ

**Мирас Иҙелбаев**

# ӘҘӘБИӘТ УҠЫТЫУ МЕТОДИКАҺЫ

*Юғары уҡыу йорттарының филология
факультеты студенттары өсөн дәреслек*

**Өфө - 2011**

УДК
ББК

Башҡорт дәүләт университеты башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының уҡыу-уҡытыу методик комиссияһы тәҡдиме буйынса баҫыла.

**Рецензеттары:**

Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығының уҡыу-уҡытыу фәнни-методик үҙәге директоры урынбаҫары, педагогия фәндәре кандидаты М.Б. Юлмөхәмәтов;

Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы.

И Иҙелбаев М.Х. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. – Өфө: БДУ-ның РНБ, 2011. – 210 бит.

ISBN

Дәреслектә мәктәптәрҙә башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙың төп проблемалары – әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этаптары, хәҙерге заман дәрестәренә талаптар дәрес структураһы һ.б. сағылдырыла. Китапта әҙәбиәт уҡытыуҙың традицион методттары һәм алымдары, дәрес бирәмеге булараҡ уҡыу ситуациялары, материалды проблеманы үҙләштереү, уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереү, әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәр, хәҙерге заман педагогик технологиялары һәм яңылыҡлы дәрестәр мәсьәләләре ҡуҙғатыла.

Дәреслек юғары уҡыу йорттарының филология факультеттары студенттарына, Башҡортостан Республикаһы мәктәптәренең һәм махсус урта уҡыу йорттарының уҡытыусыларына тәғәйәнләнә.

УДК
ББК

ISBN

© Иҙелбаев М.Х., 2011
© БашГУ, 2011



уҡыусыларҙың сығыштары (рефераттары) өлгөһө .........133
Әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәр ........................136
Әҙәбиәт буйынса кластан тыш саралар өлгөләре ..........143
Әҙәбиәт уҡытыусыһының эш пландары .......................160
Әҙәбиәт дәресенең киңәйтелгән план өлгөһө ...............162
IX класта Ризаитдин Фәхретдинов ижадына
арналған дәрестең план-конспекты өлгөһө ..................165
Белем биреүҙең хәҙерге заман технологиялары
һәм яңылыҡлы дәрестәр хаҡында ..............................174
Модуль технологияһы ярҙамында VII класта М. Аҡмулла-
ның “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк” шиғырын өйрәнеү ......181
Мостай Кәрим ижады буйынса дәрес-семинар –
“Әҙәбиәткә һәйкәл”...................................................185
Йомғаҡлау ...............................................................192
“Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы”
предметынан студенттарҙың белемен камиллаштырыу
өсөн тест һорауҙар....................................................195
Файҙаланылған әҙәбиәт һәм сығанаҡтар .....................205

Ш. Бабичтың “Ҡурайҡайға” шиғырын өйрәнеү буйынса
инеш өлгөһө ………………………………………………… ...42
Әҙәби әҫәрҙе класта уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү..43
Ф. Сөләймәновтың “Тимербай ҡурайсы” хикәйәһе
буйынса йөкмәтке үҙләштереү өлгөһө ………………………48
Әҙәби әҫәргә анализ …………………………………………49
Әҙәби әҫәргә дөйөмләштереүсе анализ яһау тәртибе …..59
Зәйнәб Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт”
хикәйәтен проблемалы анализлау һорауҙары………… .....59
Р. Ғариповтың “Аманат” поэмаһына күҙәтеү
рәүешендәге анализ өлгөһө……………………..………60
Д. Юлтыйҙың “Тимеркәй фәлсәфәһе” хикәйәһенә
ентекле анализ өлгөһө…………………………………………62
Образдарға характеристика биреү …………………………74
Әҙәби геройҙарға харктеристика биреү тәртибе…………78
Ф. Исәнғоловтың “Хәмит күпере” хикәйәһе буйынса
Хәмит һәм Вәлит образдарына
сағыштырма характеристика өлгөһө………………………...79
Әҙәби әҫәрҙең жанрын, композицияһын һәм
сюжетын өйрәнеү ……………………………………………81
Зәйнәб Биишеваның “Һөнәрсе менән Өйрәнсек”
хикәйәтен өйрәнгәндә жанрын билдәләү өлгөһө ………. .86
Әҙәби әҫәрҙең тел-стиль сараларын өйрәнеү …………….90
Айырым жанрҙарҙы өйрәнеү үҙенсәлектәре……………….95
Әҙәби әҫәрҙе тасуири уҡыу…………………………………..100
Тексты тасуири уҡыуға талаптар ……………………......104
Әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереү ………………104
Унынсы класта лирик герой тураһында төшөнсә
биреү өлгөһө…………………………………………………..109
VII класта “Шиғыр төҙөлөшө тураһында төшөнсә” темаһына дәрес өлгөһө ………………………………………………………111
Йомғаҡлау дәрестәре үткәреү ………………………………116
Баязит Бикбайҙың “Аҡсәскә” повесы буйынса
йомғаҡлау өлгөһө ……………………………………………121
Уҡыусыларҙың яҙма телмәрен үҫтереү ……………………123
Уҡылған әҫәргә рецензия яҙыу тәртибе ……………………132
Картина буйынса инша яҙыу тәртибе ………………………132
Унынсы класта М. Буранғоловтың ижады буйынса



МИНИСТЕРСТВО ВЫСШЕГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО
ОБРАЗОВАНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ

**Мирас Идельбаев**

# МЕТОДИКА ПРЕПОДАВАНИЯ ЛИТЕРАТУРЫ

*Учебник для филологических факультетов высших учебных заведений*

**Уфа 2011**

УДК
ББК

Печатается по рекомендации учебно-методической комиссии факультета башкирской филологии и журналистики БашГУ.

**Рецензенты:**

Заместитель директора учебного научно-методического центра Министерства образования РБ, кандидат педагогических наук М.Б. Юлмухаметов;

Кафедра башкирской литературы и культуры БГПУ им. Мифтахетдина Акмуллы.

И **Идельбаев М.Х.**

Методика преподавания литературы. Учебник для студентов филологических факультетов вузов. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2011. – 210 с.

ISBN

В учебнике освещены актуальные вопросы преподавания башкирской литературы в школе: основные дидактические методы; этапы изучения литературного произведения; требования к современному уроку; структура урока. Книга знакомит читателя с традиционными методами и приемами преподавания литературы, учебными ситуациями как единицами урока, проблемным усвоением материала, процессом развития устной и письменной речи учащихся, типами внеклассных занятий по литературе, современными педагогическими технологиями и основными требованиям к инновационным урокам.

Учебник предназначен студентам филологических факультетов вузов, а также учителям школ и средних специальных учебных заведений РБ.

УДК
ББК

ISBN

© Идельбаев М.Х., 2011
© БашГУ, 2011



Просвещение, 1985. – 368 с.

20. Никольский В. А. Преподавание литературы в средней школе: Пособие для учителей. – М.: Учпедгиз, 1963. – 292 с.

21. Образование Башкирской Автономной Советской Социалистической Республики: Сборник документов и материалов /Под ред. Б. Х. Юлдашбаева. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1959. – 990 с.

22. Очерки по истории БАССР. В 2-х томах. Т. 1, ч. I. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1956. – 303 с.

23. Өмөтбаев М. Йәдкәр /Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. – 288 бит.

24. Пушкин А. С. О прозе. – Собр. соч. в 10-и томах. Т.VI. – М.: Правда, 1981. – С. 10–11.

25. Рыбникова М. А. Очерки по методике литературного чтения: Пособие для учителя. – М.: Просвещение, 1985. – 288 с.

26. Скаткин М. Н. Методы обучения. – Педагогическая энциклопедия в 4-х томах. Т. 2. – М.: Советская энциклопедия, 1965. – С. 813–821.

27. Сөләймәнов Ә. М. Художестволы берәмек булараҡ әкиәтте өйрәнеү: Филология факультеты студенттары өсөн ҡулланма. – Өфө: 1984. – 36 б.

28. Чивилихин В. Память: Роман-эссе. Книга первая. – Роман-газета, 1985, № 4. – 96 с.

29. Юлмөхәмәтов М. Б. IV–VIII кластар өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә бәйләнешле текст һәм уның төҙөлөшөн өйрәнеү буйынса программа (эксперимент өсөн). – Мәскәү, 1983. – 24

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш……………………………………………………………5
Әҙәбиәт дәресе тураһында дөйөм төшөнсә…………… …..17
Башҡорт әҙәбиәте буйынса программалар, дәреслек-
тәр һәм хрестоматиялар ………………………………………. 19
Әҙәбиәт уҡытыуҙың дөйөм дидактик методтары.………… 22
Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этаптары …………………………… ..30
Әҙәби әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу ………. .....33
Әҙәби әҫәрҙе класта өйрәнеүҙән алда өйҙә үҙ аллы
уҡыуҙы ойоштороу өсөн һорауҙар өлгөләре ……………….35
Инеш дәрестәр …..……………………………………………35

4. Башҡорт әҙәбиәтенән программа: V – XI кластар өсөн /Төҙөүселәре М. Ғималова, Ғ. Хөсәйенов. – Өфө, 2003.
5. Буслаев Ф. И. О преподавании отечественного языка /Вступительная статья, редакция и комментарий Е. Н. Петровой. – Л.: Госучпедгиз наркомпроса РСФСР, 1941. – 248 с.
6. Голубков В. В. Методика преподавания литературы. – М.: Учпедгиз, 1952. – 464 с.
7. Горький А. М. О пьесе. – Собр. соч. в 30-и томах. Т. 26: Статьи, речи, приветствия. – М.: Худ. литература, 1953.
8. Горький А. М. Советская литература (доклад на I Всесоюзном съезде советских писателей 17 августа 1934 г. – Собр. соч. в 30-и томах. Т. 27: Статьи, речи, доклады, приветствия. – М.: Худ. литература, 1953.
9. Ғималова М. Ғ. Урта мәктәптәрҙең IV–VII кластарында башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. – 192 б.
10. Ғималова М. Ғ., Юлмөхәмәтов М. Б. IV–VII кластарҙа кластан тыш уҡыу дәрестәре. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. – 128 б.
11.Ильин Е. Н. И вдруг рождается урок. – Учительская газета, 1986, 28 июня.
12. Ильин Е. Н. Нет мастерства без вдохновения. – Комсомольская правда, 1987, 1 сентября.
13. История города Уфы: Краткий очерк. – Уфа: Башк. кн. издательство, 1976. – 600 с.
14. История Урала: Пособие для студентов, учителей и самообразования. В 2-х томах /Под общ. ред. И. С. Капцуговича. – Пермь: Кн. изд-во. Т. 1, 1976. – 396 с.
15. Крупская Н. К. Об искусстве и литературе. – М. - Л.: Искусство, 1963. – 282 с.
16. Кудряшев П. И. Об эффективности знаний по литературе. – Литература в школе, 1970, № 4. – С. 16–30.
17. Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности. – М. – Л., 1951. – 451 с.
18. Методика преподавания литературы: Учебник для пед. вузов /Под ред. Богдановой О. Ю., Марацмана В. Г. – В 2 ч. Ч.1. – М., 1994. – 288с.
19. Методика преподавания литературы /Под ред. З. Я. Рез. – М.:



## Инеш

Әҙәбиәт дәресе... Юғары кимәлдә әҙерләнеп, дөрөҫ ойошторолған дәрес уҡыусыларҙы тормоштоң серле күренештәренә алып инә, һоҡланғыс йә тетрәткес уй-кисерештәр, хистәр донъяһында, кинәйәле, хикмәтле матурлыҡтар эсендә йөрөтә. Уҡыусыларҙың бер әҙәбиәт дәресендә алған рухи ынтылышы, кисерештәр юғарылығы бүтән предметтарҙы өйрәнеүгә лә ыңғай йоғонто яһарға тейеш.

Эйе, мәктәптә өйрәнелә торған фәндәр системаһында ул хатта үҙенә башҡа бер урынды биләп тора. Сөнки әҙәбиәт, билдәле булыуынса – тормошто сәнғәтсә сағылдырыу. Әҙәбиәтте өйрәнеү – уҡыусылар өсөн тормоштоң үҙен өйрәнеү менән бер. «Әҙәбиәт – үткән һәм бөгөнгө тормоштоң кисәге, – ти Н. К. Крупская. – Ул үҙ дәүеренең ижтимағи мөнәсәбәттәре менән органик рәүештә бәйләнгән һәм унан тыш, ошо бәйләнештән тыш өйрәнелеүе мөмкин түгел» (15,177). Йәш быуын өсөн тормош үҙе үк тәрбиә мәктәбе булған кеүек, мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре лә уҡыусыларҙың уй-ҡараштарын, әхлаҡ принциптарын, эстетик идеалдарын тәрбиәләүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай. Ә ошо тәрбиәнең нindәй дәрәжәлә тормошҡа ашырылыуы әҙәбиәт уҡытыуҙың торошона бәйләнгән. «Беҙҙең эшебеҙ менән кешегә ҡарата тәрән ҡыҙыҡһыныу тойғоһо етәкселек итә. Минең өсөн әҙәбиәт дәресе – кеше дәресе. Китап та – анализлау объекты ғына түгел, ә кешегә ярҙам итеү инструменты ул», – тип яҙҙы XX быуаттың 80-90-сы йылдарында яңылыҡлы алымдар менән эшләүсе әҙәбиәт уҡытыусыһы Е. Н. Ильин (12). Күренеүенсә, әҙәбиәт дәрестәрендә күп яҡлы ҡатмарлы мәсьәләләр менән эш итеlә. Йыш ҡына уларҙы йырып сығыу еңелдән булмай. Әҙәбиәт уҡытыусыһына үҙ вазифаһын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн, предметтың үҙен – әҙәбиәтте, әҙәбиәт тарихын, әҙәбиәт теорияһын – биш бармағы кеүек үҙләштереүҙән тыш, махсус фәнни белем менән ҡоралланыу талап ителә. Ул фән әҙәбиәт уҡытыу методикаһы тип атала.

Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы фәненең п р е д м е т ы – мәктәп уҡыусыларына әҙәбиәтте өйрәтеү процесы ул. Әгәр әҙәбиәт ғилеме нәфис әҙәбиәттең үҙен өйрәнһә, әҙәбиәт уҡытыу методикаһы, тимәк, әҙәбиәтте уҡытыуҙың ғилми методтарын һәм алымдарын өйрәнә.

Уның б у р ы с ы – ошо процестың төп законлыҡтарын асыу, уҡытыусыларға иң ҡулайлы саралар менән эш итеү мөмкинлектәрен

күрһәтеү.

Әҙәбиәт уҡытыу методикаһының й ө к м ә т к е һ е уның структураһы менән тығыҙ бәйле. Әҙәбиәтте өйрәтеү процесы үҙ-ара ҡатмарлы мөнәсәбәттә торған дүрт элементты эсенә ала: өйрәтеүҙең маҡсаты – өйрәнелә торған предмет – уҡытыусы – уҡыусы. Йәғни, методика курсы әҙәбиәт уҡытыуҙың төп проблемаларын, маҡсаттарын һәм бурыстарын, урта мәктәптә үтелергә тейеш әҙәбиәт предметының йөкмәткеһен, дәреслектәр, методик күрһәтмәләр, күргәҙмә әсбаптар мәсьәләһен хәл итә. Уҡыу предметы үҙ сиратында уҡытыу методтары һәм алымдары проблемаһына барып тоташа. Бынан тыш, әҙәбиәт уҡытыу методикаһы уҡытыу процесын ойоштороуҙың төп формаларын (дәрес, факультатив дәрестәр, әҙәбиәт буйынса кластан тыш, мәктәптән тыш эштәр һ.б.) өйрәнә. Әҙәбиәт предметын уҡытыу процесында уҡытыусының профессиональ әҙерлеге, педагогик таланты, үҙ эшенә мөнәсәбәте, шулай уҡ уҡыусының материалды үҙләштереү мөмкинлектәре һәм шәхси һәләте лә юғарылағы элементтарға һиҙелерлек йоғонто яһай.

Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең үҫеше *рус әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәне ҡаҙаныштары* менән тығыҙ бәйле. Шуға күрә, тәүҙә рус әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең барлыҡҡа килеүе, үҫеүе һәм уның өйрәнелеүе тарихына ҡыҫҡаса күҙәтеү яһайыҡ.

Тел-әҙәбиәтте нисек уҡытыу тураһындағы тәүге фекерҙәр боронғо дәүерҙәргә үк ҡарай. 1073 һәм 1076 йылдарҙа кенәз Святослав сығарған «Изборниктар» китап уҡыуҙың файҙаһын күрһәтеүсе («Добро есть, братие, почитанье книжьное!»), әҙәби әҫәрҙе аңларға өйрәтеүсе фекерҙәр туплаған, иң беренсе хеҙмәттәрҙән һанала. Шул «Изборниктар»ҙағы Георгий Хоровосктың «Образдар тураһында» тигән мәҡәләһе айырым иғтибарға лайыҡ, – тип яҙа В. Чивилихин. – Урта быуаттарҙың был үҙенә бер төрлө әҙәбиәт дәреслеге уҡыусыны художестволылыҡ тәбиғәте, һүҙ сәнғәтенең үҙенсәлектәре, троптар системаһы менән таныштыра» (28, 3). Рус дәүләтендә XIII быуаттан ҡулъяҙма рәүешендә тарала башлаған уҡыу-яҙыуға өйрәтеү китаптарында – «Азбуковниктарҙа» шиғриәт һәм сәсмә әҫәр теорияһы тураһында ентекле мәғлүмәттәр барлығы билдәле. XVIII быуат башында Киев руханиҙар семинарияһы уҡытыусыһы Феофан Прокопович үҙенең ҡулланмаларында прогрессив педагогик идеялар үткәрә, сәнғәтте ысынбарлыҡтың



**40**. *Дәрес планының ниндәй төрҙәре бар?*

1) План-конспект (тәжрибәле уҡытыусылар өсөн), киңәйтелгән план (йәш уҡытыусылар өсөн);

2) План- конспект (йәш уҡытыусылар өсөн), киңәйтелгән план (тәжрибәле уҡытыусылар өсөн);

3) План-конспект (бөтә коллктив өсөн);

4) Дөрөҫ яуап юҡ;

5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**Файҙаланылған әҙәбиәт һәм сығанаҡтар**

1.Аҡмулла: шиғырҙар /Төҙөүсеһе, аңлатмалар һәм баш һүҙ авторы Әхәт Вилданов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 224 б.

2. Башҡорт теле хаҡында ҡануниәт: XX быуат башы /Төҙөүсеһе Р. Ф. Рәжәпов. – Өфө, 2004. – 208 б.

3. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өсөнсө китап /Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 344 б.

5) Әҙәби музей, кластан тыш уҡыу дәресе, диспут.

**35**. *Әҙәби кисәләр мәктәптә йылына нисә тапҡыр ойоштorола?*
1) Бер тапҡыр;
2) Аҙна һайын;
3) Ике-өс тапҡыр;
4) Дөрөҫ яуап юҡ;
5) Айына ике-өс тапҡыр.

**36.** *Эпизодик эш төрҙәре ниндәй сараларҙы үҙ эсенә ала:*
1) Уҡыу конференцияларын, түңәрәктәрҙе;
2) Диспуттарҙы, әҙәби музейҙы;
3) Әҙәби клубты, әҙәби экскурсияларҙы;
4) Уҡыу конференцияларын, диспуттарҙы, әҙәби кисәләрҙе, экскурсияларҙы, походтарҙы;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**37.** Урта кластарҙа әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙең ҡайһы төркөмө өйрәнелә?
1) Әҙәбиәттең тарихи үҫеш үҙенсәлектәренә ҡарағаны;
2) Әҙәби әҫәргә ҡарағаны;
3) Әҙәбиәткә ҡарағаны;
4) Өсөһө лә;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**38.** *“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналының мөхәррире кем:*
1) С. Ғүмәров;
2) Т. Дәүләтбирҙина;
3) С. Лоҡманов;
4) С. Кәримов.

**39.** *Әҙәбиәт уҡытыусыһының ниндәй эш пландары була?*
1) Йыллыҡ план, дәрес планы;
2) Дәрес планы, тематик план;
3) Тематик план, һәр сиреккә план;
4) Уҡытыусының эш стажына ҡарап билдәләнгән эш пландары;
5) Йыллыҡ план, тематик план, дәрес планы.



сағылдырылышы, тип ҡарай. Ә уның замандашы атаҡлы рус ғалимы М. В. Ломоносов методика буйынса иң тәүге теоретик һығымталарҙы яһай. Ломоносовтың 1748 йылда баҫылып сыҡҡан «Краткое руководство к красноречию» тигән китабы Россияла әҙәбиәт уҡытыу методикаһы фәненең формалашыуына башланғыс һалыусы хеҙмәт булып тора. Был фәндең артабанғы үҫешенә быуат аҙағында В. К. Тредиаковский, Н. И. Новиков, А. Н. Радищев кеүек мәғрифәтсе-яҙыусылар һиҙелерлек өлөш индерә. XIX быуатта әҙәбиәт уҡытыуҙың теоретик нигеҙҙәре күренекле ғалимдар Ф. И. Буслаев (1818–1897), В. И. Водовозов (1825–1886), В. Я. Стоюнин (1826–1888), В. П. Острогорский (1840–1902), Ц. П. Балталон (1855–1913), А. Д. Алферов (1862–1919) хеҙмәттәре менән байытыла. Уларҙың һәр ҡайһыһы методика фәненең ниндәй ҙә булһа әлкәһендә үҙҙәренең фекерҙәре менән һиҙелерлек эҙ ҡалдыра.

Ф.И. Буслаев мәктәптә әҙәбиәт уҡытыуҙың нигеҙе булып әҙәби әҫәрҙең үҙен уҡыу, тип һанай. Әҙәбиәт теорияһы һәм әҙәбиәт траихи буйынса үткәрелә торған дәрестәр ошо уҡылған материал нигеҙендә ҡоролорға тейеш, тигән талап ҡуя. Ләкин Буслаев тел-стиль сараларын анализлау менән күберәк мауыға, уның идея-проблематикаһын, йөкмәтке һәм форма берлеген асыуға тейешле иғтибар биреп еткермәй.

Күренекле методист В. Я. Стоюнин да мәктәптә әҙәбиәт ғилеме генә түгел, беренсе сиратта әҙәби әҫәр үҙе өйрәнелергә тейеш, тип ҡарай. Ул әҙәбиәтте тик дәреслек буйынса ғына өйрәнеүҙе, әҙәби текстарға иғтибар итеп еткермәүҙе тәнҡитләп сыға. Был фекерҙең иҫкермәүе, һәр ваҡытта ла актуаль яңғыраясағы бәхәсһеҙ.

В.И. Водовозов әҙәби әҫәрҙе өйрәнгәндә уның тасуири яңғырашына ҙур иғтибар бирә. Текст менән танышыуҙы тасуири уҡыуҙан башларға кәрәк, тигән талап ҡуя.

В.П. Острогонский үҙенең ҡараштары менән В. Я. Стоюнинға яҡын тора. Өҫтәүенә, ул әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙе эмоциональ ҡабул итеү менән бергә алып барырға тырышҡан. Был осраҡта әҙәбиәт уҡытыу күп яҡлы төҫ ала, тип һанаған ул.

Ц.П. Балталон художестволы ижадтың психологик яҡтарына ныҡыраҡ иғтибар иткән; уның төп программаһы – тәрбиәле уҡытыу мәсьәләләре.

XX быуаттың 20-се йылдарында мәктәптәрҙә әҙәбиәт фәненең ныҡлы урын алыуы халыҡ мәғарифенең күренекле етәкселәре, дәүләт

һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре А. В. Луначарский (1875–1933) һәм Н. К. Крупская (1869–1939) исемдәре менән бәйле. Улар ғәмәлдә совет мәктәбендә әҙәбиәт курсын өйрәнеүгә нигеҙ һалдылар, уның программаһына рус һәм совет әҙәбиәте классиктарының әҫәрҙәрен индерҙеләр, Октябрь инҡилабына тиклем эшләгән алдынғы ҡарашлы ғалимдарҙың хеҙмәттәре нигеҙендә әҙәбиәт уҡытыуҙың фәнни-практик принциптарына таянған яңы методик йүнәлешен булдырҙылар, мәктәптең тормош менән тығыҙ бәйлелеген, әҙәбиәт материалы аша балаларҙы юғары патриотик рухта тәрбиәләү идеяларын яҡлап сыҡтылар. Совет осоронда методика фәненең артабанғы үҫешенә шулай уҡ атаҡлы ғалимдар Н. М. Соколов (1875–1926), М. А. Рыбникова (1885–1942), Л. С. Троицкий (1889–1942), В. В. Голубков (1880–1968), Я. А. Роткович (1909–1975), Н. В. Колокольцев (1906–1980), Н. И. Кудряшев (1904–1981) һ. б. һиҙелерлек өлөш индерҙе. XX быуаттың 2-се яртыһында XXI быуат башында әҙәбиәт уҡытыуҙың төрлө өлкәләренә Ю. К. Бабанский, О. Ю. Богданова, Е. Н. Ильин, Г. Д. Курдюмова, В. А. Никольский, Н. Д. Молдовская, И. Я. Лернер, В. Г. Марацман, К. М. Нартов, З. Я. Рез, М. Н. Скаткин, В. В. Щербина һәм башҡа бик күп ғалим-методистарҙың тикшеренеүҙәре ҡиммәтле мәғлүмәттәр өҫтәне. Күршебеҙ Татарстан республикаһынан А.Г.Әминев, Ә. М. Закирйәнов, Д. Ф. Заһидуллина, Ф. Ф. Исламов, С. Г. Исламова, М. И. Мәхмүтов, А. Х. Яхиндарҙы телгә алыу ҙа урынлы булыр.

*Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү өлкәһендәге ғилми-методик фекерҙең формалашыуы* боронғо, урта быуаттар һәм яңы дәүер һүҙ сәнғәтенең үҫеш үҙенсәлектәренә, Башҡортостан мәғарифе тарихына ныҡлы бәйләнгән.

XX быуат башына тиклем тиклем Башҡортостандағы мәктәптәрҙең ҡайһы бер типтарында халыҡтың ауыҙ-тел ижадын һәм әҙәбиәтен өйрәнеүгә йә тейешле иғтибар ителмәй, йә ул үтә ҡыҙғаныс хәлдә була. Рус-башҡорт мәктәптәре «башҡорт һәм татар йәштәрен батша самодержавиеһына бирелгәнлек рухында тәрбиәләү» маҡсатын тотҡан, бындай уҡыу йорттарында туған телде өйрәнеү ҡыҫырыҡлап сығарылған, халыҡтың милли ихтыяждары иҫәпкә алынмаған (14, 180).

Ошондай ҡатмарлылыҡтарға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда һәм төрки халыҡтары араһында һүҙ сәнғәтен танып белеүгә, әҙәби әҫәрҙе аңлап ҡабул итеүгә, уның ҡиммәтен баһалауға ҡағылышлы тәүге



*өйрәнеү тәкдим ителә?*

1) Анализдың иң аҙаҡҡы этабында;
2) Образдарға характеристика биреү менән бергә өйрәнелә;
3) Әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен үҙләштергәндән һуң;
4) Әҫәрҙең сюжетын, композицияһын асыҡлауҙан алда;
5) Анализдың бөтә элементтары менән бергә бәйләп өйрәнелә.

**31.** *Тасуири уҡырға өйрәнеүҙең ниндәй төрҙәре бар:*

1) Яңғыҙ уҡыу, күмәкләп уҡыу;
2) Яңғыҙ уҡыу, ролдәргә бүлеп уҡыу;
3) Яңғыҙ уҡыу, ролдәргә бүлеп уҡыу, коллектив уҡыу;
4) Дөрөҫ яуап юҡ;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**32.** *Изложениеның урта кластарҙа үткәрелгән нисә формаһы бар?*

1) Ентекле һәм ҡыҫҡа изложениелар;
2) Ентекле һәм тезислап яҙылған изложениелар;
3) Атама һөйләмдәрҙән генә торған изложениелар;
4) Дөрөҫ яуап юҡ;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**33**. *"Ш. Бабич шиғырҙарын ни өсөн яратам?" тигән темаға яҙылған инша ниндәй төркөм иншаларға ҡарай?*

1) Әҙәби темаға арналған иншалар;
2) Әҙәби материалға нигеҙләнгән ижади иншалар;
3) Уҡыусыларҙың тормош тәьҫиренә ҡоролған иншалар;
4) Төрлө сәнғәт төрҙәренең үҙ-ара бәйләнешле материалына нигеҙләнгән иншалар;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**34**. *Әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәр ниндәй ҙур төркөмдәргә бүленә?*

1) Көндәлек, эпизодик, әйләнешле төрҙәре;
2) Әҙәби клуб, түңәрәк, әҙәби кисәләр;
3) Уҡыу конференциялары, диспут,түңәрәк;
4) Походтар, экскурсиялар;

**26.** Класта әҙәби тексты сылбыр менән уҡытыу ҡайһы ваҡытта рөхсәт ителмәй?

1) Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү этабында;

2) Анализ этабында;

3) Тасуири уҡыуға өйрәтеү этабында;

4) Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙе йомғаҡлау этабында;

5) Күрһәтелгән этаптарҙың барыһында ла.

**27**. *Идея-йөкмәткене билдәләү әҫәр тексы өҫтөндә эшләүҙең ниндәй төрөнә ҡарай?*

1) Йөкмәткене үҙләштереү;

2) Анализдың характеры;

3) Анализдың алымдарының береһе;

4) Анализдың элементы;

5) Анализдың маҡсаты.

**28**. *Сюжет элементтарының эҙмә-эҙлелеге ҡайһы осраҡта дөрөҫ күрһәтелгән?*

1) Сиселеш – кульминация – ваҡиғалар үҫеше – төйөнләнеү – экспозиция;

2) Төйөнләнеү – ваҡиғалар үҫеше – кульминация – сиселеш – экспозиция;

3) Кульминация – экспозиция – төйөнләнеү – ваҡиғалар үҫеше – сиселеш;

4) Экспозиция – төйөнләнеү – ваҡиғалар үҫеше – кульминация – сиселеш.

**29**. *Сюжет, композиция мәсьәләләрен өлөштәргә бүлеп аңлатырға яраймы?*

1) Сюжет элементтарын өлөштәргә бүлеп аңлатһаң да ярай;

2) Композицияны ярамай, сюжетты мөмкин;

3) Сюжет, композиция мәсьәләләрен өлөштәргә бүлеп аңлатырға ярамай, ә бер бөтөн килеш бирергә;

4) Дөрөҫ яуап юҡ.

**30**. *Әҫәрҙең тел-стиль сараларын анализдың ҡайһы этабында*



фекерҙәр боронғо ҡомарткыларҙа уҡ сағылыш тапҡан. Йософ Баласағунлының XI быуатта ижад ителгән “Ҡотадғу белек” әҫәренең тотош бер бүлеге белемгә һәм телмәр оҫталығына, һүҙҙең ҡөҙрәтенә арналған (17, 290–292). Хикмәтле тел менән әйтелгән һүҙ көсө бер урында арыҫлан менән сағыштырыла: “Тел – ул арыҫлан, ул ишек төбөндә ята. Эй, алданған хужа, ул һинең башыңды һәләк итер” (17, 29). “Ҡотадғу белек”тә, М.Ҡашғариҙың “Диван лөғәт-ит төрк” ҡомартҡыһында әҙип, шағир тигән һүҙҙәргә аңлатмалар йыш осрай: “Моңар мәңзәйи ҡалды шағир теле, бу шағир теле булды тоскә улы”; “Әдипнең әдибе, фазыллар башы”; “Әйтмеш әдип диҡҡәти тел белә” һ.б. Был әҫәрҙәрҙең аҙаҡҡыһында бары тик башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғайҙар өсөн хас булған йырауҙар ҙа телгә алына. Һабрау Сурғантай улы, Асан Ҡайғы Саяшты Сабит улы, Ҡаҙтуған Һөйөнөс улы, Шалғыйыз Теләнсе улы атлы йырауҙар XIV–XVI быуаттарҙа ижад иткән, үрҙә телгә алынған халыҡтар йәшәгән төбәктәрҙе бер итеп йөрөп, үҙҙәренең шиғриәтендә замандың киҫкен проблемаларын, кешелектең мәңгелек мәсьәләләрен күтәреп сыҡҡан. Шулар араһында уҡымышлылыҡҡа, ғилемгә ҡағылышлы фекерҙәргә лә ҙур ғына урын бирелгән. Әйтәйек, Асан Ҡайғы шиғриәтендә халыҡ аҡылына таянмаған ғилем эйәһенең сикләнгәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына (“Ғилемем баштан ашты тип, кәңәшһеҙ һүҙ башлама”; “Ғилемдең ниндәй файҙаһы – белмәҫте юлға һалмаһа”). Үҙ сиратында ябай кешеләр ҙә ғалим тарафынан тәҡдим ителгәнде ала, файҙалана белергә тейеш (“Наҙандарҙың билгеһе – белгәндең телен алмаһа”; “Ҡарйаларың яманлап, кәңәш ҡайҙан табырһың?”).

Урта быуаттарҙа уҡ уҡыусыға ауыҙ-тел әҙәбиәтен ҡабул итергә, шиғри һүҙҙе тыңлай белергә өйрәтеүсе фекер эйәләре сәсәндәр үҙҙәре булған. Халыҡ та үҙ сиратында уларҙың ижадына оло ихтирам менән ҡараған; «сәсән күрке һүҙ булыр», «сәсән барҙа телеңде тый» тигән мәҡәл, әйтем аша сәсән теленә, халыҡ ижадына, ғөмүмән, һүҙ сәнғәтенә үҙенең мөнәсәбәтен белдергән. Сәсән һүҙенең мәғәнәһе һәм ҡиммәте тураһындағы фекерҙәрҙе ҡобайырҙарҙа, йырҙарҙа, легендаларҙа, мәҡәл-әйтемдәрҙә йыш ҡына осратырға мөмкин.

Урал-Волга буйы, Урта Азия төркиҙәре араһында, шул иҫәптән тарихи Башҡортостан ерендә иң тәүге уҡыу йорттары ислам диненең һәм ғәрәп яҙмаһының үтеп инеүе менән бәйле рәүештә барлыҡҡа килә. Исламдың был төбәктәргә тарала башлауы, билдәле булыуынса, IX–X быуаттар тирәһенә тура килә, ә XIV быуат

башында Алтын Урҙа төркиҙәрендә Үзбәк хан тарафынан дәүләт дине тип иғлан ителә. Ислам тәғлиматендә ғилемгә эйә булыуға айырыуса ҙур урын бирелгән, белемгә ынтылыу һәр мосолмандың мотлаҡ бурысы һаналған. Ғәрәп сәйәхәтсәһе Ибн-Рустә билдәләүенсә, X быуатта Болғар илендә мәсеттәр һәм башланғыс уҡыу йорттары булған, унда ғәрәп алфавитында уҡырға-яҙырға өйрәнгәндәр. Мосолман илдәрендә урта һәм юғары дини уҡыу йорттарынан һаналған мәҙрәсәләр IX быуатта уҡ күренә башлаған. Мәҙрәсәләрҙә дин менән бергә донъяуи фәндәр ҙә уҡытылған – математика, тарих, география, астрономия, медицина, тел-әҙәбиәт һ.б. Урта быуаттар төрки яҙма ҡомартҡыларында “остаз-шәкерт”, “китап”, “дәфтәр”, “битек” (яҙыу), “имтихан”, “шәһәҙәтнамә” (аттестат) кеүек атамалар йыш осрай. Дин менән тығыҙ бәйле суфыйсылыҡ тәғлиматендәге “мөршид” (юл күрһәтеүсе, етәксе, уҡытыусы) – “мөрид” (өйрәнсек, эйәрсен, шәкерт) мөнәсәбәттәренең мәктәп дәрәжәһенә күтәрелә, мәктәп – мәҙрәсә селтәре, ислам диненең таралыу ерлегенә бәйле рәүештә, төрки халыҡтары йәшәгән төбәктәрҙә киңәйә барып, быуаттарҙан-быуаттарға камиллашыу кисереп, үҙенең тотороҡло традицияларын булдырған. XVII–XVIII быуаттарҙа Башҡортостан ерендә көнсығыш тибындағы уҡыу йорттары күпләп ҡалҡып сыға. XVIII быуат аҙағында Ырымбур губернаһында йөҙләп башлағыс типтағы уҡыу йорто (мәктәп), тиҫтәләгән эре мәҙрәсә эшләй. Мәҙрәсәләрҙә белем алыусылар ғәрәп, фарсы, яҙма төрки телдәрен һәйбәт белгән, был телдәрҙә ижад ителгән әҙәбиәт менән таныша алған. Байтаҡ уҡымышлы кешеләр, урындағы уҡыу йорттары менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Урта Азия, Яҡын Көнсығыш илдәренә барып сығып, тиҫтәләгән йылдар буйы белемдәрен арттырыу менән шөғөлләнер булғандар. Ҡайһы берҙәре шул төбәктәрҙә тороп ҡалған, урындағы арҙаҡлы әҙиптәр менән ярышып ижад иткән, ҡайһылары тыуған яҡтарына ҡайтып, мәҙрәсәләр тотҡан, яҡташтарына ғилем таратҡан. Был күренеш беҙҙең эраның икенсе мең йыллыҡ баштарынан алып, Совет хөкүмәте урынлаштырылғанғаса – тимәк, быуаттар һуҙымына дауам иткән. Уҡыу йорттарына һәм уҡымышлы кешеләргә бәйле рәүештә, төрлө өлкәгә ҡараған дөйөм төрки яҙма ҡомартҡылары, айырыуса – әҙәби әҫәрҙәре Урал-Волга буйында башҡорттар араһында боронғо дәүерҙән һәм урта быуаттарҙан бирле иркен таралып йөрөгән. Нәфис әҙәбиәттә ислам йоғонтоһо һиҙелмәй ҡалмаған; дини дидактика һәм



2) Һорауҙың йөкмәткеһендә бәхәсле фекер ята, уға бер нисә төрлө яуап биреп була;
3) Уҡыусыларға ҡатмарлы проблемаларҙы хәл итергә өйрәтеү;
4) Дәрестә күтәрелгән проблемаға үтеп инеү;
5) Уҡыусыларға бәхәс аша хәҡиҡәтте табырға өйрәтеү.

**23.** *Әҙәбиәт дәресендә йыш ҡына бәхәсле хәлдәр тыуа. Теге йәки был геройҙың булмышына баһа биргәндә, уҡыусылар ике төркөмгә бүленә. Берәүҙәр уны яҡлайҙар, икенселәр геройҙың әҫәрҙәге бирелеше менән килешмәйҙәр. Был осраҡта уҡытыусы ни эшләргә тейеш?*
1) Бәхәсте асыҡ ҡалдыраһығыҙ;
2) Геройға үҙ баһағыҙҙы дөрөҫ тип һанап, шул фекерҙе уҡыусыларға ҡәтғи рәүештә еткерәһегеҙ;
3) Күпселекте тәшкил иткән төркөмдөң позицияһына ҡушылаһығыҙ;
4) Әҫәргә һылтанаһығыҙ: ташҡа баҫылған фекер дөрөҫ, китапта нисек бирелгән, шулай ҡабул итергә кәрәк, тип аңлатаһығыҙ;
5) Әҫәрҙең идея-йөкмәткеһенән сығып, автор позицияһын асыҡлайһығыҙ.

**24**. *Образдарға характеристика биреүҙең киң таралған төрҙәрен атарға*:
1) Индивидуаль характеристика, сағыштырма характеристика, төркөмлө характеристика;
2) Сағыштырма характеристика, төркөмлө характеристика, кире геройҙарға характеристика;
3) Индивидуаль характеристика, эске ҡаршылыҡлы геройға характеристика;
4) Дөрөҫ яуап юҡ;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**25.** Образдарға төркөмлө характеристика нимәне аңлата?
1) Ике образды бер-береһенә ҡаршы ҡуйып характеристика биреү;
2) Ике образға йәнәш характеристика биреү;
3) Социаль төркөмгә характеристика биреү;
4) Өс йә унан күберәк образға бергә характеристика биреү.
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

йөкмәтке үҙләштереү;

3) Әҙәби әҫәрҙе өйҙә уҡыу, текст менән танышыу, инеш дәрес, йөкмәтке үҙләштереү;

4) Инеш дәрес, йөкмәтке үҙләштереү, әҙәби әҫәрҙе өйҙә уҡыу, текст менән танышыу.

**19.** *Ҙур күләмле әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә нисә төрлө план төҙөп була ?*

1) а) Ябай план;
б) Әҫәрҙе план буйынса өлөштәргә бүлеү;
в) Цитаталы план;
г) Картиналы план төҙөү;

2) а) Ябай план;
б) Картиналы план төҙөү;
в) Һорау-план төҙөү;

3) а) Цитаталы план;
б) Әҫәрҙе план буйынса өлөштәргә бүлеү;

4) Дөрөҫ яуап юҡ;

**20**. *Әҫәргә анализ нисә төрлө характерҙа була ?*

1) Ентекле анализ, әңгәмә анализ;
2) Һайланған йүнәлеш буйынса анализ;
3) Күҙәтеү характерында һәм ентекле анализ;
4) Күҙәтеү характерындағы, һайланған йүнәлеш буйынса, ентекле анализ;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**21.** *Әҙәби әҫәрҙе анализлауҙың ниндәй төрлө методик алымдары бар* ?

1) Аңлатмалы уҡыу, һөйләү-анализ;
2) Әңгәмә-анализ, проблемалы һорауҙар биреү;
3) Әңгәмә-анализ, аңлатмалы уҡыу, һөйләү-анализ, проблемалы һорауҙар биреү;
4) Дөрөҫ яуап юҡ;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**22.** *Уҡыусыларға бирелгән проблемалы һорауҙың асылы нимәлә?*

1) Дәрестә проблемалы ситуацияны тыуҙырыу;



Көнсығыш әҙәп әҙәбиәте менән бергә фәлсәфәүи дидактика менән һуғарылған шиғриәттә, ғибрәтле сюжеттарға бай эпик әҙәбиәттә әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләренә, йәмғиәттәге ыңғай һәм тиҫкәре күренештәргә, шәхестең ғилемлелегенә, зыялылыҡ сифаттарына ҙур урын бирелгән. Енисей-Орхон яҙмаларынан, боронғо төркиәфилыйсылығынан башлап, беҙҙең эраның икенсе мең йыллығы аҙағындағы башҡорт әҙәбиәтенә тиклем ошондай рух менән һуғарылған. Боронғо һәм урта быуаттар төрки һәм башҡорт ҡулъяҙма әҙәбиәте асылда өҫтәлмә рәүештә педагогика, ә әҙиптәр педагог ролен үтәгән. Өҫтәүенә, яҙма нәфис әҙәбиәт үҙенең барлыҡҡа килеүенең һәм үҫешенең тәүге этабында синкретик характерҙа була. Йәғни, әҙәби ҡомартҡы ғына булып ҡалмай, тағы ла бер нисә төрлө вазифа үтәй: тарихи сығанаҡ, публицистик йә эпистоляр яҙма, сәйәхәтнамә һ.б. Шуларға өҫтәп, һис һүҙһеҙ, педагогик хеҙмәт ролен дә башҡара. Дөйөм төрки әҙәбиәтенең шишмә башындағы – VII–IX быуаттарҙағы (Енисей-Орхон яҙмалары, “Ырҡ-битиг”, Й.Баласағунлы – “Ҡотадғу белек”, М.Ҡашғари – “Диван лөғәт-ит төрк”, “Ҡорҡот ата китабы”), Болғар, Ҡыпсаҡ дәүерҙәрендәге (Ҡол Ғәли – “Йософ ҡиссаһы”, Ҡотб – “Хөсрәү вә Ширин”, Хорезми – “Мөхәббәтнамә”, Сәиф Сараи – “Гөлстан бит-төрки”, Х.Кәтиб – “Жөмжөмә Солтан”, Мәхмүт бине Ғәли – “Нәһж әл-фарадис”), дөйөм төрки олононан айырылып сыҡҡан башҡорт әҙәбиәтенең XV–XVIII быуаттарҙағы (шәжәрәләр, эпистоляр яҙмалар, сәйәхәтнамәләр, Мәүлә Ҡолой хикмәттәре, Т.Ялсығолов, Утыҙ Имәни әҫәрҙәре һ.б.) ҡомартҡылары тап шундайҙар рәтенә инә.

Тормошо һәм ижады Башҡортостан менән тығыҙ бәйле булған, заманында Стәрлебаш мәҙрәсәһе шәкерттәре менән яҡындан аралашҡан шағир Ғәбдрәхим Утыҙ Имәни (1754–1835) кешенең ижади аҡылын данлаған, намыҫлылыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәгән, ҡомһоҙлоҡто, наҙанлыҡты, аңралыҡты тәнҡитләгән, дин әһелдәренең айырым етешһеҙлектәренән көлгән шиғырҙар ижад итеү менән бергә Урал һәм Волга буйы төрки әҙәбиәтендә беренселәрҙән булып әҙәбиәт ғилеме буйынса хеҙмәттәр яҙып ҡалдырған. XIX быуатта ауыҙ-тел әҙәбиәтенең, халыҡ ижадының, ҡулъяҙма әҫәрҙәрҙең айырым өлгөләре, рус әҙәбиәтенән тәржемә ителгән әҫәрҙәр милли мәктәптәр өсөн төҙөлгән дәреслектәргә индерелгән. Шулар араһынан М. Ивановтың «Татарская хрестоматия» (1842), С. Күкләшевтың «Диване хикәйәте татар» (1859), М. Бикчуриндың «Начальное

руководство к изучению арабского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргиз и жителей Туркестана» (1859), И. Березиндың «Турецкая хрестоматия» (1876), В. Катаринскийҙың «Букварь для башкир» (1898) китаптарын күрһәтеп була. Был китаптарҙың исемдәрен дөрөҫ аңларға кәрәк: авторҙар “төрөк”, “татар” һүҙҙәрен “төрки” мәғәнәһендә ҡулланған. Әйтергә кәрәк, аҙаҡҡы өс автор Россияның юғары ғилми учреждениеларында, уҡыу йорттарында эшләгән дәүерҙәрендә көнсығыш телдәре һәм әҙәбиәттәре өлкәһендә тикшеренеү алып барған, уларҙы өйрәнеүҙең иң ҡулайлы юлдарын эҙләгән, ә тәүге өсәүһе Ырымбур кадет корпусында тел-әҙәбиәт фәндәрен уҡытҡан. XIX быуатта – XX быуат баштарында үҙҙәренең әҫәрҙәре уҡыу йорттарында өйрәнелгән айырым әҙиптәр ҙә уҡытыусылыҡ эше менән шөғөлләнгән. Ш. Зәки (1825–1865) менән Ғ. Соҡорой (1826–1889) Стәрлебаш мәҙрәсәһендә дәрес биргән. Күренекле мәғрифәтсе-шағирҙар М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, Ш. Әминев, шулай уҡ Ш. Бабич, Д. Юлтый, М. Ғафуриҙәр ҙа ижади ғүмерҙәренең бер өлөшөн ошо изге хеҙмәткә арнағандар. Уҡытыу осоронда тел-әҙәбиәтте өйрәнеү мәсьәләләре тәңгәлендә тыуған уй-караштарын аҙаҡ йә үҙҙәренең шиғри әҫәрҙәрендә, йә публицистик мәҡәләләрендә сағылдырғандар.

М. Аҡмулланың ижадында шағир һүҙе, аң-белем, шиғриәт хаҡында ифрат күп, ҡыҙыҡлы юлдар бар. Уның “Фазыл Мәржәни мәрҫиәһе” тигән ҙур күләмле әҫәренең 4-се бүлеге тулыһынса шиғри әҫәрҙе дөрөҫ ҡабул итә белергә өндәгән фекерҙәрҙән тора. Күңеле ҡатҡан, дәртһеҙ кешенең йөрәгендә шиғыр тыумай, шағирҙың һүҙе һәр саҡ хикмәт менән яҙыла («ғалимдың һүҙе – шәкәр, мәғәнәһе – бал»), шуға күрә күп һүҙлелектән, йәки китаптың «ҡоро исемен белеүҙән ни файҙа бар?» – ти; уның мәғәнәһен аңларға, төп асылын төшөнөргә саҡыра, ысын шиғри әҫәргә үҙенең талаптарын әйтеп бирә:

Шиғыр дөрөҫ, нәсихәтте хамил (күтәреүсе)
булһа,
Эйәһе хәл ҡәҙәре ғамил (абруйлы) булһа.
Ишеткән әҙәмдәрҙе илаткандай,
Вәғәз менән ғибрәтте шамил (туплаған)
булһа ( 47, 48, 88).

М. Өмөтбаев мәктәптәрҙә әҙәбиәтте һәм бүтән фәндәрҙе



5) Тарихи-хронологик.

**14**. *Әҙәбиәт буйынса дәреслек, хрестоматияларҙы төҙөүҙә әүҙем ҡатнашкан мәктәп уҡытыусыларын атарға:*

1) С. Зайлалова, З. Ҡотлогилдина;
2) Т. Ғәниева, Ф. Абдуллина;
3) Р. Искәндәров, Ғ. Ҡунафин;
4) Ф. Абдуллина, С. Зайлалова, Р. Искәндәров, А. Байғарин;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**15**. Әҙәбиәт дәресенең иң бәләкәй күҙәнәге нимә ул?

1) Методтар;
2) Алымдар;
3) Уҡыу ситуациялары;
4) Әҫәргә анализ;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**16**. *Юғары кластарҙа әҙәбиәт ниндәй принцип буйынса өйрәнелә?*

1) Тарихи-хронологик планда;
2) Айырым даталар буйынса;
3) Идея-тематик планда;
4) Тәрбиә биреү, жанрҙар принцибы буйынса;
5) Белем биреү системаһы буйынса.

**17.** *Традицион методикала әҙәби әҫәрҙе өйрәнә башлауҙың иң беренсе этабы:*

1) Инеш дәрес;
2) Әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу;
3) Яҙыусының биографияһын өйрәнеү;
4) Әҫәрҙе класта тасуири уҡыу;
5) Әҫәрҙең яҙылыу тарихын асыҡлау.

**18.** *Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең башланғыс этаптары ҡайһы төркөмдә дөрөҫ эҙмә-эҙлектә бирелгән?*

1) Әҙәби әҫәрҙе өйҙә уҡыу, инеш дәрес, текст менән танышыу, йөкмәтке үҙләштереү;
2) Инеш дәрес, әҙәби әҫәрҙе өйҙә уҡыу, текст менән танышыу,

**9.** “Беренсе башҡорт уҡыу китабы”ның (1923) авторы кем?
1) Ғ. Дәүләтшин;
2) Ғ. Амантай;
3) Т. Байыш;
4) М. Ысмак;
5) У. Хангилдин.

**10.** *Түбәндәге ғалимдар төркөмөнөң ҡайһылары әҙәбиәт уҡытыу методикаһына ғына мөнәсәбәтле?*
1) Рыбникова М. А., Голубков В. В.
2) Ғималова М. Ғ., Дмитриев Н. К.
3) Голубков В. В., Дмитриев Н. К.
4) Ғафаров Б. Б., Псәншин В. Ш.
5) Марр Н. Я., Веселовский А. Н.

**11**. *Мәктәптә белем биреүҙең төп формаһы нимә*:
1) Дәреслек;
2) Мәктәп;
3) Дәрес;
4) Техник саралар;
5) Программа.

**12.** *Башҡорт әҙәбиәте буйынса дәреслектәр, хрестоматиялар һәм программалар араһында уҡытыусы өсөн иң кәрәклеһе ҡайһыныһы?*
1) Дәреслек;
2) Хрестоматия;
3) Дәреслек, хрестоматия;
4) Хрестоматиялар, программалар;
5) Программалар.

**13**. *Урта кластарҙа әҙәбиәт ниндәй методик принцип буйынса өйрәнелә?*
1) Хронологик;
2) Тематик;
3) Жанрҙар буйынса;
4) Жанр-тематик;



уҡытыуҙы юлға һалыу мәсьәләләрен матбуғатта күтәреп сыға. «Аҫаба башҡорт булараҡ, миңә шул мәғлүм: уҡымышлы кешеләр тарихи романдар уҡырға бик һәүәҫ», – тип яҙҙы ул һәм халыҡ араһында китаптар етешмәүенә зарланды. Уҡыу шарттарында бирелгән белем аңлайышлы булһын өсөн, балаларҙы төрлө ғилемгә үҙ телдәрендә өйрәтергә саҡырҙы: «Европа халҡы байтаҡ фәндәрҙе көнсығыш телдәренән үҙ теленә күсергәне һәм Европалағы һәр бер милләт фәнде үҙ туған телендә уҡып белем алған кеүек, Европа фәндәрен дә көнсығыш телдәренә әйләндереү кәрәк» (23, 104–107).

1917 йылдан һуң Башҡорт совет хөкүмәте тәүге йылдарҙа уҡ башҡорт әҙәби яҙма телен булдырыу, уны бөтә уҡыу йорттарында өйрәнеү, эш ҡағыҙҙарын ошо телдә алып барыу буйынса етди саралар күрә. Был хаҡта тәү тапҡыр Коммунистар партияһының Башҡортостан Өлкә Комитетының 1921 йылдағы 27 июнь ҡарарында ҡуҙғатыла (21, 611) һәм артабан актив рәүештә тормошҡа ашырыла башлай. 1923 йылда ғәрәп графикаһы нигеҙендә башҡорт әҙәби яҙма теле ҡабул ителә (2, 30-35), ошо уҡ йылда М. Ысмаҡтың «Беренсе башҡорт уҡыу китабы» баҫылып сыға. Артабан 30-сы йылдарҙың урталарына тиклем башҡорт әҙәбиәте буйынса программалар, дәреслектәр, хрестоматиялар төҙөүҙе камиллаштырыу, әҙәбиәт уҡытыуҙың яңы методтарын эҙләү дәүере булды, тиергә мөмкин. Совет осоронда башҡорт әҙәбиәте буйынса тәүге дәреслектәр төҙөүҙә М. Ғафури, Б. Ишемғол, Д. Юлтый, Ғ. Дәүләтшин, Ғ. Амантай, Ғ. Хөсни, Т. Байыш, Й. Гәрәй, У. Хангилдин, Ғ. Хәбировтар актив ҡатнашты. 30-сы йылдарҙа ғалимдар әҙәбиәт уҡытыуҙың фәнни-методик нигеҙҙәрен камиллаштырыу өҫтөндә ныҡышмалы эшләне. Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙең теоретик нигеҙҙәре А.В. Луначарский, Н.К. Крупская ҡараштарына, В.В. Голубков, М.А. Рыбникова, Л.С. Троицкий һ.б. ғалимдар хеҙмәттәренә таянды.

Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы ысын мәғәнәһендә фән булараҡ Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы дәүерҙә формалаша. Был өлкәлә махсус эшләүсе ғалимдар үҫеп сыға. РСФСР милли мәктәптәр институтының Башҡортостан филиалында һәм республиканың педагогик юнәлештәге уҡыу йорттарында 50–80-се йылдарҙа ғилми-тикшеренеү эштәре киңәйә һәм активлаша төшә. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһының дөйөм мәсьәләләренә һәм махсус проблемаларына арналған монографиялар, ғилми йыйынтыҡтар, айырым кластар өсөн методик ҡулланмалар донъя күрә. Хәҙерге

заман башҡорт әҙәбиәте методикаһы фәненең үҫешенә айырыуса ҙур өлөштө күренекле ғалим-методист М.Ғ. Ғималова индерҙе. Ул Башҡортостанда тәү башлап (60–70-се йылдарҙа) урта кластарҙа әҙәбиәт уҡытыу методтарына арналған хеҙмәттәр баҫтырып сығарҙы («V–VI кластарҙа әҙәбиәт уҡытыу методикаһы», Өфө, 1963; «Һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙә әҙәбиәт уҡытыу методикаһы», Өфө, 1968), айырым яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен өйрәнеүҙең беренсе өлгөләрен бирҙе («Урта мәктәптә Баязит Бикбай ижадын өйрәнеү», Өфө, 1964; «VI–VII кластарҙа башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен өйрәнеү», Өфө, 1972 һ. б.). М. Ғ. Ғималова башҡорт әҙәбиәте методикаһы фәненең теорияһын байытыуға (атап әйткәндә – әҙәбиәт уҡытыуҙың дөйөм дидактик методтары, урта һәм юғары кластарҙа әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү принциптары, төп этаптары, дәрес структураһы, кластан тыш эштәр, әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереү һ.б. мәсьәләләрҙең туған әҙәбиәткә ҡағылышлы үҙенсәлектәрен асыҡлауға), программалар, дәреслектәр, методик ҡулланмалар төҙөүгә ифрат күп көс һалды. 1990–2005 йылдарҙа уның урта һәм юғары кластарҙа әҙәбиәт уҡытыу методикаһының төп мәсьәләләренә арналған монографияһы донъя күрҙе.

Башҡорт әҙәбиәте методикаһы фәненең айырым тармаҡтарын үҫтереүҙә XX быуаттың икенсе яртыһында – XXI быуат башында Х.Ш. Зиннәтуллина, Б. М. Мәғәсүмова, Т.И. Йәһүдин, Б.Б. Ғафаров, М.Б. Юлмөхәмәтов, Р.Х. Ниғмәтуллин, Ф.Ә. Хөснетдинова, Ә.М. Муллағолова, Ғ.Ғ. Ғалиналарҙың өлөшө бар. Дәреслектәр, дәреслек-хрестоматиялар һәм методик күрһәтмәләр төҙөүҙә Ә. И. Харисов, Ғ. Б. Хөсәйенов, М.Ф. Гәйнуллин, Р.Н. Байымов, Ә.М. Сөләймәнов, Ғ.С. Ҡунафин, Ғ. М. Бүләков, Ә. Х. Вилданов кеүек әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә эшләгән ғалимдар актив ҡатнашты, С. Х. Зайлалова, Ф.Ф. Абдуллина, Р.С. Искәндәров, И. Шарапов, А. Байғарин кеүек тәжрибәле уҡытыусылар йәлеп ителде.

Башҡорт әҙәбиәте методикаһы ғилеменең алдағы үҫеше етди бурыстарҙы тормошҡа ашырыу проблемаһы менән бәйләнгән. Өйрәнелеү тарихынан күренеүенсә, үткәне бай булһа ла, хәҙерге заманда башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең торошо һәм үҫеше ярайһы ғына ҡатмарлыҡтар кисерә. Тап ошо өлкә менән махсус шөғөлләнгән белгестәр бик әҙ. Быға тиклем актив эшләгәндәре (М.Ғ. Ғималова, Б.Б. Ғафаров) беҙҙең аранан китеп барғас, йәш быуын алмашсыларын үҫтереү өсөн республикала



1) Директор – уҡытыусы – уҡыусы – тәрбиәсе – ашнаҡсы;
2) Өйрәтеүҙең маҡсаты – уҡытыусы – дәреслек – мәктәп;
3) Мәктәп – дәрес – дәреслек – дәрестәр;
4) Өйрәтеүҙең маҡсаты – өйрәнелә торған предмет – уҡытыусы – уҡыусы;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**5.** Ҡайһы ғалимды рус әҙәбиәте методикаһы фәненә нигеҙ һалыусы тип атайҙар?

1) Ф. Проконпович.
2) В. Голубков.
3) М. Ломоносов.
4) М. Рыбникова.
5) Ф. Буслаев.

**6**. *Әҙәбиәт дәрестәре өлкәһендәге уҡытыусы-новатор кем?*

1) В. Ф. Шаталов;
2) Ш.А. Амонашвили;
3) Е. И. Ильин;
4) В. В. Давыдов.

**7**. М. Аҡмулланың шиғырҙы дөрөҫ ҡабул итергә саҡырған түбәндәге юлдары ҡайһы әҫәренән алынған?

Шиғыр дөрөҫ, нәсихәтте хемил (күтәреүсе) булһа,
Эйәһе хәл ҡәҙәре ғамил (абруйлы) булһа,
Ишеткән әҙәмдәрҙе илатҡандай,
Ғәмәл менән ғибрәтте шамил (туплаған) булһа.

1) “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк”.
2) “Фазыл Мәржәни мәрҫиәһе”.
3) “Нәсихәттәр”.
4) “Йырау”.

**8.** *Беренсе башкорт алфавиты кем тарафынан төҙөлгән (1898 йыл) ?*

1) М. Биксурин.
2) В. Катаринский.
3) М. Ҡулаев.
4) Ш. Хоҙайбирҙин.

**“Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы” предметынан студенттарҙың белемен камиллаштырыу өсөн тест һорауҙары**

**1**. *“Минең өсөн әҙәбиәт дәресе – кеше дәресе”. Был һүҙҙәрҙе түбәндәге ғалим-методистарҙың ҡайһыһы әйткән?*

1) Шаталов В. Ф.
2) Занков Л. В.
3) Ильин Е. Н.
4) Зимин А. А.

**2.** *Әҙәбиәт уҡытыу методикаһының предметы*:

1) Мәктәп уҡыусыларына әҙәбиәтте өйрәтеү процесы. Ул әҙәбиәтте уҡытыуҙың ғилми методтарын һәм алымдарын өйрәнә;
2) Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы – нәфис әҙәбиәттең үҙен өйрәнә;
3) Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы – әҙәбиәт ғилемен өйрәнә;
4) Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы – әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе өйрәнә;
5) Бөтәһе лә дөрөҫ.

**3**. *Әҙәбиәт уҡытыу методикаһының бурысы*:

1) Әҙәбиәтте өйрәнеү процесының төп законлыҡтарын асыу, уҡытыусыларға иң ҡулайлы саралар менән эш итеү мөмкинлектәрен күрһәтеү;
2) Әҙәбиәт ғилемен, әҙәби-теоретик төшөнсәләре, яҙыусыларҙың тормош юлын конкрет материалдар аша өйрәтеүҙе күрһәтеү;
3) Уҡытыусының әҙәбиәт уҡытыу методикаһы буйынса профессиональ әҙерлеген камиллаштырыу юлдарын күрһәтеү;
4) Алдынғы педагогик тәжрибәләрҙе таратыу юлдарын күрһәтеү;
5) Дөрөҫ яуап юҡ.

**4**. *Әҙәбиәтте өйрәтеү процесы үҙ-ара ҡатмарлы мөнәсәбәттә торған ниндәй элементтарҙы үҙ эсенә ала* ?



шарттар етешмәй – ошо һөнәр буйынса кандидатлыҡ диссертациялары яҡлау өсөн махсус Совет юҡ, Совет булдырыу өсөн белгестәр кәрәк. Шуға күрә, әлегә мәктәп һәм махсус урта уҡыу йорттары өсөн программалар, дәреслектәр, методик ҡулланмалар әҙерләү эшенә әҙәбиәт ғилеме белгестәре һәм әҙәбиәт уҡытыусылары йәлеп ителә. Был хәл иһә дәреслектәр-әсбаптарҙың сифатында сағылыш тапмай ҡалмай. Тимәк, йәш белгестәр әҙерләү өлкәһендә етди саралар күреп, башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең ғилми-теоретик базаһын артабан нығытыу һәм тәрәнәйтеү, айырым тармаҡтары буйынса монографик тикшеренеүҙәр мәсьәләһен хәл итәһе бар. Мәҫәлән, әҙәби әҫәрҙең образдар системаһын, сюжет, композицияһын, жанрын өйрәнеү, урта һәм юғары кластарҙа әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереү кеүек өлкәләр махсус монографик тикшереүҙе талап итә. Күренекле яҙыусылар ижадын өйрәнеүгә арналған методик хеҙмәттәр бөтөнләй тиерлек яҙылмаған. Урта һәм юғары кластар өсөн программалар, дәреслектәр әҙерләгәндә әҙәбиәт ғилеме, әҙәбиәт тарихы өлкәһендә һуңғы йылдарҙа ирешелгән асыш-ҡаҙаныштар ҙа етерлек дәрәжәлә иҫәпкә алынырға тейеш.

Был дәреслектә башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһының дөйөм теоретик положениелары, уҡытыусының ижади эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре билдәләнә. Студенттарға әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең төрлө этаптарын асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыу маҡсатында, айырым урындарҙа практик миҫалдар өлгөләре бирелә. Был миҫалдар мәктәптәрҙә практика үткән студенттарҙың отчеттарынан, республика уҡытыусыларының фәнни-практик конференцияларҙа, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса «Йыл уҡытыусыһы» конкурстарында биргән дәрестәренән алынды; тейешле урындарҙа уларға ҡарата иҫкәрмәләр ҙә бирелде. Дәрес өлгөләре йәки уларҙың өлөштәре алынған студенттарға һәм уҡытыусыларға оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Дәреслек юғары уҡыу йорттарының филология факультеттарында белем алыусы башҡорт-рус бүлеге студенттарына иҫәпләнгән. Уны урта мәктәптәрҙең, педагогия колледждарының башҡорт әҙәбиәте уҡытыусылары ла үҙҙәренең көндәлек эшендә файҙалана ала.

---

*1. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы фәненең предметы әҙәбиәт*

*ғилеменең өйрәнелеү объектынан нимәһе менән айырыла?*

*2. Рус әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең өйрәнелеү торошона иғтибар итегеҙ.*

*3.Башҡортостандағы революцияға тиклемге уҡыу йорттарының белем биреү системаһындағы үҙенсәлектәрҙе асыҡлағыҙ.*

*4.Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы фәненең бөгөнгө көндәге үҫеш кимәлен нисек баһалайһығыҙ?*

**Әҙәбиәт дәресе тураһында дөйөм төшөнсә**

Әҙәбиәт дәресе мәктәптә уҡытыла торған бөтә предмедтар араһында үҙенең мөһим үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Беренсенән, физика, математика, тарих, география, биология һ.б. предметтар (мәктәп программаһына ингән дисциплиналарҙың күбеһе) ниндәй ҙә булһа фән тармағын тәшкил итә, уларҙың асылы теориялар, закондар, гипотезалар, логик төшөнсәләр ярҙамында өйрәнелә, аныҡ билдәле йәки күптән иҫбатланған хәҡиҡәт тураһында һүҙ бара. Уҡытыусы дәрестә уҡыусылар менән ошо законлыҡтарҙы аса. Икенсе төрлө әйткәндә, уның ике ҡулына бер эш – конкрет һәм аныҡ. Әҙәбиәт иһә тормоштоң үҙе менән тығыҙ бәйле, уның художестволы сағылышы. Тимәк, художестволы текст бер юлы сәнғәт әҫәре лә, махсус ғилем – әҙәбиәт ғилеме – объекты ла сифатын үтәй. Шуға күрә әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусылар ике төрлө ҡатмарлы эш башҡара. Берҙән сәнғәт әҫәре аша сағылдырылған реаль тормоштоң ҡатмарлы күренештәре менән осраша, уны эмоциональ ҡабул итә, донъяны танып белә. Әҙәбиәт дәресе уҡыусыны матурлыҡ донъяһына алып инә, унда әхлаҡи-этик сифаттар, эстетик зауыҡ тәрбиәләй. Е.Н.Ильин әйтмешләй, мәктәп программаһында ҡаралған предметтар араһында әҙәбиәт дәресе – «... ысын мәғәнәһендә кеше күңеленә йүнәлтелгән берҙән-бер дәрес» (11). һәм ул бүтән дәрестәргә ҡарағанда ҙур эмоциональ йөкмәтке, юғары рухи күтәренкелек, илһамлы йәнлелек менән үтергә тейеш. Өҫтәүенә, башҡа предметтарҙағы кеүек үк, уҡыусы әҙәби ижадтың фәнни законлыҡтарын өйрәнә, – әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Йәғни, өҫтәлмә рәүештә айырым бер предметты махсус өйрәнеүгә торошло мөһим һәм ҙур эш башҡара.

Был ҡатмарлы процесс – әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларҙы



эштәр шулай уҡ традицион һәм ижади алымдарҙың берлеге аша тормошҡа ашырыла.

Балаларҙы әҙәбиәт донъяһына ылыҡтырыуҙың мөһим бер юлы – кластан тыш эштәр. Уҡытыусы өсөн бында сикләнмәгән мөмкинлектәр ята. Кластан тыш эштәрҙең торошо уның ижади активлығына туранан-тура бәйләнгән. Иреклелек принцибы ярҙамында кластан тыш сараларҙың абруйын күтәрә барып, асылда бөтә мәктәп уҡыусыларында һәм уны тамамлаусыларҙа әҙәбиәткә ғүмерлек мөхәббәт уятырға мөмкин.

Уҡытыусының йыллыҡ, тематик һәм айырым дәрес өсөн тәғәйенләнгән эш пландары уның эшмәкәрлеген оҙайлы дәүергә йәки конкрет бер мәлгә фәнни ойошторорға, ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға ярҙам итә, ҡуйылған маҡсатты эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырырға форсат бирә.

Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү дәрескә тиклем үк башлана. Уҡыусылар художестволы текст менән өйҙә үҙ аллы таныша. Дәрестә инеш этаптан һуң уны (ҙурыраҡ әҫәр булһа – өҙөктәрен) бергәләп тағы бер ҡат уҡып, йөкмәтке үҙләштерелгәс, төп ваҡыт анализға бүленә. Бына ошонда инде уҡытыусының ижади мөмкинлектәренә киң юл асыла. Анализдың төп элементтары – образдар системаһы, әҫәрҙең сюжеты, композицияһы, жанр үҙенсәлеге, поэтик образлылыҡ, һүрәтләү һәм тел-стиль саралары, шиғри әҫәр булһа – ритм тыуҙырыусы күренештәр, шиғыр төҙөлөшө системаһы тураһында һүҙ йөрөткәндә традицион методтарҙы ла файҙалана, үҙе махсус әҙерләгән яңылыҡлы алымдарҙы ла ҡуллана. Һуңғы йылдарҙа балаларҙың әҙәбиәт өлкәһендә үҙ аллы фекерләү ҡеүәһен йылдам үҫтереү маҡсатында проблемалы уҡытыу методы һәм методик алымдары киңерәк тарала башланы. Әҙәбиәт дәресе өсөн был айырыуса ҡулай күренеш. Әҙәби әҫәр материалы өҫтөндә көсөргәнешле фекерләү – тормоштоң үҙе хаҡында уйланыу, тигән һүҙ. Әҫәрҙе анализлау элементтарын проблемалы йүнәлештә алып барыу – уҡытыусы өсөн үҙе бер ҙур ижади өлкә. Бер генә проблемалы һорау әҙерләү ҙә уның үҙенән үк көсөргәнешле фекерләүҙе, әҫәрҙең туҡымаһы эсендә ҡаҙыныуҙы талап итә. Әҙәбиәт дәресендә проблемалылыҡ ни тиклем күберәк урын алһа, материалды үҙләштереүҙең файҙаһы ла шул хәтлем юғарыраҡ, тигән һүҙ.

Әҙәбиәт урта кластарҙа жанр-тематик, юғары кластарҙа тарихи-хронологик принцип менән өйрәнелә. Шуға бәйле рәүештә, уҡытыусы ҡайһы бер этаптарҙа төрлө класта төрлө алымдар менән эш итә.

«Йомғаҡлау» термины ике төрлө мәғәнәгә эйә. Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең йомғаҡлау этабы була. Бында уҡытыусы әҫәрҙең художество ҡиммәтенә, яҙыусы ижадында һәм әҙәбиәт тарихында уның тотҡан роленә баҫым яһай, дөйөм анализ барышында асылып етмәгән яҡтарын күрһәтеп бирә. Ә һәр дәрестең йомғаҡлау өлөшөндә иһә 45 минут эсендәге һөйләшеүгә һығымта яһай, уҡыусыларҙың белемен баһалай, ошо баһалар – дәртләндереү, ҡанатландырыу, уйландырыу, хатта бер аҙ оялтыу аша балаларҙың эшмәкәрлеге менән идара итә.

Әҙәбиәт дәрестәрендә, әҫәрҙе өйрәнеү этаптарынан тыш, әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе махсус үҙләштереүгә, тасуири уҡыуға, балаларҙың һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереүгә иғтибар ителә. Был



художестволы әҫәр тексын эстетик ҡабул итергә, уҡыу культураһына өйрәтеү һәм әҙәбиәт теорияһын үҙләштереү – урта мәктәптә бер нисә этапта тормошҡа ашырыла.

Башланғыс (I–IV) кластарҙа балалар уҡыу культураһының элементар нормаларына өйрәтелә. «Туған тел» дәреслеге буйынса улар әҙәби текст өлгөләре менән таныша, әҫәрҙең автор тарафынан яҙылыуына төшөнә, геройҙарға һәм хәл-ваҡиғаларға үҙҙәренең мөнәсәбәтен белдерә, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерен тойоу һәм аңлау өлкәһендә тәүге аҙымдар яһай, яҙма һәм һөйләү телмәрен үҫтереү буйынса башланғыс күнекмәләр үткәрә.

Урта (V–VIII) кластарҙа художестволы әҫәрҙең бер бөтөн ижади хеҙмәт икәнлеге, уның айырым деталдәрҙән тороуы, һәр деталгә яҙыусы тарафынан ниндәйҙер мәғәнә һалынғанлығы аңлашыла. Уҡыусылар әҙәби әҫәр – тормошто образлы сағылдырыу икәнен беләләр, быны яҙыусы үҙенең ижади фантазияһы аша тормошҡа ашырғанын аңлайҙар, уйҙырма ярҙамында тормош дөрөҫлөгө асылыуына төшөнәләр. Был дәүерҙә балаларҙың әҙәби әҫәргә үҙ мөнәсәбәттәре асығыраҡ формалаша, улар геройҙарҙы һәм хәл-ваҡиғаларҙы үҙҙәренсә баһалай алалар, яҙыусының әҙәби оҫталығын күреп шатлана беләләр. Әҫәрҙең ниндәй конфликтҡа ҡоролоуы, геройҙарҙың характерҙары ниндәй шарттарҙа асылыуы менән ҡыҙыҡһыналар, образлы фекерләүҙең ни дәрәжәлә уңышлы икәнен күрәләр. Тап ошо йәштәрҙә балаларға әҙәбиәт теорияһы буйынса интенсив белем бирелә башлай, улар етенсе класҡа етеүгә инде байтаҡ мөһим әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштерәләр, художестволы әҫәрҙең темаһын, идея-йөкмәткеһен, композицон төҙөлөшөн, сюжет элементтарын, тел-стиль сараларын аныҡ билдәләй алалар.

Юғары (IX–XI) кластарҙа иһә уҡыусыларҙың әҙәбиәткә билдәле бер ҡараштар системаһы формалаша. Улар яҙыусының халыҡ тормошонда һәм ил тарихында күренекле урын тотҡан шәхес, ә иң яҡшы әҫәрҙәр – шул тормоштоң мөһим, фәһемле һәм әһәмиәтле һыҙаттарын аңларға ярҙам итеүсе художестволы ысынбарлыҡ икәнлегенә төшөнәләр. Яҙыусы биографияһы һәм әҫәрҙең яҙылыу тарихының ил тарихы, уның мөһим хәл-ваҡиғалары менән бәйлелеге асыҡлана. Шуға күрә юғары класс уҡыусыларында әҙәбиәт тарихына, әҙәби процесҡа тәрән ҡыҙыҡһыныу тыуа, уларҙың әҙәбиәт теорияһы буйынса алған белемдәре лә яҙыусының шәхси стиле, ижад

принцибы, әҙәби методтар тураһындағы мәғлүмәттәр иҫәбенә киңәйә төшә.

---

*1. Әҙәбиәт дәресенең мәктәптә өйрәнелә торған бүтән предметтарҙан төп өҫтөнлөгөн аңлатып бирегеҙ.*
*2. Башланғыс, урта һәм юғары кластарҙа әҙәбиәтте өйрәнеү эшмәкәрлегенең эҙмә-эҙлелеген асыҡлағыҙ.*

**Башҡорт әҙәбиәте буйынса программалар, дәреслектәр, хрестоматиялар һәм методик ҡулланмалар**

Урта мәктәптең әҙәбиәт дәрестәре өсөн программалар, дәреслектәр, хрестоматиялар, методик ҡулланмалар әҙәбиәтте өйрәнеүҙең юғарыла әйтелгән үҙенсәлекле этаптарына ярашлы рәүештә төҙөлә. Дәреслек һәм хрестоматиялар күберәк уҡыусыларға тәғәйенләнһә, программа менән методик ҡулланамалар уҡытыусылар өсөн сығарыла.

«Программа – универсаль сығанаҡ; ул директив документ та, эшкә етәксе ҡулланма ла, абруйлы белешмә лә» (19, 56). Үтеләсәк курстың йөкмәткеһе һәм структураһы, мөһим этаптары, мәктәптә әҙәбиәт уҡытыуҙың методологик һәм педагогик принциптары, методик талаптар программала билдәләнә. Унда материалды айырым кластарға, синектәргә, темаларға бүлеп өйрәнеү системаһы тулыһынса сағылдырыла, һәр темаға сәғәттәр һаны күрһәтелә, кластан тыш уҡыу өсөн тәғәйенләнгән әҫәрҙәр исемлеге бирелә. Башҡорт әҙәбиәте буйынса программалар Башҡортостан республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан раҫлана.

Программала билдәләнгән бөтә талаптар дәреслектәрҙә һәм дәреслек-хрестоматияларҙа сағылыш таба. Әҙәбиәт дәресенең башҡа предметтарҙан күҙгә бәрелеп торған тағы бер айырмаһы – әҙәбиәттең урта һәм юғары кластарҙа ике төрлө принципта өйрәнелеүе. Башҡорт әҙәбиәте V–VIII кластарҙа нигеҙҙә әҙәби уҡыу планында үтелә. Шуға ярашлы рәүештә, «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслегендә материалдар идея-тематик һәм жанҙар принцибында урынлаштырыла. VII-VIII кластарҙа әкренләп тарихи-хронологик принципҡа күсә барыу тормошҡа ашырыла. Әҙәби әҫәрҙе уҡып өйрәнеү нигеҙендә



киң һулышлы һәм бәрәкәтле, тормоштоң үҙе кеүек тәрән тамырлы М. Кәрим ижады бар”.

*Уҡытыусы:* Ҡор тамам. Рәхмәт, әҙәбиәт һөйөүселәр!

*Йылайыр районы Йылайыр ауылының Ш.Бабич исемендәге башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Г.А. Алғушаева.*

* * *

## ЙОМҒАҠЛАУ

Хәҙерге заманда, илдә киҫкен үҙгәрештәр барған дәүерҙә, йәш быуынды илебеҙҙең данлы традицияларына тоғролоҡ, юғары идеалдарға бирелгәнлек рухындағы ысын кешеләр итеп тәрбиәләү бурысы айырыуса мөһим роль уйнай. Был тәрбиә беренсе сиратта мәктәп, ғаилә, йәмәғәтселек шарттарында, әҙәбиәт һәм сәнғәт ярҙамында тормошҡа ашырыла. Әҙәбиәт дәрестәрендә балаларға художестволы әҫәр аша эш һөйөүсәнлек, сафлыҡ, намыҫлылыҡ, батырлыҡ, юғары әхлаҡлылыҡ, мәҙәнилек сифаттары бирелә.

Художестволы сағылдырылған тормошто өйрәнеүе менән әҙәбиәт дәресе мәктәп программаһындағы бүтән предметтарҙан ҡырҡа айырыла. Ул ҙур йәнлелек, эмоциональ күтәренкелек шарттарында үтә. Уҡытыусы дәрестең бай рухи йөкмәткеһе хаҡында хәстәрлек күрә, унын композицион матурлығы тураһында ла онотмай.

Бөгөнгө көн әҙәбиәт дәресе йөҙәр йыллап формалашҡан тотороҡло методик традицияларға уҡытыусының бай ижади фантазияһын, йөрәк ялҡынын ҡушҡан хәлдә генә тейешле кимәлгә күтәрелә ала. Ниндәй методик алымды һайлаһа ла, уҡытыусы бер шартты иҫенән сығармай: балалар әҙәбиәт дәрестәрендә әҫәрҙең художество матурлығын күрергә, идея йөкмәткеһенең асылына төшөнөргә өйрәнә. Программала ҡаралған бүтән төр мәғлүмәт (әҙәбиәт ғилеме, әҙәби процесс, һүҙ сәнғәте тарихы, автор шәхесе, сәнғәттең бүтән төрҙәре һ.б.) ошо маҡсатҡа бәйле рәүештә бирелә.

*Дүртенсе прозаик:* Ҡырғыҙстандың халыҡ яҙыусыһы С. Айтматов фекерҙәрен ишетеп китәйек: “Мин ғүмерем буйы был кешене хөрмәтләнем. Ул бөйөк шәхес ине, XX быуат гуманизмының сағылышы булды”.

*Беренсе прозаик:* М. Кәрим үҙенең “Оҙон-оҙаҡ бала сағы”менән генә лә Нобель премияһына күптән хаҡлы.

*Уҡытыусы:* Килешәм. М. Кәрим күп яҡлы талант эйәһе.

Слайд.

“Бик интеллигентлы проза, тәрән фәлсәфәле драматургия, күп ҡырлы, бәғзе саҡта ҡылыстай үткер, мәгәр гелән ихлас публицистика, ахырҙа, бөтәһенән дә юғары – нурлы поэзия” Р. Харис, Татарстандыңхалыҡ шағиры.

*Уҡытыусы дауам итә:* Ул публицистика өлкәһендә үҙенең берҙәй тип әйтерлеген, һәләтлелеген танытты.

Һүҙ – публицистарға.

*Беренсе публицист:* Шағир, драматург, прозаик, публицист М. Кәрим ысын-ысындан халыҡ улы булды, әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге хаҡында хәстәрлек күрҙе. Р. Ғарипов, А. Игебаев, Р. Сафин, М. Кәримовтарҙың тәүге шиғыр йыйынтыҡтары тураһында әҙәбиәттә үҙе бер һабаҡ кимәленә күтәрелгән мәҡәлә яҙып сыҡты. Һәр саҡ әҙәбиәткә килгән яңы исем менән танышып барҙы, әҫәрҙәренә үҙе мөнәсәбәтен белдерҙе, кәңәштәр бирҙе, ҡанатландырҙы.

*Икенсе публицист:* Заман, донъя, аҙмыштар, әҙәбиәт һәм сәнғәт хаҡындағы күпләгән мәҡәләләрендә, интервьюларында, әҙәби портреттарында, иҫтәлектәрендә М. Кәрим тормошто һәм әҙәбиәтте тәрән белгән зауыҡлы аҡыл эйәһе икәнлеген дә раҫланы.

*Уҡытыусы:* Рәхмәт, публицистар!

М. Кәрим - яҡты талант, шиғриәтле натура. Донъяға, кешеләргә һөйөү, хәстәрле мәрхәмәтле, уй-тойғолар әҙип ижадының асылын тәшкил итә. “Һөйөү һәм борсолоу – минең хәстәрем, булмышым, төп шөғөлөм” – тип ул юҡҡа ғына әйтмәй.

Әҙәбиәтселәр ҡоро бөгөн ҙур әүҙемлек күрһәтте. Улар тәҡдимгә тулыһынса теләктәшлек белдерә һәм ҙур ышаныста ҡала: М. Кәримгә Нобель премияһы (үҙе үлгәндән һуң булһа ла) бирелергә тейеш.

Слайд.

*Р. Бикбаев һүҙҙәре уҡыла:* “Башҡортостаныбыҙҙың төҫ ташламаҫ гәүһәрҙәре араһында тыуған ер ҡуйынынан урғылған Ағиҙел кеүек алсаҡ һәм моңло, Урал кеүек олпат һәм уйсан, далаларыбыҙ кеүек



уҡыусыларға эмоциональ-эстетик йоғонто яһау, әҙәбиәт тарихынан, теорияһынан белем биреү аша эстетик зауыҡ, нәфис әҙәбиәткә мөхәббәт тәрбиәләү, донъяға фәнни ҡараш формалаштырыу, фекерләү һәләтлеген, телмәрен үҫтереү бурыстары тормошҡа ашырыла (4, 3). V–VIII кластар дәреслек-хрестоматияларының барыһында ла фольклорға киң генә урын бирелә. Уҡыусылар башҡорт халыҡ ижадының төп жанрҙары – әкиәт, йомаҡ, мәҡәл, йыр, бәйет, таҡмаҡ, көләмәс, сеңләү, легенда, ҡобайыр, эпос – менән танышалар, улар хаҡында теоретик төшөнсәләр алалар. Революцияға тиклемге һәм совет осоро яҙыусыларының әҫәрҙәре (йәки әҫәрҙәренән өҙөктәре), белем-тәрбиә биреү, предмет-ара бәйләнеш булдырыу маҡсаттарына ярашлы рәүештә, тематик төркөмдәргә бүлеп урынлаштырыла. Әйтәйек, V класта йыл миҙгелдәре, Ватан, туған тел, дәһшәтле йылдар, граждандар һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың күркәм сифаттары, дуҫлыҡ, хеҙмәт, тыныслыҡ, йәнлектәр донъяһы, тәбиғәтте һаҡлау кеүек темалар өҫтөнлөк итә. Артабан улар кластан-класҡа киңәйә, конкретлаша төшә. Уҡыусылар башҡорт яҙыусыларының нигеҙҙә ошо темаларҙы сағылдырған һәм балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тап килгән иң һәйбәт әҫәрҙәренең өлгөләре менән танышалар. Урта кластарҙың дәреслек-хрестоматияларында, программала ҡаралған әҫәрҙәрҙән башҡа, текстан тыш компоненттар: яҙыусыларҙың тормош юлы хаҡында мәғлүмәт, иллюстрациялар, әҙәби-теоретик төшөнсәләр, һынлы сәнғәт әҫәрҙәренән өлгөләр, һорауҙар һәм эштәр бирелә. Урта кластар өсөн тағы ла бер баҫма ҡаралған: программаға инмәгән әҫәрҙәрҙе балалар «Башҡорт әҙәбиәтенән уҡыу китабы»нан (элекке «Кластан тыш уҡыу китабы») уҡый.

Юғары кластар әҙәбиәтте тарихи-хронологик планды өйрәнә. Улар ҙа ике китап менән эш итә. Хрестоматияла төп урынды әҙәби текстар ала. Текстан тыш компоненттарҙан автор тураһында ҡыҫҡаса белешмә, уҡыусыларға әҫәр буйынса һорауҙар һәм эштәр, иллюстрациялар ғына булырға мөмкин. Ә дәреслектә әҙәбиәт курсының бер йыл эсендә өйрәнелә торған материалы система буйынса урынлаштырыла. Әҙәбиәт үҫешенең айырым этаптары, яҙыусыларҙың тормош һәм ижад юлы, мөһим әҫәрҙәре тураһындағы күҙәтеүҙәр хронологик тәртиптә килә. Әҙәбиәт теорияһы буйынса белешмәләр, әҙәби терминдар һүҙлеге, хронологик таблицалар, һынлы сәнғәт әҫәрҙәренән өлгөләр ҙә ошо китапта бирелә. Хрестоматия буйынса уҡыусылар

художестволы әҫәрҙең үҙе менән танышһа, дәреслектән әҙәбиәт ғилеме, әҙәбиәт тарихы, әҙәбиәт теорияһы тураһында белем ала. Быларҙан тыш, V-VIII һәм IX-XI кластарҙа Башҡортостан китап нәшриәте «Мәктәп китапханаһы» серияһында күренекле яҙыусыларҙың айырым йыйынтыҡтарын, плакаттар, альбомдар, аудио, видеояҙмалар, дәрес өлгөләре, техник саралар аша ҡулланыла торған күп төрлө ярҙамсы материалдар сығара. Уларҙы республика Мәғариф министрлығының милли мәктәптәр һәм дәреслектәр бүлектәре әҙерләй. Юғары кластар өсөн «Башҡорт әҙәбиәтенән уҡыу китабы» сығарылмай. Программанан тыш тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙе уҡыусылар китапханаларҙан үҙҙәре табып уҡырға тейеш.

Әҙәбиәт дәрестәрен йәнле, мауыҡтырғыс һәм бай йөкмәткеле итеп үткәреүгә ярҙам маҡсатында методист-ғалимдар, тәжрибәле уҡытыусылар тарафынан һәр класс өсөн методик ҡулланмалар тәғәйенләнгән. Унда дөйөм күрһәтмәләрҙән тыш, һәр теманы, дәресте ойоштороуҙың яҡынса өлгөләре тәҡдим ителә. Әйтергә кәрәк, мәктәптәрҙә әҙәбиәт уҡытыуҙы камиллаштырыуға арналған төрлө кимәлдәге сараларҙа – фәнни-практик конференцияларҙа, кәңәшмәләрҙә методик ҡулланмалар хаҡында бәхәстәр ҙә ҡуҙғатылғылай. Уға ҡарата уҡытыусылар һәм методист ғалимдар араһында ике төрлө фекер йәшәп килә. Бер яҡтан, ҡулланмала бирелгән әҙер дәрес өлгөләре уҡытыусының ижади эшмәкәрлеген сикләй, бер темаға арналған бөтә дәрестәрҙе лә бер ҡалыпҡа һалып үткәреү ҡурҡынысы янай. Икенсе яҡтан, студент-практиканттарға һәм йәш уҡытыусыларға эште низән башларға, яҙыусы ижадын, айырым әҫәрҙәрҙе дәрестәргә нисек бүлергә, һәр дәрестең маҡсатын нисек билдәләргә, нинидәй күргәҙмәлелек һәм техник саралар ҡулланыуға, ваҡытты нисек дөрөҫ файҙаланырға өйрәтеүсе уңайлы сығанаҡ ролен үтәй. Бындай типтағы методик ҡулланмалар, әлбиттә, кәрәк. Тик уларҙы һәр бер уҡытыусы (практикант та, яңы эш башлаусы йәш педагог та) үҙенә таяныс итеп алып, ижади ҡулланырға тейеш.

Программа, методик ҡулланма уҡытыусылар өсөн тәғәйенләнһә, дәреслек-хрестоматия һәм художестволы әҙәбиәт уҡыусыларҙың белем сығанағы, кәңәшсеһе, яҡын дуҫы, айырылғыһыҙ юлдашы булырға тейеш. Әҙәбиәт уҡытыусылары балалар күңелендә китапҡа һөйөү тәрбиәләй алған хәлдә генә был талап ысынбарлыҡҡа әүерелә. Ә ул инде әҙәбиәт дәресенең ойошторолоу кимәленә бәйле.



“Өс пьесамда ла мин бер идеяны – кешенең азат ителеүен, рухи ирекле алыуын кәүҙәләндерергә ынтылам. Был идея һәр бер трагедияла үҙенсә асылды: “Ай тотолған төндә”лә – шәхсән планда, “Салауат”та – милли планда, “Ташлама утты, Прометей!”ҙа, – әйтергә батырсылыҡ итәм, дөйөм кешелек планында М. Кәрим.

*Дүртенсе драматург:* “Ай тотолған төндә” трагедияһы М. Кәримдең илебеҙ театрҙарында иң күп ҡуйылған һәм йөҙәрләгән мең тамашасыларҙың иғтибарын яулаған сәхнә әҫәренә әйләнде. Ул Мәскәү һәм Ленинград, Себер һәм Алыҫ Көнсығыш, Урта Азия һәм Кавказ, Украина һәм Балтик буйы тарафтарында ҙур уңыш ҡаҙанып, репертуарҙа ныҡлы урын алды.

*Уҡытыусы:* Эйе, бөгөн дә М. Кәрим драмалары республикабыҙ театр сәхнәләрендә генә түгел, тотош илебеҙҙә уңыш яулауын дауам итә. Күп телдәргә тәржемә ителгән, миллиондарса уҡыусылар күңеленә юл тапҡан. Рәхмәт драматургтарға. Проза өлкәһе әһелдәре һүҙ ала.

Слайд.

“М. Кәримдең повестарын уҡығанда шиғыр уҡығандағылай хисләнәһең, уларҙан айырылып булмай” З. Ураҡсин.

*Беренсе прозаик:* Проза – ул М. Кәрим ижадының өсөнсө ҙур тармағы. Прозаға ул балалар әҙәбите аша бала саҡ темаһы менән килде. 1951 йылда донъя күргән “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесы бөтә донъяла танылыу таба. Повесть рус, украин, грузин, ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡырғыҙ, төркмән, сыуаш, латыш телдәрендә китап булып баҫылып сыға.

*Икенсе прозаик:* “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесы – авторҙың төп китабы. Был повесть бала саҡ темаһына бағышланған булһа ла, проблематикаһы менән шаҡтай киң, жанры яғынан авторҙың бала сағы, тиңдәштәре, ауылдаштары тураһында фәһемле хәтирәләренә ҡоролған лирик-фәлсәфәүи эстәлекле автобиографик әҫәр.

*Өсөнсө прозаик:* Шулай уҡ был әҫәр ҙә миллионлаған уҡыусыһын тапты, хәҙер ҙә таба. Бына бер хаттан өҙөк тыңлағыҙ: “У меня в жизни сложилась такая ситуация, что я окончательно решила уйти из жизни. Утром пришла “Роман-газета”. Я ее выписываю. Начала перелистывать вашу повесть “Долгое-долгое детство”. Понемногу увлеклась. “Ладно, говорю, завтра уйду”. Завтра тоже не ушла. Дочитала. И решила остаться на этом свете” Писала женщина из Дальнего Востока.

*Слайд.*

“Ғүмерем минең сәйер уйын булды,
Серле бер йәрәбә – тоташтан.
Алмаш-тилмәш килде таҡ менән йоп,
Отолоуҙар менән отоштар.
Юғалтыуҙар аңдып торҙо һәр саҡ
Урау юлдарҙағы табышты”.

*Өсөнсө шағир:* Тәрән, аналитик ҡараш М. Кәрим лирикаһының төп асылы булды. Шиғриәт аша әҙип донъяның айышын, йәшәүҙең мәғәнәһеҙлеген поэтик төпсөп ҡарай, тормош төпкөлөнә яңы күҙлектән баға. “Мөхәббәттең дүрт миҙгеле” тигән поэтик китапты поэзия һөйөүселәргә М. Кәримдең оло бүләге тип әйтергә кәрәк.

*Дүртенсе шағир:* Эйе, М. Кәрим ижады – беҙгә оло үрнәк, алға әйҙәүсе донъя әҙәбиәтенең алтын фонды. Беҙ, шағирҙар, уның Нобель премияһына тәҡдим ителеүен хуплайбыҙ.

*Уҡытыусы:* Рәхмәт, һеҙгә, шағирҙар ҡоро. Драматургтар ҡоро һүҙ ала.

Слайд.

“Шатлыҡ менән икеләнмәй әйтә алам: совет әҙәбиәтенең иң яҡшы пьесаларын башҡорт крәҫтиәне улы М. Кәрим яҙҙы” Ҡ. Кулиев.

*Беренсе драматург:* Драматургия – М. Кәрим ижадының икенсе иң баҙыҡ тармағы. Егерменсе быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт драматургияһының үҙәгендә уның пьесалары торҙо, ул милли сәхнә сәнғәтебеҙҙә “Мостай Кәрим театры” тигән үҙенсәлекле тамашаны барлыҡҡа килтерҙе. Тәүге драмаһы “Туй дауам итә” Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арналған.

*Икенсе драматург:* “Яңғыҙ ҡайын”, “Йырланмаған йыр”, “Айгөл иле”, “Йәйәүле Мәхмүт” драмалары психологик драма жанрының яҡты бер офоғо булып балҡыны. “Ҡыҙ урлау” комедияһы һәм “Диктаторға ат бирегеҙ” политик памфлетында М. Кәрим комедияһының саркастик, фарс формаһына мөрәжәғәт итте.

Слайд.

*Өсөнсө драматург:* М. Кәрим трагедия жанрында уңышлы эшләне. Ул “Ай тотолған төндә”, “Салауат”, “Ташлама утты, Прометей” тигән өс трагедия яҙҙы. Уларҙы берҙәй идеяны берләштергән триптих тип атарға кәрәк.

Слайд.



---

*1.Әҙәбиәт дәрестәре өсөн ҡулланыла торған баҫмаларҙың ҡайһылары уҡытыусыларға, ҡайһылары уҡыусыларға тәғәйенләнә?*

*2.Урта һәм юғары кластарҙа уҡыусылар ниндәй китаптар менән эш итә, тәғәйенләнеше буйынса нисек аталалар?*

*3.Урта һәм юғары кластарҙа дәреслек, хрестоматиялар ниндәй принцип буйынса төҙөлә?*

*4.Методик ҡулланмаларға ҡарата ниндәй мөнәсәбәт һәм фекер белдерә алаһығыҙ?*

## Әҙәбиәт уҡытыуҙың дөйөм дидактик методтары

Дәрес барышы – ике яҡлы эшмәкәрлектең берлектәге ағышы: уҡытыусы белем биреүҙә ойоштора, ә уҡыусы уның ярҙамында йә әҙер сығанаҡтан, йә үҙенең эҙләнеүҙәре аша белем ала. Уҡытыусы был процеста хәл иткес ролде уйнай. Класта ултырған балаларҙың һәләтлеге, мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм эшкәртеү тиҙлеге бер төрлө түгел. Кластың әҙерлеген, материалдың характерын иҫәпкә алып, уҡытыусы дәрестә төрлөсә ҡора, төрлө методтар һәм алымдар системаһын ҡуллана.

Уҡытыу методы – уҡытыусы эшмәкәрлегенең айырым дәрескә һайланған төп йүнәлеше, «уҡыусының белем, оҫталыҡ һәм күнекмәләргә эйә булыуына, ҡараштары формалашыуына, һәләтлектәре үҫеүенә ярҙам итеүсе эш ысулдары». (26, 813) Ә методик алымдар – уның состав өлөштәре; уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп иттереүгә, материалды аңлайышлыраҡ, үтемлерәк итеп еткереүгә иҫәпләнгән бәләкәйерәк эш төрҙәре. Уҡытыу методының теге йәки был төрө методик алымдар ярҙамында тормошҡа ашырыла. Методика ғилемендә методтарҙың төрҙәрен билдәләү төрлө принциптар буйынса тормошҡа ашырыла килә. Беҙҙең илдә XX быуаттың 70-се йылдарына тиклем, мәҫәлән, белем биреүҙең сығанағына ҡарап бүлеү принцибы киң таралған ине: лекция, әңгәмә, уҡыусыларҙың үҙ аллы эше, техник саралар, әҙәби экскурсиялар һ.б. Унан һуңғы йылдарҙа методик әҙәбиәттә Н. И. Кудряшев классификацияһы киңерәк урын ала башлай. Ул, немец ғалимы И.Я.Лернерҙың мәктәптә уҡытыла торған бөтә предметтар өсөн дөйөм дидактик

методтар системаһына нигеҙләнеп, бары тик әҙәбиәт дәрестәренә генә ярашлы яңы ысулдар тәҡдим итте. Н. И. Кудряшев классификацияһы уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлеге үҙенсәлектәренә таяна һәм түбәндәге методтарҙы үҙ эсенә ала:

*Ижади уҡыу методы*. Исеме үк күрһәтеүенсә, был методтың алымдары әҙәби әҫәр тексы менән танышыу, уның йөкмәткеһен ижади үҙләштереү, тасуири уҡырға өйрәнеү эшмәкәрлектәре менән бәйләнгән. Шуға күрә ул күбеһенсә әҫәрҙе яңы өйрәнә башлаған саҡта һәм анализдан һуң ҡулланыла. Тап ошо этаптарҙа уҡыусылар, – кластамы, өйҙәме, – тексты уҡырға тейешле булалар. Әммә художестволы әҙәбиәт бүтән предметтар тексы кеүек ғәҙәттәгесә генә уҡылмай. Уны ижади үҙләштереп, кисереп, аңлап ҡабул итергә өйрәтеү, балаларҙың художество һәләтлектәрен үҫтереү маҡсатында уҡытыусы ошо методҡа мөрәжәғәт итә ала.

*Эвристик метод*. “Эврика” һүҙенән алынған: эҙләнеү, табыу мәғәнәләренән күҙ уңында тота. Йөкмәтке үҙләштерелгәс, әҫәрҙе анализлау мәсьәләһе килеп баҫа. Был этапта уҡыусылар яҙыусы күҙ уңында тотҡан нәфислек, әхлаҡ-этик, ижтимағи, фәлсәфәүи проблемалар менән осраша. Ә уларҙы тәрәнерәк аңлау өсөн әҙәбиәт ғилеменең элементар төшөнсәләрен булһа ла белергә тейештәр. Шул саҡта ғына әҫәргә тейешле тәрәнлектә анализ биреп була. Уҡытыусы эвристик әңгәмә аша балаларҙы ошо проблемалар өҫтөндә уйланырға, эҙмә-эҙлекле фекер йөрөтөргә, уй-ҡараштарын дәлилләп сығыш яһарға (йәки яҙырға) өйрәтә. Художестволы әҫәрҙе анализлау ҡеүәһенә эйә булыу, әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе, әҙәби-тарихи процесс законлыҡтарын үҙләштереү өсөн был иң ҡулайлы метод.

*Тикшеренеү методы*. Ул, нигеҙҙә, уҡыусыларҙың үҙ аллы фекерләү эшмәкәрлеге менән бәйләнгән. Был осраҡта әҫәрҙең дәрестәрҙә асылып бөтмәгән яңы аспекттары өҫтәмә эш рәүешендә үҙ аллы башҡарыла. Уҡытыусы бары тик йүнәлеш кенә бирергә мөмкин. Йүнәлеш, күбеһенсә, проблемалы һорауҙар ҡуйыу ярҙамында билдәләнә. Был методтың эвристик методтан айырмаһы ла шунан тора – тәүгеһендә уҡытыусы үҙе күберәк ҡатнаша, эвристик әңгәмә барышында һорауҙарҙы ваҡлабыраҡ бирә, балаларҙың эҙләнеүе менән етәкселек итә. Һуңғыһында иһә уҡыусы, быға тиклем алған белеменә таянып, әҫәрҙе үҙ аллы анализларға, уның художество ҡиммәтен билдәләргә өйрәнә. Тикшеренеү методы дәрестә генә түгел, фәнни конференцияларҙа, кластан тыш эштең бүтән



тынғыһыҙлыҡ мотивтары арта, хистәр донъяһы сағыулана.

*Слайдтар.*

Аяҙҙа ла, йонсоу көндәрҙә лә
Ғүмер юлы тигән араны
Уҙған саҡта,
Йондоҙҙарҙай күреп,
Мин күҙҙәргә ҡарап барамын,
Кешеләрҙең шат, өмөтлө, моңһоу
Күҙҙәренә ҡарап барамын,
Юлдарымда аҙашмаҫ өсөн,
Йырҙарымда алдашмаҫ өсөн.

Был шиғри юлдар шағирҙың әҙәби декларацияһы, мөһим ижад принцибы хөкөмөндә булды.

*Дүртенсе шағир:* Кешенең тыныс хеҙмәте һәм донъяла именлек өсөн көрәше, Башҡортостаныбыҙҙың мөһәбәт образы шағирҙың “Европа-Азия” тигән шиғырҙар китабында киң сағылдырылды. Һәр шиғыр – бер бөтөн, үҙ аллы әҫәр. Бөйөк Тыуған ил төшөнсәһе Европа Азияға бүленмәй, ҡояш та тигеҙ яҡтырта, хатта кескәй йән эйәһе ҡырмыҫҡа ла йөк күтәреп береһенән икенсеһенә сыға.

*Беренсе шағир*: М. Кәрим төрлө-төрлө алыҫ илдәрҙә булып,ер-һыуҙар урап ҡайта. Шундай сәфәр-сәйәхәттәре һөҙөмтәһендә уның “Вьетнам яҙмалары”, “Каштан сәскә атҡан ерҙә”, “Болгар дәфтәренән” тигән шиғыр циклдары барлыҡҡа килә. Ул циклдарҙы “Европа – Азия” шиғырҙар циклының дауамы, уның темаһы, географияһы сиктәренең киңәйеүе тип тә ҡарарға мөмкин.

*Слайд.*

“Минең халҡым тарихи яҡтан ике ҡитға – Европа менән Азия ҡушылған урынға тура килгән. Был фәҡәт материктар ҡушылған урын ғына түгел, был ике яҙмыш – Европа менән Азия яҙмышы сиге” М. Кәрим.

*Икенсе шағир:* Халыҡ шағиры көнбайыш һәм көнсығыш әҙәби гәүһәрҙәрҙе, бигерәк тә рус һәм төрки халыҡтар классик әҙәбиәте үрнәктәрен берләштереп ижади бейеклектәр яуланы. Шағир Көнсығыш әҙәбиәттәре циклында көнсығыш поэзияһының тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә, кинәйәләргә бай поэтик традицияларына туранан-тура мөрәжәғәт итте. “Йылмайыу” әҫәрендә стиль саралары Көнсығыш классик поэзияһының гүзәл традицияларына нигеҙләнеп бирелгән.

Фоноязма яңғырай (М. Кәримдең тауышы).
Күп нәмәнән уңдым.
Рәхмәт һеҙгә,
Хәйерле төн һеҙгә, үткәндәр!
Эйе, уңдым, күп нәмәнән уңдым.
Минән уңды микән бүтәндәр?

*Уҡытыусы* (ул ҡорҙоң рәйесе рәүешендә сығыш яһай):

– Хәйерле көн, хөрмәтле әҙәбиәт ҡорона йыйылыусылар. Бөгөн һүҙебеҙ әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы, олпат шәхес, халҡыбыҙҙың рухи ҡөҙрәте, Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге республика, РСФСР һәм СССР дәүләт премиялары лауреаты, Социалистик хеҙмәт Геройы М. Кәрим хаҡында (экранда М. Кәрим һүҙҙәрен уҡый).

Эйе, күп быуатлы, күп милләтле донъя әҙәбиәтендә М. Кәримдең ижады – тәрән тамырлы. Шағир, драматург, прозаик һәм публицист М. Кәрим һүҙе – ул юғары һүҙ сәнғәте, әҙәбиәттең алтын фонды. Бөгөн әҙәбиәт ҡорона йыйылыусы әҙиптәрҙең төп маҡсаты – М. Кәрим ижадына байҡау яһау һәм уны Нобель премияһына тәҡдим итеү. Һәр ҡор тәҡдимде яҡлар һәм нигеҙле сығыш яһар тип уйлайым.

*Экранда слайдтар.*

И. Кобзон, СССР-ҙың халыҡ артисы: “Күп милләтле Рәсәй поэзияһында дүрт юғарылыҡ бар ине, улар: Ҡайсын, Рәсүл, Давид, Мостай. Дүртеһе лә ғәжәйеп талантлы, араларында Мостай иһә – ысынлап та, иң аҡыллыһы һәм тотанаҡлыһы”.

*Беренсе шағир:* М. Кәрим 1935–36 йылдарҙа яҙа башлай. Уның “Отряд ҡуҙғалды”, “Яҙғы тауыштар” тигән тәүге китаптарында уҡ йәшәү йәмен тойоу хисе, күңел көрлөгө бөркөлөп тора.

*Икенсе шағир:* Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында М. Кәрим поэзияһының яңы сифаттары асылды, үҙе гражданин һәм шағир булараҡ сынығып етте. Һуғыштың башынан алып аҙаҡтарына тиклем яу юлдарын үткән яугир шағир, хәрби журналист күпте күрҙе, шулар күңел моңо булып шиғыр юлдарына күсте.

Башҡортостан! Күҙәт еңеү юлдарын,
Шул юл менән һиңә ҡайтыр улдарың.

*Өсөнсө шағир:* Шағирҙың тормош тәжрибәһе артҡан һайын лирикаһында йәшәү мәғәнәһе, бәхет һәм маҡсат, мөхәббәт һәм намыҫ кеүек проблемалар философик тәрәнлегендә тамыр ебәрә. Борсолоу,



формаларында ҡулланылырға мөмкин.

*Репродуктив* (күсермә) метод уҡыусыларға материалды үҙ аллы үҙләштереүе ауыр булғанда йәки уға оҙаҡ ваҡыт талап ителгәндә ярҙамға килә. Үтә ҡатмарлы төшөнсәләр менән бәйле белем уҡыусылар аңына әҙер сығанаҡтарҙан күсерелә: уҡытыусы һүҙенән, лекциянан, дәреслектәрҙән һ.б. Ләкин бында ла материал аңлы рәүештә, ижади ҡабул ителергә тейеш. Ул маҡсатҡа ирешеү өсөн иң һәйбәт сараларҙың береһе – уҡытыусының проблемалы һөйләүе. Әҫәргә анализ яһағанда проблемалар ҡуя барып, уҡыусыны уйландырырға мәжбүр итеп һөйләһәң, шул проблема тирәһендәге төрлө ҡараштар араһынан иң дөрөҫөн ышаныслы, дәлилле итеп аңлатһаң, дәрес материалы уның күңелендә ныҡыраҡ һеңеп ҡала. Өҫтәүенә, ошо уҡ метод менән уҡыусы бүтән әҫәрҙәрҙе лә үҙ аллы анализлауға күнекмә ала.

И. Я. Лернерҙың дөйөм дидактик методтары системаһында материалды проблемалы биреү методы бар. Н. И. Кудряшев уны айырым төркөмгә сығармаған. Был аңлашыла, сөнки әҙәбиәт дәрестәрендә әҫәрҙәрҙе йәки әҙәбиәт ғилеме төшөнсәләрен проблемалы өйрәнеү, проблемалы һорауҙар ҡуйыу юлы менән асыҡлау һәр методҡа юлдаш булырға тейеш. Уны дәрестең ниндәйҙер этабы өсөн генә ярашлы метод, тип ҡарап булмай.

Әҙәбиәт дәрестәре өсөн Н. И. Кудряшев тәҡдим иҫкән дөйөм дидактик методтарҙың барыһы ла уҡыусы эшмәкәрлегенең характерына нигеҙләнә. Был методтарҙың деталдәре, элементтары, состав өлөштәре, йәғни методик алымдары ла ошо принципҡа буйһондоролған Әҫәрҙе өйрәнеү баштан аҙаҡҡа тиклем бер метод буйынса ғына бармаҫҡа мөмкин. Айырым тема, хатта бер генә дәрес эсендә лә бер нисә методҡа мөрәжәғәт итеп, уларҙы үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә ҡулланырға була. Әйтәйек, Р. Ғариповтың “Уйҙарым” шиғырын үткәндә, уның йөкмәткеһе менән танышыу этабында ижади уҡыу методын һайлау уңайлы. Ә уны анализлағанда, асылын уҡыусыларға яҡшыраҡ еткереү өсөн эвристик методҡа күсеү маҡсатҡа ярашлы. Урта кластарҙа, балаларҙың йәш үҙенсәлегенә бәйле рәүештә, дәрес барышында эш төрҙәре йышыраҡ алмашына. Шуға күрә методтар һәм уларҙың алымдары ла бер-бер артлы үҙгәреп торорға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта бер генә дәрестә үтелә торған айырым әҫәрҙе бер генә төрлө метод менән дә уңышлы өйрәнеп була. Был инде уҡытыусының оҫталығына, класс алдына ҡуйған

маҡсатына бәйләнгән. Мәҫәлән, ул юғары кластарға Б. Бикбайҙың “Пограничник һәм уның әсәһе” шиғырын анализлау юлдарын күрһәтергә теләй икән, репродуктив метод менән эш итә ала.

Ҡарап үтелгән методтар нигеҙҙә дәрес өсөн тәғәйенләнгән. Шул уҡ ваҡытта уларҙы факультатив эштәрҙә лә, кластан тыш сараларҙың айырым төрҙәрендә лә уңышлы ҡулланып була (был турала ҡарағыҙ: 16; 17, 67-85).

---

1. *Метод һәм анализдарҙың нимә икәнлеген асыҡлағыҙ.*
2. *Н. И. Кудряшов тәҡдим иткән дидактик методтарҙың төп принцибы нимәгә нигеҙләнә?*

*3.Тәҡдим ителгән методтарҙың һәр ҡайһыһының йөкмәткеһен хәтерҙә ҡалдырырға тырышығыҙ.*

## Дәрестә уҡыу ситуациялары

Мәктәптә белем биреүҙең төп формаһы – дәрес. Ысын мәғәнәһендә һәйбәт ойошторолған әҙәбиәт дәрестәре бер-береһенә оҡшамай, уларҙың һәр ҡайһыһы ҡабатланмаҫ матурлыҡта, үҙенең төҙөлөшө, эҙмә-эҙлеге һәм атмосфераһы менән үк сәнғәт юғарылығында булырға мөмкин. Ләкин шул ҡабатланмаҫ дәрестәрҙең дә оҙаҡ йылдар буйы формалашҡан, предмет үҙенсәлектәре, уҡыусыларҙың йәш айырмалыҡтары менән бәйләнгән уртаҡ нигеҙҙәре, дөйөм билгеләре бар. Ошо билгеләре буйынса дәресте төрҙәргә бүлеп йөрөтәләр. Үҙ сиратында был төрҙәр ҙә күбәйеп бара, һәм уларҙы классификациялауҙың ҡәтғи генә принциптары әле булһа эшләнеп бөтмәгән. Ғилми-методик хеҙмәттәрҙә хәҙерге заман әҙәбиәт дәрестәренең типтарын күпселек осраҡта түбәндәге принциптар менән билдәләйҙәр:

а) материалды өйрәнеү объекты буйынса: инеш дәрестәр, әҙәби тексты үҙләштереү, анализлау, йомғаҡлау дәрестәре;

б) белем биреү формаһы буйынса: әңгәмә, лекция, диспут, экскурсия һ.б.;

в) материалдың характеры һәм уны өйрәнеүҙең дидактик маҡсаттары буйынса: яңы материалды аңлатыу дәрестәре, үҙләштереү дәрестәре, ҡабатлау дәрестәре, уҡыусыларҙың белемен тикшереү һәм баһалау дәрестәре, аралаш дәрестәр.



Баһалар:
22 –...“5+” – Афарин;
...20 – “5” –Бик яҡшы;
...18 – “4” – Яҡшы, тағы ла тырыш;
...16 – “3” – Насарыраҡ;
...14 – “2” – Насар, дәрестә тағы нимә уйлайһың?

*Рәхмәтуллина Гөлнәзирә Рәхимйән ҡыҙы, Мәләүез ҡалаһының 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе бюджет учреждениеһы.*

**Иҫкәрмә:** Модуль – ниндәй ҙә булһа системаның, бер бөтөндөң сағыштырмаса үҙ-аллы өлөшө. Был осраҡта М. Аҡмулланың шиғриәтенән бер шиғырын (“Башҡорттарым, уҡыу кәрәк”) айырып алып өйрәнеү бер модуль булып тора.

## Мостай Кәрим ижады буйынса дәрес-семинар “Әҙәбиәткә һәйкәл”

*Маҡсат:* уҡыусыларға М. Кәримдең күп яҡлы ижады хаҡында күберәк мәғлүмәт биреү; һөйләү, тасуири уҡыу телмәрен үҫтереү; М. Кәрим ижадына ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, һөйөү тәрбиәләү; ижади эшмәкәрлекте үҫтереү;

*Йыһазландырыу:* мультимедиа проекторы, М. Кәримдең фоторәсеме, китаптар күргәҙмәһе, магнитофон.

Уҡыусылар төркөмдәргә бүленеп ултыралар.

*Әҙәбиәтселәр ҡоро:*

Беренсе төркөм – шағирҙар ҡоро
Икенсе төркөм – драматургтар ҡоро
Өсөнсө төркөм – прозаиктар ҡоро
Дүртенсе төркөм – публицистар ҡоро

*Дәрес барышы:*

*Ойоштороу мәле.*

Экранда М. Кәрим портреты.

Эпиграф.

“Әҙәбиәт сығанағы – әлбиттә, тормош;
Унда һәр әҙиптең үҙ утрауы бар”.

| | | |
|---|---|---|
| | Г. Теманың йөкмәткеһен асыусы бер фраза.<br>Д. Темаға ҡарата үҙ фекерен бер һүҙ менән сағылдырған исем (резюме). | |
| УЭ-6 | Маҡсат: Дәресте йомғаҡларға, өй эшен һайларға.<br>1) Модулгә өҫтәлмәне ҡарап эштәрҙе тикшерегеҙ. Дөрөҫ яуапҡа 2 балл ҡуйығыҙ.<br>2) Балдар һанын иҫәпләгеҙ.<br>3) Эшегеҙҙе баһалағыҙ.<br>4) Ҡуйған маҡсаттарға ирештегеҙме?<br>5) Өй эшен һайлағыҙ.<br>--“5” билдәһе алһағыҙ, теманы уҡығыҙ.<br>--“4” билдәһе алһағыҙ, теманы уҡырға һәм тест төҙөргә.<br>--“3” билдәһе алһағыҙ, теманы уҡырға, һорауҙарғаяуап бирергә, тест төҙөргә. | Индивидуаль эш. |

*Модулгә өҫтәлмә.*

УЭ – 1 УЭ – 2

1) Наҙанлылыҡ – ҡараңғылыҡ, белемлелек – яҡтылыҡ.
2) Уҡыған үлмәҫ, уҡымаған көн күрмәҫ.
3) Уҡығандың теле икәү.
4) Беләге бар берҙе еңер, белеме бар меңде еңер.

Аҡмулла көндәре
Аҡмулла премияһы
Аҡмулла һәйкәле
Аҡмулла музейы

УЭ - 3
БДПУ



г) формаһы буйынса яңылыҡлы нигеҙгә ҡоролоп, хәҙер инде үҙҙәре лә традиционға әйләнеп барған дәрестәр: дәрес-бәйге, дәрес-хөкөм, дәрес-телетапшырыу, дәрес-аукцион һ.б. (тиҫтәләгән форманы һанап китергә мөмкин булыр ине);

д) бынан алдағы төрҙө дауам итеп, үҙ аллы пункт итеп күрһәтергә мөмкин: уҡытыусының эҙләнеүе һөҙөмтәһендә, формаһы буйынса быға тиклемге бер генә дәрескә лә оҡшамаған, фәҡәт үҙенең генә яңылыҡлы дәрестәре (исемен үҙе нисек теләй, шулай атай ала; миҫал өсөн: дәрес-йылмайыу, дәрес-фәлсәфә, дәрес-бәхәс).

Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы ғилемендә «дәрес төҙөлөшө», «дәрес структураһы» тигән термин бар. Тимәк, уның ниндәйҙер төҙөлөш материалы – махсус бермәктәре, элементтары булырға тейеш. Методист Н. А. Станчек дәрестең төп бермәге итеп уҡыу ситуацияларын билдәләй. «Уҡыу ситуацияһын дәрестең логик һәм эмоциональ өлөшө, уның күҙәнәге, структура бермәге тип атайҙар», – ти ул (19, 272). Һәр ситуацияның маҡсаты, мәғәнәһе, үҙенә хас эмоциональ йөкмәткеһе була, уның уҡыусыға еткерелеү юлы уҡытыусы тарафынан алдан уйланыла. Был «күҙәнәктәрҙең» һәр ҡайһыһы дәрестең дөйөм маҡсатына хеҙмәт итә. Бер-бер артлы логик бәйләнештә тыуҙырылған эмоциональ шарттарҙың эҙмә-эҙлеге һәм үҙ-ара дөрөҫ бәйләнеше дәрестең кимәлен билдәләй ҙә инде. Уҡыу ситуацияһы – методик алымдан бәләкәй, дәрестең иң бәләкәй күҙәнәге; бер алымдың эсендә бер нисә ситуация тыуҙырылыуы мөмкин.

Әйтәйек, М. Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр” повесынан Ғәлимә образына анализ яһала, ти. Уҡыусыларға Ғәлимә фажиғәһенең асылын аңлатыу – үҙе бер ситуация. Уны мотлаҡ тәьҫирле, эмоциональ йөкмәткеле итеп ойошторорға кәрәклеге аңлашылып тора. Төп героиняның тышҡы ҡиәфәте, күңел донъяһы, мөхәббәте тураһындағы мауыҡтырғыс һөйләшеүҙәре лә айырым ситуациялар итеп алырға мөмкин булыр ине. Әммә был образдың үҙе тирәһендә генә тапанһаҡ, маҡсатҡа тулыһынса ирешә алмаясаҡбыҙ. Повестағы һәр персонаждың Ғәлимә яҙмышына ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте бар. Шулар араһынан иң кәрәклеләрен һайлап алып, дәрестең төп маҡсаты йүнәлешендә файҙаланырға мөмкин. Сираттағы ситуация итеп Ғәлимә яҙмышында Сафи хәҙрәттең, дин әһелдәренең ролен иҫкә төшөрөргә була. Тик бөгөнгө шарттарҙа ул турала үтә һаҡ һүҙ алып барырға, диндең үҙенә тел тейҙермәҫкә, ә ҡайһы бер дин

әһелдәренең ике йөҙлөлөгөн, яуыз, боҙоҡ тәбиғәтле икәнлектәренә иғтибар итергә кәрәк. Уларҙың им-томо Ғәлимәнең хәлен насарайта ғына. Тап ошо ваҡиғанан һуң ҡыҙҙың атаһы Фәхриҙең күҙе асыла башлай. Фәхри образы, унын наҙанлығы һәм тәүҙә үҙ ҡыҙына йыртҡыстарса мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү – сираттағы ситуация. Артабан ошо йүнәлештә тағы бер нисә образға мөрәжәғәт итеп, киләһе ситуацияларҙы тыуҙырырға мөмкин. Закирҙың, мәҫәлән, тәү ҡарамаҡҡа Ғәлимә фәжиғәһендә һис ниндәй ҡыҫылышы, «ғәйебе» юҡ һымаҡ. Ә инде ошо тәңгәлдә ситуация тыуҙырып, тәрәнерәк уйлана төшһәк, ғәйепһеҙ Закир ҡатмарлы тормош шарттарында үҙенең хоҡуҡһыҙлығы, көсһөҙлөгө менән һөйгән ҡыҙын яҙмыш ҡулына тапшырырға мәжбүр булғанлығы аңлашылыр. Саф мөхәббәттәре көтмәгәндә генә ҡот осҡос бәхетәеҙлеккә, түҙеп торғоһоҙ хурлыҡлы яҙаға эүерелгәс тә, ул аяуһыҙ ҡара көстәргә яңғыҙы, әлбиттә, ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, ә инде ҡаршы торорлоҡ көстө ойошторорға аңы ла, һәләте лә, ҡөҙрәте лә етмәй. Ситуацияларҙы бер-бер артлы үҙләштергәндән һуң, уҡыусы бүтән персонаждарҙың төп образға мөнәсәбәтен генә түгел, уларҙың үҙҙәренең дә әҫәрҙә тотҡан урынын аңлай, ә Ғәлимә образы аша замандың социаль асылына аныҡыраҡ төшөнә, повестың идея-йөкмәткеһенә тәрәнерәк үтеп инә.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йыш ҡына әҙәбиәт уҡытыусылары дәрес ситуацияларын аңлы рәүештә иҫәпкә алмай. Уҡыусы иғтибарын бер өлкәнән икенсеһенә күсереү тоҫмаллау аша ғына килеп сыға, логик бәйләнеш өҙөлөп ҡала. Әгәр ситуацияны төҙөлөш материалы, берәмек, күҙәнәк тип әйтәбеҙ икән, материалһыҙ төҙөргә ниәтләнгән объектты, күҙәнәкһеҙ организмды, берәмекһеҙ дәүмәлде күҙ алдына килтереп буламы? Тимәк, уҡыу ситуацияһына нигеҙләнмәгән дәрестең дә нисек килеп сығыуын күҙ алдына баҫтырыу ауыр түгел.

Ситуация бөтә дәрес һуҙымында уҡыусыларҙың иғтибарын бер ҡыҙыҡлы объекттан икенсеһенә күсерә барып, «дилбегәне» уҡытыусыға үҙ ҡулында ныҡлы тоторға, материалды төҙөк система буйынса бирергә, күҙҙең яуын алырлыҡ матур, төҫлө киҫәктәрҙән зауыҡлы «мозаика» төҙөргә ярҙам итә. Бәләкәйерәк синыфтарҙа, мәҫәлән, ситуациялар ни тиклем күберәк планлаштырылһа, дәрес шул хәтлем йәнле, мауыҡтырғыс үтәсәк. Тик һәр ситуацияға һалынған йөкмәтке тотош дәрес йөкмәткеәе рамкаһына һыйһын. Әгәр дәресте кәрәҙ тип күҙ алдына килтерһәк, ситуациялар унын бал менән



| | | |
|---|---|---|
| | Прогнозлау(күҙаллау)<br><br>Уҡыу, яһиллыҡ, наҙан, ғилем-һөнәр.<br>1) Шиғырҙы иғтибар менән уҡып сығығыҙ.<br>2)Һорауҙарға яуап бирегеҙ:<br>-Аҡмулла башҡорттарҙы ни өсөн уҡырға, белем алырға саҡыра?<br>-Белем-ғилемдең кешегә файҙаһы, ярҙамы нимәләрҙә күренә?<br>Проблемалы һорау:<br>“Суҡып ҡарға булмаҫһың, уҡып мулла булмаҫһың”.<br>Мәҡәлгә мәҡәл менән яуап бир. | Индивидуаль эш төрө.<br><br>Фекер алышыуҙа ҡатнашҡандар ике балл ҡуя.<br><br>Модулгә өҫтәлмәне ҡара.<br><br>Парлы эш |
| УЭ - 3 | Маҡсат: Әҫәрҙең бөгөнгө көн өсөн актуаль булыуын күрһәт.<br>1) Аҡмулла исеме нисек мәңгеләштерелгән?<br>2) Аҡмулла исемендәге премия лауреаттарын ата. | Модулгә өҫтәлмәне ҡара. |
| УЭ - 4 | Маҡсат: Тел-стиль үҙенсәлектәрен билдәлә.<br>- Шиғырҙан иҫке төрки телендә ҡулланылған һүҙҙәрҙе күсереп ал, мәғәнәләрен аңлат. Улар хәҙерге телдә ҡулланыламы? | Дәреслек менән эш.<br><br>Дәфтәрҙә эш.<br><br>Индивидуаль эш. |
| УЭ - 5 | Маҡсат: Материалды үҙләштереү кимәлен билдәләү. “Синквейн” алымы менән “белем” концепт асыу.<br>А. Теманы асыҡлаусы исем.<br>Б. Предметты баһалаусы ике сифат.<br>В. Предметҡа хас булған өс ҡылым. | Класс менән эш. |

| | | |
|---|---|---|
| УЭ - 1 | Маҡсат: М. Аҡмулланың биографияһын өйрәнеү.<br>“Инсерт” – тамғалы уҡыу.<br>М. Аҡмулла Миәкә районы Туҡһанбай ауылында тыуған. Үҙ аулында, Мәнәүезтамаҡта, Стәрлебаш, Троицк мәҙрәсәләрендә белем ала. Халыҡҡа тоғро күңелле булғаны һәм яҡтылыҡҡа – белемгә өндәгәне өсөн уны Аҡ мулла тип атайҙар. “Аһ, дәрифа”, “Борадәргә – Ағай-энегә”, “Аҡыл”, “Уяныу” белемгә эйә булырға өндәгән шиғырҙары.<br><br>Аналитик эш<br><br>Миңә билдәле: Тыуған йылы, урыны — Яңылыҡ: шиғырҙары<br><br>4) Дауам ит: Аҡмулла тура һүҙле, үткер...<br><br>5) Аҡмуллаға һәйкәл төҙө:<br>А--<br>ҡ--<br>м--<br>у--<br>л--<br>л--<br>а-- | Һеҙгә был мәғлүмәт билдәле булһа – “+”, яңылыҡ булһа – “–“ билдәһе ҡуйығыҙ.<br>Аналитик эште эшләгеҙ.<br><br>Индивидуаль эш төрө.<br><br>Һеҙҙең баһа: эшегеҙҙе модулгә өҫтәлмәгә ҡарап тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ. Дөрөҫ яуап ике балл.<br><br>Дөрөҫ яуаптар икешәр балл. |
| УЭ - 2 | Маҡсат: Шиғырҙа күтәрелгән проблемаларҙы асыҡларға. | Дәреслек менән эш |



тулы оялары булыр ине.

Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү проблемалары буйынса Салауат ҡалаһында үткәрелгән конференция барышында ҡаралған бер дәрес хәтерҙә ҡалған. Салауат педагогия училищеһының (ул саҡта колледж түгел ине әле) III курсы студенткаһы башланғыс синыфтарҙың береһендә үткәргәйне уны. Ҡырҡ минут эсендә егерменән ашыу ситуация тыуҙырҙы йәш уҡытыусы! Дәрестең төҙөклөгөнә, эмоционаллегенә, йөкмәткелелегенә, уҡытыусының үҙ маҡсатына ирешә алыуына ҡунаҡтарҙың барыһы ла хайран ҡалғайны. Бөтәһе лә: «Дәрес бына шулай булырға тейеш!» – тип баһа бирҙе. Уның нигеҙендә ситуациялар – күҙәнәктәр, берәмектәр ята ине.

Башҡорт дәүләт университетының 1917 йылға тиклемге башҡорт әҙәбиәте кафедраһында (был кафедрала «Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы» курсы һәм педпрактика ла алып барыла) бер йылда «Юғары синыфтарҙа әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыу ситуациялары» тигән темаға диплом эше яҡланғайны. Дипломсы программаға ингән әҫәрҙәрҙән конкрет миҫалдар нигеҙендә эпик, лирик, драматик төрҙәрҙе өйрәнгәндә дәрес ситуацияларын тыуҙырыу мәсьәләләрен тикшергәйне. Һәр дәрестә аңлы рәүештә ойошторолған 10-15-ләп ситуация менән эш итте. Эйе, ситуация – материалды үҙләштереүҙең этабы ғына түгел, ә шул этаптың да иң бәләкәй өлөшсәһе, күҙәнәге.

Аңлатылыу ысулы, тәьҫир көсө, үҙләштереү ауырлығы менән дәрестең ситуациялары бер-береһенән айырылырға тейеш. Ике тамсы һыу кеүек оҡшашлыҡ бер төрлөлөккә, төҫһеҙлөккә килтерә. Ул осраҡта дәрес берәмектәре ситуация ролен үтәмәй, ялҡытҡыс ҡабатлауҙарға әүерелә. Бигерәк тә урта кластарҙа бер төрлөлөктән ҡурҡырға кәрәк. V–VIII класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлеге теремеклекте, методик алымдарҙың һәм эш характерының төрлөлөгөн талап итә. Оҫта ойошторолған ситуациялар ошо осраҡта уҡытыусының алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы була ала.

---

*1. Уҡыу ситуацияһының төп маҡсаты нимәлә?*

*2. Уҡыу ситуацияһын икенсе төрлө «дәрестең иң бәләкәй берәмеге, күҙәнәге» тип атауҙың асылын аңлатып бирегеҙ.*

*3. Уҡыу ситуациялары дәрестең төп маҡсатына нисек хеҙмәт*

*итергә тейеш?*

**Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этаптары**

Уҡыусылар дәрестә төрлө жанрҙағы, ҙур һәм бәләкәй күләмдәге әҫәрҙәр менән осраша. Уларҙың ҡайһыларын өйрәнеү бер нисә сәғәткә һуҙылырға, күп осраҡта бер сәғәттән артмаҫҡа мөмкин. Дәрес барышы айырым «күҙәнәктәргә» бүленгән кеүек, әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү ҙә состав өлөштәрҙән – этаптарҙан тора. Һәр этап материалды үҙләштереүҙә мөһим урын биләй, бер-береһе менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Түбәндә урта һәм юғары кластар өсөн эпик әҫәрҙе өйрәнеү этаптарының өлгөләре килтерелә.

*V–VIII кластарҙа*:

I. Художестволы әҫәрҙе уҡыусыларҙың өйҙә үҙ аллы уҡыуы.

II. Инеш дәрестәр (әҫәрҙе өйрәнеүҙең инеш өлөшө).

III. Әҫәрҙең тексы өҫтөндә эш.

1. Класта әҫәрҙе тасуири уҡыу.
2. Йөкмәткеһен үҙләштереү.
3. Тексҡа анализ.

а) идея-проблематикаһын билдәләү;

б) геройҙарға характеристика биреү; образдар тураһында һүҙ йөрөтөү;

в) сюжетын, композицияһын асыҡлау, жанр үҙенсәлектәрен билдәләү;

г) тел-стиль, һүрәтләү сараларын күҙәтеү, поэтик образлылығын, художество үҙенсәлектәрен өйрәнеү, һүҙлек өҫтөндә эш.

4. Әҫәрҙе тасуири уҡыу йәки ятлау.
5. Әҙәбиәт теорияһына ҡағылышлы төшөнсәләрҙе өйрәнеү.

IV. Йомғаҡлау дәрестәре.

1. Әҙәби әҫәр буйынса материалды йомғаҡлау.
2. Уҡыусыларҙың бер дәрестәге белемен иҫәпкә алыу, баһалау.
3. Яҙма эштәр үткәреү.

*IX–XI кластарҙа*:

I. Үтелә торған осорҙоң әҙәби хәрәкәтенә характеристика.

II. Шул осорға ҡараған айырым яҙыусының ижад юлын күҙәтеү рәүешендә өйрәнеү.

III. Яҙыусының программаға ингән әҫәрен дәрестә өйрәнеү.

1. Әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу.



өҫтөнлөк биргәндәре лә, айырым предметтарҙы өйрәнеү үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотҡандары ла бар.

Әҙәбиәт дәрестәренә әйләнеп ҡайтып, яңынан иҫкә төшөрәйек. Уның төп өйрәнеү объекты – әҙәбиәт, билдәле бер дәүерҙең әҙәби процесы, яҙыусы ижады, конкрет әҙәби әҫәр, әҙәби-теоретик төшөнсәләр. Маҡсаты – уҡыусыларға нәфис әҙәбиәт аша донъяны танып белергә ярҙам итеү, уларҙы тәрбиәләү, күңелдәрендә эстетик зауыҡ уятыу, конкрет әҫәрҙең идея-проблематик мәғәнәһен аңларға, художестволы асылын күреп, һоҡлана, баһалай белергә өйрәтеү. Формаһы – традицион йәки яңылыҡлы методтар, алымдар, ситуациялар. Яңылыҡҡа мөрәжәғәт иткәндә, әлеге технологияларҙың дөйөм педагогик йүнәлештәгеләрен дә, әҙәбиәт дәресенә ярашлыларын да, башҡа предметтарға ҡағылышлыларын да “ярҙамға” саҡырырға мөмкин.

Тик бер мөһим шарт онотолорға тейеш түгел: дәрестең йөкмәткеһендә лә, формаһында ла уҡытыусының үҙенең шәхси ижади фекерләүе, яңылыҡлы эшмәкәрлеге өҫтөнлөк итһен. Ә был яңылыҡ быуаттар буйы формалашҡан традицион методика нигеҙенә ҡоролорға тейеш.

**Модуль технологияһы ярҙамында 7 класта М. Аҡмулланың “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” шиғырын өйрәнеү**

| №<br>Уҡыу элементы | Эш төрҙәре бирелгән уҡыу материалы. | Уҡыу материалын үҙләштереү буйынса етәкселек |
|---|---|---|
| УЭ - 0 | Маҡсат: Уҡыу элементының эш барышында:<br>1) М. Аҡмулланың мәғрифәтселек ҡараштарын өйрәнергә.<br>2) Әҫәрҙә күтәрелгән проблемаларҙы асыҡларға.<br>3) Әҫәрҙең бөгөнгө көн өсөн актуаль булыуын, тәрбиәүи әһәмиәтен күрһәтергә.<br>4) “Белем” концептын асырға. | Маҡсаттарҙы иғтибар менән уҡығыҙ. |

Д. Б. Эльконин – В. В. Давыдовтың үҫтереүсе уҡытыу технологияһы. Балаларҙың логик, теоретик фекерләүен үҫтереүгә йүнәлдерелгән. Мәктәптәге уҡыу предметтары менән генә сикләнмәйенсә, фекер, аҡыл хәрәкәте, логик операциялар һәләтлеген формалаштырыуға өҫтөнлөк бирелә. Балалар мәктәп йәшенә тиклем үк теоретик төшөнсәләрҙе аңлай ала, шуға күрә мәктәптә уҡыу материалының теоретик кимәлен күтәреү маҡсаты ҡуйыла.

*Шәхестең ижадилыҡ сифаттарын күтәреүгә йүнәлтелгән үҫтереүсе системалар* (И.П. Волков, Г.С. Альтшуллер, И.П. Иванов). Төп һыҙаттары: балаларҙың ижади һәләтлеген үҫтереүгә өҫтөнлөк биреү; үҙенде уҡытыусы күҙәтеүенән азат тойоп, иркле төркөмдәр менән эшләү; хеҙмәттәшлек педагогикаһы; уҡыусы менән уҡытыусының ижадташлығы нигеҙендәге коллектив эшмәкәрлек методикаһын ҡулланыу: мейе һөжүме, эшлекле уйындар; иркле ижади бәхәстәр һ.б.

*Шәхескә йүнәлтелгән үҫтереүсе уҡытыу* (И.С. Якиманская). Баланың шәхси танып-белеү һәләтлектәрен үҫтереү; шәхескә үҙен танып-белергә, үҙбилдәләшенә, үҙенең булмышын тормошҡа ашырырға ярҙам итеү маҡсаттарын күҙ уңында тотола.

*Үҙ-үҙеңде үҫтереүгә йүнәлтелгән уҡытыу-тәрбиә технологияһы* (Г.К. Селевко). Үҫтереүсе уҡытыу-тәрбиә технологияларының асылын тәшкил иткән барлыҡ сифаттарын үҙ эсенә ала һәм уларҙы мөһим үҙенсәлектәр менән байыта: үҙеңде раҫлау, үҙеңде күрһәтеү, үҙеңде яҡлай алыу, үҙеңде актуалләштереү һ.б. Төп маҡсаты – үҙ-үҙен камиллаштырыуға һәләтле шәхес формалаштырыу, бының өсөн уҡыу эшмәкәрлегенең шәхси стилен булдырыу.

9. *Авторлыҡ мәктәбе педагогик технологиялары:*

Еңелләштереү педагогикаһы мәктәбе (Е.А. Ямбург, Б.А. Бройде); “Рус мәктәбе” моделе (И. В. Гончаров, Л.Н Погодина); үҙбилдәләнеш авторлыҡ мәктәбе технологияһы (А.Н. Тубельский); мәктәп-парк (М.А. Балабан); агромәктәп (А.А. Католиков); Иртәнге көн мәктәбе (Д. Ховард)[1].

Күренеүенсә, беҙ юғарыла күҙ алдынан үткәргән технологиялар араһында ҡулланыу кимәле буйынса дөйөм педагогик йүнәлешкә

[1] Яңылыҡлы технологиялар тураһында ентекле мәғлүмәтте ҡарағыҙ: Селевко Г. К. Современные образовательные технологии. М.: Народное образование, 1998. – с. 39 – 250.



2. Инеш дәрес.

3. Әҫәргә текстуаль (өлөшләтә) анализ.

4. Айырым компоненттарын дөйөмләштереүсе анализ.

а) әҫәрҙең идея-проблематикаһы;

б) геройҙарға характеристика, образдар системаһы;

в) сюжеты һәм композиция; сюжет һыҙыҡтары, төп һәм ярҙамсы сюжет элементтары;

г) жанры, жанр формаһы;

д) тел-стиль, һүрәтләү саралары, поэтикаһы, художество үҙенсәлектәре;

е) әҫәр буйынса йомғаҡ;

Әҫәрҙең яҙыусы ижадында, әҙәби осорҙа тотҡан урынын билдәләү.

IV. Яҙыусының ижадын өйрәнеүҙе дауам итеү.

Әҫәрҙе өйрәнеү этаптарының юғары кластарҙағы ҡайһы бер айырмалыҡтары әҙәбиәтте тарихи-хронологик принципта уҡытыуға бәйләнгән. Йәғни, хронология буйынса ниндәйҙер быуат, осор тураһында һүҙ барғанда, тәүҙә осорҙоң үҙенә, унан һуң яҙыусы ижадының айырым этаптарына характеристика бирәбеҙ. Шунан һуң уның программала ҡаралған әҫәрҙәрен бер-бер артлы өйрәнәбеҙ. Мәҫәлән, XIX быуаттың икенсе яртыһы тураһында һүҙ бара, ти. Уҡыусылар шул дәүерҙең тарихи шарттары, әҙәбиәттәге төрлө ағымдар тураһында төшөнсә ала. Мәғрифәтселек әҙәбиәтенең асылы, этаптары, күренекле вәкилдәре тураһында белә. Унан һуң Мифтахетдин Аҡмулланың ижад юлы менән таныша, программаға ингән әҫәрҙәрен өйрәнә. Аҙаҡ дәүерҙең тағы бер вәкиле Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ижадына күсә. Артабан инде ошо уҡ тәртиптә киләһе дәүерҙе – XX быуат башы әҙәбиәтен үтә башлай.

Юғарыла бирелгән өлгөләр, алда әйтелгәнсә, эпик әҫәрҙе күҙ уңында тота, әммә төрлө жанр әҫәрҙәре өсөн дә яраҡлы. Драма төрөнә ҡараған жанрҙарҙы әйтеп тораһы ла юҡ. Шул уҡ ваҡытта лирик әҫәрҙәрҙең дә билдәле бер сюжетҡа нигеҙләнгәнен онотоорға ярамай. Сюжет, бер һүҙ менән әйткәндә, – әҫәрҙәге хәрәкәт. Эпик сюжет – хәл-ваҡиғалар хәрәкәте; ә лирик сюжет авторҙың, лирик геройҙың уй-фекерҙәр, хис-тойғолар хәрәкәте. Уның да башланғысы, төйөнләнеүе, үҫеше, иң юғары нөктәһе һәм тамамланышы була. Шиғырҙы өйрәнгәндә ошо хәрәкәт асылын тикшерһәк, беҙ был әҫәрҙең асылына, мәғәнәһенә тәрән үтеп инә алабыҙ. Ҡыҙғаныҫҡа

ҡаршы, мәктәптә йыш ҡына лирик әҫәр сюжеты урап үтелә, уның хаҡында һүҙ ҡуҙғатылмай.

Әҫәргә анализдың геройҙарға, персонаждарға характеристика биреү этабында образдар системаһы тураһында киңерәк һүҙ алып барырға мөмкин. Мәктәптә "образ" тигән һүҙ менән беҙ әҫәрҙәге геройҙарҙы ғына күҙ алдына килтерергә күнеккәнбеҙ: "ыңғай образдар", "кире образдар", "эске ҡаршылыҡлы образдар" һ.б. Ә уның мәғәнәһе бик киң, ябайыраҡ итеп әйткәндә – "күҙ алдына килтереү" тигән һүҙ. Яҙыусы үҙенең ижадында ысынбарлыҡты күҙ алдына килтереп, художестволы итеп бирә икән – тимәк, әҫәрҙәге бөтә нәмә лә образ, тигән һүҙ: хәл-ваҡиғалар, күренештәр, кисерештәр, пейзаж, образдары һ.б. Алда, анализдың элементтары хаҡында айырым-айырым һүҙ йөрөткәндә, был мәсьәләгә яңынан-әйләнеп ҡайтырға мөмкинлек булыр.

Әлбиттә, һәр осраҡта алда әйтелгәнсә, эпик әҫәрҙе күҙ уңында тота, әммә әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең бөтә этаптарын да энәһенән-ебенә тиклем үтәргә, һәр ваҡыт бер үк эҙмә-эҙлекте һаҡларға кәрәк, тигән һүҙ түгел. Ҡайһы әҫәрҙе ниндәй этаптан башлап алып китергә, ниндәй эҙмә-эҙлектә алып барырға, ҡайһы пункттарҙы төшөрөп ҡалдырырға, ҡайһыларына нығыраҡ әһәмиәт бирергә кәрәклеген, дәрес маҡсаттарынан сығып, уҡытыусы үҙе хәл итә. Әйтәйек, сюжет элементтары, композицион төҙөлөшө яғынан иғтибарға лайыҡ әҫәрҙәрҙең ошо һыҙаттарына нығыраҡ туҡталырға ла, аҙаҡ әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе шулар миҫалында аңлатырға була.

___________________

*1. Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этаптарының логик эҙмә-эҙлегенә иғтибар итегеҙ.*

*2. Әҙәби әҫәрҙәге өйрәнеү этаптарында ҡайһы эштәр дәрес ваҡытында, ҡайһылары кластан тыш башҡарылыуын асыҡлағыҙ.*

*3. Урта һәм юғары кластарҙа әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этаптарының айырмаһы нимәгә нигеҙләнә?*

**Әҙәби әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу**

Әҙәби әҫәрҙең үҙен белмәй тороп, мәктәптә уның хаҡында бүтән сығанаҡтар буйынса һүҙ алып барыу, анализлау мөмкин түгел. Был хаҡта методист-ғалимдар үткән быуаттарҙа уҡ ентекле хәстәрлек



Уҡыусының аралашыу аңын һәм фекрләүен формалаштыра, уны үҙ-үҙенә генә бикләнеүенән ҡотҡара.

*Диалектик берәмектәрҙе эреләтеү* (Г.М. Эрдниев). Математикала йышыраҡ ҡулланыла. Үҙ-ара бәйләнешле ғәмәлдәрҙе (функцияларҙы, теоремаларҙы һ.б) бер юлы, бергә өйрәнеү.

*Аҡыл эшмәкәрлеген этаптар буйынса формалаштырыуҙы тормошка ашырыу технологияһы* (М. Б. Волович). Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген материалды үҙләштереүҙең айырым этабына тап килерлек итеп ойоштороу.

5. А й ы р ы м п р е д м е т т а р ҙ ы ң п е д а г о г и к т е х н о л о г и я л а р ы. Был төркөмдөң исеме үк күрһәтеүенсә, төрлө предметтар һәм төрлө йәштәге уҡыусылар менән эш итеү тураһында һүҙ бара: уҡыу-яҙыуға иртә йәштән һәм тығыҙландырып өйрәтеү (Н.А. Зайцев); башланғыс мәктәптә уҡыу-уҡытыуҙың дөйөм һөҙөмтәләрен камиллаштырыу (В.Н. Зайцев); математиканы мәсьәләләр сисеү нигеҙендә өйрәтеү (Р.Г. Хазанкин), йоғонтоло дәрестәр системаһы (А.А. Окунев); физиканы өлөшләп өйрәнеү системаһы (Н.Н. Палтышев) технологиялары.

6. А л ь т е р н а т и в т е х н о л о г и я л а р: Вальдорф педагогикаһы (Германиялағы төбәк исеменән алынған – Ш. Штейнер); азат хеҙмәт (С. Френе), ихтималлыҡлы белем биреү (А.М. Лобок), оҫтаханалар (Франция уҡытыусылары төркөмө) технологиялары.

7. Т ә б и ғ и л е к з а к о н л ы к т а р ы н а я р а ш л ы т е х н о л о г и я л а р: грамоталыҡты тәбиғи законлыҡтарға ярашлы тәрбиәләү (А.М. Кушнир); үҙ-үҙенде үҫтереү технологияһы (М. Монтессори).

8. Ү ҫ т е р е ү с е т е х н о л о г и я л а р. Төп башланғысы К.Д. Ушинский (1824 – 1870/71), Л. С. Выготский (1896 – 1934) идеяларынан уҡ килә. Уҡытыу-өйрәтеү – баланың психологик үҫешен хәрәкәткә килтереүсе төп көс, тип һанала. Был технология артабан бер төркөм ғалимдар тарафынан төрлө йүнәлештә дауам иттерелә.

*Л. Н. Занковтың үҫтереүсе уҡытыу системаһы*. Баланы иртә йәштән төрлө яҡлап һөҙөмтәле үҫә барған шәхес итеп тәрбиәләүҙең дидактик принциптарын бирә; уны эшмәкәрлектең төрлө өлкәләренә йәлеп итеү, уҡыу-уҡытыуҙа дидактик уйындар, бәхәстәр файҙаланыу, буласаҡ шәхестең донъяны күҙаллауын, фекерләүен, хәтерен, телмәрен байытыусы методтар тәҡдим ителә.

дифференцацияһы (И.Н. Закатова). Уҡытыу-тәрбиә барышында гуманитар мәҙәниәттең бөтә йүнәлештәре лә ҡатнаша. Улар араһынан уҡыусы үҙенең күңеленә яткан йүнәлеште һайлап ала; юғары гуманитар мәҙәниәтле кешене формалаштырыуға йүнәлтелә.

*Уҡытыу-тәрбиәне шәхсиләштереү технологияһы* (Унт Инге, А.С Границная, В.Д. Шадриков) уҡыусыларҙың һәләтлелек кимәлен иҫәпкә алып, уларҙың үҙ аллы эшмәкәрлегенә төп иғтибар бирә.

*Программалап өйрәтеү технологияһы* (В. П. Беспалько). Уҡыу материалы өйрәтеүле техник сара ярҙамында (ЭВН, компьютер) тормошҡа ашырыла; программаланған уҡыу материалы логик эҙмә-эҙлектә бәләкәй өлөштәргә бүленгән (“кадр”, “файл”, “аҙым”) мәғлүмәт рәүешендә бирә.

*Күмәкләп (коллектив) өйрәнеү ысулы* (А. Г. Ривин, В. К. Дьяченко). Динамик парҙарҙың бер-береһен өйрәтеүе, үҙ-ара аралашыуы ярҙамында башҡарыла. Шәхси, парлы, төркөмлө һәм коллектив өйрәнеүҙе үҙ эсенә ала.

Төркөмдәр технологияһы (В.К Дьяченко). Күмәкләп өйрәнеүҙең төрлө варианттары араһынан төркөмдәр аралашыуына өҫтөнлөк бирелә. Конкрет эште башҡарғанда, класс төркөмдәргә бүленә.

*Компьютер (яңы информацион) технологиялары.* Махсус техник мәғлүмәт саралары (ЭВМ, аудио, кино, видео) ҡулланып өйрәтеүҙе информацион (мәғлүмәти) технологиялар тип йөрөтәләр. Һуңғы ваҡытта компьютер барыһынан да йышыраҡ ҡулланылғанға күрә, был осраҡтағы технология шулай тип атала.

4. Материалды дидактик камиллаштырыуға һәм яңыртыуға нигеҙләнгән педагогик технологиялар.

*“Экология һәм диалектика”* (Л. В. Тарасов). Төп үҙенсәлеге – белем биреүҙең йөкмәткеһен кешелеклелек диалектик үҫеш һәм бер бөтөнгә берләштереү (интеграция) йүнәлешендә үҙгәртеп ҡороу. Юғары кластарҙа профилле уҡыуға күсеүгә, етди профессиональ әҙерлеккә йүнәлеш тотола. “Экология” һүҙе был осраҡта уҡытыу-тәрбиә процессының реаль тормошҡа “диалектика” – мәктәптең диалектик үҫтерелеше, ихтималлыҡлы фекерләүгә йүнәлтелеүен аңлата.

*“Мәҙәниәттәр диалогы”* (В. С. Библер,С. Ю. Курганов). Был диалог – өйрәтеү сараһы ғына түгел, ә технологияның асылын, маҡсатын, йөкмәткеһен билдәләүсе сара булараҡ сығыш яһай.



күргән. Уҡыу – “теоретик белемдең һәм практик күнекмәләрҙең нигеҙе”, – тип яҙып ҡалдырған Ф.И.Буслаев. – бөтә халыҡтарҙа ла һүҙ сәнғәте иң матур өлгөләрҙе өйрәнеү нигеҙендә тыуған кеүек, һәр бер уҡыусы ла теорияға үҙ аллы уҡыу аша инергә тейеш (18, 23, 24). XX быуаттың 70-се йылдарынан әҙәбиәт укытыу методикаһы ғилемендә әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙе уның менән өйҙә үҙ аллы танышыуҙан башларға, тигән тенденция нығынып килә. Был тенденция буйынса, әҫәр класта өйрәнелгәнсә тиклем үк тулыһынса үҙ аллы уҡылырға тейеш, тигән талап ҡуйыла. Уның түбәндәге отошло яҡтары билдәләнә:

1. Уҡыусының әҫәр менән танышыуҙан алған эмоциональ тәьҫире уның яҙылыу тарихы, авторы, геройҙары тураһында уйланыуҙарға килтерә, ҡыҙыҡһыныу уята, инеш дәресте юғары кимәлдә үткәрергә уңайлы шарттар тыуҙыра.

2. Әҫәрҙең йөкмәткеһен белгән уҡыусыла уның тураһында һөйләшергә, бәхәсләшергә ынтылыш тыуа, анализға ихтыяж барлыҡҡа килә.

3. Даими рәүештә уҡып барған балала әҙәби әҫәргә әүәҫлек уяна; ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, әҙәбиәткә тартыла, программаға инмәгән әҫәрҙәрҙе лә уҡый һәм уларҙы үҙ аллы баһалай башлай.

4. Уҡытыусы ҡыҫҡа ғына әңгәмә ярҙамында әҫәр йөкмәткеһен ҡайһы уҡыусының нисек аңлағанын тикшерә ала, артабан инеш дәресте һәм әҫәр тексы өҫтөндә эште ошо әңгәмә һөҙөмтәләренә таянып ойоштора.

Үҙ аллы уҡыу үҙ ағышы менән генә бармаһын өсөн, уҡытыусы уға йүнәлеш бирә. Беренсенән, программа буйынса өйрәнелеү ваҡытынан сығып, әҫәрҙәрҙең ҡайһыларын ҡасан уҡырға кәрәклеген алдан билдәләй. Әҙәбиәт уҡытыусыһының август айында уҡ төҙөлөргә тейешле йыллыҡ календарь планында төрлө кластарҙың үҙ аллы уҡыу графигы ла урын алырға тейеш. Бәләкәй күләмле текстарҙы бер-ике көн алдан, ҙурыраҡ хикәйәләрҙе, поэмаларҙы яҡынса бер аҙна, повестарҙы, романдарҙы, күләменә ҡарап, сама менән 15-20 көн, бер ай тирәһе алдан уҡырға бирергә кәрәк. Икенсенән, һәр бер әҫәргә ҡарата уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын йүнәлдерерлек һорауҙар тәҡдим итә. Үҙ аллы уҡыу өсөн алдан бирелгән был һорауҙар дәрестә әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү этабында йәки анализ ваҡытында ҡулланылған әңгәмә һорауҙарынан айырыла – әҫәрҙең художество үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлә

һәм уны уҡыр өсөн ҡыҙыҡһыныу уятыуға йүнәлтелә. Мәҫәлән, З. Биишеваның «Сәйер кеше» повесын өйҙә үҙ аллы уҡыу өсөн бирелгән һорауҙар түбәндәгесә булырға мөмкин:

1. *Ғәҙел менән Ғәлиәкбәр мәктәптә нисек уҡығандар?*
2. *Уларҙың ҡайһыһы һеҙгә ныҙыраҡ оҡшай?*

*3.Һеҙ Ғәҙел менән Ғәлиәкбәрҙең ниндәй ыңғай сифаттарын һәм кире яҡтарын күрер инегеҙ?*

Ошондай уҡ еңелсә һорауҙар ярҙамында уҡыусыларҙың әҫәрҙе аңлау кимәлен асыҡлағас, уны өйрәнеүҙең икенсе этабы – инеш дәрестәр башлана.

_____________________

*1.Әҙәби әҫәрҙе класта өйрәнеүҙән алда өйҙә уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы ниндәй маҡсатҡа йүнәлтелгән?*

*2.Өйҙә әҫәрҙе үҙ аллы уҡыуҙың отошло яҡтарын айырып күрһәтегеҙ.*

*3.Әҙәби әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу эштәренә иғтибар итегеҙ.*

* * *

**Әҙәби әҫәрҙе класта өйрәнеүҙән алда өйҙә үҙ аллы уҡыуҙы ойоштороу өсөн һорауҙар өлгөләре.**

**Зәйнәб Биишева, «Башҡорт теле» шиғыры**

1. Шиғырҙа ниндәй ваҡыт урын алған? Беҙ быны ниндәй юлдарҙан күрә алабыҙ?
2. Күпте күргән сәсән һәм башҡорт теле. Был төшөнсәләрҙә ниндәй уртаҡлыҡ бар икән?
3. Зәйнәб Биишеваның «Башҡорт теле» шиғыры башҡа телдәргә арналған шиғырҙарҙан ниндәй яғы менән айырылып тора?

**Ғ. Сәләм, «Шоңҡар» поэмаһы**

1. «Шоңҡар» поэмаһында агроном ниндәй әкиәтте һөйләй?



шәхес” технологияһы.

*Н. Ильин системаһы:* әҙәбиәт дәрестәрен кешене формалаштырыусы предмет итеп уҡытыу.

2. Уҡыусы эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә һәм көсәйтеүгә нигеҙләнгән педагогик технологиялар.

*Уйын технологиялары* (үҫтереүсе уйындар; эшлекле уйындар; башланғыс, урта, юғары кластарҙағы уйындар технологиялары – Б.П Баев, Д.Б. Эльконин һ.б.).

*Проблемалы уҡытыу.* Америка философы, психологы һәм педагогы Дж. Дьюи (1859 – 1952) 1894 йылда Чикаго ҡалаһында нигеҙләнгән тәжрибә мәктәбенең теоретик положениеларына таяна. Уҡыу материалы проблемалаштырып, проблемалы педагогик һәм психологик ситуациялар тыуҙырып бирелә.

*Е.И. Пассовтың* сит телдәр мәҙәниәтенә коммуникатив өйрәтеү технологияһы. Өйрәтелә торған телдә тығыҙ аралашыуҙы күҙ уңында тота.

*Ф.И. Шаталовтың* уҡыу материалын тамғалар һәм схемалар модулдәре нигеҙендә интенсив үҙләштереү технологияһы. Материалды эре берәмектәрҙә блоклап өйрәнеү, терәк сигналдар, конспкттар төҙөү тәҡдим ителә.

3. Уҡыу процесын ойоштороу һәм идара итеүҙең һөҙөмтәлелегенә нигеҙләнгән педогогик технологиялар.

*С.И. Лысенкова технологияһы.* Аңлатмалы эшмәкәрлектә терәк схемаларын ҡулланып, алға әйҙәүгә йүнәлгән өйрәтеү. Уҡытыусы менән берлектәге эшмәкәрлеккә уҡыусы аңлатма биреп бара: уйлайым, әйтәм, яҙам. Төрлө кимәлдәге балалар менән өҫтәлмә дәресһеҙ, ата-әсәләр ярҙамыһыҙ бер юлы эшләү мәсьәләһен хәл итә.

*Кимәлдәр дифференцацияһы технологияһы* (Гроот Р., Лошнова О. Б., Селевко Г.К., Унт Инге һ.б.). Уҡыусылар контингентының һәләтлелек үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, төрлө мәктәптәргә, кластарға, төркөмдәргә бүлеп, төрлө шарттар тыуҙырып өйрәтеү.

*Мотлаҡ һөҙөмтәләргә ирешеүгә нигеҙләнгән* кимәлдәр дифференцацияһы (В.В. Фирсов). Уҡыу процессы һөҙөмтәләрен күҙәтеү системаһы менән уҡыусыларҙың уңыштарын баһалау системаһының берлегенә өҫтөнлөк бирелә.

*Балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы буйынса* мәҙәни тәрбиә биреү

барыбер кемдеңдер алдараҡ һалған асыштарына таяна, уларҙы йыш-йыш ҡулланып, уҡыу-уҡытыуҙың яңылыҡлы технологияларын традиционға әйләндерә бара. Әйтәйек, “дәрес-сәйәхәт”, “дәрес-экскурсия”, “дәрес-йыйын”, “дәрес-аукцион”, “дәрес-хөкөм” тибындағы тиҫтәләгән формаларҙы хәҙер күп уҡытыусылар ҡуллана. Был да яҙыҡ түгел, яңы форма тирәһендә уйланып, йөкмәткене онотмаһалар, улар ҙа дәрескә үҙҙәренә күрә яңылыҡ алып инә. Шулай эҙләнә торғас, ҡасан да булһа барыбер үҙенең генә берәй яңылығын килтереп сығара алыр. Әгәр ҙә әлеге “асыл” һәм “сер” ижади эшмәкәрлеккә тотонған уҡытыусының күҙ алдында ап-асыҡ маҡсат булып торһа!

Бөгөнгө көндә яңылыҡҡа ихлас тотонған уҡытыусының бығаса бер кем тарафынан да тормошҡа ашырылмаған үҙенең генә өр-яңы ижади дәресенең, йәйғор кеүек ике таянысы булырға тейеш. Береһе – традицион методика асҡан законлыҡтар, икенсеһе – илебеҙгә XX быуаттың икенсе яртыһынан алып фәнни һәм практик яҡтан эшләнә килгән яңы педагогик технологияларҙың төп принциптары. Уларҙың барыһының да нигеҙендә өс төрлө яңылыҡ: теория, практика һәм хәрәкәт яҫылыҡтары – фәнни материал менән ҡоралланыу; эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыусы маҡсат, йөкмәтке, метод һәм алымдар ҡулланыуға аңлы рәүештә ирешеү; эш барышында ҡулланыу.

Хәҙер инде донъя һәм ил кимәлендә уҡыу йорттары өсөн эшләнелгән күп төрлө, күп яҡлы яңылыҡлы педогогик технологиялар билдәле. Киң таралғандарын иҫкә төшөрөп, күҙ алдынан үткәрәйек. Һәр береһенә ентекле туҡталып тороу кәрәкмәйҙер. Үҙҙәре хаҡында исемдәре үк ап-асыҡ һөйләп тора.

1. Педагогик процестың шәхес тәрбиәләүгә йүнәлеш тотоуына нигеҙләнгән педагогик технологиялар.

*Хеҙмәттәшлек педагогикаһы.* Уның дөйөмләштерелгән тәжрибәһе рус (К.Д. Ушинский, Н.П. Пирогов, Л.Н. Толстой) һәм сит илдәр (Ж.-Ж. Руссо, Я. Корчак, К.Д. Роджерс, Э. Берн) психологик-педагогик практикаһына һәм фәненә, шулай уҡ илебеҙҙә XX эсендә барлыҡҡа килгән Н.К. Крупская, А.С. Макаренко, С.Т. Шанкий, В. А. Сухомлинский мәктәптәренең иң яҡшы традицияларына таяна.

*Ш.А. Амонашвилиның* башланғыс кластарҙа математика һәм тел дәрестәрендә балаға белем биреүҙә “Тормош мәктәбе”, “Кешелекле



2. Әхмәт менән Гөлнурҙың бергә булыуҙарына нимә ҡамасаулай?
3. «Шоңҡар» поэмаһында Ағиҙелдең һүрәтләнеүе ниндәй мәғәнәгә эйә?

**Р. Фәхретдинов, «Сәлимә, йәки ғиффәт»повесы**

1. Ни өсөн әҫәр исеме Сәлимәнең исеме менән аталған?
2. Сәлимә менән шәкерт ниндәй мөнәсәбәттә?
3. Улар сәйәхәт ваҡытында ниндәй ҡалаларҙы үтәләр?
4. Һамар ҡалаһында улар кемде осрата?

**Һ. Дәүләтшина, «Айбикә» повесы**

1. Юлдыбай һуғыштан ҡайтты тигән һөйөнсөнө Айбикәләргә кем килеп әйтә?
2. Айбикәләр ғаиләлә нисә бала була?
3. Айбикәне йыйылышҡа барырға тәү башлап кемдәр саҡыра?
4. Юлдыбайҙың икенсе ҡатыны Рәйсә уға ниндәй исем ҡуша?

## Инеш дәрестәр

Һәр яңы әҙәби әҫәр – уҡыусы өсөн яңы донья ул. Шул донъяла уны яңы осрашыуҙар, кисерештәр, тулҡынланыуҙар көтә. Әммә художестволы сағылдырылған донъяны уҡыусыларҙың төрлөсә күреүе ихтимал: серле тәрәнлегенә ниндәйҙер кимәлдә үтеп инә алып һоҡланырға ла, бер матурлығын да тапмай вайымһыҙ урап сығырға ла мөмкин. Был яңы донъяны ҡайһылай күреү уның менән осрашыуға нисек әҙерләнеүгә бәйләнгән. Инеш дәрестәр ошо әҙерлек вазифаһын үтәй ҙә инде. Шуға күрә лә улар һәр әҫәрҙе өйрәнгәндә кәрәк. Инеш дәрестәрҙең күләме, әҫәрҙең йөкмәткеһенә ҡарап, төрлөсә була. Урта кластарҙа 5–15 минут тирәһе, юғары кластарҙа – 10–20 минут. Бик һирәк осраҡта ғына ярты сәғәткә етергә мөмкин*.

* “Инеш д□рест□р”, “йом□а□лау д□рест□ре” тиг□н □□□□□р □□□биҽт у□ытыу методика□ы ф□нендҽ терминҽа □йл□неп китк□н. “D□рес” тип атал□алар □а, улар, □лбитт□, ва□ыт я□ынан тотош д□ресте т□гел, уны□ инеш й□ки йом□а□лау □л□ш□н ген□ к□□ у□ында тота.

Инеш дәрестәрҙең төп маҡсаты – уҡыусыларҙың иғтибарын яңы темаға көйләү, алда үтеләсәк яңы әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Йыш ҡына әҙәби әҫәрҙең үҙен аңлау өсөн өҫтәлмә материалдарҙы – уның яҙылыу дәүерендәге һәм йөкмәткеһендә сағылдырылған осорҙағы тарихи шарттарҙы, яҙыусының тормош юлын, уй-ҡараштарын, әҙәби процесты белергә кәрәк. Урта кластар уҡыусыһында бындай белем, әлбиттә, самалы. Инеш дәрестәрҙә, ғәҙәттә, ошо тәңгәлдә һүҙ бара; традицион методика шуны талап итә. Ҡайһы бер ҡатмарлы күренештәр хаҡында балалар ябайлаштырылған рәүештә, аңлайышлы формала төшөнсә ала. Ә инештең төп маҡсатын күҙ уңында тотҡанда, һис тә ошо эш төрҙәре менән генә сикләнергә ярамай. Был осраҡта уҡытыусының ижади эшмәкәрлеге өсөн ифрат ҙур мөмкинлектәр асыла. Өйрәнелгән әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн һис көтөлмәгән өлкәләргә мөрәжәғәт итергә, бай уйҙырмалы эш төрҙәре уйлап табырға, ғәжәп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерергә мөмкин.

Инеш дәрестәрҙең төрҙәрен ғилми-методик әҙәбиәттә төрлө принциптан сығып классификациялайҙар. Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең был мөһим этабында, нигеҙҙә, уның авторы һәм яҙылыу тарихы хаҡында һүҙ барырға тейешлеген күҙ уңында тотҡанда, традицион методикала инеш дәрестәрҙе әҫәр йөкмәткеһе буйынса төркөмләүгә алдынлыҡ бирелә. Тимәк, йөкмәткеһенең характерына ҡарап, улар өс төргә бүленә.

1. Т а р и х и б е л е ш м ә – әҫәрҙә авторҙың үҙе йәшәгән дәүер һүрәтләгән осраҡта ҡулланыла. Бындай төр инеш дәрестә уҡытыусы бер юлы яҙыусының үҙе, йәшәгән дәүере, әҫәренең яҙылыу тарихы тураһында белешмәләр бирә ала. Һөйләшеү мөмкин тиклем уҡыусыларҙың элек алған белеменә таянып ойошторола. Мәҫәлән, Д. Юлтыйҙың «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһенә инеште ошондайыраҡ юл менән үткәреп булыр ине:

а) Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы тураһында ҡыҫҡаса әңгәмә. Ул эмоциональ тонда бара; балалар тормошона бәйле сәнғәт әҫәрҙәрен йәлеп итергә була.

б) Д. Юлтыйҙың үҙенең бала сағы, үҫмер дәүере тураһында бер нисә һүҙ. (Ул 1893 йылғы. Тимәк, 12 йәшендә Беренсе рус революцияһы ваҡиғаларын күргән, үҫмер сағы ҡара реакция йылдарына тура килгән).



быуаттың икенсе яртыһынан алып – яңы сараларҙың күренә башлауы уҡыу-уҡытыу процесындағы яңыса үҙгәрештәргә, эҙләнеүҙәргә, ижадилыҡҡа, быға саҡлы ҡулланылмаған технологияларға мөрәжәғәт итә башлау менән тап килә. Америка Ҡушма Штаттарының, Көнбайыш Европаның белем усаҡтарына яңылыҡҡа тап шул ваҡыттарҙа – XIX аҙаҡтарында тәүге аҙымдар яһала. Беҙҙең илдә иһә, әйөткәнебеҙсә, был шауҡым байтаҡҡа һуңлабыраҡ – XX быуаттың икенсе яртыһында, атап әйткәндә – 60 – 80-се йылдарында килеп инә. Тормош көнкүрештең төрлө тармаҡтарына техник прогрестың йылдам үтеп инеүе менән бергә мәктәптә, махсус һәм юғары уҡыу йорттарында белем биреү сығанаҡтары ла байыны. Хәҙерге заманда был сараларҙы ҡулланыу мөмкинлеге йәшен тиҙлегендә киңәйә, төрлөләнә бара, тиһәк тә ярай. Уларға уҡытыусының ниндәй мөнәсәбәттә булыуы, ниндәй кимәлдә ҡатнаша алыуы, нисек ҡулланыуы – икенсе мәсьәлә.

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәренә килгәндә, яңылыҡлы эшмәкәрлеккә ынтылыштар саҡ тарала башлаған ваҡытта беҙҙең уҡытыусыларыбыҙҙың эҙләнеүҙәре йыш ҡына яңылышыраҡ юлда булды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу мәсьәләләре буйынса республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә үткәрелгән ғилми-ғәмәли конференцияларҙа ҡаралған асыҡ дәрестәрҙә, хатта һирәкләп “Йыл уҡытыусыһы” конкурстарында ла тәүҙәрәк шундай күренештәргә шаһит була инек: дәрестең темаһы, маҡсаты иғлан ителә, яҙыусының өйрәнелә торған әҫәре таҡтаға яҙылып ҡуйыла; артабан 45 минуттың күпселек өлөшө йыр, бейеү, ҡурай һәм башҡа төрлө күңелле саралар менән үтә. Быға саҡ күрелмәгән яңылыҡ; дәрестең үткәне һиҙелмәй. Ә әҫәр ситтә ятып ҡала: уның хаҡында һирәк-һаяҡ ҡына телгә алына, йә ул бөтөнләй онотола.

Ваҡыттар үтеү менән, бындай етешһеҙлектәр әкренләп бөтөрөлә барҙы. Уҡытыусылар, бер-береһенең тәжрибәһенә күҙ һала торғас, ысын мәғәнәһендәге ижади дәрестәрҙең асылына төшөнөп, серҙәренә үтеп инә башланы.

Ижадилыҡтың мөмкинлектәре сикһеҙ. Бөтә күңелен биреп, ваҡытты йәлләмәй, ихлас тотонған, ныҡышмалы эҙләнгән уҡытыусы хатта бер генә дәрестә лә методик саралар, алымдар өлкәһендә ҡабатланмаҫ асыштар яһап, үҙенең һөнәрҙәштәре өсөн өр-яңы юл күрһәтә алыр ине. Яңылыҡлы технологияларҙың асылына төшөнөп, серҙәренә үтеп инә барһаҡ та, беҙҙең ижади тигән дәрестәребеҙ әлегә

| | |
|---|---|
| – Р. Фәхретдиндең ҡайһы әҫәре һеҙгә оҡшаны?<br><br>– Эйе, уҡыусылар, Р. Фәхретдиндең тормошо, эшмәкәрлеге – үҙе бер мәктәп. Уның һәр бер эше, әҫәре бөгөнгө көндә лә актуаль. Улар беҙгә аҫыл ҡомартҡы. | |

Дәрескә йомғаҡ, яуаптарҙы баһалау.

## Белем биреүҙең хәҙерге заман технологиялары һәм яңылыҡлы дәрестәр хаҡында

Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы фәненең өйрәнелеү тарихын иҫкә төшөрһәк, әҙәби әҫәрҙе ҡабул итеүгә, уның матурлығын күрә белергә, эстетик зауыҡ алырға өйрәтеүсе айырым фекерҙәр боронғо һәм урта быуаттарҙан уҡ әйтелә килгән. Был рус һәм төрки халыҡтары һүҙ сәнғәтенә берҙәй ҡағыла. Тәүҙәрәк – һүҙ оҫталары үҙҙәре, аҙағыраҡ – төрлө өлкәләргә маһир ғалимдар, яңыраҡ дәүерҙә – әҙәбиәт уҡытыу методикаһы белгестәре ошо фәндең формалашыуына берәмләп, өлөшләп нигеҙ ташы һалғандар. Һөҙөмтәлә, классик, традицион методиканың тотороҡло тәғлимәте барлыҡҡа килгән, уның законлыҡтары формалашҡан. Тотороҡло, - сөнки ул уҡыу йорттарында ныҡлы тамыр йәйеп, бөгөнгө көндә лә йәшәүен дауам итә. Илебеҙ мәктәптәренә уҡытыусының ижади эшмәкәрлеге, яңы технологиялар, яңылыҡлы дәрестәр асылда XX быуаттың икенсе яртыһында ғына килеп инде.

Традицион методиканың оҙон ғүмерлелегенең сәбәптәре нимәлә һуң? Әлбиттә, беренсенән – быуаттар буйы туплана килгән инҡар иткеһеҙ тәжрибә. Өҫтәүенә – уҡыусыға белем биреүҙең төп сараларының бик оҙайлы ваҡыт сикләнгән булыуы; уның, нигеҙҙә, белем биреүсе субъектҡа, уның телмәренә (һорау – яуап, әңгәмә ....) ҡайтып ҡалыуы. Кешелек тарихының һуңғараҡ дәүерендә – XIX



в) Әҫәрҙең үҙенә яҡын килеү. Уның яҙылыу тарихы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт.

2. Т а р и х и һ ә м с о ц и а л ь - к ө н к ү р е ш ш а р т т а р ғ а а ң л а т м а – әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар автор йәшәгән дәүерҙән элеккерәк ваҡытты сағылдырғанда ҡулланыу өсөн уңайлы. Был осраҡта инеш дәрес ике өлөшкә бүленә. Тәүҙә автор йәшәгән дәүерҙең, аҙаҡ, шуға бәйле рәүештә, әҫәрҙә сағылдырылған ваҡыттың тарихи һәм социаль-көнкүреш шарттарына ҡыҫҡаса аңлатма бирелә. «Ҡарлуғас»» драмаһына инеш дәрестә тәүҙә Баязит Бикбайҙың йәшлек йылдары 20-се йылдар аҙағының ҡатмарлы шарттарына тура килеүен иҫкә төшөрөп, яҙыусының иҫтәлектәренән ошо ваҡыттағы сағылдырған биттәрен файҙаланырға була. Ә унан һуң, Башҡортостандың XVIII быуаттағы социаль-тарихи шарттары, эре ихтилалдар, уларға әҙерлек тураһында һүҙ алып барырға мөмкин. Тик тарихи һәм социаль-көнкүреш шарттарға аңлатма биргәндә, инеште тарих дәресенә әйләндереп ебәреүҙән һаҡ булырға кәрәк. Әҙәбиәт дәресенең сәнғәтсә матурлығы, тәьҫирлеге һәм йәнлелеге уҡытыусының күҙ уңынан сығырға тейеш түгел.

3. Б и о г р а ф и к х и к ә й ә л ә ү – өйрәнелә торған әҫәр автобиографик характерҙа булғанда ҡулланыу өсөн тәҡдим ителә. Инеш дәрестең был төрөндә яҙыусының тормош юлынан үтеләсәк әҫәренә ҡағылышлы эпизодтарға нығыраҡ туҡталыу маҡсатҡа ярашлы. «Шағирҙың алтын приискыһында» повесына, “Ҡан” романына арналған инеш дәрестәрҙә Д.Юлтыйҙың беренсе донъя һуғышында ҡатнашыуына, Ғафуриҙың быуат башында Рәмиевтар приискыларына барып эләгеүенә туҡталмау мөмкин түгел. Яҙыусы тормошо тураһындағы мауыҡтырғыс әңгәмәнән һуң автобиографик әҫәрҙең үҙенә күсеү, ғәҙәттә, һиҙелмәй ҙә ҡала; инеш дәрес менән артабанғы этап араһында бәйләнеш нығыраҡ була.

Инештә автор тураһында мотлаҡ һүҙ булырға тейеш, тип аңларға ярамай. Урта кластарҙа бер үк шағир йәки прозаик менән бер нисәшәр тапҡыр осрашырға тура килә. Шуларҙың һәр ҡайһыһында, әҫәрҙең үҙен өйрәнеү алдынан, яҙыусы биографияһы буйынса хронорлогик таблица төҙөтә башлаһаҡ, был эш инештең маҡсатын үтәмәҫ, әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятмаҫ ине. Шуға күрә, урта һәм юғары кластарҙа автор биографияһына төрлөсә мөрәжәғәт итергә кәрәк:

а) өйрәнеләсәк әҫәргә ҡағылышлы өлөшөн йәлеп итеү;

б) маҡсатҡа ярашлы булғанда, тормош юлына ҡыҫҡаса ғына туҡталыу;

в) әҙәбиәтте юғары кластарҙа тарихи-хронологик планда өйрәнгәндә - тулы биографияһын биреү.

Урта кластарҙа автор биографияһынан әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ мәғлүмәттәр таба алмағанда, уның тураһында һүҙ ҡуҙғатмайынса, бүтән сараларға мөрәжәғәт итергә кәрәк буласаҡ.

Инеш дәрестәрҙең күләме һәм йөкмәткеһе әҙәрҙең художество ҡиммәтенә, балаларҙың йәш үҙенсәлегенә, класс алдында ҡуйылған тәрбиәүи бурысҡа ҡарап билдәләнә. Традицион методикала инеш этапта түбәндәге методик алымдар киңерәк таралған. Иғтибар итһәгеҙ, уларҙың һәр ҡайһыһы уҡытыусының ижади эшмәкәрлегенә – инештең ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс ойошторолоуына киң мөмкинлектәр аса.

1. У ҡ ы т ы у с ы һ ү ҙ е. Киң мәғәнәгә эйә булған термин әңгәмәне йә һөйләүҙе, уҡыусыларҙан һорауҙы йә аңлатыуҙы ғына күҙ уңында тотмай, ә шул эшмәкәрлектәрҙең төрлөсә аралашып килеүен үҙ эсенә ала. Тимәк, уҡытыусы инеш этапҡа бирелгән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә эш ысулдарын ижади төрләндерә ала.

2. У ҡ ы у с ы л а р ҙ ы ң т ә ь ҫ и р е н ә ҡ о р о л ғ а н әңгәмә. Өйрәнеләсәк яҙыусының исемен балалар дәрестә, әлбиттә, тәүге тапҡыр ғына ишетмәй. Быға тиклем уның әҫәрҙәре менән үҙ аллы танышыуҙары, элекке дәрестәрҙә, башланғыс кластарҙа, хатта балалар баҡсаһында осрашыуҙары ихтимал. Уҡытыусы шуларҙы әңгәмә формаһында иҫкә төшөрөп, яҙыусының бүтән әҫәрҙәренән ҡасандыр кисерелгән тәьҫирҙәрҙе яңыртып, бөгөн үтеләсәгенә инеш рәүешендә файҙалана ала. Әңгәмәлә ике яҡ та ҡатнаша: уҡытыусы һорауҙар бирә, балалар яуап ҡайтара. Берәһенең яуабы тулы булмаһа, башҡалары өҫтәй. Ҡуйылған һорау бөтә класс ҡатнашлығында ла тулыһынса асыҡланмай ҡалһа, уҡытыусы үҙе өҫтәп, яуапты еренә еткереп ҡуя.

3. Ә ҫ ә р й ө к м ә т к е һ е н ә а у а з д а ш б у л ғ а н с ә н ғ ә т ә ҫ ә р ҙ ә р е н ҡ а р а у, н ә ф и с ф и л ь м д а р -ҙ ы и ҫ к ә т ө ш ө р ө ү. Күренеүенсә, был алым да хәтер тәьҫиренә таяна. Тик һүҙ бында бүтән авторҙар, сәнғәттең бүтән төрҙәре хаҡында бара. Өйрәнелә торған әҫәрҙең үҙе өсөн эшләнгән иллюстрацияларҙы инеш дәрестә һис тә ҡулланырға ярамай. Сөнки, алда әйтелгәнсә, инеш этаптағы һөйләшеү әҫәрҙең йөкмәткеһенә ҡағылырға тейеш түгел.



| | |
|---|---|
| | М. Аҡмулла үлеп ҡала. Шулай ҙа “Шура” журналында, “Аҫар” китабында Аҡмулланың шиғырҙары баҫтырыла, уның тураһында мәҡәләләр донъя күрә;<br>4) Аҡмулланың традицияһын дауам итеүселәр;<br><br>– “Нәсихәттәр” |
| –Бик дөрөҫ. Уҡыусылар, Р. Фәхретдиндең Аҡмулланың әҫәренә оҡшаған ҡайһы әҫәре бар?<br><br>–Уҡыусылар, Р. Фәхретдиндең нәсихәттәрендәге белем-тәрбиә проблемаһына нисек ҡарайһығыҙ? Нимәгә өйрәтә улар? Бөгөнгө көндә нәсихәттәр актуалме? | – Эйе, актуаль. Сөнки Р. Фәхретдиндең әҫәрҙәре тормошта йәшәргә, үҙ урыныңды табырға өйрәтә.<br><br>– (Яуаптар). |
| –Эйе, уҡыусылар, Р. Фәхретдиндең тормошо, ижады, эшмәкәрлеге – үҙе үк идеал тормош мәктәбе. Ә хәҙер дәрестең темаһына, эпиграфына, ҡобайырға әйләнеп ҡайтайыҡ.<br>–Теманы, эпиграфты, ҡобайырҙы нисек аңлайһығыҙ? (Экранда – портреттар). Был дәрес һеҙгә нимә бирҙе? Нимәгә төшөндөгөҙ? Һеҙҙә ниндәй фекерҙәр уятты? | – (Яуаптар.) |

| | |
|---|---|
| – Ә ни өсөн Сәлимә иран байҙарының ҡыҙы итеп алына? | ҡыҙҙары араһында ундай ҡыҙҙар һирәк булған. |
| – Повесты ниндәй псевдоним менән яҙа? | –Ғафил бин Ғабдулла. Ул үҙен алла ҡоло, ғәмһеҙлек улы тип һанай. |
| – Автор Сәлимәне нимә менән сағыштыра? | –Асылмаған сәскә менән. Сәлимә – оялсан, аҡыллы, белемле, бер нисә тел белгән ҡыҙ.<br>экранда – сәскә “Сәлимә Туташ кеше ҡулына теймәгән сәскә ине”. |
| | – Хаттар стилендә. |
| – Тимәк, Сәлимә образы аша автор үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарын сағылдыра. Ә хәҙер текстар менән эш. Алдығыҙҙа ике текст. Беренсе текст ҡайһы стилдә бирелгән? | – Публицистик.<br>(Уҡыусылар эшләй). |
| – Икенсе текст ҡайһы стилдә? | – Эйәрсән хәбәр һөйләм. |
| –Икенсе текстан һүрәтләү сараларын табырға. | |
| – Билдәләнгән һөйләмдең төрөн әйтергә:<br>Тәрбиәһе ниндәй – балаһы шундай. | 1) М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдин – өсөһө лә мәғрифәтселәр;<br>2) Улар 1894 йылда Өфөлә осрашалар; |
| – Хәҙер һеҙгә шундай һорау: М. Аҡмулла һәм М. Өмөтбаев менән Р. Фәхретдинде нимә бәйләй? | 3) Осрашыуҙа Р. Фәхретдин М. Аҡмулланың шиғырҙарын баҫтырып сығарырға вәғәҙә итә, әммә ләкин 1895 йылда |



Был алымды ижади ҡулланып, төрләләндереп, инеште ифрат мауыҡтырғыс итеп ҡороп була. “Төрләләндереп” тигәнебеҙ – сәнғәттең бүтән төрҙәрен киңерәк йәлеп итеп, өйрәнеләсәк әҫәргә бәйләү өсөн ҡулайлыраҡ осраҡтарҙы эҙләп табып, көтөлмәгән табыштарға юлығыу мөмкинлеге бар. Эҙләнһәң, табыштар – аҙым һайын. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика конференцияларының береһендә Учалы районынан килгән таныш уҡытыусының тәжрибә уртаҡлашыуы әле лә хәтерҙә. “Халыҡ ижады әҫәрҙәренән йырҙар циклын үткәндә дәрескә йырлап килеп ингәнем бар, – тип башлап ебәргәйне ул сығышын. – Уҡыусыларҙың береһе лә битараф ҡалмай, бар иғтибарҙары миндә. Ошо йыр хаҡындағы артабанғы әңгәмәбеҙ оҙон көйгә иҫәпләнгән йыр текстары хаҡында йәнле һөйләшеүгә инеш ролен үтәй...” Күрәһегеҙ – йыр сәнғәтенә мөрәжәғәт. Теләһәң, бейеү сәнғәтенә мөрәжәғәт ит: йә үҙең бейеп килеп ин, йә алдан әҙерләнгән берәй уҡыусыңды бейет. Программала бейеүгә бәйләрлек, ауаздашлыҡ табырлыҡ әҙәби текстар – быуа быуырлыҡ. IX класта сәсәндәр ижадын өйрәнгәндә, Байыҡ Айҙар хаҡында һүҙ ҡуҙғатып та, “Байыҡ” көйөн һәм шул исем менән аталған бейеүҙе урап үтеү мөмкинме? Ишмөхәмәт сәсән, билдәле булыуынса, XIX быуаттың утыҙынсы йылдары аҙағында Ырымбур генерал-губернаторы В. А. Перовский һәм генерал С. П. Циолковский етәкселегендәге Хива походында ҡатнаша. Атаҡлы йырсы-импровизатор, ҡурайсы Ишмөхәмәтте Перовский һәр саҡ үҙенең янында тотҡан, оҫталығы һәм яуҙарҙағы шәхси батырлығы өсөн алтын ҡылыс бүләк иткән. Мәшһүр “Перовский” һәм “Циолковский” марштары тап шул заманда ижад ителә. Ошо темаға ҡағылышлы инештә матур бейей белгән берәй уҡыусыны алдан әҙерләп, “Циолковский”ға бейетеп алғанда, был сараның бәхәсһеҙ үтемлеген әйтеп тораһы ла юҡ. Театр, кино сәнғәтендә, һынлы сәнғәттә лә ошондай алым өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөмкинлектәр йәшеренгәнлеген дә иҫкә төшөрөп тороу кәрәкмәйҙер.

4. А л д а н  б и р е л г ә н  и ж а д и  э ш т ә р ҙ е  т и к ш е р е ү. Балаларҙың көндәлек тормошона, мөхитенә яҡыныраҡ хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырған әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә, класҡа 1-2 дәрес алдан яҙма йәки телдән эш бирелә. Мәҫәлән, урта кластарҙа А. Карнайҙың «Урманда», Ш. Бабичтың «Ҡышҡы юлда», М. Аҡмулланың «Көҙ», Р. Ниғмәтиҙең «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар», С. Агиштың «Минең өс айым», Н. Нәжмиҙең «Яҡты яҙ», М.

Кәримдең «Тупрағым, һауам, һыуҙарым», З. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ», Ғ. Сәләмдең «Республика иртәһе» һ.б. әҫәрҙәрҙе үткәндә тәбиғәт күренештәре, йыл миҙгелдәре, Ватан, Мәскәү, яҡын дуҫ, йәйге каникул һ.б. темаларға бәләкәй генә күләмле иншалар яҙып килергә ҡушырға мөмкин. Инеш дәрестә ошо эштәрҙе тикшереү аша әҫәрҙең үҙенә яҡын килергә шарттар тыуа.

5. Ә ҙ ә б и э к с к у р с и я л а р. Был алым өсөн Өфө мәктәптәрендә мөмкинлектәр һис һүҙһеҙ ҙур. Яҙыусының йорт-музейена, уның тормошона, ижадына бәйле урындарға һ.б. иҫтәлекле ерҙәргә алдан экскурсия яһап, инеш дәрес әңгәмәһе шунда алынған тәьҫирҙәргә ҡорола. Күренекле яҙыусыларҙың исемдәренә бәйле төбәктәр районларҙа ла күп. Салауат, Миәкә, Ғафури, Күгәрсен районларында Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мәжит Ғафури, Жәлил Кейекбаев, Шәһит Хоҙайбирҙин, Зәйнәп Биишева музейҙары бар, Башҡортостандың һәр бер районынан ниндәй ҙә булһа яҙыусы сыҡҡан, – әҙәбиәт уҡытыусыһы, тимәк, һәр урында әҙәби экскурсия төбәген эҙләп таба ала. Бынан тыш, тәбиғәткә, ауыл хужалығы объектына, сәнәғәт предприятиеһына бүтән маҡсаттар менән яһалған экскурсияларҙың, туристик походтарҙың тәьҫораттарын инеш дәрестәрҙә әҙәби маҡсаттарҙа уңышлы файҙаланып була. Бер экскурсияла бер нисә әҫәрҙең инешенә етерлек тәьҫораттар алып ҡайтырға мөмкин.

Юғары кластарҙа инеш дәрестәр тәрәнерәк, ҡатмарлыраҡ итеп ойоштороло. Уларҙы махсус классификациялау мохтажлығы юҡ, сөнки бында ла алдағы өс төрҙөң төп һыҙаттары файҙаланыла. Яҙыусы үҙе йәшәгән заман, шул замандың әҙәбиәте, сәнғәте менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнелә. Шуға күрә лә инеш дәрестә дәүерҙең әҙәби фонына күберәк урын бирелә, замандың эмоциональ йөҙө күҙ алдына баҫтырыла.

Инеш дәрестә әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе тураһында һүҙ булырға тейеш түгел. Әммә инеш дәрес менән өйрәнеләсәк әҫәрҙең үҙе араһындағы, йәғни артабанғы дәрестәр системаһы менән бәйләнеште һис кенә лә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Инеш дәрес ниндәй генә формала үткәрелһә лә, унда нәмә тураһында һүҙ барһа ла, уҡытыусының (йәки әңгәмәнең) азаҡҡы һүҙҙәре үтеләсәк әҫәргә килеп терәлергә – уҡыусыны әҫәрҙәге яңы донъяның ҡапҡаһына илтергә тейеш. Инеш дәрес тә, әҫәр тексы өҫтөндә эш тә, йомғаҡлау дәресе лә – яҙыусы ижадын өйрәнеүҙең айырылғыһыҙ өлөштәре ул.



| | |
|---|---|
| | мөһим тип һанай. Яңы ысулдар менән уҡытыуҙы, китапханалар асыу, дәреслектәр баҫтырыу, гәзит сығарыу, белем, тәрбиә китап-тарын баҫтырыу бу-йынса программа төҙөй. |
| –Дөрөҫ, уҡыусылар. Р. Фәхретдиндең фекере буйынса, тәрбиәнең башы – ғаиләлә. Һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ? Ниндәй китаптарын беләһегеҙ? | –Кеше ғаиләлә тәрбиә ала, белем ала. “Тәрбиәле әсә”, “Тәр-биәле ата”, “Тәрбиә-ле бала”, “Тәрбиәле ҡыҙ”, “Әсмә”, “Сәлимә” әҫәрҙәре. (Экранда схема күрһәтелә). |
| –Тәрбиә эше буйынса ниндәй сығанаҡтарға таяна? | – Халыҡ педагогикаһы, дини тәрбиә, Ғаззали, Бируни, Руссо, Дидро, Ушинский хеҙмәттәре. (Экран, схема). |
| – Ни өсөн Р. Фәхретдин үҙен яҙыусы тип һанамаған? | –Р. Фәхретдин әҫәрҙәр аша мәғрифәтселек ҡараштарын халыҡҡа еткерергә уйлай. Ижад эше – мәғрифәтселек ҡараштарын таратыу сараһы. |
| | –Был әҫәрҙә Сәлимәнең идеаль образы кәүҙәләндерелә. |
| – Дөрөҫ. Эйе, әҙәбиәтте шундай маҡсат менән файҙаланған. Ни өсөн уның бер әҫәре “Сәлимә йәки ғиффәт” тип атала? | –Сөнки ул осорҙа башҡорт |

| | |
|---|---|
| –Уҡыусылар, ошо ғилми хеҙмәттәрендә һәм китаптарында кемдәр тураһында яҙа ул? | –Билдәле күренекле шәхестәр, әҙиптәр тураһында: Ҡурсауи, Ш. Мәржәни, Батырша, Ғ. Усман, Т. Ялсығол, Ғ. Соҡорой, Ш. Зәки, Ә. Сәлихов, Ә. Ҡарғалы, Аҡмулла, Өмөтбаев, С. Юлаев, Ю. Аҙналин, Алдар, Күсем батыр. Шулай уҡ башҡа халыҡтарҙың төрлө абруйлы шәхестәре тураһында яҙа. |
| – Афарин! Р. Фәхретдинов М. Өмөтбаев менән берлектә ниндәй ғилми хеҙмәт яҙа? | – “Ҡазан вә башҡорттар” тигән хеҙмәт. |
| – Ошо хеҙмәттә ниндәй ҙур ваҡиға тураһында иҫкә алына? | –Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы. |
| –Уҡыусылар, схемала Р. Фәхретдиновтың журналистик эшмәкәрлеген ҡарап китәйек. Кем һөйләр? | –1906–1908 й. – “Ваҡыт” гәзитенең мөхәррире.<br>–1908–1917 й. “Шура” журналының баш мөхәррире. |
| – Журналист булып эшләгән йылдарында ул фән эшен дауам итә. Ә хәҙер мәғрифәтселек өлкәһендәге эшмәкәрлеге тураһында һөйләшәйек. (Экранда мәғрифәтселек, яҙыусы эшмәкәрлеге)<br>– Ҡайһы осорҙа Р. Фәхретдиндең мәғрифәтселек эше башлана? | –Р. Фәхретдинде мәҙрәсәләге уҡыу-уҡытыу системаһы ҡәнәғәтләндермәй. Мәҙрәсәләрҙә донъяуи фәндәр уҡытыуҙы – арифметика, геометрия, физика, химия, зоология, урыҫ теле дәрестәрен индереүҙе |



*1.Инеш дәрестең төп маҡсаты нимәлә?*

*2.Инеш дәрестең төрҙәре ниндәй принцип буйынса билдәләнә?*

*3. Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙең инеш өлөшөндә ҡулланылған төп алымдарға иғтибар итегеҙ.*

*4.Традицион алымдар эсендә уҡытыусының ижади эшмәкәрлегенә был осраҡта ниндәй урын бирелергә мөмкин? Уның әһәмиәте нимәлә?*

**Ш. Бабичтың “Ҡурайҡайға” шиғырын өйрәнеү буйынса инеш өлгөһө**

– Уҡыусылар, дәресебеҙҙең бөгөнгө темаһын белеү өсөн, аудиотаҫма тыңлап алайыҡ: (“Таштүре” көйөн тыңлатыу).

– Нимә ишетәһегеҙ? (ҡурай моңо, көй ).

– Эйе, дөрөҫ. Был көйҙө атаҡлы ҡурайсыбыҙ Ишмулла Дилмөхәмәтов ижад иткән.

– Тимәк, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (ҡурай)

– Ҡурай тураһында нимә беләһегеҙ?

(урманда үҫкән үлән ҡурайы тураһында һөйләү һәм күрһәтеү)

– Ҡурай башҡорт халҡыныңрухи тормошонда ниндәй роль уйнай?

– Был музыка ҡоралы нимәләрҙе сағылдыра?

– Ҡурайҙың тажы ниндәй була? Ошо таж нимәне сағылдыра?

– (БР Дәүләт гербын һәм флагын күрһәтеү)

– Халҡыбыҙҙың ҡайғыһын да, шатлығын да уртаҡлашҡан, ир-егеттәр менән яуҙаш булған, быуындан-быуынға күсеп килгән ҡурай нисек барлыҡҡа килгән икән һуң? Уға нисә йәш?

(Ҡыҫҡаса “Ҡурай тураһында легенда”, “Ҡуңыр буға” әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөү).

Шулай итеп, ҡурай ғүмере тиҫтә быуаттар менән иҫәпләнә.

– Ә хәҙер беҙ бөгөн өйрәнәсәк “Ҡурайҡайға” шиғырының авторына иғтибар итәйек.

– Кем ул Шәйехзада Бабич? (уҡыусыларҙың яуаптары)

1. Шағирҙың биографияһын ҡыҫҡаса һөйләү;

2. Китаптары менән таныштырыу.

– Уҡыусылар, шиғырҙы уҡыған ваҡытта, һеҙгә таныш булмаған

һүҙҙәр осраясаҡ. Шуларҙы ҡарап үтәйек:

**Ҡашмау** – ҡатын-ҡыҙҙарҙың боронғо баш кейеме.

**Селтәр** – ҡатын-ҡыҙҙарҙың мәрйен, тәңкәләрҙән эшләнгән күкрәк биҙәү әйбере.

**Бола** – ихтилал.

**Заң** – мотлаҡ үтәлергә тейешле ҡанун.

**Өҙләү** – тамаҡ төбө менән көйләү.

*Н. Д. Нәҙерғолова, БДУ студенткаһы, 2011*

**Иҫкәрмә:** Был өлгөлә, шиғырҙың йөкмәткеһенә үтеп инмәйенсә генә, әҫәрҙең үҙенә ситләтеп ҡыҙыҡһыныу уятыу ынтылышы етешмәй. Ҡурай тураһында дөйөм һүҙ күберәк. Ш. Бабичтың биографияһына ла тотош туҡталыу маҡсатҡа ярашлы уҡ түгел. Уның тормошонан йыр-моңға, ҡурайға бәйле мәғлүмәттәр табып, шул хаҡта һүҙ йөрөтөлһә, инештең мәғәнәһе тәрәнәйә төшөр ине.

**Әҙәби әҫәрҙе класта уҡыу**
**һәм йөкмәткеһен үҙләштереү**

Әҫәрҙең йөкмәткеһе һәйбәт үҙләштерелгәндә генә уны анализлау мөмкинлеге тыуа. Үтеләсәк тексты уҡыусылар өйҙә берәр ҡат үҙ аллы уҡып сыҡҡайны инде. Ә инде инеш дәрестән һуң әҫәр менән класта бергәләп танышыу ойошторола. Сөнки өйҙәге уҡыу бер үк ваҡытта ғына бармай: берәүҙәр уны әллә ҡасан бөтөп, икенсе китапҡа тотонған, икенселәр яңы ғына тамамлаған, өсөнсөләрҙең хатта өлгөрмәүе лә ихтимал. Өҫтәүенә, һәр кем уҙаллы ғына уҡып, әҫәрҙән алған тәьҫир эсендә төрлөһө төрлө ваҡытта үҙ аллы ғына йәшәне. Ә инде шул уҡ әҫәргә класта бергәләп әйләнеп ҡайтһалар, бер юлы тәьҫирләнһәләр, уның хаҡында күмәкләп, берҙәй ҡыҙыҡһыныу менән һүҙ алып барырға шарттар тыуа.

Урта һәм юғары кластарҙа бәләкәйерәк текстар – шиғырҙар, мәҫәлдәр, поэмалар, хикәйәләр, халыҡ ижадының бәләкәй жанр әҫәрҙәре – тулыһынса уҡыла. Ә драма, повесть, романдарҙың тәүге бүлектәре менән класта бергәләп танышҡас, артабан тағы ла өйҙә уҡырға бирелә. Был юлы өйҙәге үҙ аллы уҡыу тәүгеһенән айырыла, ул кластағы уҡыу менән тығыҙ бәйләнештә бара: әҫәр тексы өҫтөндә актив эш башланды, уҡыусылар яҙыусы һынландырған донъяға



| | |
|---|---|
| | Илбәк ауылына эшкә ебәрелә. 1891 йылда Өфөгә Диниә назаратына эшкә ҡазый итеп алына. |
| – Күреүегеҙсә, Р. Фәхретдин мәҙрәсәләрҙә мулла, хәлфә, мөҙәрис, ҡазый булып эшләгән һәм һуңынан иң юғары вазифаны биләгән. Ниндәй вазифа ул? Кем ул? | – Мөфтөй – мосолман диниә назараты башлығы. |
| – Дөрөҫ. Мөфтөй – ул төрлө дини ойошмаларға ҡарар сығарып тороусы юғары вазифа. Уҡыусылар, һеҙ бөгөнгө көндә ҡайһы мөфтөйҙө беләһегеҙ?<br>– Эйе, дөрөҫ, Т. Тажетдин – бөтә Рәсәй мосолмандарының мөфтөйө, иң юғары вазифаны биләй. Нурмөхәмәт хәҙрәт – Башҡортостандың мосолмандары мөфтөйе. Бына Р. Фәхретдин дә ниндәй юғары вазифа биләүсе кеше булған. | – Тәлғәт Тажетдин, Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин. |
| – Ә хәҙер тарисы, ғалим эшмәкәрлегенә күҙ һалайыҡ. | – 1891 йылда Диниә назаратының бай, ҡиммәтле архивын өйрәнеп, тәртипкә һалып, оло мөһим хеҙмәттәр яҙа. |
| – Ниндәй хеҙмәттәр? | – “Аҫар” китаптар серияһы, “Мәшһүр әҙәмдәр” китаптар серияһы, “Йыуаныс”. |
| – Дөрөҫ. Нимә ул “Аҫар” тигән һүҙ? | – Аҫар - ғәрәп һүҙе, үткәндең иҫтәлекле яҙма әҫәрҙәре. |

| | |
|---|---|
| –Дөрөҫ. (Экранда схема. Конспекттың аҙағында бирелгән.)<br>– Уҡыусылар, һеҙҙең алдығыҙҙа даталар ята, шул даталар нимәне аңлата икән? | – Уның тормош юлындағы мөһим ваҡиғаларҙы. |
| – Дөрөҫ! Эш барышында даталарға таянып, Р. Фәхретдиновтың тормош юлын иҫкә төшөрәйек. Беренсе дата тураһында нимә әйтерһегеҙ? (1859) | – Һамар өлкәһе Бөгөлмә өйәҙе Кисеүсат ауылы. (Уҡыусылар үҙ аллы эшләйҙәр, сылбыр буйынса һөйләйҙәр). |
| – Әйҙәгеҙ, картала күрһәтәйек. Кем күрһәтер? Картала ҡайҙарҙа эшләгәнен дә билдәләп китербеҙ. | (Картала күрһәтәләр). |
| –Уҡыусылар, иғтибар ошо ерҙә. Мин Ғ. Хөсәйеновтың “Ризаитдин Фәхретдин” тигән китабына таянып, уның шәжәрәһен төҙөткән инем. Әйҙәгеҙ, кемегеҙ уҡып китер? | (Шәжәрәне уҡыйҙар). |
| – Күреүегеҙсә, Р. Фәхретдин үҙе лә уҡымышлы ғаиләнән, уның балалары ла, ейән-ейәнсәрҙәре лә, бүләләре лә юғары белемле белгестәр. Быға ғорурланырға ғына ҡала. | (Р. Фәхретдин мулла ғаиләһендә 8-се бала булып тыуған. Үҙенең 4 улы, 2 ҡыҙы булған). |
| – Әйҙәгеҙ, схемала күрһәтелгәнсә, уның тарихсы, ғалим, дини эшмәкәрлегенә туҡталып китәйек.<br>Дини эшмәкәрлеге тураһында нимәләр беләһегеҙ? | – Р. Фәхретдиндең ғүмере мәҙрәсә, дин менән тығыҙ бәйле була. Ул егерме йылға яҡын мәҙрәсәләрҙә уҡый. Үҙе юғары синыфтарҙа уҡығанда, түбән синыфтарҙа хәлфә булып дәрестәр бирә. 1889 йылда имам-хәтип булып |



барыһы бер юлы инде, ундағы тәьҫирҙәр менән бер юлы тулҡынлана башланы. Өҫтәүенә, артабанғы дәрестәрҙә ҙур күләмле әҫәрҙәрҙең айырыуса әһәмиәтле, үҙәк урындары класта тағы ла бергәләп уҡыла.

Әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе менән танышыуҙы ойоштороғанда, тасуири уҡыуға үтә мөһим иғтибар кәрәк. Текст класта тәүге тапҡыр мотлаҡ рәүештә тасуири яңғырарға тейеш. Уҡытыусы үҙе уҡыймы, фоно-яҙманы файҙаланамы, сәнғәт оҫталарын саҡырамы – ниндәй генә юлды һайламаһын, әҫәр менән осрашыуҙың тәрән эмоциональ шарттарҙа барыуы хаҡында хәстәрлек күрергә бурыслы. Тасуири уҡыуға тәбиғи һәләте булған уҡыусылар ҙа класты әҫәр менән таныштырыуға йәлеп ителергә мөмкин, һәр класта һис юғында 1-2 һәләтле бала мотлаҡ рәүештә табыла. Юғары кластарҙа уҡыусыларҙы ҡыйыуыраҡ ылыҡтырырға була. Әммә дәрестә әҫәрҙе тәүге ҡат тасуири уҡыуҙы балаларҙы уҡыу техникаһына өйрәтеү менән алыштырырға ярамай. Уның үҙ ваҡыты бар. Шуға күрә, текст башынан аҙағына тиклем бер генә тауыш менән уҡыла; уны өҙөргә, бүлгеләргә ярамай. Ҡайһы бер осраҡта, мөмкин тиклем күберәк уҡыусыларҙы йәлеп итеү маҡсатын күҙ уңында тотоп, сылбыр менән уҡытыуҙы хуп күрәләр. Иң тәүге бала (йәки уҡытыусы үҙе) тасуири яңырашлы итеп уҡый башлағас та, ҡалғандары ошо әҫәрҙән әҙәби донъяға инеп китәләр. Уны ҡапыл туҡтатып, икенсе кешегә дауам итергә ҡушыу – ошо донъяны өҙөү, тигән һүҙ. Яңы уҡыусы яңы тауыш менән үҙенсә ялғап алып киткәнсә, класс әлеге мөғжизәле донъянан сығып өлгөрә. Ҡабат әллә инеп китә ала, әллә юҡ. Һыҙыҡ өҫтөнә алып, тағы бер тапҡыр ҡабатлайыҡ: тасуири уҡырға өйрәтеүҙең үҙ ваҡыты бар.

Ысын мәғәнәһендә тасуири яңғыраған әҫәрҙе тыңлау – уның йөкмәткеһен үҙләштереүҙең бер төрө ул. Уҡыусы тексты эмоциональ ҡабул итә, тулҡынландырғыс тәьҫир ала, әҫәрҙәге образдар, фекерҙәр йә хәл-ваҡиғалар тураһында уйлана башлай. Шуға күрә ҙур булмаған шиғырҙарҙың, мәҫәлдәрҙең, хикәйәләрҙең «йөкмәткеһен үҙләштереү өсөн тасуири уҡып сығыу, комментарий яһау, текст буйынса бер-ике һорау биреү ҙә етә» (9, 102). Мәҫәлән, 11 класта Н.Нәжмиҙең “Тыуған ҡалама йыр” шиғырына ҡарата түбәндәге һорауҙар бирелеүе мөмкин.

1. Автор шиғырҙа нимә тураһында һүҙ алып бара? (Өфө ҡалаһын данлай, уның матурлығын тасуирлай, үҙенең яҙмышының ошо ҡалаға бәйлелеге тураһында һүҙ йөрөтә).
2. Быларҙы шағир ниндәй саралар менән бирә? (Һүрәтләү

саралары ҡуллана, хәтерләүҙәргә бирелә, яратыу хәстәрен белдерә: “Көмөш ҡайыш быуған егет кеүек, Ағиҙелде урап биленә...”; “Хәтеремдә, юл тоҡсайы асып, беренсе ҡат, ғүмер таңымда...”, “Һинән китһәм, хатта таштарың да сәскә атҡан төҫлө тойола...” һ.б.).

3. Шиғыр ни өсөн “Тыуған ҡалама йыр” тип аталған?

Ошо һорауҙарға йәйә эсендә күрһәтелгән кеүегерәк яуаптар алынһа, уҡыусылар шиғырҙың йөкмәткеһен аңлағандар, тигән һүҙ. Уның тексы өҫтөндә, тимәк, артабан эшләргә мөмкин.

Ҙур күләмле әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә күп төрлө методик алымдар ҡулланыла (был хаҡта ҡарағыҙ: 9, 103–105).

1. Әҫәр буйынса план төҙөү – киң таралған алымдарҙың береһе. Ләкин план менән эшләүҙең дә төрлө ысулдары бар:

а) ябай план. Ул әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле һәм бөтөн итеп күҙ алдына баҫтыра, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен асыҡ сағылдыра, уҡыусының иғтибарын төп эпизодтарға йүнәлтә, ваҡиғаларҙың иң әһәмиәтлеләрен айырып ала белеү күнекмәһен тәрбиәләй. Ябай план төҙөгәндә, әҫәр уҡытыусы тарафынан мәғәнәүи киҫәктәргә бүленә. Уҡыусылар һәр киҫәктең йөкмәткеһен асыҡлап, тематикаһын билдәләй һәм тейешле исем бирә. IX класта Т.Ялсығоловтың “Тарихнамә-и Болғар” әҫәрен, мәҫәлән, 5 киҫәккә бүлергә һәм яҡынса түбәндәге иҫемдәрҙән торған план килтереп сығарырға мөмкин:

1. Әҫәрҙе яҙыу өсөн автор таянған сығанаҡтар; шәжәрәнең Әҙәмдән башланған тәүге өлөшө.

2. Болғар илендә ислам динен таратыусылар; Айҙар ханыдң ҡыҙын һауыҡтырыу.

3. Әйле ырыуының ике тармағына арналған риүәйәт.

4. Тажетдин һәм уның атаһы.

5. Әҫәрҙең тамамланышы, Тажетдиндың үҙ ырыуҙаштарына васыяты.

б) әҫәрҙе план буйынса өлөштәргә бүлеү – ябай пландың киреһе. Был осраҡта уҡытыусы биргән әҙер план буйынса балалар әҫәрҙе өлөштәргә үҙҙәре бүлеп сыға. Өлөштәр һаны пландағы пункттар иҫәбенә ярашлы булырға тейеш. Йөкмәтке үҙләштереүҙең, әҫәрҙең мөһим урындарын үҙ аллы билдәләргә өйрәтеүҙең шулай уҡ эффектлы ысулдарының береһе.

в) цитаталы план төҙөү. Уҡыусылар теге йәки был өлөштөң йөкмәткеһен асыуға тап килгән иң ҡулайлы һөйләмде йәки фразаны



| | |
|---|---|
| –Афарин! Әҙиптәрҙән кемдәрҙе беләһегеҙ? | С. Юлаев, Батырша, М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдин, М. Ғафури, Ж. Кейекбаев, М. Кәрим, Р. Ғарипов һ.б. |
| –Бик дөрөҫ! Ә хәҙер иғтибарыбыҙҙы экранға йүнәлтәйек. Кемдәрҙе күрәһегеҙ? | –Шәхестәрҙе (Портреттар) |
| – Дөрөҫ, ил азаматтары. Ә ни өсөн беҙ уларҙы ил азаматтары тибеҙ? | – Иле, ере, теле, халҡы, милләте өсөн хеҙмәт итеүселәр. |
| – Эйе, уҡыусылар, иле, ере, милләте өсөн көрәшеүселәр, хатта ҡорбан булыусылар, милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе шәхестәребеҙ икән улар. Бөгөн беҙ дәрестә халҡыбыҙҙың иң уҙаман, олуғ шәхестәребеҙҙең береһе булған Р. Фәхретдин тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Һөйләшеү әңгәмә рәүешендә барласаҡ.Дәфтәрегеҙҙе асып, бөгөнгө датаны, теманы теркәп ҡуйығыҙ. Тема: “Милләт мәшһүр әҙәмдәре менән мәртәбәле”. Эпиграф: “Әҙип һәм ғалимдары булмаған ҡәүем – бәхетһеҙ, мәшһүр әҙәмдәре булмаған халыҡ – яҡлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмағн – рухһыҙ.” (Р. Фәхретдинов) | |
| – Ә хәҙер Р. Фәхретдиндең тормош юлына, ижадына байҡау яһап китәйек. Р. Фәхретдин кем булған? | –Теолог (дин белгесе), тарихсы, ғалим, журналист, яҙыусы, мәғрифәтсе. |

“Әҙип һәм ғалимдары булмаған ҡәүем – бәхетһеҙ, мәшһүр әҙәмдәре булмаған халыҡ – яҡлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмаған – рухһыҙ.” (Р. Фәхретдинов)

Һүҙлек эше:

Мәғрифәтсе – аң-белем таратыусы, ағартыусы
Ҡәүем – милләт
Мәжмүғә – йыйынтыҡ
Мөфтөй - диниә назараты башлығы
Хәлфә – уҡытыусы
Ҡазый – хөкөмдар
Назарат – дини идаралыҡ

1. Ойоштороу мәле.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ! Тынысландыҡ!

2. Ҡурай моңо. Ҡобайыр яңғырай.

Был донъянан ни ҡалыр?
Кем ҡалыр ҙа ни ҡалыр?
Шағирҙан аҫыл һүҙ ҡалыр,
Йырсынан аҫыл йыр ҡалыр,
Атанан аҫыл ул ҡалыр,
Әсәнән аҫыл ҡыҙ ҡалыр,
Сәсәндәрҙән тел ҡалыр,
Батырҙарҙан дан ҡалыр,
Үҙ телен йәндәй күргән,
Тарихы тип өҙөлгән,
Бар ғүмерен шуға биргән
Ғалимдарҙан ни ҡалыр?
Халҡым тарихы байҡалыр,
Халҡым теле һаҡланыр,
Мираҫыбыҙ барланыр,
Бары бергә тупланып,
Аҫыл ҡомартҡы ҡалыр,
Аҫыл ҡомартҡы ҡалыр.

| | |
|---|---|
| – Уҡыусылар, әле һеҙ ҡобайырҙан өҙөк тыңланығыҙ. Унда нимә хаҡында һүҙ бара? | –Шағирҙар, сәсәндәр, батырҙар, ғалимдар, рухи ҡомартҡы тураһында. |



цитата итеп ала. Цитаталы пландар йөкмәтке үҙләштереү процесын активлаштыра, дәрестең эмоциональлеген бермә-бер арттыра. Эш барышында уҡыусылар һәр һөйләмгә иғтибар итеп, уларҙың мәғәнәһенә төшөнөп эҙләнә.

г) картиналы план төҙөү. Әҫәр өлөштәргә бүленә һәм уҡыусылар тарафынан һәр өлөштөң йөкмәткеһен сағылдырырҙай иллюстрациялар яһала. Һәр класта тасуири уҡыуға, ижади фекерләүгә һ. б. һөнәрҙәргә һәләтле уҡыусы булған кеүек, матур итеп һүрәт төшөрә белеүселәр ҙә һис шикһеҙ табыла. Айырыуса уңышлы иллюстрацияларҙы уҡытыусы класс менән эш барышында файҙалана, киләһе сәғәттәрҙә әҫәрҙе анализлағанда ҡулланыр өсөн йәки икенсе йылда ошо уҡ тема өсөн һаҡлап ҡалдыра ала.

2. Әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләтеү – уны үҙләштереүҙең шулай уҡ йыш ҡулланыла торған эш формаһы; уҡыусының һөйләү телмәрен яңы һүҙҙәр, терминдар менән байытыу өсөн дә айырыуса әһәмиәткә эйә. Тексты аңлау, үҙләштереү генә түгел, уны бүтәндәргә еткерә белеү ҡеүәһен үҫтерә. Йөкмәтке һөйләүҙең төрлө ысулдары бар: а) тексҡа яҡын һөйләү; б) ҡыҫҡартып һөйләү; в) һайлап һөйләү; г) затты үҙгәртеп һөйләү.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мәктәп практикаһында ҡайһы бер уҡытыусылар был ысулдарҙың тәүгеһенә үтә йыш мөрәжәғәт итә, ҡалғандарын онотобораҡ ебәрә. Ә конкрет маҡсат ҡуйылып, әҫәр йөкмәткеһен йә ҡыҫҡартылған вариантта, йә уҡытыусы заданиеһы буйынса уның айырым эпизодтарын һайлап, йә беренсе зат урынына өсөнсө зат (йәки киреһенсә) ҡулланып һөйләү талап ителһә, йөкмәтке үҙләштереүгә бирелгән ваҡыт экономиялана, дәрестең эффектлылығы күтәрелә, уҡыусы әҫәр тексын тиҙ төшөнөп алып, уны бүтәндәргә еткереүҙең төрлө формаларын өйрәнеп ҡала ала.

3. Төп персонаждарҙы, әһәмиәтле ваҡиғаларҙы һанап биреү – ҙур күләмле әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү кимәлен тиҙ асыҡлау маҡсатында ҡулланыла.

4. Әҫәр йөкмәткеһен сағылдырған картиналар менән эшләү. Ҡайһы бер әҫәрҙәргә иллюстрациялар урта кластарҙың дәреслек-хрестоматияларында уҡ урынлаштырыла. Башҡорт яҙыусыларының мәктәп программаһына ингән һәм нәшриәттә айырым китап булып сыҡҡан проза әҫәрҙәренең иллюстрацияларын да дәрескә йәлеп итергә мөмкин. Бынан тыш, уҡыусыларҙың картиналы план төҙөү өсөн эшләнгән уңышлы һүрәттәрен дә ҡабат «эшкә ҡушырға» була.

Вағыраҡ иллюстрациялар бөтә класҡа асыҡ күренһен өсөн техник саралар (мәҫәлән, видеопроектор) файҙаланыу тәҡдим ителә. Бер әҫәргә ҡағылышлы бер нисә әңгәмә үткәреү, уларға ярашлы цитаталар һайлау йөкмәтке үҙләштереүҙең һөҙөмтәле алымдарынан һанала.

5. Өйрәнелә торған текст йөкмәткеһенә ауаздаш булған һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен файҙаланыу. Был осраҡта картиналар тәүҙә үҙ аллы анализлана, шунан һуң художестволы әҫәр тексы менән сағыштырыла, оҡшаш мотивтар, эпизодтар, образдар һ. б. дөйөм сифаттар табыла. Мәҫәлән, М. Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесын өйрәнгәндә, Р.Нурмөхәмәтовтың «Шәриғәт ҡорбандары» картинаһын, С. Злобиндың «Салауат Юлаев» романын үткәндә А. Кузнецовтың «Салауаттан һорау алыу», Н. Нәжмиҙең һуғыш һәм тыныслыҡ проблемаларын күтәргән поэмаларына ҡарата Ә. Лотфуллиндың «Көтөү» әҫәрҙәрен ҡулланырға мөмкин. Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә Башҡортостан рәссамдарының ижадтарына мөрәжәғәт итеү уңайлыраҡ. Сөнки, бер яҡтан, был ике төр сәнғәт әҫәрҙәренең республикабыҙ тарихына һәм тормошона бәйле урталыҡтар күберәк табыласаҡ; икенсе яҡтан, уҡыусылар үҙебеҙҙең рәссамдар, уларҙың картиналары тураһында белеп ҡаласаҡ.

Ошо уҡ юл менән (тәүҙә үҙ аллы һүҙ йөрөтөп, аҙаҡ әҙәби әҫәр тексы менән сағыштырып) бүтән төрлө иллюстрацияларҙы – открыткаларҙы, фоторепродукцияларҙы, төҫлө календарҙарҙың һүрәттәрен һ. б. – йөкмәтке үҙләштергәндә уңышлы файҙаланып була.

Юғарыла һанап кителгән эш төрҙәре – ҙур күләмле әҫәр йөкмәткеһен үҙләштереү алымдарының айырыуса киң таралғандары ғына. Әлбиттә, уҡытыусы үҙ ижади мөмкинлеген эшкә егеп, был ысулдарҙы төрләләндерә ала. Шуларҙың береһен ҡулланыу процесында әҫәрҙең төп өлөштәре билдәләнә, образ-персонаждары асыҡлана, сюжеты күҙ алдына баҫа. Ҡыҫҡаһы, текстың йөкмәткеһе тотороҡло үҙләштерелә, һәм уны артабан анализлауға әҙерлек эштәре тамамлана.

Әҫәрҙе класта уҡыу һәм йөкмәтке үҙләштереү этабында бер нәмәне иҫтән сығарырға ярамай: ул күп ваҡытты алырға тейеш түгел, сөнки алда иң төп һәм иң мөһим этап – анализ тора.

______________________



*Әҫәрҙең теле.*

– Әҫәрҙе уҡыу күңелгә ятышлымы, түгелме? Әҫәр һинең кәйефеңә нисек тәьҫир итте?

– Аңлашылмаған ниндәй һүҙҙәр осраны?

– Ҡайһы һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр, һүҙҙәр әҫәрҙе күҙ алдына килтерергә ярҙам итте?

– Төп фекерҙәр ҡайһы һөйләмдәрҙә сағыла?

– Ниндәй әйтемдәр, мәҡәлдәр осрай?

– Персонаждарҙың теленә күҙәтеү.

IV *Уҡыусыларҙың дөйөмләштереүе сығыштары.*

3. *Йомғаҡлау (3 – 4 минут).*

XX быуаттың 30-сы йылдарындағы заман ҡаршылыҡтарын һәм уның төп үҫеш тенденцияларын һүрәтләү йәһәтенән С. Мифтахов драмаларының әһәмиәте.

а) Бәхәс-ҡаршылыҡтарҙы нимә тыуҙыра? Ҡайһы бер геройҙарҙың рухи зәғифлегеме? (уҡыусыларҙың фекерҙәрен тыңлау).

б) Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

*Өйгә эш (1-2 минут).*

*Баһалау (1-2 минут).*

*В. Р.Тәкиуллина, БДУ студенты, 2010.*

**IX класта Ризаитдин Фәхретдинов ижадына арналған дәрестең план-конспекты өлгөһө**

Дәрестең темаһы: “Милләт мәшһүр әҙәмдәре менән мәртәбәле”

Маҡсаты: Үткән дәрестә алған белемдәргә таянып, Р. Фәхретдиновтың тормош юлына, ижадына, эшмәкәрлегенә байҡау (күҙәтеү) яһау; уҡыусыларҙа уның шәхесенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: портрет, мультимедиа, шәжәрә, карта, схемалар, эпиграф, гәзит, экран (компьютер), музыка, төрлө сығанаҡтар: Ғ. Хөсәйенов “Р. Фәхретдинов”; “Ватандаш” журналы; “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” 2 том; Р. Шәкүр “Арҙаҡлы башҡорттар”; “Башҡортостан: ҡыҫҡаса энциклопедия”; һүҙлектәр.

Әңгәмә – С. Мифтахов биографияһындағы ҡайһы факттар унының ижадында сағылыш тапкан?

– “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаһының йөкмәткеһен үҙләштереү. Уҡыусыларҙан һөйләтеү (3–4 минут).

– “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаһына анализ (20 мин.).

– Уҡыусыларҙың ижад лабораторияһында булған анализ яһау тәртибе буйынса эш.

– Тема һәм проблема.

– Әҫәр кем йәки нимә тураһында? Ул ни өсөн шулай тип атала?

*Сюжет.*

– Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар ҡайҙа һәм ҡасан бара?

– Хәл-ваҡиғаларҙың артабанғы үҫеше кемдәргә бәйле?

– Әҫәрҙәге төп ваҡиға. Хәл нимә менән тамамланды?

– Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙа ҡатнашырға теләр инеңме?

*Образдар.*

– Төп геройҙар кемдәр? Улар ниндәй эш ҡылған? Ни өсөн?

– Ҡалған геройҙар уларға ниндәй мөғәмәләлә?

– Кемдәр оҡшаны (оҡшаманы)? Ни өсөн?

*Композиция* .

– Әҫәр ниндәй өлөштәрҙән тора? Ни өсөн?

– Һәр өлөштә нимә мөһим?

– Бүлектәргә ниндәй исем бирер инең?

– Әҫәрҙә кем (нимә) хаҡында ентекле (ҡыҫҡаса) һөйләнә? Ни өсөн? Әҫәрҙең фабула – сюжет – композицияһы нимә менән айырыла?

*Жанр.*

– Был ниндәй әҫәр?

– Әҫәрҙең драма икәнлеген нисек иҫбатлайһың?

– Әҫәр ниндәй һабаҡ бирә?

*Идея.*

– Нимә бигерәк тә иҫеңдә ҡалды? Ни өсөн?

– Автор уҡыусыға ниндәй кәңәш бирә?

– “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаһында Айһылыу менән Юлай образдарының артабанғы үҫтерелеше.

– Драманың проблематикаһы һәм төп конфликты. Айһылыу менән Юлай араһында тыуған ҡаршылыҡтың идея мәғәнәһе.

– Әҫәрҙең төп фекере ниндәй? Автор үҙ әҫәре аша беҙгә нимә әйтергә теләгән?



*1.Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеүҙән алда өйҙә үҙ аллы уҡығандан һуң, ҡабат класта уҡыу ни өсөн кәрәк?*

*2.Ҙур күләмле әҫәрҙе класта уҡыу нисек ойошторола?*

*3.Бәләкәй күләмле әҫәрҙең йөкмәткеһе ниндәй тәртиптә үҙләштерелә?*

*4.Әсбапта ҙур күләмле әҫәрҙәр йөкмәткеһен үҙләштереүҙең традицион методикала киң таралған алымдары ғына бирелгән. Һеҙ тағы ла ниндәй ижади алымдар ҡуллана алыр инегеҙ?*

* * *

**Ф. Сөләймәновтың «Тимербай ҡурайсы» хикәйәһе буйынса йөкмәтке үҙләштереү өлгөһө**

Әҫәрҙе класта тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү (5 мин.).

– Был әҫәрҙе уҡып килергә ине, барығыҙ ҙа уҡынығыҙмы? Ниндәй аңлашылмаған һүҙҙәр осраны?

Һүҙлек эше.

Вә – һәм

Садә – таҙа

Хасиятлы – үҙенсәлекле

Киәле - ҡурҡыныс, текә

– Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, йөкмәткеһен иҫкә төшөрөр өсөн тасуири уҡып алайыҡ. (Бер уҡыусы уҡый).

– Уҡыусылар, был әҫәрҙе нисә өлөшкә бүлеп була?

– 5 өлөшкә

– Был өлөштәрҙе нисек атарһығыҙ?

–Тимербай ҡурайсының өҙҙөрөп уйнауҙары; халыҡтың ҡурай яратыуы; яңы тормоштоң еле; ҡурайсы ауылға ҡайта; ҡайҙа һин рух?

– Һәр өлөштә нимә тураһында һүҙ бара? Ҡыҫҡаса кемдәр әйтеп бирер ? ( Биш уҡыусы яуап бирә).

– Уҡыусылар, был хикәйә тураһында тулыһынса һөйләшер алдынан, әйҙәгеҙ, сәхнә оҫталарының нисек тасуири уҡыуҙарын тыңлап үтәйек. Экранға ҡарайбыҙ (Видеотаҫма).

*А. Иҫәндәүләтова, БДУ студенткаһы, 2010.*

**Иҫкәрмә:**

а) Йөкмәтке үҙләштереү планы бер генә стилдә төҙөләргә тейеш. Тәүге пункт атама һөйләмдә икән – ҡалғандары ла шулай кәрәк.

б) Йөкмәтке үҙләштереү этабында текст бер генә тапҡыр уҡыла. Сәнғәт оҫтаһы тауышы яҙылған видеотаҫма бар икән – уҡыусының уҡыуы кәрәкмәй.

## Әҙәби әҫәргә анализ

Әҙәби әҫәрҙе анализлау – әҙәбиәт уҡытыу методикаһының иң үҙәк проблемаларының береһе. «Әҫәргә анализ яһау ысынбарлыҡты анализлау менән айырылғыһыҙ бәйләнгән, һәм ул әҙәбиәт курсының иң мөһим өлөшөн тәшкил итә» ( 183). Уға әҫәрҙе өйрәнеүгә бүленгән ваҡыттың 80 проценты китә. Анализ барышында уҡытыусы бер нисә маҡсатты тормошҡа ашыра. Уҡыусыны әҙәби әҫәрҙә сағылдырылған донъяға алып инеү, әҫәр аша унда кешелек сифаттары тәрбиәләү, халыҡтың рухи тәжрибәһен үҙләштерергә ярҙам итеү – б е р е н с е һәм иң мөһим маҡсат. Балалар художестволы сағылдырылған тормоштоң ысынбарлыҡтағы тормошто үҙгәрешһеҙ, туранан-тура күрһәтеү түгел икәнлеген аңларға өйрәнә, әҫәрҙәге геройҙар һәм ваҡиғалар артында тағы бер кеше – автор барлығын күрә. Әҙәби әҫәр яҙыусының әхләҡ-эстетик идеалы, тормош концепцияһы икәнен төшөндөрөү и к е н с е ҙур маҡсат булып тора. V–VI кластарҙа автор концепцияһын өйрәнеүгә башланғыс ҡына һалынһа, юғарыраҡ күтәрелә барған һайын анализ ваҡытында яҙыусының үҙенә күберәк урын бирелә. Уҡыусы художестволы ысынбарлыҡтың яҙыусы тарафынан төрлө формала сағылдырылыуына иғтибар итә. Күңел кисерештәре шиғыр, поэма, нәҫер аша, тормош конфликттары эпик, драматик жанрҙар аша бирелеүен белә, әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Йәғни, һүҙ сәнғәтенең законлыҡтарын өйрәтеү – анализдың ө с ө н с ө маҡсаты.

Әҫәрҙәрҙең күләменә ҡарап, уларҙы анализлау төрлө ваҡытҡа һуҙыла. Лирик шиғырҙарҙы өйрәнеүҙең бөтә этаптары ғәҙәттә бер дәрес эсендә үк тамамланһа, Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романына программала бер нисә сәғәт бирелә. Әҙәбиәт дәресе юғары кластарҙың дәрестәр теҙмәһендә (расписаниела) аҙнаһына ике сәғәт иҫәбенән урынлаштырылһа, тимәк, был әҫәрҙе өйрәнеү ике-өс аҙна самаһы бара. Ошондай ҙур күләмле проза класта өлөшләп анализлана. Шуға күрә айырым тексты (өлөштө) һәм әҙәби әҫәрҙе



*Тема:* С. Мифтахов. Әҙәби портрет.

“Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаһы (10-сы синыф).

*Маҡсат:* С. Мифтаховтың “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаһындағы проблемалар үҙенсәлегенә таянып, С. Мифтаховтың ижади эволюцияһын асыу, был әҫәрҙең актуаль булыуын күрһәтеү, уҡыусыларға яҙыусы ижадының идея-эстетик йәһәттән бер бөтөн икәнен аңлатыу; уларҙың үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү.

*Йыһазландырыу:* С. Мифтаховтың портреты, “Һаҡмар”, “Ялан ҡыҙы”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” әҫәрҙәре; “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” (3-сө том, 466 – 484-се биттәр), И.Д. Бураҡаев, М.С. Бураҡаева, М.Б. Юлмөхәмәтов “Башҡорт мәҙәниәте” (тормош һабаҡтары): 10-сы синыф өсөн дәреслек. – Өфө, 2001; Хөсәйенов Ғ. Б., Ғималова М. Ғ., Шәкүров Р. З. Башҡорт әҙәбиәте: Урта мәктәптең 10-сы синыфы өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2004.

Дәрес барышы:

**I.** *Ойоштороу мәле* (1 минут).

**II.***Инеш* (1-2 минут). Яңы темаға ҡарата уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын уятыу. Уның “Һаҡмар” драмаһы һәм Н. Ҡәриптең “Алма” әҫәре буйынса сағыштырма әңгәмә. Геройҙарының артабанғы яҙмыштары хаҡында фараздар.

**III.** *Яңы тема буйынса эш* (4-5 минут).

С. Мифтаховтың тормошо һәм ижады хаҡында һүҙ.

– Тыуған йылы, урыны, сығышы (1907, 10 ғинуар, Нуриман районы, Ҡыҙылъяр ауылы).

– Белем алған уҡыу йорттары (ауыл мәктәбе, Өфөләге уҡытыусылар курсы, Стәрлетамаҡ совет-партия мәктәбе, Мәскәүҙәге Көнсығыш хеҙмәтсәндәренең коммунистик университеты).

– Эшләгән урындары (мәктәп, сәнғәт техникумы директоры, Баймаҡ район гәзите мөхәррире, Башҡорт академия һәм рус драма театры директоры).

– Үҙе теләп һуғышҡа китеүе һәм 1942 йылдың февралендә һәләк булыуы.

Ижады.

– XX быуаттың 20–30-сы йылдарында башҡорт драматургияһы (М. Буранғолов, Д. Юлтый, М. Ғафури, Х. Ибраһимов, А. Таһиров, С. Ҡудаш һ.б.).

– С. Мифтахов драматургияһында заман темаһы (“Пандар иле”, “Зимагорҙар”, “Ялан ҡыҙы”).

в) күргәҙмә әсбаптар әҙерләү, уларҙы ҡулланыу урынын һәм ваҡытын асыҡлау.

Д ә р е с п л а н ы һәр дәрес өсөн мотлаҡ. Уҡытыусының эш тәжрибәһенә бәйле рәүештә, ул йә ентекле (киңәйтелгән) план, йә план-конспект формаһында була. Оҙаҡ йылдар эшләгән өлкән уҡытыусылар *киңәйтелгән* план менән сикләнә ала. Унда:

а) дәрестең өлөштәре теүәл билдәләнә, һәр өлөштөң ваҡыты күрһәтелә;

б) дәрестең дөйөм идея-эстетик йөкмәткеһе асыҡлана, өлөштәрҙең мәғәнәүи асылы төҫмөрләнә;

в) материалды үҙләштереүҙең төп алымдары һайлана, әңгәмә һорауҙары, яҡынса пландар әҙерләнә;

г) дәрес барышында кластың ҡатнашыу кимәле планлаштырыла.

Йәш уҡытыусылар тәүге йылдарҙа мотлаҡ рәүештә *план – конспект* менән эш итә. Конспектта дәрестең темаһы, маҡсаты, эш алымдары, йыһазландырыу саралары, күргәҙмә әсбаптар күрһәтелә. Унда шулай уҡ, ентекле планда күрһәтелгән мәсьәләләрҙән тыш, дәрестең эҙмә-эҙлекле барышы, тулы картинаһы күҙ алдына баҫтырыла. Йәғни, барышы тотош яҙыла, хатта уҡытыусы тарафынан биреләсәк һорауҙарға балаларҙың яҡынса яуабы ла билдәләнә. Улар тулы яуап ҡайтара алмаған осраҡҡа уҡытыусының үҙенең дөрөҫ яуап варианттары ла өҫтәп ҡуя.

Әҙәбиәт дәресенең бүтән предметтарҙан айырмаһы конспектта ла сағылыш таба: ул эмоциональ йөкмәткеле, композицияһы менән эстетик зауыҡ уятырлыҡ, «художестволы» итеп төҙөлә. Шул уҡ ваҡытта конспект – сәхнә әҫәре сценарийы түгел: дәрес барышында унан бер аҙ ситләшергә лә мөмкин. Әгәр уҡытыусы, рухланып, «ҡоро» конспектынан айырыла төшә икән, дәрестең-идея-тематик йөкмәткеһенә зыян килтермәһә, бындай ситләшеү һис тә яҙыҡ түгел.

---

*1. Йыллыҡ календарь планда мотлаҡ иҫәпкә алына торған эш төрҙәренә иғтибар итегеҙ.*
*2. Дәрескә ҡағылышлы пландарҙың һәр ҡайһыһының тәғәйенләнешен асыҡлағыҙ.*

**Әҙәбиәт дәресенең киңәйтелгән планы өлгөһө.**



тотош анализлау – икеһе ике нәмә. Тексты өлөшләтә анализлағанда шул өлөштәге хәл-ваҡиғалар, образ-персонаждар, һүрәтләү саралары өҫтөндә уҡыусыларҙың конкрет уйланыуы, күҙәтеүҙәре өҫтөнлөк ала. Ә әҫәрҙе тотош анализлау күберәк логик фекерләүҙе, абстракт уйлау эшмәкәрлеген талап итә; образдар системаһына, сюжет, композицияға, тел-стиль, художество үҙенсәлектәренә, идея йөкмәткеһенә дөйөм баһа рәүешендә анализ яһала.

Тексты өлөшләтә анализ барышында дәрестәр араһында бәйләнеш, бөтөнлөк булһын өсөн, уҡытыусы эште алдан уҡ дөрөҫ ойоштороу сараһын күрә, материалды сәғәттәргә бүлеп сыға. Йәғни, программа буйынса бирелгән сәғәттәргә әҫәрҙең ҡайһы урындарын класта анализлауҙы, ҡайһыларын өйҙә үҙ аллы өйрәнеүҙе планлаштыра. Әлбиттә, класта бергәләп һүҙ алып барыу өсөн әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен, төп геройҙарҙың иң мөһим һыҙаттарын, сюжет, композиция үҙенсәлектәрен асығыраҡ сағылдырырҙай өлөштәр һайлап алына. Д. Юлтыйҙың «Ҡан» романынан класта бергәләп анализлау өсөн, мәҫәлән, Булат, Байғужа, Новиков, Индрил һ.б. алдынғы ҡарашлы һалдаттар образдары аша империалистик һуғышҡа ҡаршы протест тойғоларын биргән эпизодтар уңайлы.

Эште ойоштороу этабында уҡытыусы теге йәки был тексты анализлауҙың характерын билдәләй. Анализдың характеры өйрәнелә торған тексттың күләменә һәм йөкмәткеһенә бәйле. Бөгөнгө көндә методист-ғалимдар анализдың өс төрлө характерын айырып ҡарайҙар (19, 146–148).

1. К ү ҙ ә т е ү х а р а к т е р ы н д а т и к ш е р е ү әҫәрҙең йөкмәткеһенә тәрән инмәй, ваҡ эпизодтарына ҡағылмай, дөйөм рәүештә өйрәнеүҙе күҙ уңында тота. Был осраҡта бәхәсле, проблемалы һорауҙар ҡуйылмай. Әҫәрҙең төп идеяһына бәйле хәл-ваҡиғалар һәм геройҙар мөнәсәбәте дөйөм планда ғына ҡарала. Ә.Хәкимдең “Өйөрмә” романының тәүге бүлектәрен ошондай характерҙа анализларға мөмкин.

2. Һ а й л а н ғ а н й ү н ә л е ш б у й ы н с а т и к ш е р е ү уҡыусыларҙың иғтибарын айырым бер проблемаға йүнәлдерә. Текст буйынса бирелгән һорауҙар ҡатмарлы, йөкмәткеле һәм уйландырырлыҡ була. Уларға бер генә төрлө, бәхәсһеҙ итеп яуап биреү мөмкин түгел. Һайланған йүнәлеш характерындағы анализ образдар өҫтөндә эшләгәндә ҡулайлы. Геройҙарға сағыштырма йә төркөмлө характеристика биргәндә проблемалы һорауҙар айырыуса уңышлы

файҙаланыла. Әйтәйек, V класта “Әминбәк” әкиәтенең геройҙары тураһында һүҙ алып барғанда, уларҙың барыһының да төп һыҙаттары хаҡында уйланырлыҡ, үҙ-ара сағыштырып ҡарарлыҡ проблемалы һорауҙар бирергә була. Мәҫәлән: “Ни өсөн батша сатраш уйнай, хатта үҙен рәттән өс тапҡыр отҡан кешегә үҙенең батшалығын бирергә лә әҙер?” Йәки: “Ни өсөн дейеү, башҡа әкиәттәрҙәге дейеүҙән айырмалы рәүештә, Әминбәккә мәрхәмәтлек күрһәтә, ҡоҙоҡ төбөнән ер өҫтөнә ҡырҡ силәк алтынын сығарыуын да ғәфү итҡән, ә үҙенә ярҙам итеп ебәргән?”

3. Е н т е к л е т и к ш е р е ү. Уның өсөн әҫәрҙең иң үҙәк бүлектәре, образдарҙың иң әһәмиәтлеләре һайлап алына. Ентекле характерҙағы анализ аша уҡыусылар әҫәрҙең бөтөн асылына нығыраҡ төшөнәләр, идея-эстетик йөкмәткеһен тәрәнерәк аңлайҙар, бүтән бүлектәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙың һәм икенсе пландағы образдарҙың ролен дә асығыраҡ күҙ алдына баҫтыралар. Ентекле тикшереү ҙур күләмле һәр әҫәрҙе өйрәнгәндә булырға тейеш. Әммә уның менән үтә мауығырға ярамай. Бөтә әҫәрҙе быньдай характерҙа анализлау мөмкин түгел. Сөнки ул, беренсенән, күп ваҡытты ала; икенсенән, әҫәрҙе бүлгесләүгә, балаларҙы ялҡытыуға килтереүе ихтимал. Булат Рафиҡовтың “Эйәрләнгән ат” тарихи фаразын өйрәнеүгә күпмелер сәғәт ваҡыт бирелгән икән, – тимәк, ентекле тикшереү өсөн уҡытыусы уның бер генә сәғәтен файҙалана ала. Салауаттың күңел донъяһы, кисерештәре, Рогервик крепосындағы яҙмышы, унда булып ятҡан кисҡен хәл-ваҡиғаларҙа батырҙың тотҡан роле кеүек эпизодтар, әлбиттә, ентекле характерҙағы анализдан ситтә ҡалырға тейеш түгел.

Бер нисә дәрес буйы өйрәнелә торған ҙур күләмле әҫәрҙәр менән эш иткәндә анализдың юғарылағы өс төрлө характеры ла ҡатнаша. Шуға күрә лә уҡытыусы алдан уҡ, эште ойоштороу этабында уҡ, ҡайһы бүлекте ниндәй характерҙа анализларға кәрәклеген билдәләп сыға.

Анализ ваҡытында әҫәрҙең бөтә туҡымаһы тураһында һүҙ бара; ул төрлө нөктәнән, төрлө позициянан тикшерелә. Шулдй ҙа бөтә осраҡта ла мотлаҡ рәүештә ҡарала торған позициялар бар. Улар анализдың состав өлөштәрен, икенсе төрлө әйткәндә, элементтарын, компоненттарын тәшкил итә. Урта кластарҙа художестволы әҫәрҙе анализлау түбәндәге элементтарҙан тора:

1.Әҫәрҙе идея йөкмәткеһе һәм художество формаһы берлегендә



Уҡыу йылы барышында әҙәбиәт уҡытыусыһы күп төрлө пландар менән эш итә. Уларҙың ҡайһылары ағымдағы билдәле бер сара өсөн төҙөлөүе ихтимал. Шулай ҙа предмет буйынса мәжбүри рәүештә махсус төҙөргә һәм тормошҡа ашырырға кәрәк булған рәсми пландар ҙа бар. Улар өс төрлө: йыллыҡ календарь план, тематик пландар, дәрес пландары.

Й ы л л ы ҡ к а л е н д а р ь п л а н – ул әҙәбиәт уҡытыусыһының мәктәптәге дөйөм эшмәкәрлегенә ҡағыла һәм уҡыу йылы башланыр алдынан төҙөлә. Уҡытыусы үҙенең ҡайһы кластарҙа дәрес алып барасағын иң тәү сиратта күҙ уңында тота һәм йыл буйына планлы рәүештә тормошҡа ашырыу өсөн түбәндәге мәсьәләләрҙе иғтибар үҙәгенә ҡуя:

а) әҙәби материалды сиректәргә бүлеү;

б) программаға ярашлы рәүештә, уҡыусыларҙың әҙәби әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡыу графигын төҙөү;

в) яҙыусы ижадын һәм уның әҫәрҙәрен, юғары кластарҙа әҙәби процесты өйрәнеүҙе сәғәттәргә бүлеү;

г) әҙәбиәт теорияһы буйынса төп төшөнсәләрҙе, мәсьәләләрҙе үҙләштереүҙе билдәләү;

д) тасуири уҡыуға өйрәтеү текстарын һайлау; үткәреү ваҡытын тәғәйенләү;

е) кластан тыш эштәрҙең төп сараларын билдәләү;

ж) телмәр үҫтереү буйынса эш төрҙәрен асыҡлау.

Дәрестең үҙенә генә ҡағылышлы пландар түбәндәге төркөмдәргә бүленә.

Т е м а т и к п л а н ҙур темаларҙы, айырым дәүерҙе өйрәнеү өсөн төҙөлә. Урта һәм юғары кластарға тәғәйенләнгән тематик пландар бер-береһенән айырыла. Юғары кластарҙа предметты тарихи-хронологик планда өйрәнеү мотлаҡ иҫәпкә алына. Бында тематик план объекты булып айырым дәүер әҙәбиәте, яҙыусының бөтә ижады хеҙмәт итергә мөмкин. Урта кластарҙың планы ысын мәғәнәһендә тематик характер ала – билдәле бер тема (йыл миҙгелдәре, Тыуған ил, тарихи байрамдар һ.б.) өсөн махсус төҙөлә. Ике осраҡта ла тематик план төҙөү процесында бер үк эштәр иҫәпкә алына:

а) материалды дәрестәргә бүлеү;

б) һәр дәрестең төп йөкмәткеһен, асылын билдәләү;

в) эш алымдарын барлау;

**3**. Нимә ул прототип? (прототип – ул яҙыусының тормоштағы бер реаль шәхесте өлгө итеп алыу нигеҙендә һүрәтләнгән образ).

Шулай итеп, командаларҙың белемен тикшерҙек. Уларҙың артислыҡ таланттарын да һынарға ваҡыт етте.

Дүртенсе тур

Киләһе турыбыҙ – М. Буранғолов әҫәрҙәренән бер өҙөктө сәхнәләштереү.

10а класы, һеҙҙең иғтибарығыҙға "Таштуғай" драмаһын тәҡдим итә. (Сығыш).

10б командаһы башҡарыуында – "Ашҡаҙар" драмаһы. Рәхим итегеҙ! (Сығыш).

10в командаһы "Башҡорт туйы" драмаһы миҫалында үҙ таланттарын күрһәтә. (Сығыш).

Бәйгебеҙҙең киләһе өлөшөнә күскәнсе, йыр тыңлап алайыҡ.

Хәҙер командаларыбыҙҙың зирәклеген һынап ҡарарға ваҡыт етте.

Бишенсе тур

Һәр командаға Һ. Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романы буйынса кроссворд бирелә. Биш минут эсендә ҡайһы команда кроссворд һорауҙарына күберәк дөрөҫ яуап ҡайтарыр икән? (Кроссворд таратыла, ваҡыт бирелә. Яуаптары жюри ағзаларына тапшырыла).

Алтынсы тур

Бәйгебеҙҙең һуңғы турына килеп еттек. Командаларға яҙыусының бер әҫәре буйынса мозаика төҙөргә бирелә. Ҡайһы команда отҡорораҡ икән? (Яуаптары: Р. Ниғмәти "Һаҡмар_ҡыҙы"; М. Буранғолов "Башҡорт туйы"; Д. Юлтый "Атлан, батыр").

Хөрмәтле ҡунаҡтар, жюри ағзалары еңеүселәрҙе билдәләгәнсе, сәхнәлә – бейеү.

Һүҙҙе жюри ағзаларына бирәйек. (Жюриҙың һығымталарын тыңлау, бүләктәр тапшырыу)

Ошонояң бәйге тамам. Һау булығыҙ!

*Төҙөүселәре: Әхмәтгәрәев И. А., Әхмәтшина А. Н., Мәсәғүтов Т. З., Янбаева Н. Р. БДУ студенттары, 2008.*

**Әҙәбиәт уҡытыусыһының эш пландары**



дөйөм рәүештә анализлау.

2.Геройҙар, персонаждар, образдар өҫтөндә эш һәм уларға характеристика.

3.Сюжет һәм композиция өҫтөндә эш.

4.Әҫәрҙең жанр үҙенсәлектәрен асыҡлау.

5.Тел-стиль, һүрәтләү саралары, художество үҙенсәлектәрен өйрәнеү.

Был элементтарҙың ниндәй тәртиптә килеүен, әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһен һәм дәрестең маҡсатынан сығып, уҡытыусы билдәләй. Анализ тәртибе әҫәрҙең композиция үҙенсәлектәрен һәм идея йөкмәткеһен билдәләүҙән дә башланыуы ихтимал. Күп осраҡта ул образдарға характеристика биреүҙән башлана. Тел-стиль саралары өйрәнеүҙең генә анализ тәртибендә махсус урыны булмаҫҡа мөмкин.

Юғары кластарҙа әҙәби әҫәрҙе анализлау тарихи дәүер, яҙыусының үҙ дәүерендә тотҡан урыны менән тығыҙ бәйләнештә алып барыла. Конкрет әҫәр яҙыусының дөйөм ижады фонында өйрәнелә, уның аң-белемен, уй-ҡараштарын сағылдырыусы һыҙаттарға иғтибар ителә. Яҙыусының ижад биографияһында был әҫәрҙең роле, йәки әҙәби процеста (әҙәбиәт тарихында) был яҙыусының тотҡан урыны билдәләнә. Юғары кластарҙа анализ яҡынса түбәндәге элементтарҙы үҙ эсенә ала:

1. Яҙыусы йәшәгән дәүерҙең тарихи шарттары. Шул дәүерҙә көн тәртибенә тормош ҡуйған төп ижтимағи проблемалар. Уларҙың башҡорт әҙәбиәтендә яҡтыртылышы.

2. Яҙыусы, уның ижтимағи ҡараштары.

3. Әҫәрҙең төп идея-тематик йүнәлеше.

4. Төп геройҙар. Әҫәрҙә күтәрелгән проблемаларҙы асыҡлауҙа уларҙың роле.

5. Икенсе дәрәжәләге геройҙар. Уларҙың төп геройҙар менән бәйләнеше. Образдар системаһы.

6. Композиция, композицион саралар. Сюжет һәм уның үҫеше, элементтары. Төп һәм ярҙамсы элементтар. Әҫәрҙең идея йүнәлешен асыҡлауҙа сюжет үҫешенең тотҡан урыны. Сюжет һыҙыҡтары.

7. Әҫәрҙең теле – яҙыусының аралашыу ҡоралы. Стиль үҙенсәлектәре, художество саралары.

8. Жанр үҙенсәлектәре, жанр формаһы.

9. Әҙәби традициялар һәм яҙыусының ошо конкрет әҫәр менән

индергән яңылығы.

10. Үҙ заманы һәм киләсәк өсөн яҙыусының ижтимағи-сәйәси әһәмиәте (В. В. Голубков төркөмләүе нигеҙендә өҫтәп бирелә: 6, 281, 282).

Күренеүенсә, юғары кластарҙа конкрет әҫәрҙе анализлау яҙыусы шәхесенең уй-ҡараштары менән тығыҙ бәйләнештә бара. Анализ барышында алда күрһәтелгән пункттарҙың барыһы ла тигеҙ ҡатнашырға тейеш, тигән һүҙ түгел. Әйтәйек, тәүге ике пункт (яҙыусы йәшәгән шарттар, авторҙың ижтимағи ҡараштары) инеш дәрестә үк ентекле асыҡлана; бында иһә, уҡыусыларҙың белгәнлеген күҙ уңында тотоп, һүҙ ыңғайы иҫкә төшөрөү ҙә етә. Аҙаҡҡы ике пункт мәсьәләләре айырым дәүерҙең әҙәби процесын үткәндә ярайһы уҡ ентекле өйрәнелә. Анализ ваҡытында конкрет яҙыусыға ҡағылышлы дәлилдәр менән тулыландырып ҡына үтергә була. Ә анализ элементтарының эҙмә-эҙлегенә килгәндә, урта кластарҙағы кеүек үк, уҡытыусының дәресте ижади ойоштороу оҫталығынан тора.

Әҙәби әҫәрҙе анализлауҙың төрлө методик алымдары бар. Традицион методикала урта һәм юғары кластарҙа түбәндәге алымдарға айырыуса йыш мөрәжәғәт ителә.

I. Ә ң г ә м ә - а н а л и з. Әҙәбиәт дәресендә уҡыусылар менән әңгәмәләр йыш ҡына үткәрелергә мөмкин. Ә анализ маҡсатындағы әңгәмә бүтәндәренән айырыла: был осраҡта ул әҫәрҙең асылына төшөнөүҙе маҡсат итеп ҡуя. Уҡытыусының балаларға биргән һорауҙары ғәҙәттәгенән төплөрәк, тәрәнерәк була, яуаптар ҙа әҫәргә анализ яһау йүнәлешендә бара; ҡайһы бер ауырыраҡ һорауҙарға уҡытыусы үҙе аңлатма бирә. Был алым нигеҙҙә урта кластарҙа ҡулланыла. V–VIII класс уҡыусылары әҫәрҙе тотошлай үҙҙәре анализлай алмай әле. Шуға ла уҡытыусының үҙ яуаптары ҙур роль уйнай. Д. Юлтыйҙың «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһен үткәндә, Апуш образына характеристика биреү маҡсатында әңгәмә-анализ түбәндәге һорауҙар буйынса барырға мөмкин:

1. Әҫәрҙә кем исеменән һүҙ бара? (Үҙәк герой Апуш исеменән).

2. Автор ни өсөн беренсе заттан хикәйәләү юлын һайлаған? (Баланың донъяға ҡарашы, кисерештәре күҙлегенән быуат башындағы дәһшәтле тормош картиналарын йәш уҡыусыға аңлайышлыраҡ, ентеклерәк күрһәтеү өсөн. Төп геройҙың эске донъяһын тулыраҡ асыу өсөн).

3. Кем ул Апуш? (Типография эшсеһе Ҡотоштоң улы).



авторы (Ғ. Хәйри).

3. Был шәхес 1890–1970 йылдарҙа йәшәй. Сығышы менән Юрматы ырыуынан. Бөйөк тарих белгесе, ғалим-төркиәтсе булараҡ билдәле. Башҡорт автономияһын төҙөү өсөн ҙур көс һала. “Башҡортостан тарихы” әҫәренең авторы. Ғүмеренең һуңғы йылдары Башҡортостандан ситтә үтә (З. Вәлиди).

*Өсөнсө бирем* - командаларға яҙыусы ижады буйынса берәр һорау бирелә.

**1**. Һәҙиә Дәүләтшинаның тәүге хикәйәһе нисек атала? (“Һылыуҡай - пионерка”).

**2**. Ғ. Сәләмдең был әҫәре өс өлөштән тора. Беренсе өлөш – “Көтөү”, икенсеһе – “Ил шатлығы менән”, өсөнсөһө – “Ҡала урамында” тип атала. Әҫәрҙең исемен әйтегеҙ. (“Өс йыр” поэмаһы).

**3.** Р. Ниғмәти үҙенең был әҫәрендә Вася исемле летчик образында фронтовиктарҙың батырлыҡ сифаттарын дөйөмләштерә. Әҫәр нисек атала? (“Герой тураһында поэма”).

*Дүртенсе бирем* – командаларға яҙыусының айырым бер әҫәренән персонаждар һанап кителә. Шуларҙан сығып, командалар яҙыусының һәм әҫәренең исемен билдәләй.

**1**. Гөлбикә, Елизавета, Наташа, Ишмырҙа кантон, Һөйөндөк, Таңсулпан, Вася, Ҡарағол, Ҡыраубикә, Иван Иванович. (Д. Юлтый “Ҡарағол”).

**2**. Йәнгилде, Йомабикә, Ҡарасәс, Асия, Һөрәйрә, Ханнан, Баҙарғол, Аҙнабикә, Баҙыян, Тимеркәй, Үтәгол, Юлдыбай, Гөлбикә, Әлекәй, Тәүкә. (М. Буранғолов “Башҡорт туйы”).

**3.** Ғариф, Мирза, Исмәғил, Исмәғил, Шәмси, Бәһау, Ғәли, Вахит, Сабира, Сәхибә, Солтан. (Ғ. Хәйри “Боролош”).

*Бишенсе бирем* – командаларға әҙәбиәт буйынса һорауҙар бирелә.

**1.** Нимә ул – “автор теле” һәм нимә ул – “персонаждар теле”? (автор теле – ул бөтә әҫәрҙең теле. Бөтә хәл-ваҡиғаларҙы, тәбиғәт күренештәрен автор үҙе әҙәби телдә тасуирлай. Персонаждар теле – әҫәрҙә алынған персонаждарҙың үҙ исемдәрен һөйләгән өлөштәре).

**2**. Нимә ул роман-эпопея? (роман-эпопея тип халыҡ тормошондағы, тарихындағы байтаҡ йылдарҙы эсенә алған, төрлө яҙмышлы, төрлө социаль-профессиональ сығышлы геройҙарҙы кәүҙәләндереүсе, бер нисә романды берләштереүсе ҙур күләмле проза әҫәрҙәре атала).

Һаҡлайһың ямғыр, һыуыҡ елдән,
Файҙаң күп миңә. (Д. Юлтый “Шинель”).

2. Бөгөн мин ниндәй шат,
Ҡыуанысым һыймай үҙемә!
Бөгөн мин беренсе ҡат һинең ҡандың
Тибеүен тойҙом йөрәгем төбөндә.
Кемгә оҡшайҙыр ул:
Һиңә микән,
Әллә юҡһа миңә оҡшармы?
Ир баламы, ҡыҙмы?
Беҙ бит уға
Иң яратҡан исем ҡушырбыҙ...
(Ғ. Сәләм “Бала” поэмаһы).

3. Ҡайһы ерҙә һине ҡыуып етер
Ошо хатҡа яҙған сәләмдәр?
Ғәжәпләнәм: хаттар оҙаҡ бара,
Оҙаҡ килә тигән әҙәмгә.

Мин ризамын, әгәр һине ҡыуып
Оҙаҡ барһалар ҙа хаттарым.
Тимәк, минең егетем алға бара,
Дошман нығытмаһын аҡтарып.
(Р. Ниғмәти “Һинең кәләшеңдең хаттары”).

*Икенсе бирем* – командалар яҙыусының биографияһынан килтерелгән мәғлүмәт буйынса уның исемен билдәләй.

1. Был шәхес 1893–1938 йылдарҙа йәшәй. Атаһының исеме Ишембай. Ике ағаһы менән бергә Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Революциянан һуң Башҡортостанда заманса яңы типография булдырыуҙы ойоштора, журналдар сығарыу эшен яйға һала. Хәҙерге “Башҡортостан” гәзите, “Ағиҙел”, “Башҡортостан уҡытыусыһы”, “Октябрь” журналдарының мөхәррире булып эшләй. (Д. Юлтый).

2. Был шәхес 1903–1938 йылдарҙа йәшәй. Өфө район комитетында, “Башҡортостан”, “Яңы ауыл”, “Башҡортостан йәштәре” гәзиттәре редакцияһында эшләй. 1927 йылда Башҡортостан пролетар яҙыусылар ассоциацияһының (БАПП) ойоштороуҙа ҡатнаша. “Кооператорҙар”, “Ҡатын”, “Мәхфүҙә” повестарының



4. Йәш герой ниндәй бәхетһеҙлектәргә дусар була? Уларҙы нисек кисерә? (Әҫәр йөкмәткеһенән сығып яуап бирелә).

5.Революционерҙарҙың йәшерен заданиеларын үтәүгә Апуш нисек ылығып китә? Быға уның ниндәй сифаттары ярҙам итә? (Ололар унда атаһының характер һыҙаттарын күрәләр...).

6. Типография эшселәре Апушты ни өсөн ярата? (Ул ололар ҡушҡан эштәрҙе намыҫ менән, еренә еткереп үтәргә тырыша).

7. Листовкалар таратып йөрөгәндә жандармдар ҡулына эләккәс, ниндәй хата ебәрә? (Юл яҙлыҡтырмай, туп-тура өйгә ҡайта).

8. Нисек уйлайһығыҙ, Апуш ни өсөн хаталана? (Уның, әлбиттә, тәжрибәһе юҡ. Апуш йәшерен эшләүҙең иң ябай юлдарын да белмәй).

9. Был образ һеҙгә нимә хаҡында һөйләй? (Революцион көрәш йылдарында ярлы эшселәрҙең балалары ла тигеҙһеҙлекте, ауырлыҡтарҙы үҙ елкәләрендә татый. Уларҙың ҡайһылары үҫмер саҡтан уҡ революцион эшкә ылыға, был изге эшкә йәне-тәне менән бирелгәнлек тәрбиәләй, сыныға, тәжрибә туплай).

Уҡыусылар 2, 3, 5, 6, 8, 9-сы һорауҙарҙың осона үҙ аллы сыға алмаясаҡ. Уларҙың яуабын уҡытыусы йәйә эсендә ҡыҫҡа вариантта күрһәтелгән йүнәлештәрәк киңерәк итеп тулыландырһа, ошондай әңгәмә-анализ барышында Апуш образының мөһим характер һыҙаттары, геройҙың әҫәрҙәге урыны асығыраҡ күҙ алдына баҫа.

II. А ң л а т м а л ы  у ҡ ы у. Тексҡа аңлатма (комментарий) яһағанда, анализ элементтары ла ҡулланыла. Был алымды әҫәр тексы ҡатмарлы булғанда файҙаланыу урынлы. Ҙурыраҡ күләмле прозаның тәүге бүлектәрен, кульминацион эпизодтарын өйрәнгәндә урта кластарҙа аңлатмалы уҡыуға мөрәжәғәт итеп була. Әҫәр йөкмәткеһе буйынса балаларҙы уйландырырлыҡ ҡатмарлы һорауҙар бирелә. Әммә уларҙы әңгәмә-анализ һорауҙары менән бутарға ярамай. Әгәр әңгәмә-анализ ваҡытында ҡайһы бер һорауҙарға класс яуап бирһә, бында иһә бөтәһе лә уҡытыусы тарафынан аңлатыла, һорауҙар аңлатмалы уҡыу барышында балаларҙың иғтибарын мөһим мәсьәләләргә йүнәлдереү, уйландырыу хеҙмәтен үтәй. Әйтәйек, социаль тигеҙһеҙлек ҡоролошонда ябай кешенең трагик яҙмышы һәм уның сәбәптәре тураһында балалар уйлана-уйлана тыңлаһын өсөн, Д. Юлтыйҙың «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһен аңлатмалы уҡыу алымы менән анализларға мөмкин.

III. Һ ө й л ә ү – а н а л и з. Әҫәрҙең класта уҡып өлгөрөлмәгән

бүлектәрен уҡытыусы анализлы һөйләү ярҙамында еткерә. Әлбиттә, бында беренсе сиратта ҙур күләмле повесть, романдар тураһында һүҙ бара. Урта кластарҙа уҡ, мәҫәлән, Н.Мусиндың “Атайымдың ос һәнәге”, Ә.Хәкимовтың “Ҡарт һалдат, йәш һалдат” хикәйәләре, М.Кәримдең “Өс таған”, Р.Солтангәрәевтың “Осто бөркөт”, З.Биишеваның “Дуҫ булайыҡ”, Ғ.Хөсәйеновтың “Алдар батыр ҡиссаһы”, Б.Рафиҡовтың “Эйәрләнгән ат”, Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә”, Ә.Әминевтың “Ҡытайгород”, Р.Камалдың “Таня-Таңһылыу” повестарынан, Я.Хамматовтың “Бөртөкләп йыйыла алтын”, Ғ.Ибраһимовтың “Кинйә” романдарынан өҙөктәрҙе дәрестә тотош уҡыу мөмкин түгел. Ә юғары кластарҙың программаһындағы күп китаплы романдарҙы әйтеп тораһы ла юҡ. Бындай әҫәрҙәрҙең идея-тематик асылын тулыһынса күҙ алдына баҫтырыу уҡытыусының һөйләү-анализы аша тормошҡа ашырыла. Ләкин ул әҫәрҙе тотош һөйләп сығырға тейеш, тигән һүҙ түгел. Класта үтелгән өҙөктәргә бәйле бүлектәрҙең иң мөһим урындары ғына анализлана. Бер юлы бер нисә бүлеккә һөйләү-анализ үткәрергә мөмкин.

Юғары кластарҙа ошо уҡ алымды икенсе төрлөрәк ойоштороп була. Айырым бүлектәр уҡыусыларға лекция, доклад, реферат, .сығыш рәүешендә бүлеп бирелә, уларға үҙ аллы әҙерләнеү өсөн тейешле әҙәбиәт күрһәтелә. Әммә сығыш яһаусаҡ уҡыусылар үҙҙәренең төп маҡсатын – әҫәр тураһында анализлы фекер йөрөтөүҙе онотторға тейеш түгел.

IV. П р о б л е м а л ы һ о р а у ҙ а р я р ҙ а м ы н д а а н а л и з. Әҫәргә анализ яһауҙы проблемалы һорауҙарһыҙ күҙ алдына баҫтырыу мөмкин түгел. Алда билдәләнгән алымдарҙа ла уҡытыусының класҡа биргән һорауҙарында, аңлатмаһында, һөйләүендә проблемалылыҡ элементтары булырға тейеш. Бынан тыш, айырым әҫәрҙәр махсус рәүештә проблемалы һорауҙар биреү алымы менән анализлана. Әгәр уҡытыусының һорауының нигеҙендә ҡапма-ҡаршылыҡ ятһа, йәки уға бер нисә төрлө яуап биреп булһа һәм яуап биреүселәрҙең һәр ҡайһыһы үҙен хаҡлы тип һанай алһа – был проблемалы һорау, тигән һүҙ. Тимәк, бындай алым менән анализлау өсөн үҙҙәре лә тәү ҡарамаҡҡа ҡапма-ҡаршылыҡлы, уҡыусыны уйландырырлыҡ, бәхәс тыуҙырыр-лыҡ әҫәрҙәр, бүлектәр, эпизодтар, геройҙар һайлап алына. Әлбиттә, уҡыусылар проблемалы һорауға шунда уҡ сатнатып яуап бирә алмайҙар, ҡайһы бер проблемаларҙың осона уларҙың үҙ аллы сыға алмауҙары ла ихтимал. Уҡытыусы был осраҡта яуаптарҙы үҙе



кешегә йәмғиәт тормошоноң, тәбиғәттең серле яҡтарын асып бирә, замандың ҡатмарлы һәм мөһим мәсьәләләренә яуап ҡайтара, киләсәктә хәл ителергә тейешле мәсьәләләргә юл яра. Шуның менән ул кешенең донъяға ҡарашы формалашыуына һәм үҫеүенә булышлыҡ итә, уны алға әйҙәй, бөйөк эштәргә рухландыра.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле уҡытыусылар, уҡыусылар! Шулай итеп, бөгөнгө әҙәби кисә-викторинабыҙҙы башлайбыҙ. Жюри ағзалары менән танышып китәйек.

Беренсе тур

Командалар менән танышабыҙ. Үҙҙәренең командаһы менән 10а класы таныштырып китә. Сәхнәгә рәхим итегеҙ!

(Команданың исеме: Аҡ нур

Девизы: Ал да нур сәс халҡыңа!

Беҙҙең батшалыҡ – әҙәбиәт, беҙҙә йәшәй әҫәрҙәр, беҙҙең илдә әҫәрҙәрҙе уҡып, танып өйрәнәләр).

10а класына рәхмәт! Хәҙер сәхнәгә икенсе команда – 10б класы уҡыусыларын саҡырабыҙ. Рәхим итегеҙ! (Сығыш яһай).

Рәхмәт! Һүҙҙе 10в класына бирәйек. Рәхим итегеҙ!

Командаларға рәхмәт, барыһы ла ентекле итеп әҙерләнгәндәр. Бәйгебеҙҙең икенсе турына күсер алдынан командаларҙы сәхнәгә саҡырабыҙ.

Икенсе тур

Һәр команда өсәр һорау төҙөп килергә тейеш ине. Беренсе булып үҙенең һорауҙарын 10а класы 10б класына бирә; 10б класы 10в - ға һәм 10в үҙенең һорауҙарын 10а-ға бирә. (Бер-бер артлы һорауҙар һәм яуаптар).

Командаларға рәхмәт, бөтә һорауҙарға ла яуап бирергә тырыштылар. Яуаптарын жюри баһалай. Командаларҙың әҙәбиәт буйынса белемдәрен тикшерергә ваҡыт та килеп етте.

Өсөнсө тур

*Беренсе бирем* – һәр командаға берәр шиғырҙан өҙөк таратыла. Команда бирелгән өҙөк буйынса шиғырҙың исемен һәм авторын билдәләргә тейеш.

1.Эй шинель, минән иҫәпһеҙ
Афарин, рәхмәт һиңә.

Бәйгеләрҙә сапмаған;
Дөйәнең ниһен аҡтайһың –
Алыҫ ергә бармаған...

М. Аҡмулла.

5. *Уйҙарым (ҡобайыр)*

Ярты төндә уянып,
Йоҡлай алмай уйланып,
Уйлап ятҡан уйҙарҙы –
Таралышҡан ҡуйҙарҙы –
Ҡалай итеп йыяйым,
Ҡалай итеп тыяйым?..

6. *Аманат (ҡобайыр)*

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар...

Р. Ғарипов.

### *Бишенсе тур – Финал*

*Егет*: Финалға беҙҙең бары тик бына өс кеше генә үтте. Хәҙер беҙ ошо иң-иңдәре араһынан "Зирәктәр һәм отҡорҙар" уйынының еңеүсеһен билдәләргә тейешбеҙ. Кем булыр ул? Быға асыҡ яуапты жюри ағзаларының һорауҙарына яуап биргәндән һуң белербеҙ.

(жюри ағзалары уйында ҡатнашыусыларға һорауҙар бирә)

*Ҡыҙ:* Шулай итеп, күңелдәрҙе күтәреп алдыҡ, ә беҙҙең уйын дауам итә. Беҙгә хәҙер бик тә көсөргәнешле уйындан һуң еңеүсене билдәләргә ваҡыт етте. Һүҙ жюри ағзаларына.

(Уйында ҡатнашыусыларҙы бүләкләү)

*Р. М. Дихин төҙөнө, БДУ студенты, 2008.*

### 3. Әҙәби викторина

Алып барыусы: ....

Ҡатнашыусылар: 10а, 10б, 10в класс уҡыусылары

Жюри ағзалары:

"Әҙәбиәт – ул ян кереше.ул булмаһа, кеше менән рух та ауа" – тип әйткән бөйөк ғалим һәм яҙыусы Ғәйса Хөсәйенов. Әҙәбиәт



әйтә һалып бирергә ашыҡмай, класҡа уйланырға, төрлө версиялар эҙләргә, уларҙы сағыштырып ҡарарға, бәхәсләшергә ирек бирә. Бергәләп табылған, күпселек осраҡта нигеҙҙә дөрөҫ йәки дөрөҫкә яҡын булған яуаптарҙы уҡытыусы йомғаҡлап, еренә еткереп ҡуя. Мәҫәлән, И.С.Тургеневтың "Муму" исемле повесын иҫкә төшөрәйек. Герасим, этен ниндәй дәрәжәлә яратыуына ҡарамаҫтан, барыня ҡушҡас, уны үҙе үлтерергә ҡарар итә. Ни өсөн шулай эшләй һуң? Яратҡан йән эйәһен үҙ ҡулдарың менән юҡ итеү мөмкинме? Ошо хаҡта балаларға тәрән уйланырға урын бар. Яуаптар, әлбиттә, төрлөсә буласаҡ. «Урал батыр» эпосын, Байыҡ-Айҙар сәсән импровизацияларын, Ш. Бабич шиғырҙарын, Д. Юлтыйҙың «Ҡан» романын, И. Насыриҙың «Сибай», «Еңелгән ятыу», З. Биишеваның «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар...» повестарын, С. Мифтаховтың «Һаҡмар», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» драмаларын, Ғ. Сәләмдең «Бала», Р. Ниғмәтиҙең «Һаҡмар ҡыҙы», М. Кәримдең «Ҡара һыуҙар» поэмаларын анализлағанда проблемалы һорауҙар биреү алымын ҡулланыу үҙенән-үҙе һоралып тора. Мәҫәлән, «Ҡара һыуҙар» поэмаһындағы өс характер (шағир, ҡатын, Яҡуп) тәбиғәтен асҡанда, Яҡуп образына ҡағылышлы проблемалы һорауҙарҙың ҡайһы бер фрагменттары түбәндәгесә булыуы мөмкин[1]:

1. Шағирҙың һуғыш сәғәттәренә ҡарата: «Мең ғүмерҙән оҙонораҡ ярты көн бар кискә тиклем» тигән һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ?

2. Яҡуп үҙенең һуғышта тере ҡалырға тейешлеген һөйгәненә кәрәклеге менән аңлата. Был дөрөҫмө?

3. Яҡуптың дошманға әсир төшөргә ниәтен белһә лә, юлдашы (шағир) уның яраларын бәйләй. Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ?

4. Тубыҡланды. Егерме йыл
Ерҙә атлап йөрөгән имеш.
Тубыҡланды һәм йәшәргә
Теләне ул ошо килеш.

Яҡупҡа ҡарата әйтелгән был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.

---

1 Баш□орт телен □□м □□□би□тен м□кт□пт□ у□ытыу м□сь□л□л□рен□ арнал□ан ф□нни-практик конференцияларҙа □арал□ан асы□ д□рест□р□□ге проблемалы □орау□ар фай□аланылды.

5. Хатта дошмандарҙың ҡәбере бар,
Өңөлһә лә, әрем баҫһа ла,
– тип әйтелә поэмала. Ә ни өсөн Яҡуптың ер йөҙөндә ҡәбере юҡ?

6. Поэмала ун көн һәм ун йыл тураһында телгә алына. (Яҡуп үҙенең юлдашы менән бергә көнсығышҡа ҡарай ун көн килә; ҡатын һуғыштан һуң уның тураһында ун йыл хәбәр көтә). Был ике ваҡыт араһында ниндәй-бәйләнеш бар?

7. Ҡатын үҙенең яурынынан иҙәнгә шыуып төшкән лысма еүеш ҡара шәлен тапап китә. Был эпизод менән шағир ни әйтергә теләгән?

Бөтә яуаптарҙан сығып Яҡуп образы тураһында аҙаҡҡы һүҙҙе әйткәндә уҡытыусы Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбандары, үлем менән үлем араһында ла айырма барлығы, йөрәктәрендә Тыуған ил тойғоһо булмаған әҙәмдәрҙең генә кешеләрсә үлә белмәүҙәре хаҡында һүҙ йөрөтә. Поэманың бүтән персонаждары ла проблемалы һорау менән анализлау өсөн ярашлы. Ҡатын образына ҡағылышлы һорауҙар менән тоғролоҡ, сабырлыҡ һәм ғорурлыҡ, шағир образы аша кешелеклелек һәм нәфрәт тойғолары хаҡында һығымталар яһап була.

Анализдың юғарыла тәҡдим ителгән алымдары, – ҡабатлап һыҙыҡ өҫтөнә алабыҙ, – тардиционметодикала электән киң таралғандары, айырыуса йышыраҡ ҡулланылғандары. Был өлкәлә уҡытыусының ижади эшмәкәрлеге өсөн киң мөмкинлектәр бар. Ул үҙенең яңынан-яңы алымдарын уйлап сығара ала. Ә инде яңылыҡлы технологияларға нигеҙләнгән дәрестәрҙә фәҡәт һәр уҡытыусының үҙенең яңылыҡлы алымдары урын алырға тейеш.

---

*1.Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү этабында анализдың урынын билдәләгеҙ.*

*2.Анализдың маҡсаттарының бер-береһе менән бәйләнешен асыҡлағыҙ.*

*3.Өлөшләтә һәм дөйөм анализдың асылын аңлатығыҙ.*

*4.Анализдың характеры ниндәй принцип менән билдәләнә?*

*5.Урта һәм юғары кластарҙа анализ ниндәй элементтарҙы үҙ эсенә ала? Юғары кластарҙа ниндәй элементтар өҫтәлеүенә иғтибар итегеҙ.*

*6.Анализдың традицион методикала киң таралған алымдарын үҙләштерегеҙ. Традицияға әйләнеп барған яңылыҡлы дәрестәрҙә уҡытыусылар тағы ла ниндәй алымдарға иғтибар итә? Үҙегеҙгә таныш булғандарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.*



диңгеҙе былай ҡаты бәғерле булманы. Юламан ҡарттың ейәнсәрен – Зөлхизә һылыуҙы бер ҡасан да ризыҡтан махрүм итмәне. Был юлыла буш итмәҫ, ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны Рәхимле диңгеҙе... ”

Яуап. З. Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәтенән өҙөк.

“Йә, бөгөн ниндәй ризыҡ бирер уға һөйгән Диңгеҙе?.. Ниндәй һәйбәт балыҡ бүләк итер? Әллә бер балыҡ та бирмәҫме?.. Ул саҡта Юламан ҡарт үҙенең берҙән-беренә, кескәй ейәнсәренә, нимә ашатыр?.. Шулай уҡ Зөлхизәһе ризыҡһыҙ ҡалырмы ни бөгөн? Юҡ, бының булыуы мөмкин түгел. Уның ҡырыҫ, ләкин йомарт ҡылыҡлы Диңгеҙе былай ҡаты бәғерле булманы. Юламан ҡарттың ейәнсәрен – Зөлхизә һылыуҙы бер ҡасан да ризыҡтан мәхрүм итмәне. Был юлы ла буш итмәҫ, ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны рәхимле Диңгеҙе... ”

Музыкаль номер. ...башҡарыуында йыр.

### ***Дүртенсе тур – Сәсәнлек бәйгеһе***

*Егет*: Борон-борондан башҡорт халҡы үҙенең һүҙгә оҫта сәсәндәре менән дан тотҡан. Ниндәй генә йыйын булһынмы, байраммы, яуға, ихтилалдарға күтәрелеүме – барыһында ла тәүге сиратта сәсән башлап һүҙ әйткән. Шуға күрә, беҙ ҙә һеҙҙең сәсән теллелегеҙҙе, шиғри күңеллелегеҙҙе тикшереп ҡарар өсөн Сәсәндәр майҙанында һынап ҡарарға булдыҡ. Һеҙҙең иғтибарға Р. Ғарипов, З. Биишева, М. Аҡмулла шиғырҙарынан өҙөктәр уҡыла, ә һеҙгә уларҙы үҙ һүҙҙәрегеҙ менән шиғри формала дауам итергә.

Шиғырҙан бирелгән өҙөктәрҙе дауам итергә.

1. *Башҡорт теле*
   Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
   Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин...

2. *Яҡшы һәм яман*
   Яҡшы: әгәр кеше хеҙмәт һөйһә,
   Шатлыҡ тапһа изге хеҙмәттән...
   З. Биишева.
3. *Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!*
   Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк
   Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк...
4. *Аттың ниһен маҡтайһың?..*
   Аттың ниһен маҡтайһың –

әҫәре нисек атала? (“Аҡмулланың аҡ төндәре”).

**Д5**. М. Аҡмулла исемендәге премияның тәүге лауреаты? (Р. Шәкүр).

**Е1.** Аҡмулла күреп белгән, уға маҡтау шиғырын бағышлаған күренекле татар ғалимы? (Ш. Мәржәни).

**Е2**. М. Аҡмулланың тәүге китабы нисәнсе йылда баҫыла һәм ул нисек атала? (1892, “Дамелла Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе”).

**Е3**. “Аҡмулла, Салауаттан һуң беренсе тапҡыр үҙ халҡына, башҡорттарым тип ихлас күңелдән өндәшә, уны айырыуса бер ярһыныу менән мәғрифәткә, белемгә саҡыра” кем һүҙҙәре? (Әхнәф Харисов).

**Е4.** Фәкирлектән артыҡ фән күрә алманыҡ,
Шәһәр сығып алыҫ яҡҡа йөрөй алманыҡ.
Мәргәндәрҙе танырлыҡ хәлебеҙ бар,
Шул сәбәптән сабыр ҡылып тора алманыҡ.

Был өҙөк М. Аҡмулланың ниндәй шиғырынан? ( “Мәжлесенә ҡарай ғына”).

**Е5.** М. Аҡмулла исемендәге премия нисәнсе йылда булдырыла? (1989).

*Егет*: Жюри ағзаларына йомғаҡ яһарға бер нисә минут ваҡыт биргән арала, әйҙәгеҙ, зал менән бер уйын уйнап алайыҡ.

(Зал менән уйын).

***Өсөнсө тур***

*Ҡыҙ:* Был турҙа бары тик ... уҡыусы ҡатнашыу хоҡуғы алды. Иғтибарға экранда бер текст бирелә, ә һеҙгә уның грамматик хаталарын тикшерергә. Ә кем иһә авторын һәм өҙөктөң ниндәй әҫәрҙән алынғанын әйтә ала, уның өсөн һеҙҙең эшегеҙгә тағы ла балл өҫтәлә.

Иғтибарығыҙға текст. З. Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәтенән өҙөк.

“Йә, бөгөн ниндәй ризыҡ бирер уға һөйгән Диңгеҙе? Ниндәй һәйбәт балыҡ бүләк итер? Әллә бер балыҡ та бирмәҫме? Ул саҡта йуламан ҡарт үҙенең берҙән-беренә, кескәй ейәнсәренә, нимә ашатыр?.. шулай уҡ зөлхизәһе ризыҡһыҙ ҡалырмы ни бөгөн? Йуҡ, бының булыуы мөмкин түгел. Уның ҡырыҫ, ләкин юмарт ҡылыҡлы



* * *

**Әҙәби әҫәргә дөйөмләштереүсе анализ яһау тәртибе**

1.Әҫәрҙең темаһын асыҡлағыҙ.

2.Әҙәби әҫәр ижад ителгән осор тураһында мәғлүмәт  бирегеҙ.

3.Әҫәрҙең жанрын, жанр формаһын билдәләгеҙ.

4.Әҫәрҙең композицион төҙөлөшөн, сюжетын һәм сюжет элементтарын күҙаллағыҙ.

5.Әҫәрҙә ҡуйылған проблемаларҙы асыҡлағыҙ, төп конфликтты күрһәтегеҙ.

6.Образдар системаһын барлағыҙ. Ыңғай, кире һәм эске ҡаршылыҡлы геройҙарҙы,  ярҙамсы персонаждарҙы асыҡлағыҙ.

7.Геройҙы тәрбиәләгән, уның рухи ҡараштарын формалаштырған социаль ерлектең әҫәрҙәге бирелеше тураһында фекер йөрөтөгөҙ.

8.Әҫәрҙең тел-стиль үҙенсәлектәренә, һүрәтләү сараларына, поэтик образлылығына, авторҙың художество табыштарына анализ яһағыҙ.

9.Әҙәби әҫәрҙең әһәмиәте, авторҙың әйтер һүҙе тураһында уйланығыҙ һәм һығымта яһағыҙ.

**Зәйнәб Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәтен проблемалы анализлау һорауҙары**

1. Хөрмәтле уҡыусылар! Һеҙҙеңсә, нимә ул –  мөхәббәт?
2. Нимә ул – нәфрәт?
3. Мөхәббәттең нәфрәткә әүерелеүе мәмкинме?  Уның өсөн ниндәй сәбәптәр кәрәк?
4. Ни өсөн ваҡиғалар диңгеҙ ярында бара?
5. Юламан ҡарт балыҡ ҡармаҡлай, ләкин ул ҡармағына бөтөнләй иғтибар итмәй. Бының сәбәбе нимәлә?
6. “Дуҫ ауырлыҡта һынала” тигәндәре дөрөҫмө? Хикәйәттән быға ниндәй миҫал килтерергә мөмкин?
7. Элек-электән башҡорттар йә ҡыҙҙы кейәүгә бирһәләр, йә улдарына килен алыр булһалар, буласаҡ килен, кейәүҙәрҙең туған-тыумасаларын, ете быуынын тикшерер булғандар. Был дөрөҫмө? (хикәйәт менән бәйләп аңлатырға)

8.Хикәйәттә яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың көрәшен күрәбеҙ.

Автор ни өсөн яуызлыкты еңдерә? Ни өсөн әҫәрҙә ваҡиғалар шундай боролош ала?

9. Хикәйәттә бер йола тасуирлана: диңгеҙ ҡоторһа, ҡорбан биреү, йәғни кешене ҡорбан итеү кәрәк. Был йоланан баш тартыу мөмкин инеме?

10. Әҫәрҙә "тормош та – бер ҡараһаң ай, бер ҡараһаң ҡояш кеүек", тиелә. Һеҙ был һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

11. Ни өсөн автор был әҫәрҙе "Мөхәббәт һәм нәфрәт" тип атаған? Был ике төшөнсә ни өсөн йәнәш ҡуйылған?

*Г. Ғ. Байназарова, БДУ студенткаһы, 2011.*

**Р. Ғариповтың "Аманат" поэмаһына күҙәтеү рәүешендәге анализ өлгөһө.**

– Хөрмәтле уҡыусылар! Хәҙер "Аманат" поэмаһына күҙәтеү рәүешендәге анализ яһайыҡ. Тәүге юлдарҙа автор ниндәй дүрт терәк хаҡында әйтә? Төп уйҙы белдергән юлдарҙы уҡып күрһәтегеҙ.

(Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ерең, күгең – икең бар,
Утың, һыуың – дүртең бар...)

Шағирҙың фекеренсә, ошо дүрт нәмә – кеше бәхетенең төп сығанағы. Уларҙың береһе генә булмаһа ла, кеше донъялағы бер терәктән мәрхүм.

– Автор фекеренсә, был дүрт терәк булһын өсөн нимә кәрәк? (Уларҙы кешегә ил бирә; әммә улар булһын өсөн, кешенең теле – йәғни, тыуған теле булырға тейеш).

– Ошо тел ярҙамында әсәбеҙҙән нимәләр аланбыҙ? (Беҙгә туған телде бүләк иткән кеше – әсәбеҙ. Шағир яҙыуынса, әсәбеҙ беҙҙе тел ярҙамында эшле, хисле, көслө, нурлы йөҙлө, күҙле, йырлы тиеп тәрбиәләй).

– Артабан тел хаҡында тағы нимә ти? (Тел беҙҙе терелтә лә, үлтерә лә ала. Телдәге һәр бер һүҙҙе беҙ хөрмәт итергә һәм ҡәҙерләргә тейешбеҙ. Шул саҡта ғына беҙ уны һаҡлап ҡала алабыҙ).

– Автор телде нимә менән сағыштыра? ( Шағир телде күҙ өҫтөндәге ҡаш һымаҡ, ти. Тимәк, күҙе – ил. Ҡаштан яҙған – күҙҙән



**А1**. Рәми Ғариповтың тәүге әҫәре нисәнсе йылда һәм ҡайҙа баҫыла? (1950. "Ағиҙел", "Ленин" шиғыры).

**А2.** Р. Ғариповтың шәхес культын фашлаған әҫәре нисәнсе йылда яҙыла, нисек атала? (1964, "Табыныу").

**А3**. Үҙе иҫән саҡта Р. Ғариповтың нисә китабы донъя күреп өлгөрә? (7).

**А4**. Нисәнсе йылдан башлап Өфөләге 1-се Башҡорт республика-интернаты Рәми Ғарипов исемен йөрөтә? (1994).

**А5.** Р. Ғарипов исемендәге премияның тәүге лауреаты кем? (Рауил Бикбаев).

**Б1.** Р. Ғарипов йәшлек көндәлектәрендә үҙен ниндәй әҙәби герой исеме менән атай? (Вәхит).

**Б2.** Р. Ғариповтың тамамланмайынса ҡалған поэмаһы нисек атала? ("Яндырылған хаттар").

**Б3.** Был юлдар Р. Ғариповтың ниндәй шиғырынан алынған?
Бирәүгә һин – нан,
Бирәүгә һин – дан,
Бирәүгә һин – ҡан...
("Шиғриәт").

**Б4.** Был өҙөк Р.Ғариповтың ниндәй әҫәренән алынған?
"Мендәр итеп айҙы һалыр инем,
Ябыр инем йондоҙ юрғанын.
Етегәндең сүмесенән генә
Мин эсерер инем үҙеңә
Йәшлегемдең көмөш йырҙарын."?
("Интегралдар поэмаһы").

**Б5**. "Дон Кихот" әҫәренең икенсе исеме? ("XX быуат монологы").

**Д1.** М. Аҡмулла ҡайҙа һәм ниндәй күренекле шәхестән белем ала? (Стәрлебаш мәҙрәсәһендә, Шәмсетдин Зәки).

**Д2**. "Аҡмулла" операһының композиторы һәм либретто авторын әйтегеҙ. (З. Исмәғилев, И. Дилмөхәмәтов).

**Д3**. М. Аҡмулланың нисәнсе йылда һәм ниндәй күренекле шәхес менән әйтеше була? (1894, М. Өмөтбаев).

**Д4**. Н. Ғәйетбаевтың М. Аҡмулла тормошона арналған драма

тиклем баһалаясаҡ.

*Егет*: Ә хәҙер ҡатнашыусылар менән таныштырып үтәйек. (Һәр береһе үҙҙәре менән таныштыра).

*Ҡыҙ:* Уйында ҡатнашыусы егет һәм ҡыҙҙар менән танышып алдыҡ, ә хәҙер һеҙҙең иғтибарға – икенсе тур. Һеҙҙең алда экран. Экранда яратҡан хәрефегеҙҙе һәм һанығыҙҙы ҡарап әйтегеҙ һәм унда һеҙ һайлаған һораүҙар булыр. Һеҙ күргән хәрефтәрҙән бер нисә блок тәҡдим ителә. Иғтибар, беренсе уҡыусы. (Һәр бер уҡыусы хәрефтәр әйтеп сыға)

Хөрмәтле жюри ағзалары! Кем дөрөҫ яуап ҡайтара, шуға иң ҙур балл – биш. Ә кемдәр түбән балл йыя, улар уйындан төшөп ҡала килә.

**В1.** Нисәнсе йылда һәм ниндәй журналда З. Биишеваның “Гөрләүектәр араһында” тигән хикәйәһе баҫылып сыға? (1930 йыл, “Октябрь” журналында).

**В2**. З. Биишева 1931–1934 йылдарҙа ҡайҙа һәм кем булып эшләй? (“Пионер” журналы, редактор).

**В3.** 1920 йылда ҡайҙа уҡый? (Аҡман ауылы мәктәбендә)

**В4.**Ленинградта үткәрелгән СССР халыҡтарының драматургия фестивалендә ниндәй пьесаһы өсөн 1 дәрәжә дипломға лайыҡ була? (“Нәҙер”).

**В5.** 1934–1938 йылдарҙа З. Биишева ниндәй район гәзиттәрендә эшләй? (Мәсетле, Салауат).

**Г1.** З. Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәте нигеҙендә яҙылған йыр. (“Зөлхизә”).

**Г2.** З. Биишева һүҙҙәренә Н. Дауытов яҙған йыр. (“Миләш”).

**Г3.** “Яҡтыға” трилогияһындағы был характеристика кемгә хас: “...ул уландарын ирле ҡатындарҙан кәм ҡараманы. Үҙе һуҡҡан киндер туланан өсөһөн бер төҫ ап-аҡ кейендереп, аҡсарлаҡтар кеүек йөрөттө.” (Таибә эбей).

**Г4**. З. Биишеваның автобиографик әҫәрендәге Собхан старшинаның йылҡыһын көтөүсе, йәштән үк шағир йөрәкле, йырсы, ҡурайсы, бейеүсе лә, рәссамлыҡ һәләтен дә үҙендә туплаған кеше. (Тимербай).

**Г5**. Яҙыусының билдәле трилогияһы иң тәүҙә нисек атала? (Бер ғүмерҙең тарихы).



яҙған... Телең юҡ икән, илең дә юҡ).

– Шағир нимәгә өндәй? (Телгә иғтибарлы булырға өндәй. Телеңде һаҡламаһаң, һин илеңдең улы түгел, һин уның өсөн – бер имгәк).

– Артабан шағир телде тал менән сағыштыра, ә талды – йәғни, телде киҫһәләр, нимә булыр, һәм тел артабан үҫһә – нимә булыр? (Тел артабан үҫһә – ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланыр, башҡа телдәр, илдәр менән аралашыу арҡаһында телебеҙ, илебеҙ байыр, күркәмләнер. Киләсәк тә өмөтлө булыр).

– Киләсәк – шағир фекеренсә, нимә ул? (Шағир киләсәкте баҡса менән сағыштыра. Уның өсөн күп ҡан түгелгән. Һуғыштар булған, тик шуның өсөн беҙ берләшә алғанбыҙ. Ул киләсәк – бары тик яулап алған һәм һаҡлап ҡалған телдә һөйләшкән өсөн генә. Телебеҙ ҙә киләсәк исемле баҡсала бәхетле яҙмышлы буласаҡ).

– Шағир киләсәкте тағы нимә менән сағыштыра? Нимәгә өмөт итә? (Киләсәкте ул тағы ла бар халыҡтың моңло көйлө татыу йыры менән сағыштыра. Тимәк, шағир халыҡтың үҙ телендә һөйләшеүенә өмөт – йәғни илен һәм телен һаҡлап ҡалыуына ышаныс бағлай).

– Һуңғы биш юлда автор уҡыусыларға ниндәй һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә? (Ошо әҫәрен ул беҙгә аманат итеп итеп ҡалдыра һәм уға хыянат итмәүҙе теләй. Телебеҙҙе һаҡларға, шуның менән бергә илебеҙҙе лә һаҡларға өндәй).

– Ниңә шағир әҫәрен “Аманат” тип атаны икән? (Әҫәрҙең һуңғы юлдарында был турала әйтеп кителә. Ошо ҡобайырын ул беҙгә аманат итеп ҡалдыра. Аманаты – телебеҙгә тоғро ҡалыу, уны онотмау, һаҡлау).

– Шулай итеп, әҫәрҙең төп идеяһын нисек билдәләп була? (Үҙ телендә һөйләшкән генә үҙ илендә ирекле була ала).

– Әйҙәгеҙ, ҡобайырҙың һүрәтләү саралары тураһында һүҙ йөрөтәйек. *Сағыштырыуҙы табығыҙ.*

(Тел асҡысы – ил асҡысы
Ҡатып ҡалыр таш һымаҡ һ.б.)

– *Йәнләндереүҙе табығыҙ.*
(Ил яҙмышы ир муйынына
Ҡылды ярыр тел бәйләй.
Терелткән дә тел шуға,
Үлтерткән дә тел шуға,

Тел әйткән һүҙ ел түгел,
Ҡәҙер-хөрмәт бел уға).

*–Ҡобайырҙа халыҡ мәҡәлдәренә торошло һөйләмдәрҙе табығыҙ.*

(Тел асҡысы – ил асҡысы.

Сәсән теле барында
Кәм-хур булмаç табында.

Теле барҙың иле бар).

*И. Әхмәдуллина, БДУ студенткаһы, 2011.*

**Иҫкәрмәләр:**

1.Анализдың бөтә элементтары ла иҫәпкә алынмаған.Бында төп һүҙ әҫәрҙең темаһы, идея йөкмәткеһе тураһында ғына бара.

2. Һүрәтләү сараларын әҫәр тексынан айырып ҡарарға ярамай.

**Д. Юлтыйҙың “Тимеркәй фәлсәфәһе” хикәйәһенә ентекле анализ (инеш, йөкмәтке үҙләштереү элементтары менән).**

*Бөгөнгө дата:*
*Класс:* 7б
*Предмет*: Башҡорт әҙәбиәте
*Тема*: Д. Юлтыйҙың “Тимеркәй фәлсәфәһе” хикәйәһенә анализ
*Маҡсат:*

1. Әҫәрҙең идея-тематикаһы, йөкмәткеһе, образдар системаһы, сюжет өҫтөндә эшләү, тел-стиль сараларын асыҡлау.
2. Уҡыусыларҙа әҙәбиәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларҙы әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү.
3. Уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

*Йыһазландырыу*: Әҙәбиәт дәреслеге, класс таҡтаһы, яҙыусының портреты, схема-плакат, персонаждарҙың репликаларын сағылдырған карточкалар.

**Дәрес барышы**



һәм һанды әйткәс, экранда һорау барлыҡҡа килер, ә һеҙгә бары тик яуап бирергә генә ҡала. Бына шундай булыр икенсе турҙың шарты.

*Егет*: Өсөнсө турҙа һеҙҙең иғтибарығыҙға бер өҙөк бирелә. Уның ниндәй әҫәрҙән һәм кем яҙғанын атарға кәрәк.

*Ҡыҙ:* Дүртенсе турҙа һеҙгә сәсәнлек бәйгеһендә көс һынашырға тура килә. Шәхестәрҙең әҫәрҙәренән бирелгән өҙөктәрҙе беҙ уҡый башлайбыҙ, ә һеҙгә дауам итергә кәрәк буласаҡ.

*Егет*: Ә бишенсе тур – финал. Финалға беҙҙең бары тик өс кеше генә үтеү хоҡуғы ала. Был турҙа хөрмәтле жюри ағзалары беҙҙең уйында ҡатнашыусыларға үҙҙәренең һорауҙарын бирә. Бына шундай бик ябай ҙа һәм ҡатмарлы ла бәйге көтә һеҙҙе, ҡатнашыусы егет һәм ҡыҙҙар. Тәүҙән үк иҫкәртеп үтәбеҙ, һәр турҙан беҙҙең бер нисә уҡыусы төшөп ҡала килә. Бар ҡатнашыусы егет һәм ҡыҙҙарға уңыштар теләйбеҙ.

*Егет*: Иғтибар, беренсе тур. Һеҙҙең алдығыҙҙа экран. Хәҙер унда өс һорау яҙыласаҡ. Беренсе, икенсе рәттә ултырған уйында ҡатнашыусылар билдәләнгән ваҡыт эсендә яуаптарҙы ҡулдарығыҙҙағы ҡағыҙға яҙып жюри ағзаларына тапшырығыҙ. Һеҙгә бер минут ваҡыт бирелә.

***Беренсе тур һорауҙары:***

1. “ Юҡ, түбән ҡалмаç был йән:
   Яралмыштан ғали булған ул”.

Ғ. Тукай шиғырынан алынған был өҙөк З. Биишеваның ҡайһы әҫәренә эпиграф булып тора? (Емеш).

2. Рәми Ғариповтың ауылдағы ҡушаматы ниндәй булған? (“Ҡырмыҫҡа”).

3. М. Аҡмулла тураһында яҙылған тарихи роман һәм уның авторын яҙығыҙ. (Я. Хамматов “Һырдарья”).

(Жюри эштәрҙе ҡарай).

*Ҡыҙ:* Жюри ағзалары әлеге ваҡытта һеҙҙең эштәрҙе ҡарағанса, ... башҡарыуында “Һаҡмар һылыуы” бейеүе.

***Икенсе тур – “Уйла. Эҙлә. Тап.” уйыны***

*Ҡыҙ:* Шулай итеп, беҙ иң-иңдәрен һайлап алдыҡ. Хәҙер уларҙы сәхнә түренә саҡырабыҙ. Кемдәр икән улар беҙҙең уйында ҡатнашыусылар? Өс һорауға ла дөрөҫ яуап биреп, уйында ҡатнашыу хоҡуғын алған уҡыусылар, рәхим итегеҙ. Һәр берегеҙҙең ҡулында бер һан бар, ошо һандар буйынса һеҙҙе жюри ағзалары уйын аҙағына

*Алып барыусы ҡыҙ:* Һаумыһығыҙ!
*Егет:*
Әҙәбиәт донъяһында
Кемдәр бик шәп йөҙә икән,
Яҙыусыларҙың ижадын
Кемдәр бик шәп белә икән?
*Ҡыҙ:*
Саҡырайыҡ барыһын да
Бөгөнгө ярыш – шоуға.
Залдағылар ҙа буш ҡалмаç,
Ҡатнашырҙар уйынға.
*Егет:*
Башлайыҡ, дуçтар бергәләп
Белем, зиһен ярышын.
Жюри ҙа ғәҙел баһалар
Сәмле ярыш барышын.

*Ҡыҙ:*
Жюри составында бөгөн
Абруйлы ағайҙар бар.
Һеҙҙең эште бааларға
Беҙгә килгәндәр улар.

*Егет:*
Этап һайын беҙҙең уйын
Була барыр бик сәмле.
Ә һеҙ алҡышлағыҙ, дуçтар,
Байрамдар үтһен йәмле.

*Ҡыҙ:* Бына шундай ялҡынлы шиғыр юлдары менән башлап ебәрәбеҙ “Зирәктәр һәм отҡорҙар” уйынын.

*Егет*: Хәҙер уйындың шарттары менән таныштырып үтәйек. Зирәктәр һәм отҡорҙар уйыны биш этаптан тора. Тәүге этапта һеҙгә өс һорауға яуап биреп, уйында ҡатнашырға ... уҡыусы хоҡуҡ ала.

*Ҡыҙ:* Икенсе турға үткән ҡыҙ һәм егеттәрҙе беҙ Рәми Ғарипов, З. Биишева, М. Аҡмулла кеүек шәхестәребеҙҙең тормош юлы һәм ижады буйынса белемдәрен тикшереп ҡарайбыҙ. Һеҙҙең алда экран. Унда бер нисә хәреф һәм һан яҙылған. Һеҙ үҙегеҙ теләгән хәрефте



| Этаптары | Йөкмәткеһе | Ваҡыты |
|---|---|---|
| I.Әçәрҙе өйрәнеүгә инеш | *Уҡытыусы:*<br>–Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ. Үткән дәрестә беҙ Дауыт Юлтыйҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштыҡ, өйҙә “Тимеркәй фәлсәфәһе” хикәйәһен уҡыныҡ. Башта Дауыт Юлтыйҙың биографияһын иçкә төшөрөп китәйек. Ул ҡасан һәм ҡайҙа тыуған? Бала сағы ниндәй шарттарҙа үтә?<br>*Уҡыусы:*<br>– Дауыт Ишембай улы Ырымбур өлкәһендәге Туҡ йылғаһы буйында ултырған Юлтый ауылының ярлы өйҙәренең береһендә 1893 йылда тыуған. Уларҙың ғаиләһе туғыҙ кешенән торған. Йәшләй үк батраклыҡҡа ялланып тамаҡ туйҙырырға, иçке тормоштоң ауырлыҡтарын тойоп үçергә тура килгән.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Ул ҡайҙа, кемдәрҙә белем ала?<br>*Уҡыусы:*<br>– Дауыт бәләкәй саҡтан уҡ атаһының һөйләгәндәрен тыңлап үçкән. Атаһы әҙәбиәткә<br>Һөйөү уятҡан. Ул төрлө хәлфәләрҙә белем алған. Ҡышын мәҙрәсәлә уҡып, йәй көндәрен баҙарға ялланып көн күргән. Шулай уҡ ҡаҙаҡ балаларын уҡытҡан.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Эйе, дөрөç. Ниндәй генә ауырлыҡтар кисереүенә ҡарамаçтан, Дауыт белемгә ынтылған, нисек тә булһа йәшәргә тырышҡан. Артабан уның тормошонда ниндәй үҙгәрештәр була?<br>*Уҡыусы:*<br>– Дауытҡа Беренсе донъя һуғышында | 2 минут |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡатнашырға тура килә. Ул һуғышта бер нисә тапҡыр яралана. Аҙаҡтан гәзит мөхәррире булып эшләй. Бик күп поэмалар, шиғырҙар ижад иткән, хикәйәләр, очерктар яҙған. Уның "Ҡан" романы киң билдәле. Ә 1893 йылда ул репрессияға эләгеп һәләк булған. | |
| II. Әҙәби әҫәрҙең йөкмәт-кеһен үҙләш-тереү | *Уҡытыусы:*<br>–Афарин, балалар! "Тимеркәй фәлсәфәһе" хикәйәһен өйҙә уҡып килергә ҡушылғайны. Хәҙер, әҫәрҙең йөкмәткеһен иҫкә төшөрөр өсөн, һәр бүлеккә исем биреп, бер-ике һөйләм менән һөйләп үтәйек. Дәфтәрегеҙҙе асығыҙ, бөгөнгө датаны, класта эш, теманы – "Д. Юлтыйҙың "Тимеркәй фәлсәфәһе" хикәйәһенә анализ" тип яҙып ҡуйығыҙ (уҡыусылар яҙалар). Хәҙер план тип яҙығыҙ. Цитаталы план төҙөйбөҙ. Беренсе бүлеккә ниндәй исем бирәбеҙ һәм ни өсөн?<br>*Уҡыусы:*<br>– "Әгәр ҙә мин Алла булһам, бигерәк тә шәфҡәтле булыр инем" тип атарға мөмкин; сөнки Тимеркәй "ниңә Алла байҙарҙы ла, ярлыларҙы ла бер тигеҙ итмәгән икән", - тип уйлана.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Эйе, ысынлап та, Тимеркәй был бүлектә үҙенең ярлы тормошона зарлана. Килешәһегеҙме? (уҡыусылар яҙа).<br>*Уҡытыусы:*<br>–Икенсе бүлеккә ниндәй исем бирәбеҙ?<br>*Уҡыусы:*<br>– Был бүлекте мин "Тимеркәй бүреле-айыулы урманда үҫте" тип исемләр инем.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Ни өсөн шулай исемләйһең? | 5 минут |



бағаналарға яҙа барырға тейешһегеҙ.

Яуап:

| Фронт лирикаһы | Тыныс йылдар лирикаһы | Тыуған ил тураһында лирика | Мөхәббәт лирикаһы |
|---|---|---|---|
| Совет һалдатына | Ҡайтыу | Тыуған ил тураһында һүҙ | Мөхәббәт утрауы |
| Окоптағы уйҙар | Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә | Ватан | Һөйөү |
| Ғүмер һәм өмөт | Мәңгелек ут | Көҙгө баҡсала | Икәү бергә |
| Исән ҡалһам | Минең йондоҙҙарым | Тыуған ҡалама йыр | Ҡыҙҙарға |
| Хат | Һәйкәл тураһында баллада | Ағиҙелдә аҡ томан | Миндә һин бар |

Ҡағыҙҙарығыҙҙы жюри ағзаларына йыйып бирегеҙ. Улар тикшергәнсе, өҫтәлмә эш эшләп алайыҡ. Һеҙгә, ребусты сисеп, Нәзәр Нәжмиҙең киң билдәле булған поэмаһының исемен табырға кәрәк. Бәләкәй генә ярҙам: был әҫәр Гетеның – Мефистофель, Лермонтовтың – Демон, Тукайҙың – Шайтан, Бабичтың – Ғазазилы менән бер кимәлдә торорлоҡ.

( командалар "Иблис" һүҙенә ребус төҙөй)

Еңеүселәрҙе билдәләү.
Йомғаҡлау.

– Ошоноң менән аҡыллылар бәйгеһен тамам тип иғлан итәм. Ҡатнашыусыларға, жюри ағзаларына һәм бигерәк тә көйәрмәндәргә ҙур рәхмәт! Һау булығыҙ!

*БДУ студенттары, 2011.*

2. "Зирәктәр һәм отҡорҙар клубы" уйыны
(күңелле музыка уйнай)

*Алып барыусы егет:* Хәйерле көн, хөрмәтле дуҫтар!

– Афариндар! Был турҙа ҡатнашыусылар ҙа, көйәрмәндәр ҙә һынатманылар. Улар үҙҙәренең аҡыллы икәнлектәрен генә түгел, ә ижади фекер йөрөтөүҙәрен дә күрһәттеләр. Шулай итеп, Тәлғәт Абдрахманов һүҙҙәре менән килешәһегеҙме? Еңел булдымы бирелгән һүҙҙәрҙе шиғыр юлына һалыу?

Өсөнсө тур

– Н. Нәжми шиғыр оҫтаһы ла, драматург та булған. Уның әҫәрҙәре – кинәнеп бер ҡарарлыҡ тамаша. Улар үҙҙәренең тормошсанлығы менән бик тә үҙенсәлекле. Тормош үҙенсәлектәре яҙыусының драма әҫәрҙәрендә лә, шиғри юлдарында ла ярылып ята. Шуға миҫал итеп, уның шаян шиғырҙарын килтерергә була. Быға беҙ хәҙер үҙебеҙ ҙә инанасаҡбыҙ. Командалар әҙиптең “Ағиҙел аша” исемле шаян йырын сәхнәләштерергә тейештәр. Башлайыҡ!

(Ике команданың сәхнәләштереү күренештәре).

Дүртенсе тур

Назар Нәжмиҙең ижады тематика буйынса ла, жанр тәбиғәте яғынан да күп төрлө. Һуғыш йылдарында, бигерәк тә 1943–1944 йылдарҙа ул байтаҡ шиғырҙар яҙа. Улар, әлбиттә, һуғыш, һалдат тураһында. Ә инде һуғыштан һуң яҙған тәүге шиғырҙарында совет һалдатының еңеү шатлығы, тыуған илен һағынып ҡайтыу ҡыуанысы, тыныс хеҙмәткә тотоноу кинәнесе, яуҙа һәләк булған һалдаттарҙы хәтерләү тураһында бәйән итә. Назар Нәжмиҙең әллә күпме шиғырҙары тыуған ил темаһына бағышланған. Шағирҙың лирикаһы – ул тәбиғәт, ул тыуған ауыл тураһында шиғырмы, кешеләр хаҡындамы – һәр саҡ илһөйәрлек уй-тойғолары менән бергә үрелеп бара. Һәм, әлбиттә, башҡа шағирҙар кеүек үк, Назар Нәжми мөхәббәт темаһын да ситләтеп үтмәгән.

Һәр бер әҫәренең исеменән үк нимә тураһында һүҙ барыуы, ниндәй темаға арналыуы беленеп тора. Хәҙер һеҙ быға үҙегеҙ ҙә инанасаҡһығыҙ. Һеҙҙең алдығыҙҙа 4 бағанаға бүленгән ҡағыҙ биттәре ята.

1 колонка – фронт лирикаһы;

2 колонка – тыныс йылдар лирикаһы;

3 колонка – тыуған ил тураһында лирика;

4 колонка – мөхәббәт лирикаһы аҫтында бирелгән. Мин яҙыусының шиғырҙарының исемдәрен уҡыйым, ә һеҙ уларҙы тейешле



| | | |
|---|---|---|
| | Уҡыусы:<br>– Сөнки Тимеркәй атаһы Сәми ҡарт менән урманда үҙҙәре генә йәшәй. Улар балыҡ тотоп, һунарға йөрөп көн уҙғаралар (уҡыусылар яҙа).<br>*Уҡытыусы:*<br>– Афарин! Киләһе бүлеккә күсәбеҙ.<br>*Уҡыусы:*<br>– “Бәхет бер килһә китә бит ул” тиергә мөмкин. Сөнки бында Тимеркәйҙең атаһы Сәми ҡарт холера менән ауырып үлеп китә. Тимеркәй үҙе генә ҡала (уҡыусылар яҙа).<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, шулай. Дүртенсе бүлекте нисек атайбыҙ?<br>*Уҡыусы:*<br>–“Сәми ене ҡағылғандыр әле...” тиергә була. Сәми үлһә лә, ауыл халҡы Тимеркәй тураһында төрлө хәбәрҙәр тарата.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, был бүлеккә исемде “Сәми ене ҡағылғандыр әле...” тип яҙып ҡуйығыҙ (уҡыусылар яҙа).<br>*Уҡытыусы:*<br>– Уҡыусылар, бишенсе бүлекте “Айыу тиреһенән яралғандыр” тип ҡушайыҡмы? Был цитата тура киләме?<br>*Уҡыусылар:*<br>–Эйе, тура килә. Был бүлектә Ҡотлояр бай тураһында һүҙ бара бит. Был цитата уның характерына тап килә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Дөрөҫ. Шулай яҙығыҙ (уҡыусылар яҙа). Киләһе бүлеккә исем бирәйек.<br>*Уҡыусы:*<br>– Алтынсы бүлекте “Ҡотлояр байҙа ун | |

| | | |
|---|---|---|
| | бер йыл хеҙмәт итте" тип атайыҡ. Бында Тимеркәйҙең Ҡотлоярға буйһоноп йәшәүе һүрәтләнә. Ә етенсе бүлекте "Юҡ ул" тип ҡушырға була. Сөнки, аяғы яраланғас, ул үҙенең үлеп ҡаласағы тураһында аңлай. Алла булһа, бындай ғәҙелһеҙлек, бахырлыҡ, интегеүҙәр булмаç ине, тип уйлай.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Уҡыусылар, был фекер менән барығыҙ ҙа килешәһегеҙме?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Килешәбеҙ.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Ярай. Килешһәгеҙ, әйтеп үтелгәнсә яҙып ҡуйығыҙ (уҡыусылар яҙа). | |
| III.Әҫәрҙең идея-пробле-матика-һын асыҡлау | *Уҡытыусы:*<br>–Хәҙер әҫәрҙең идея-проблематикаһын асыҡлап үтәйек. Әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ алып барыла? Ниндәй идея күтәрелә?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Бында ауыл халҡының ауыр яҙмышы һүрәтләнә. Тимеркәй менән Сәми ҡарт хеҙмәт кешеләре булғандар. Ғәҙелһеҙлек, байҙар тарафынан иҙелеүҙәр, йәберләүҙәр, ярлылыҡ – былар Тимеркәйҙе уйландыра. Ни өсөн бәрәүҙәр эшләмәһә лә бай йәшәй, ә хеҙмәтсән халыҡ ярлылыҡта йәшәй, ти.<br>–Хикәйә беҙҙе тырышырға, ғәҙелһеҙлек менән көрәшергә, Тимеркәй һымаҡ тырыш булырға өйрәтә. Тик Ҡотлояр һымаҡ ҡомһоҙ, һаран булмаçҡа.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Матур фекерҙәрегеҙ өсөн рәхмәт. Ысынлап та, бында төп геройҙарҙың буйһоноп йәшәүе уларҙы һәләкәткә | 2 минут |



9. "*Тауҙар юлын йырһыҙ үткәнем юҡ,*
*Күкһел тауҙар һөйә йырҙарҙы*".
*Был йыр Н. Нәжмиҙең ҡайһы драмаһынан алынған?*
а. "Яҙғы йыр"
б. "Хуш, Хәйрүш"
в. "Гармунсы дуç"
г. "Ҡыңғыраулы дуға"

– Командалар был эште аҡҡарғансы, көйәрмәндәргә бер һорауым бар. Беҙ уйынды башлауын башланыҡ, тик нимәне онотҡанбыҙ һуң? Командалар ҡатнашлығындағы бәйге нимәнән башлана?

*Яуаптар.*

– Эйе, командалар үҙҙәрен таныштырырға онотҡандар. Ләкин был хәл ҡурҡыныс түгел, ә бәлки мәрәйҙәр алыу өсөн яҡшы форсат ҡына. Көйәрмәндәргә үҙ командаларына исем һәм девиз уйлап табырға тәҡдим итәм. Ҡайһы команданыҡы уңышлыраҡ сыға, шул бер мәрәй аласаҡ. Башланыҡ.

Афарин! Беренсе турҙы яҡшы башлап ебәреүегеҙ менән ҡотлайым!

## Икенсе тур

– Икенсе турға күсәйек. Философ Тәлғәт Абдрахманов әйтеүенсә, "Яҙыусы ижады үтә ябай: кәрәкле һүҙҙәрҙе табып, урынына ҡуйыу етә". Әйҙәгеҙ, ошо фекерҙе иҫбатлап ҡарайыҡ. Һеҙгә Н. Нәжмиҙең 4 юллыҡ шиғыры тәҡдим ителә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул айырым һүҙҙәргә бүленеп, урындары алмашынып бөткән . Уларҙы бер епкә теҙеп, шиғырҙы уҡыйыҡ.

Яуап:

Донъя матур дуҫтар менән генә –
Дуҫһыҙ йәшәүсе һирәк.
Ләкин дуҫтар араһында ладуҫты
Таба белергә кәрәк.

– Көйәрмәндәр ҙә үҙ командалары өсөн ярышыуҙы дауам итәләр. Уларға ике юллыҡ "Аҡыл" тураһындағы шиғырҙы йыйырға тәҡдим итәм.

Яуап:

Аҡыллынан аҡыл артмаç –
Аҡыллы һис аҡыл һатмаç.

г. 1924
д. 1926
3. *Назар Нәжми касан яҙыша башлай*?
а. Миңештелә ете йыллыҡ мәктәптә уҡығанда
б. Өфөлә металлургия рабфагында уҡығанда
в. Пединститутта уҡығанда
г. Һуғыш йылдарында
д. Һуғыштан һуң
4. *Назар Нәжмигә ҡайһы шиғырҙар йыйынтығы өсөн С. Юлаев исемендәге премия бирелә*?
а. “Тамсылар”
б. “Тулҡындар”
в. “Көтөлмәгән ямғыр”
г. “Көҙгө һуҡмаҡтар”
д. “Яуа ҡарҙар”
5. *Назар Нәжмиҙең “Йыр тураһында баллада” әҫәре кемгә бағышланған*?
а. Мостай Кәримгә
б. М. Харисҡа
в. Х. Ҡунаҡбайға
г. Ғ. Йосоповҡа
д. М. Хәйгә

6. *Назар Нәжмиҙең “Урал” поэмаһында ҡурайсы ят кешегә ни өсөн “башҡорт түгелһең” тип әйтә*?
а. Уралда тыумағанға
б. “Урал”ды йырлай белмәгәнгә
в. Уралын ташлап, уны һаҡламай, сит-ят ерҙә йәшәп ятҡанға
*1. Назар Нәжмиҙең “Шағир һәм шаһ” поэмаһында нимә данлана ?*
а. Шиғриәт
б. Ижад азатлығы
в. Шаһ хакимлығы
8. *Ҡайһы исем йәки премия Назар Нәжмигә яҡын һәм ҡәҙерле?*
а. С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы
б. Рәсәйҙең дәүләт премияһы
в. Халыҡ шағиры исеме
г. Бөтәһе лә



| | | |
|---|---|---|
| | килтереүе һүрәтләнә. Уҡыусылар, артабан әҫәрҙең образдар системаһын, композицияһын, сюжет элементтарын билдәләйек; телмәренә иғтибар итәйек. | |
| IV. Герой-ҙарға характе-ристика биреү | *Уҡытыусы:*<br>– Балалар, бына ошо карточкаға ҡарағыҙ әле. Уҡып ишеттерегеҙ.<br>Уҡыусы:<br>– “Мин илай-илай бәхет һораным, көндәр һораным, төндәр һораным”.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Был ниндәй геройыбыҙҙың һүҙҙәре инде?<br>*Уҡыусы:*<br>– Тимеркәйҙең.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, дөрөҫ. Тимеркәйҙе ошо һүҙҙәре аша ниндәй кеше итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Тимеркәй тырыш егет, эшсән, йомарт. Ул атаһы менән урманда йәшәй, аҙаҡ ун бер йыл буйына тамаҡ туйҙырыр өсөн байға хеҙмәт итә.<br>– Ул Гөлбикә исемле ҡыҙҙы ярата, тик мөхәббәте тураһында уға әйтә алмай, үҙенең шундай ярлы, буйһоноусан тормошона ғәрләнә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Уның яҙмышы нисек тамамлана?<br>*Уҡыусы:*<br>– Ул һуғышта үлеп ҡала.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Эйе, Тимеркәйҙең яҙмышы бик ҡыҙғаныс. Артабан китәбеҙ (карточка күрһәтәм).<br>*Уҡыусы:*<br>– “Уның бөтә кәрәк-яраҡтары шунда, | 15 минут |

| | | |
|---|---|---|
| | сөнки йомошҡа барырға күршеһе юҡ уның”. Бында Сәми ҡарт тураһында әйтелә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, дөрөҫ. Әйҙәгеҙ Сәми ҡартҡа характеристика бирәйек.<br>*Уҡыусы:*<br>– Сәми – Тимеркәйҙең атаһы. Ул улы менән урманда йәшәй, улар тураһында насар хәбәр һөйләйҙәр.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Кем һөйләй? Нимә тип һөйләй?<br>*Уҡыусы:*<br>– Ауыл халҡы Сәми ене ҡағылғандыр, ти. Халыҡ дөрөҫөн һөйләмәй.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Тағы ла Сәми ҡарт тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?<br>*Уҡыусы:*<br>– Сәми урманда йәшәргә өйрәнгән, үҙҙәренең тамаҡтарын туйҙырыр өсөн дә, Тимеркәйҙе кейендерер өсөн дә ул тырыша. Сәми һунарға йөрөй, балыҡ тота, баҙарҙа балыҡ һата. Тик, ана шул балыҡтарҙы һатҡан ваҡытта, холера ауырыуы менән ауырып үлеп китә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, афарин! Әле атап киткән геройҙар ыңғаймы, әллә киреме?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Ыңғай.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Ә әҫәрҙә кире геройҙар бармы? Ни өсөн кире герой тип уйлайһығыҙ? Тәүҙә бына ошо карточканы уҡып китәйек.<br>*Уҡыусы:*<br>– “Бер күҙе йоҡлаһа, икенсе күҙе һәр ваҡыт ҡарап тора”. Бында Ҡотлояр бай | |



*буйынса класта тағы ла ниндәй саралар үткәрергә мөмкинлеген планлаштырып, педагогик практика барышында файҙаланығыҙ.*

* * *

**Әҙәбиәт буйынса кластан тыш саралар өлгөләре**

1. Аҡыллылар бәйгеһе

(10, 11 кластар өсөн Назар Нәжми ижадына арналған интеллектуаль уйын)

Маҡсат: Назар Нәжмиҙең тормош юлын иҫкә төшөрөү, ижадының әһәмиәтен күрһәтеү; уҡыусыларҙың фекер ҡеүәһен, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереү, төркөмдә эшләү һәләтен арттырыу; әҙиптең ижадына ҡарата һөйөү тойғоларын тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Назар Нәжмиҙең портреты, йырҙары яҙылған аудиокассета, китаптарынан төҙөлгән күргәҙмә, карточкалар.

Бәйге барышы

“Юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер...” йыры яңғырай.

Алып барыусы: Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар! Назар Нәжмиҙең тормош юлы һәм ижадына арналған “Аҡыллылар бәйгеһе” уйынын башлайбыҙ. Бөгөнгө уйында ҡатнашыусыларҙы сәләмләйбеҙ! Командаларҙы үҙ урындарына, түңәрәк өҫтәлдәр артына ултырыуҙарын һорайым. Ә хәҙер көйәрмәндәрҙе тәбрик итәйек! Һәм, әлбиттә, бөгөнгө уйынды баһалаусы жюри ағзалары менән танышайыҡ.

Беренсе тур

– Тәүге конкурста командаларға Н. Нәжмиҙең тормош юлы һәм ижады буйынса тест һорауҙарына яуап бирергә кәрәк.

1. *Назар Нәжми ҡайһы ауылда тыуған?*

а. Келәштә

б. Миңештелә

в. Ҡалтала

г. Хәсәндә

д. Диңгеҙбайҙа

2. *Назар Нәжми ҡасан тыуған?*

а. 1918

б. 1919

в. 1923

ғына тәжрибә тупланған.

*Әҙәби музей* – әҙәби клуб эшмәкәрлегенең һәм тыуған төбәкте әҙәби яҡтан өйрәнеүҙең күп йыллыҡ һөҙөмтәһе. Оҙаҡ ваҡыт йыйылған материалды, экспонаттарҙы туплап, системалаштырыу аҙаҡ мәктәптә әҙәби музей төҙөү мәсьәләһен ҡуҙғата. Музей асылғас, уҡыусыларҙың уға бәйле эшмәкәрлек даирәһе киңәйә; Башҡортостан яҙыусылары менән, башҡа музейҙар менән яңы элемтәләр урынлаштырыла, экспонаттар байытыла, яңыртыла бара. Әҙәби музей тыуған яҡ мәҙәниәтенең, һүҙ сәнғәте тарихының бай материалын туплаған сығанаҡҡа әйләнә. Даими уңышлы эшләгән музейҙар район һәм республика күләмендә билдәлелек ала. Мәктәп музеҙарының ошондай кимәлдә эшләү тәжрибәһе Башҡортостанда киң таралған.

Ысын мәғәнәһендә музей төҫөн алған коллектив уҡыусылар иҫәбенән үҙенең "хеҙмәткәрҙәрен" туплай, аҙна эсендә билдәле график буйынса эшләй. Унда килеүселәрҙе (йыш ҡына мәктәп ҡунаҡтарын) экспонаттар һәм мәғлүмәттәр менән уҡыусылар үҙҙәре таныштыра. Мәктәп музейҙарының ошондай кимәлдә эшләү тәжрибәһе Башҡортостанда киң таралған.

Әҙәбиәт уҡытыусылары әйләнешле эш төрҙәренең бығаса осрамаған өр-яңыларын да уйлап табып, график буйынса йыл әйләнәһенә даими үткәрә ала. Уларҙың иң уңышлылары бөтән мәктәптәргә лә таралып китергә мөмкин.

Шулай итеп, кластан тыш эштәрҙең күп төрлө саралары уҡыусыларҙа эстетик зауыҡ, рухи кисерештәр, хис-тойғолар уятыу аша әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләй. Тәбиғи, уларҙың бөтәһен дә филолог итеү маҡсаты ҡуйылмай, әммә һәр ҡайһыһына граждანлыҡ һәм әхлаҡлылыҡ орлоҡтары һалыу, нәфис әҙәбиәткә уятылған зауыҡтың ғүмерлеккә нығынып ҡалыуы өсөн тырышырға кәрәк. Тейешле кимәлдә көйләнгән кластан тыш эштәр уҡытыусыларҙың үҙҙәрен дә алға әйҙәй – балаларға яҡынайырға, улар менән көндәлек тормошта нығыраҡ аралашырға, тынғыһыҙ эҙләнергә ярҙам итә.

---

*1. Әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәрҙең маҡсатын асыҡлағыҙ.*

*2. Кластан тыш эштәрҙең төркөмдәргә бүленешенең тәртибен билдәләгеҙ.*

*3. Бүлексәлә яҡтыртылған эш төрҙәренән тыш, әҙәбиәт*



| | | |
|---|---|---|
| | тураһында әйтелә. Ул – кире герой. Сөнки ул һаран, ҡомһоҙ, насар кеше. Гел үҙенең байлығы тураһында ғына уйлай.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Рәхмәт яуабың өсөн. Ҡотлояр нисек байып киткән?<br>*Уҡыусы:*<br>– Ул хазина табып байыған. Халыҡ шулай һөйләй. Хатта ҡоймаһы ла бейек итеп таштан эшләнгән, унының өйөнә кеше түгел, башҡа йән эйәһе лә инә алмай.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Ә эшселәренә ҡарата улар ниндәй мөнәсәбәттә?<br>*Уҡыусы:*<br>– Эшселәре был байҙа оҙаҡ эшләмәйҙәр. Ул эшселәрен алмаштырып тора. Сөнки уларҙы көнө буйы, төнө буйы эшләтә лә эшләтә. | |
| V. Образ-дарҙың телмә-рен күҙәтеү | *Уҡытыусы:*<br>– Афарин, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ әҫәрҙәге геройҙарҙың телмәре хаҡында ла бер-ике һүҙ әйтеп китәйек. Был хаҡта нимә әйтә алаһығыҙ?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Геройҙарҙың телмәре ябай, аңлашылып тора. Йыш ҡына тапҡыр һүҙҙәр ҡулланыла (миҫалдар килтерелә).<br>– Халыҡсан тел менән һөйләшәләр.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Уҡыусылар, беренсе бүлек Тимеркәй исеменән һөйләнелә. Ни өсөн автор бындай алымды ҡулланған?<br>*Уҡыусы:*<br>– Тимеркәйҙең уйҙарын, тойғоларын, уй-хистәрен сағылдырыр өсөн.<br>*Уҡытыусы:* | 1 минут |

| | | |
|---|---|---|
| | – Эйе, тап шулай. | |
| VI. Әҫәрҙең төҙөлө-шөн, сюжет элемент-тарын билдә-ләү | *Уҡытыусы:*<br>–Әҫәрҙең төҙөлөшөн, сюжет элементтарын ҡарап сығайыҡ. Хикәйәләге ваҡиғалар нимә менән башланып китә, экспозиция ҡайҙа?<br>*Уҡыусы:*<br>– Тимеркәй атаһы менән йәшәй. Тәүҙә уларҙың нисек көн күргәне, нимәләр эшләгәндәре һүрәтләнә. Был – экспозиция.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Төйөнләнеү ҡайһы урында бирелә? Төп ваҡиғаның башланып китеүенә сәбәпсе булған хәлде атайыҡ.<br>*Уҡыусы:*<br>– Атаһы холера менән ауырып китә лә үлә, шунан Тимеркәйҙең тормошо үҙгәрә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Был фекер менән килешәһегеҙме? Бәлки төйөнләнеү итеп башҡа эпизодты алырға кәрәктер?<br>*Уҡыусы:*<br>– Мин дә был фекер менән килешәм, сөнки атаһы үлгәс, Тимеркәйҙең яҙмышында көсөргәнеш башлана, ул байға ялланып эшләргә мәжбүр була.<br>*Уҡытыусы:*<br>–Артабан китәйек. Ниндәй күренештәрҙә ваҡиғалар үҫешенә индерер инегеҙ? Кульминация нөктәһенә тиклем ниндәй ваҡиғалар һнрәтләнә?<br>*Уҡыусы:*<br>– Сәми ҡартты ерләйҙәр, Тимеркәйгә һуңынан хәйер һорашып йөрөргә тура килә. Уны Ҡотлояр бай эшкә ала. Тимеркәй байҙа ун бер йыл хеҙмәт итә. Аҙаҡ һуғышҡа алалар. | 9 минут |



ҙә әҙәбиәт уҡытыусыһының актив ҡатнашлығында башҡарыла. Түңәрәк ултырыштарының (эштәренең) программаһын уҡытыусы әҙерләй. Кәрәкле материалды ваҡытлы матбуғаттан, махсус методик журналдарҙан («Башҡортостан уҡытыусыһы», «Народное образование» һ.б.), методик баҫмаларҙан таба, үҙенең дә белемен, ижади фантазияһын шул эшкә ҡуша. Әҙәбиәт дәресенә ҡараған ошо бөтә түңәрәктәрҙең шишмә башы – уҡыу түңәрәге. Ул урта кластарҙа 10-12 йәшлектәрҙән ойошторола, балаларҙы китап дуҫтары, әҙәбиәт һөйөүселәр итеп тәрбиәләй. Был түңәрәк мәктәп китапханаһы менән берлектә эшләй; китаптарҙың торошон тикшерә, китапханасыға уларҙы ремонтлауҙа ярҙамлаша. Викториналар, әҙәби уйындар үткәрә, тасуири уҡыу конкурстары әҙерләй. Уҡыу түңәрәгендә тәрбиәләнеүселәр артабан бүтән тармаҡтарға таралыша: кемдәрҙер әҙәби ижадты, кемдәрҙер драманы, кемдәрҙер фольклорҙы һ.б. һайлай.

*Әҙәби клуб* – әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәрҙең юғары ойошҡан формаһы. Ул төрлө кластарҙан 100-200-ләп кешене берләштерә. Клубтың эшмәкәрлеге тулыһынса үҙ аллылыҡ принцибына нигеҙләнә. Уҡыусылар араһынан президиум һәм президент һайлана. Клубҡа балалар үҙҙәре исем бирә, уставын, манифесын төҙөй, ағза итеп алыу шарттарын уйлап таба. Был шарттар буйынса, клубтың буласаҡ ағзаларының әҙәбиәткә һөйөүе беленергә тейеш. Клубҡа төрлө секциялар ҡарай. Уларҙың һәр береһе айырым план буйынса эшләй. Әҙәби түңәрәктәр ҙә шулар иҫәбендә була. Уҡытыусы президиумға кәңәштәр менән йүнәлеш кенә бирә, етәкселек ролен үҙ өҫтөнә алмай. Һәйбәт эшләгән клуб мәктәп күләмендә генә түгел, тирә-яҡҡа ла (урынына ҡарап – бөтә ауылға, район үҙәгенә, ҡала микрорайонына) билдәлелек ала. Ул юғары кимәлдә әҙәби кисәләр әҙерләп үткәрә, мәктәптәге әҙәбиәт буйынса ҡаралған кластан тыш эштәрҙең бүтән сараларына йоғонто яһай, урындағы мәҙәниәт йортона, ауыл китапханаһына ярҙам итә. Клубтың эшендә даими әүҙем ҡатнашҡан уҡыусылар мәктәпте тамамлағас та уның менән бәйләнеште өҙмәй, әҙәби кисәләрҙә йә бүтән ҡыҙыҡлы сараларҙы үткәреүҙә ҡатнашып йөрөй, үҙҙәрен уның тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп тоя.

Башҡортостан мәктәптәрендә әҙәбиәт буйынса кластан тыш сараларҙың был төрө киң таралмаған; ә Рәсәй күләмендәге мәктәптәрҙә күҙ уңында тотҡанда, уны ойоштороу буйынса ярайһы

мәктәп ошо байрамға әҙерлек шарттарында йәшәй. Кисә үҙе ике бүлектән тора. Тәүгеһендә – рәсми бүлектә – яҙыусының тормош юлы, ижад этаптары, бүтән әҙиптәр менән бәйләнеше, уның ижадының башҡа төр сәнғәт әҫәрҙәренә йоғонтоһо хаҡында һүҙ бара. Мөмкинлек булһа, байрамға автор үҙе лә саҡырыла. Әгәр кисә айырым яҙыусыға арналмайынса, уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырған бүтән әҙәби проблемаға ҡоролһа, тәүге рәсми өлөштөң шулай уҡ йәнле, мауыҡтырғыс булыуы хаҡында хәстәрлек күрелә. Кисәлә уға әҙерлек барышында үткәрелгән конкурстарға, викториналарға йомғаҡ яһала. Икенсе өлөш концерт, театрлаштырылған сығыш йә әҙәби-музыкаль монтаж рәүешен ала. Ул туранан-тура кисәнең темаһы менән бәйле була. Кисәгә әҙерлек дәүерендә һәм байрамдың үҙендә уҡыусылар яҙыусыны яңынан аса, уның ижады менән нығыраҡ ҡыҙыҡһына башлай. Кисәгә әҙерлек, уны үткәреү мәктәп дирекцияһы, әҙәбиәт уҡытыусылары һәм әҙәбиәт түңәрәгенең яуаплылығына төшә.

*Әҙәби экскурсиялар, походтар* тыуған төбәкте әҙәби яҡтан өйрәнеүгә ярҙам итә; унда алған тәьҫирҙәрҙе, экспонаттарҙы уҡытыусы дәрестә лә файҙалана. Был эштәр тыуған яҡтың әҙәби байлыҡтарын асыу, яҡташ яҙыусы тормошон өйрәнеү, уға бәйле материалдар йыйыу йүнәлешендә алып барыла. Уҡыусылар яҡын-тирәгә экскурсиялар, алыҫ яҡтарға сәйәхәттәр яһап, төрлө эҙләнеүҙәр ойоштора, табыштарҙы бер урынға туплай бара, тыуған яҡҡа бәйле әҙәби материалдар тураһында картотекалар төҙөй.

III. Ә й л ә н е ш л е э ш т ө р ҙ ә р е н ә түңәрәктәр, әҙәби клуб, әҙәби музей һ.б. кеүек билдәле бер ваҡытта даими үткәрелә барған эш төрҙәре инә.

*Түңәрәк* 15 – 20-ләп кешенән торған төркөмдә берләштерә. Унда яҡынса бер тирә йәштәге уҡыусылар йөрөргә тейеш. Шуның өсөн урта һәм юғары кластар түңәрәктәренең айырым-айырым булыуы яҡшыраҡ. Түңәрәктәрҙе күпселек осраҡта әҙәбиәт уҡытыусылары бер яҡлы ғына аңлай: унда бары тик ҡәләм тирбәткән уҡыусылар ғына йөрөргә тейеш, тип ҡарай. Асылда иһә әҙәбиәт дәресенә ҡағылышлы түңәрәктәр күп төрлө: а) уҡыу түңәрәге; б) әҙәби ижад түңәрәге; в) йәш хәбәрселәр түңәрәге; г) халыҡ ижадын өйрәнеү түңәрәге; д) драма түңәрәге һ.б. Бер генә яҙыусы ижадын өйрәнеү, әҙәби тәржемә кеүек ваҡытлы түңәрәктәрҙең дә эшләүе мөмкин. Шулай уҡ киноуниверситет, һынлы сәнғәт, музыка буйынса кластан тыш эштәр



| | | |
|---|---|---|
| | *Уҡытыусы:*<br>– Эйе, дөрөҫ. Балалар, кульминация нөктәһен билдәләп ҡарайыҡ әле. Геройҙың яҙмышын хәл иткән мәл ҡайҙа, тип уйлайһығыҙ?<br>*Уҡыусы:*<br>–Уның һуғышта яраланыуын кульминацияға индерергә була. Яраланғас, Тимеркәй үҙенең үлеп ҡаласағын белә. Уның хәле насарая.<br>*Уҡыусы:*<br>– Мин дә уның яраланған, ана шул хәле насарайған мәлен кульминацияға индерер инем. Сөнки артабан йығыла ла үлә. Әҫәр шуның менән тамамлана.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Тимәк, сиселешкә ниндәй өҙөктө индерәбеҙ булып сыға? Иптәшегеҙ әле генә әйтеп үтте.<br>*Уҡыусы:*<br>– Ул үлеп киткән мәлде һәм авторҙың шуға бәйле телмәрен сиселеш тип ҡабул итергә мөмкин. | |
| VII. Әҫәрҙең жанрын билдәләү | *Уҡытыусы:*<br>– Әҫәр ниндәй жанрҙа ижад ителгән?<br>*Уҡыусы:*<br>– Хикәйә.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, дөрөҫ. Ә хикәйә ниндәй жанр ул?<br>*Уҡыусы:*<br>– Унда бер нисә герой ҡатнаша, шуларҙың берәүһе генә – төп герой. Ошо геройҙар менән бәйле төп ваҡиға һүрәтләнә, хикәйәлә бер генә сюжет һыҙығы була.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Эйе, хикәйәнең үҙәген бер төп герой һәм төп ваҡиға тәшкил итә, ул бер генә | 1 минут |

| | | |
|---|---|---|
| | сюжетҡа нигеҙләнә. | |
| VIII. Әҫәрҙең тел-стиль сарала -рын билдә-ләү | – Уҡыусылар, әҫәрҙең тел-стиль сараларын күҙәтәйек. Бында ниндәй һүрәтләү саралары бар?<br>*Уҡыусылар:*<br>– Киң туғай (эпитет), йәшел үлән (эпитет), йондоҙҙар бер-береһенән көнләшкән кеүек йымылдашып яналар (сағыштырыу), был йондоҙҙар, уның күҙҙәре кеүек, йөрәккә үтмәйҙәр (сағыштырыу).<br>– Гөлбикәнең күҙ ҡараштары бөтә тәнемә ут йүгертеп ебәрә (йәнләндереү), арыш башаҡтары аҡһыл ай нурында ынйы төҫлө ялтырап киттеләр (сағыштырыу), аҡһыл томандар (эпитет), елкә тырнарға ла ваҡыты юҡ (гипербола), табаныңды ялтырат (фразеологизм).<br>– Көмөш тауыштар (метафора), тауыштары туғайға йәйелде (йәнләндереү), бейек ағас (эпитет), әсе көн (эпитет), йөрәге өшөнө (йәнләндереү), күҙе йоҡлаһа (йәнләндереү), урманда ен алыштырғандыр (гипербола), Тимер ен кеүек эшләй (сағыштырыу), пулеметтарҙан ямғыр кеүек пулялар яуа (сағыштырыу), ҡанлы кәүҙә (эпитет).<br>*Уҡытыусы:*<br>– Афарин, күп итеп һүрәтләү сараларын таптығыҙ. Уҡыусылар, Д. Юлтыйҙың был хикәйәһе ни өсөн “Тимеркәй фәлсәфәһе” тип атала?<br>*Уҡыусылар:*<br>– “Фәлсәфә” уйланыу тигәнде аңлата. Тимеркәй уйлана, тормошто аңларға тырыша, тик аңлап бөтә алмай. Үҙенсә, | 8 минут |



повестарында лиризм» һ.б.). Конференцияға уҡыусылар алдан әҙерләнә. Төп һорауҙарға алдан бирелгән темалар буйынса докладтар яҙыла. Докладсылар сығыш яһағас, шул проблемалар буйынса әңгәмә ҡуҙғатыла. Конференция уҡыусыларҙы әңгәмәлә актив ҡатнашырға, өйрәнелмәгән аудиторияла (унда төрлө кластар була) сығыш япарға, үҙ фекерҙәрен тартыныуһыҙ әйтә белергә өйрәтә. Әҫәрҙе бергәләп тикшереүҙең ҡатмарлыраҡ сараһына – диспутҡа әҙерләй.

*Диспут* юғары кластарҙа ғына үткәрелә. Тема уҡытыусы тарафынан билдәләнә. Актив уҡыусылар менән берлектә һорауҙар әҙерләнә. Тема буйынса 5–6 һорау таман һанала. Әммә уларҙың һәр береһе бәхәс уятырҙай, проблемалы булырға тейеш. Диспутта ҡатнашыусыларға һорауҙар аҙна самаһы алдан еткерелә. Ҙур форматлы ҡағыҙға матур итеп яҙып, күренекле урынға элеп ҡуйыу һәйбәтерәк. Балалар проблемалар менән алдан танышып, уйлана тора. Диспуттың нисек килеп сығыуында хәл иткес ролде алып барыусы уйнай. Был эште юғары класс уҡыусыларының үҙҙәренә ышанып тапшырырға мөмкин, һорауҙар алдан билдәле булһа ла, бер кемгә лә яҙып әҙерләнеп килергә тәҡдим ителмәй. Диспуттың конференциянан айырмаһы ла шунда – әҫәр йәки яҙыусы ижады тураһындағы фекерҙәрен уҡыусы әҙерлекһеҙ, ирекле рәүештә, үҙ аллы әйтеп өйрәнергә тейеш. Һәйбәт ойошторолған диспутта уҡыусыларҙың күпселеге ҡатнаша, улар үҙ-ара ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшә, әлеге 5 – 6 пункт һорауҙың һәр береһенә бәхәс аша яҡынса дөрөҫ яуап табыла. Ҡайһы берәүҙәр ошо уртаҡ дөрөҫлөк менән риза ла булмаҫҡа мөмкин. Был – ыңғай күренеш. Уҡыусыларҙа, тимәк, үҙ аллы фекерләү ҡеүәһе тыуа. Диспутта башланған һәм ҡыҙған бәхәс ҡайһы саҡта аҙаҡ, уҡыусылар таралышҡанда ла дауам итергә мөмкин. Был хәл уның һәйбәт үтеүе, уҡыусылар күңеленә тәрән эҙ ҡалдырыуы тураһында һөйләй.

*Әҙәби кисәләр* йылына ике-өс тапҡыр ғына ойошторола. Улар, ғәҙәттә, күренекле яҙыусы юбилейына йә балалар нығ ҡыҙыҡһынған темаға арнала, бөтә мәктәп күләмендә ентекле әҙерлекте талап итә. Ике-өс аҙна элек үк яҙыусы ижады буйынса иң һәйбәт иншаларға, һүрәттәргә конкурс иғлан итергә, викторина һорауҙары таратырға мөмкин. Яҙыусы әҫәрҙәренән ҡурсаҡ театры йә сәхнә өсөн ҙур булмаған сценарийҙар яҙыла, ҡурсаҡтар яһала, геройҙар өсөн костюмдар тегелә. Концерт номерҙары, китап һатыу әҙерләнә, махсус әҙәби газета сығарыла һ.б. Ҡыҫҡаһы, һәр класҡа эш табыла. Бөтә

ярҙамлаша, кәрәкле китапты табырға, һайларға өйрәнә, туҙғандарын тәртипкә килтерә, ремонтлай. Китапханала тәртипкә өйрәнеп, үҙенең өйҙәге дәреслектәрен дә йыйнаҡ тота башлай.

Әҙәбиәт уҡытыусыһы балала китапҡа мөхәббәт уятыу өсөн ғаилә йоғонтоһон да файҙалана. Ата-әсәләр менән әңгәмәләр үткәрә, өйҙә китапхана булдырырға тәҡдим итә, унда баланың ҡыҙыҡһыныу даирәһенә ярашлы әҫәрҙәрҙең дә урын алыуына ирешә.

Балаларҙың үҙҙәренә уҡытыусы өйҙә уҡылған әҫәрҙәр тураһында көндәлек алып барырға өйрәтә. Ниндәй ҙә булһа китапты уҡып сыҡҡас, унан алған тәьҫирҙәрен, геройҙарға, ваҡиғаларға мөнәсәбәтен уҡыусы шул көндәлек дәфтәргә яҙып ҡуя. Уҡытыусы даими рәүештә ул дәфтәрҙәр менән танышып бара, кәрәк урында теге йәки был китап тураһында үҙенең фекерҙәрен дә өҫтәй, уҡыусыны бәхәскә саҡыра. Шулай итеп, әҫәр тураһында ике кешенең яҙма рәүештә тигеҙ хоҡуҡлы фекер алышыуы килеп сыға.

Ошондай сараларға уҡытыусыларҙың шәхси-ижади алымдарын да ҡушҡанда, балаларҙың кластан тыш уҡыу буйынса көндәлек эштәре тейешле кимәлдә үтәсәк.

II. Э п и з о д и к   э ш   т ө р ҙ ә р е даими тәртип, график буйынса түгел, ә йылына бер нисә тапҡыр – кәрәкле, уңайлы тип табылған ваҡытта үткәрелә; күбеһенсә уҡыу конференцияларын, диспуттарҙы, әҙәби кисәләрҙе, экскурсияларҙы, походтарҙы һ.б. үҙ эсенә ала. Хәҙерге заманда тарала килгән башҡа төрлө сараларҙы ла (“Мөғжизәләр яланы”, “Бәхетле осраҡ”, “Йәгеҙ әле, егеттәр, ҡыҙҙар”, “Шаттар, тапҡырҙар клубы” һ.б.) ылыҡтырырға, йә яңыларын уйлап табырға мөмкин. Улар балаларҙың дәрестә йәки дәрестән тыш өйрәнгән, өйрәнәсәк әҫәрҙәрен үҙләштереүгә туранан-турамы, йәшеренме – бәйле булырға тейеш.

*Уҡыу конференциялары* формаһы һәм йөкмәткеһе менән кластан тыш уҡыуға яҡын. Ләкин ул программанан тыш үткәрелә, иреклелек принцибына таяна. Урта кластарҙа конференцияның төп алымы – әңгәмә. Кластан тыш уҡыу программаһында ҡаралмаған берәй ҡыҙыҡлы әҫәр алдан уҡыла һәм уның буйынса кластағынан да йәнлерәк, мауыҡтырғысыраҡ әңгәмә үткәрелә. Әңгәмә менән уҡытыусы етәкселек итә. Юғары кластарҙа конференция айырым яҙыусының бер нисә әҫәрен йәки төрлө авторҙарҙың бер үк темаға яҙылған бер нисә әҫәрен берләштергән проблема буйынса ойошторола (мәҫәлән: «С. Мифтахов драмаларында конфликт һәм характерҙар»; «Ә. Хәкимов



| | | |
|---|---|---|
| | тимеркәйсә генә фәлсәфә йөрөтә.<br>– Тимеркәй ғәҙелһеҙ тормошона зарлана, был тормошта йәшәүе ауырға тура килә килә, тип уйлай, ә ни өсөн ауыр икәнлеген асыҡлап бөтә алмай.<br>*Уҡытыусы:*<br>– Хәҙер көндәлектәрегеҙҙе асығыҙ, өйгә эште яҙып ҡуйығыҙ. Өйҙә әле анализлаған әҫәр буйынса “Тимеркәй яҙмышы миндә ниндәй уй-тойғолар уята” тигән темаға бәләкәй генә инша яҙып киләһегеҙ (Өйгә эште яҙалар). | |

*Садиҡова А. Ф., БДУ студенты, 2011.*

**Иҫкәрмәләр:**

1. Әҙәби әҫәрҙең идея-проблематикаһы хаҡында анализдың аҙағындараҡ һүҙ йөрөтөү маҡсатҡа ярашлыраҡ.

2. Бында ла һүрәтләү саралары әҫәрҙән айырып ҡарала. Был – иң таралған етешһеҙлектәрҙең береһе. Әҫәрҙең художество ҡиммәте хаҡында тәрән һүҙ йөрөтөү мөмкинлеге ситтә ҡала.

## Образдарға характеристика биреү

Образдарға характеристика биреү – әҫәрҙе анализлауҙың иң ҙур компоненты. Образ төшөнсәһе киң мәғәнәгә эйә, тигәйнек. Тәүҙә “герой”, “персонаж” мәғәнәһенә ҡағылышлы йүнәлештә һүҙ йөрөтәйек. Геройҙар хаҡында һөйләшкән арала уҡыусылар әҫәрҙең идея-тематик асылына яҡын килә. Характеристикаға тотонор алдынан уҡытыусы теге йәки был образдың донъяны танып белеүҙәге һәм тәрбиәүи әһәмиәтен асыҡлай. Шуны күҙ уңында тотоп, эш йүнәлешен образдарҙың тибына ҡарап һайлап ала. Мәктәп программаһы буйынса уҡыусылар нигеҙҙә өс типтағы персонаждар менән осраша: үҙҙәрендә ыңғай һыҙаттарҙы күберәк туплаған, балаларҙы патриотик рухта тәрбиәләргә ярҙам иткән героик характерҙар (Ә. Бикчәнтәевтың “Бөркөт һауала үлә” повесынан Александр Матросов; Д. Юлтыйҙың “Ҡарағол” драмаһынан Ҡарағол

һ.б.); уҡыусы күңелендә ҡаршылыҡлы тойғо (нәфрәт, күрә алмаусылыҡ, ғибрәт) аша тәрбиәүи йоғонто яһаусы кире геройҙар (М.Кәрим, “Ай тотолған төндә” – Дәрүиш); эске ҡаршылыҡлы геройҙар (Ғ. Сәләм, “Шоңҡар” – Әхмәт; А. Абдуллин “Ун өсөнсө председатель” – Айтуған). Тәүге осраҡта анализ барышында образдарҙың героик тәбиғәтен асыуға иғтибар йүнәлдерелһә, ҡалғандарында уҡытыусы персонаждарҙың тиҫкәре йәки ҡаршылыҡлы һыҙаттарының асылына үтеп инергә өйрәтә, уларға аныҡ, принципиаль баһа биреүҙе талап итә.

Характеристика биреү алымдары индивидуаль, сағыштырма, төркөмлө булырға мөмкин. Урта кластарҙа индивидуаль характеристика киңерәк таралған. В.В. Голубков образдарға индивидуаль характеристика биреүҙең өс принцибын билдәләй (6, 138).

1. Геройҙы бер нисә эре һыҙаты буйынса анализлау. Был принцип ҡатмарлы характерлы төп геройҙарҙы төрлө яҡлап асыу өсөн уңайлы. (Д.Бүләковтың “Килмешәк” романындағы Нурихановты иҫкә төшөрәйек).

2. Бер мөһим һыҙат буйынса тикшереү. Төп йәки икенсе дәрәжәләге геройҙарҙың берейһенә хас мөһим һыҙатты айырып күрһәтеү өсөн ҡулайлы принцип. Әйтәйек, Дәрүиштең бөтөн булмышы яуызлыҡ икәнен асыҡлау өсөн уның тышҡы ҡиәфәте, һөйләшеүе, ҡылыҡтары, бүтән геройҙарға мөнәсәбәте тураһында һүҙ йөрөтөргә кәрәк.

3. Образдың эске ҡаршылыҡтарын асыу принцибы. Был осраҡта, ҡаршылыҡлы тәбиғәтле геройҙар анализланғанға күрә, проблемалы һорауҙар ярҙамға килә. Тәңкәбикә образы, мәҫәлән, баштан-аяҡ ҡаршылыҡтар солғанышында. Ул үҙе тәңре ҡаршыһында гөнаһ ҡылыуҙы ғәйепләй, үҙе йәш сағынан уҡ ауыр гөнаһ утында яна; үҙе балаларын йәне-тәне менән ярата, Аҡъегет менән Зөбәржәттең бәхете хаҡында хыяллана, үҙе уларҙы үлемгә хөкөм иттерергә мәжбүр була. Анализ ваҡытында уҡыусылар ошо ҡаршылыҡтарҙың сәбәбенә, асылына төшөнөргә тейеш,

Урта кластарҙа образдарға индивидуаль характеристика биргәндә план буйынса эшләү анализ барышын еңелләштерә. Тәүге мәлдәрҙә (V класта, уҡыуҙың тәүге айҙарында) уҡыусыларға әҙер план бирелһә, артабан уҡытыусы планды класс менән бергәләп төҙөй, юғары кластар характеристиканы тулыһынса үҙ аллы бирә. Пландағы



бәйле сараларҙы үҙ эсенә ала. «Кластан тыш уҡыу дәрестәре уҡыусыларҙың уҡығандарын тикшереү, уҡығанды тәрәнерәк аңларға ярҙам итеү, әҫәргә анализ яһау, йомғаҡлау өсөн файҙаланыла» (10, 13). Художестволы әҙәбиәт менән бер үк кластағы балаларҙың төрлөһө төрлө кимәлдә ҡыҙыҡһына. Берәүҙәр урта кластарҙа уҡ романдар, эпопеялар уҡый, икенселәре әкиәттәрҙе, күләмәстәрҙе артығыраҡ күрә. Хәҙерге заманда, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әҙәби әҫәр уҡыу һүрелгәндән-һүрелә бара. Уҡытыусы был хәлгә битараф ҡалырға тейеш түгел. Кластан тыш уҡыу буйынса көндәлек эште уңышлы алып барыу өсөн уҡытыусы балаларҙың ошо тәбиғи ҡыҙыҡһыныу кимәлен иҫәпкә ала. Урта кластарҙа кемдең ниндәй китап донъяһында йәшәгәнен йә булмаһа нәфис әҙәбиәттән ниндәй кимәлдә ситләшкәнен яҙма эштәр ярҙамында белеп була. «Минең яратҡан китабым», «Быйыл уҡыған китаптарым», «Өйҙәге китапханам», «Иң яратҡан геройым» кеүегерәк темаларға ҙур булмаған иншалар яҙҙырыу кластың «әҙәби йөҙөн» бик асыҡ күрһәтеп бирәсәк,

Юғары кластарҙа анкета һорауҙарына яуаптар алыу ойошторола. Бындай ысул менән бер юлы уҡыусының сәнғәттең төрлө өлкәләрендәге ҡыҙыҡһыныу даирәһен дә күрергә мөмкин. Анкета шуға ярашлы итеп, йәғни күп төрлө һорауҙарҙы үҙ эсенә алырлыҡ, уҡытыусыға бай мәғлүмәт бирерлек итеп төҙөлә. Һорауҙар ҡыҫҡа, аңлайышлы була. Мәктәптең ауылдамы, ҡаламы икәнлегенә ҡарап, һорауҙар төрләндерелә, урындағы шарттарға яраҡлаштырыла. Анкета яуаптарына таянып, уҡытыусы кластан тыш тәҡдим ителә торған китаптар исемлеген төҙөй. Бында һәр баланың мөмкинлеге иҫәпкә алына. Шуға күрә ул кластан тыш уҡыу өсөн программа буйынса күрһәтелгән исемлектән киңерәк килеп сыға. Әҙәбиәт уҡытыусыһы балаларҙың ошо әҫәрҙәрҙе үҙ аллы уҡыуы менән дә етәкселек итә, художестволы тексты кемдең нисек үҙләштереүен күҙәтеп бара, ошоноң менән бергә әҙәбиәтте лә пропагандалай. Кластан тыш тәҡдим ителгән китап тураһында һорау-яуап рәүешендә һөйләшелмәй (юғиһә ул дәрестең дауамы һымаҡ килеп сығыр ине), ә ике кешенең әҫәр тураһында асыҡтан-асыҡ фекер алышыуы кимәлен ала. Ундай әңгәмәләрҙе уҡытыусы телмәре насар үҫешкән балалар менән күберәк үткәрә.

Мәктәп китапханаһы менән һөйләшеп, балаларҙы унда ылыҡтырыу ҙа – художестволы әҙәбиәткә йәлеп итеүҙең бер юлы. Балалар китапханасыға айырым темалар буйынса күргәҙмәләр ойоштороуға

“Иҙеүкәй менән Мораҙым” исемле сәхнә әҫәрҙәре билдәле. Ҡайһы берҙәре бөгөнгө көндә лә театрҙар репертуарынан төшмәй.

Уҡыусылар һәр бер сығыштан һуң уларҙы тулыландыра бара. Аҙаҡ күмәкләп фотостенд менән танышалар. Унда М. Буранғоловтың ғаиләһе, ҡәләмдәштәре (С. Агиш, Ғ. Амантай, Һ. Дәүләтшина, Ғ. Дәүләтшин һ.б.), “Шура” журналының 1-се бите, “Башҡорт туйы” нан бер күренеш һ.б. төшөрөлгән.

Йомғаҡлау.

Өйгә эш.

*БДУ студенты, 2010.*

**Иҫкәрмә.** Ошондайыраҡ күләмле сығыш менән тағы 2–3 уҡыусыны йәлеп итеп, М. Буранғоловтың тормош юлын һәм ижадын тулыраҡ асырға була. Сығыштар проблемалыраҡ итеп ойоштороуҙы һорап тора. М. Буранғолов шәхесенең һәм ижадының ҡатмарлылығы быға тулы мөмкинлек бирә.

## Әҙәбиәт буйынса кластан тыш эштәр

Кластан тыш эштәрҙең маҡсаты әҙәбиәт дәрестәренеке менән нигеҙҙә тап килә: балаларҙың әҙәби белемен киңәйтеү, уҡыу культураһын тәрәнәйтеү, ижади һәләтлектәрен, эстетик зауыҡтарын үҫтереү, граждандыҡ һәм әхлаҡи йөҙҙәрен нығытыу. Дәрестәрҙән һуң үткәрелгән эштәргә уҡыусылар иреклелек принцибы буйынса ылыҡтырыла. Әгәр дәрескә йөрөүҙе балалар мәжбүри тип, шулай тейеш тип ҡараһа, мәктәптең ижтимағи тормошонда үҙ теләктәре менән ҡатнашыу уларҙа ҙур активлыҡ тыуҙыра. Формаһы һәм йөкмәткеһе яғынан дәрестәрҙән айырмалы итеп ойошторолған эштәр байтаҡҡа ҡыҙығыраҡ, йәнлерәк тойола.

Кластан тыш эштәр шулай булырға тейеш тә. Уларҙы уҡыусылар күрергә теләгән кимәлгә ярашлы итеп әҙерләү ҡатмарлы, күп ҡырлы эшмәкәрлекте талап итә. Дәрестең дауамы, ҡабатланышы рәүешен алмаһын өсөн, кластан тыш эштәр мөмкин тиклем төрлөләндереп ойошторола. Ошо төрлө формалар үҙҙәре генә өс ҙур төркөмгә бүленә. Кластан тыш сараларҙың элек-электән иң киң таралған ҡайһы бер төрҙәрен ҡарап үтәйек.

I. К ө н д ә л е к   э ш   т ө р ҙ ә р е кластан тыш уҡыу менән



һорауҙар уҡыусыны геройҙың төп һыҙаттары, характеры, әҫәрҙәге урыны тураһында уйланырға, яуаптар эҙләргә, тексты ҡабат ҡараштырырға мәжбүр итә. Эҙмә-эҙлекле төҙөлгән план буйынса, ғәҙәттә, образдарға бәйләнешле характеристика килеп сыға. Юғарыраҡ кластарға күтәрелә барған һайын пландарҙың бергәләп төҙөлгәне лә, үҙ аллыһы ла образдарҙы характерлау өсөн йүнәлеш биреү функцияһына ғына әүерелә бара. Мәҫәлән, Диуана образын анализлауға йүнәлеш биреүсе план өлгөһө: а) диуананың ҡиәфәте, б) кейеме, в) күңеле, г) аҡылы, д) Аҡъегет менән Зөбәржәткә, Дәрүишкә һ. б. персонаждарға мөнәсәбәте, е) авторҙың был геройға үҙ ҡарашы.

Әҫәрҙең ике геройын бер үк планға ҡуйып, бер-береһенә сағыштырып, тигеҙ анализлау юлы бар. Был – сағыштырма характеристика. Сағыштырма характеристика өсөн ҡапма-ҡаршылыҡлы һыҙаттары булған, уҡыусыны берҙәй тигеҙ ҡыҙыҡһындырған геройҙар һайлап алына. Бындай төр характеристиканы ике юл менән үткәреп була. Беренсеһе – тәүҙә геройҙарҙың оҡшаш, һуңынан айырмалы яҡтары сағыштырыла (Ф.Иҫәнғоловтың “Хәмит күпере” хикәйәһенән Хәмит менән Вәлит икән, ти). Икенсеһе – тәүҙә бер персонажға тулы характеристика бирелә; унан һуң, уға сағыштырма планда, икенсе персонаж тикшерелә. (М. Кәрим, “Ай тотолған төндә” – Тәңкәбикә, Дәрүиш). Персонаждарҙың уртаҡ яҡтары күберәк булғанда, был юлдарҙың тәүгеһе уңайлы. Икенсеһе контраст яҡтары өҫтөнөрәк булған образдар өсөн яйлыраҡ. Хәмит менән Вәлиттең байтаҡ ҡына уртаҡлыҡтары бар: икеһе лә бер ата балалары, аталары уларға васыяттар әйтеп ҡалдыра, икеһе лә был васыяттарҙы үтәргә тырыша һ. б. Дәрүиш менән Тәңкәбикәнең күҙгә бәрелеп торған уртаҡ сифаттары самалы; әммә уларҙың һәр ҡайһыһының булмышы бер-береһе фонында асығыраҡ күренә.

Төркөмлө характеристикала коллектив, масса, халыҡ төркөмө бер юлы анализлана. Әҙәби әҫәрҙә улар айырым бер социаль ҡатламды тәшкил итә, был төркөмгә ингән персонаждарҙың шәхси һыҙаттары бигүк ҡабарынҡы итеп бирелмәй. Анализ ваҡытына, М. Ғ. Ғималова күрһәтеүенсә (9, 119), ошо социаль төркөмгә хас булған уртаҡ сифаттар асыҡлана. Миҫал өсөн: Б.Бикбайҙың “Салауат” драмаһында халыҡ образы, Р. Ниғмәтиҙең “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһында ауыл йәштәре образы һ. б.

Образды киң мәғәнәлә күҙ уңында тотоп һүҙ йөрөткәндә, анализдың ошо элементы – образдарға характеристика аша әҫәрҙең

художестволылыҡ серҙәренә тәрән үтеп инерлек шарттар тыуа. Геройҙар ғына түгел, уларҙы уратып алған донъя, пейзаж, интерьер, күренештәрҙе, хәл-ваҡиғалар ағышын, геройҙар араһындағы мөнәсәбәт, конфликттарҙы, художество деталдәрен һ.б. барыһын да образ (художестволы күҙ алдына килтереү) тип ҡарайбыҙ икән, уларҙы ла анализға ылыҡтырып, образдың әҫәрҙәрҙе ысын мәғәнәһендәге сәнғәт бейеклегенә күтәреүҙәге урынын, әһәмиәтен күрәбеҙ. Әйтәйек, Р.Ниғмәтиҙең "Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар" поэмаһында балалар уйынының, З.Биишеваның "Сәйер кеше" повесында Мыжыков фатирындағы интерьерҙың, Б.Рафиҡовтың тарихи фаразындағы эйәрләнгән ат, Ә.Хәкимов романында өйөрмә образдарының ни өсөн бирелгәнлеген асыҡлап, уларҙың телгә алынған әҫәрҙәрҙә айырылғыһыҙ урын биләүен, уның художество сифаттарын бермә-бер күтәреүен билдәләй алабыҙ. Йыш ҡына, анализға килеп терәлгәс, ни һөйләргә, ваҡытты нисек үткәрергә белмәй аптыраған йәш уҡытыусылар тап ошо образдарға характеристика элементы менән үҙен ҡотҡарып ҡала ала.

Эйе, анализдың иң күп ваҡыт талап иткән элементтары – образдарға характеристика биреү һәм, алда күрербеҙ – әҫәрҙең тел-стиль, һүрәтләү сараларын, поэтик образлылығын асыу. Ваҡытты файҙаланыу йәһәтенән хатта икенсе ҡурҡыныс килеп тыуыуы ихтимал – нисек еткерергә? Бында ике төрлө ҡотолоу юлы бар. Беренсенән, бер әҫәрҙе өйрәнгәндә образдың киң мәғәнәһенә ҡараған бөтә нәмәне асыҡлап, анализлап бөтөү мөмкин түгел; ошо конкрет әҫәрҙә иң сағыу урын алғандарына ғына туҡталыу уңайлыраҡ. Мәҫәлән, Н. Мусин әҫәрҙәре буйынса тәбиғәт күренештәренең кинәйәлеге хаҡында иркенләп һөйәшергә мөмкин. Артабан, киләһе дәрестәрҙә башҡа яҙыусылар әҫәрҙәре буйынса бүтән образдарҙы беренсе планға ҡуйып һүҙ алып барып була: тәрән мәғәнә һалынған конкрет ваҡиға, предмет, геройҙар һөйләшеүе һ.б. Икенсенән, образ туранан-тура әҫәрҙең теленә, һүрәтләү сараларына, кинәйәлеккә, поэтик образлылыҡҡа бәйле. Йәғни образдар тураһында һөйләшеп, бер юлы анализдың башҡа элементтарын да асыҡлай алабыҙ. Йәки, киреһенсә – һүрәтләү саралары хаҡында һүҙ алып барып, образдарҙы өйрәнеүҙе тулыландырабыҙ.

---

1. *"Образ" һүҙенең киңәйтелгән мәғәнәһен хәтерегеҙҙә*



"Алпамыша" эпосын отоп алып, ҡағыҙға төшөрә. Ғәбит, Хәмит сәсәндәр менән осрашыу уның күңелендә халыҡ ижадына ҡарата тәрән һөйөү уята. Уларҙан "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарын, бик күп ҡобайырҙар һәм халыҡ ижадының төрлө жанрҙарҙағы текстарын яҙып ала. Үҫмер сағынан йыйып килгән ҡиммәтле материалдарҙы ентекләп өйрәнә, системаға һала, баҫтырып сығарыуға ең һыҙғанып тотона. 1943 йылда был ҡомартҡылар "Батырҙар тураһында эпос" тигән йыйынтыҡ итеп донъяға сығарыла.

*3-сө уҡыусы.* М. Буранғолов сәсән булараҡ та танылыу ала. Уның әҙәби мираҫында ҡобайырҙар ҙа, халыҡ эпостары буйынса яҙылған либреттолар ҙа бар. Бигерәк тә уның"Ватан һуғышы" ҡобайыры ҙур әһәмиәткә эйә. Бында башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары тасуирлана. Әҫәрҙең төп геройҙары булып Байыҡ сәсән, Кутузов, Ҡаһым түрә образдары тора. Әҫәр 1942 йылда айырым китап булып баҫылып сыға. Халыҡ сәсәненең йәнә "Закон тураһында ҡобайыр", "Бөйөк дуҫлыҡ ҡобайыры", "Рәхмәт хаты" һымаҡ күләмле поэтик әҫәрҙәре бар.

*4-се уҡыусы.* М. Буранғоловтың ижади мираҫында проза әҫәрҙәре лә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. 1928–1929 йылдарҙа "Сәсән" журналында уның "Айһылыу", "Көтөлмәгән осрашыу" тигән мәҡәләләре баҫыла. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ижад ителгән "Сәлимә" повесы ла һаҡланып ҡалған.  Әҫәрҙең үҙәгенә Сәлимә исемле ҡыҙҙың яҙмышы ҡуйылған. 1914 йылда "Ваҡыт" гәзитендә, шул уҡ йылда "Шура" журналында сыҡҡан тәүге мәҡәләһен "Башҡорт ерҙәренең ситтәргә китеүе һәм уның нәтижәләре" тип атай. Икенсе мәҡәләһе "Соран вә Туҡ буйы башҡорттары" исеме аҫтында "Ваҡыт" гәзитендә сыға. Бында инде башҡорттарҙың көнкүреше, ер мәсьәләләренә ҡағылышлы проблемаларын күтәрә. 1918 йылдың 8 мартында "Яңы ваҡыт" гәзитендә баҫылған "Башҡорт туғандарға" тигән мөрәжәғәте иһә әҙиптең сәйәси публицистикаһы өлгөһө булып торҙо.

*5-се уҡыусы.* М. Буранғолов башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусыларҙан һанала. Күпселек драмаларын башҡорт халҡының тарихи йырҙарына, легендаларына таянып яҙа. Иҙелгән халыҡтың бай һәм төрәләрҙең ғәҙелһеҙлегенә, мәкер-золомона ҡаршы көрәшен, тормоштағы ҡаршылыҡтарҙы, конфликтлы ситуацияларҙы, ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, никахлашыу, туй үткәреү йолаларын бер бөтөн итеп һүрәтләй. Уның "Ашҡаҙар", "Зәңгәр игәл", "Буранбай", "Тәфтиләү", "Алпамыша", "Ҡара юрға", "Башҡорт туйы", "Ҡараһаҡал", "Таштуғай",

үҫтереү. М. Буранғолов ижадына ҡыҙыҡһыныуы һәм һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. М. Буранғоловтың портреты. “Таштуғай”, “Сәсән аманаты” китаптары. “М. Буранғолов – публицист, сәсән һәм драматург” тигән фотостенд. М. Аҡмулла һүҙҙәре яҙылған плакат:

Яҡшыны һүккән менән аты китмәҫ,
Яман һүҙҙең күңелдән даты килмәҫ.
Саф алтынды нәжескә буяу менән
Нәжес китер, алтындың заты китмәҫ.

**Яңы тема.** М. Буранғоловтың ижады һәм тормошо буйынса план бирелә.Ул таҡтаға һәм дәфтәргә яҙыла. Шул план нигеҙендә уҡыусылар алдан әҙерләнгән реферат менән берәм-берәм сығыш яһай, ҡалғандары тыңлай.

План.

1. М. Буранғоловтың хеҙмәт юлының башланыуы.
2. М. Буранғолов – фольклорсы.
3. М. Буранғоловтың сәсәнлек ижады.
4. М. Буранғолов – прозаик һәм публицист.
5. М. Буранғолов – драматург.

*1-се уҡыусы.* Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә Һамар губернаһы Баҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы) Үрге Ильяс (Тәңес) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. 1900 йылда үкһеҙ етем ҡала һәм ағалары тәрбиһендә үҫә. Иҫке Юлдаш ауылында земство мәктәбен тамамлап, 1901 йылда Ырымбурға сығып китә. Йәйгеһен официант булып эшләй, ҡышҡыһын Ҡарғалы мәҙрәсәһендә белем ала. 1903 –1906 йылдарҙың йәйендә Аҡтүбә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. 1907–1908 йылдарҙа тәржемәсе булып эшләй. 1909–1911 йылдарҙа Ырымбурҙың “Хөсәниә” мәҙрәсәһендә уҡый. 1912–1916 йылдарҙа Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡайыпҡас ауылында уҡытыусы булып эшләй. М. Буранғоловтың “Башҡорт туғандарға” исемле мөрәжәғәте 1918 йылдың 8 мартында “Яңы ваҡыт” гәзитендә баҫыла. Әммә уға был эш өсөн бер нисә ай төрмәлә ултырып сығырға тура килә. 1937 йылда ситтән тороп педагогия институтының дүрт курсын тамамлай.

*2-се уҡыусы.* М. Буранғоловтың фольклор йыйыу эшмәкәрлеге, уны өйрәнеүгә арналған тикшеренеүҙәре бик мөһим һәм ҙур әһәмиәткә эйә. 1907 йылда үҙе тыуып үҫкән Үрге Ильяс ауылында ул Хәсән Буранғоловтан “Ҡара юрға”, “Ҡуңыр буға” ҡобайырҙарын яҙып,



*ҡалдырығыҙ һәм әҫәргә анализ яһағанда уны күҙ уңында тоторға тырышығыҙ.*

*2. Геройҙарға характеристика биреүҙең төп принциптарын В В. Голубков ниндәй төр эшмәкәрлек нигеҙендә билдәләй?*

*3. Геройҙарға характеристиканың төрҙәрен иҫкә төшөрөгөҙ; төркөмлө характеристикаға иғтибар итегеҙ; уны һәр бер әҫәрҙе анализлағанда ҡулланып буламы?*

* * *

### Әҙәби геройҙарға характеристика биреү тәртибе

1. Геройҙың тибы (ыңғай, кире, эске ҡаршылыҡлы).
2. Геройҙың тышҡы ҡиәфәте.
3..Геройҙы тәрбиәләгән, уның донъяға ҡарашын формалаштырған социаль шарттар.
4..Геройҙың рухи донъяһы, кисерештәре һәм әҫәрҙәге башҡа персонаждар менән мөнәсәбәте.
5. Әҫәрҙәге конфликттарҙы хәл итеүҙә геройҙың роле.
6. Геройҙың телмәр үҙенсәлектәре.
7. Образды һүрәтләүҙә ҡулланылған өҫтәлмә саралар.
8. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыуҙа һәм әҙәбиәт үҫешендә геройҙың биләгән урыны.

### Ф. Иҫәнғоловтың “Хәмит күпере” хикәйәһе буйынса Хәмит һәм Вәлит образдарына сағыштырма характеристика өлгөһө

*Уҡытыусы:*

– Балалар, әйтегеҙ әле, “Хәмит күпере” хикәйәһенең төп геройҙары кем?(Уҡыусылар яуап бирә: “Хәмит менән Вәлит!”). Афарин! Хәҙер уларға сағыштырма характеристика биреп үтәйек. Хикәйәнең геройҙары тураһында һөйләшер алдынан уларға характеристика биреү тураһында һөйләшеп үтәйек.

Әҫәрҙә геройҙарҙың сифаттарын тасуирлау *характеристика* тип атала. Характеристика бер нисә элементтан тора: кешенең тышҡы күренеше (портреты) – төҫө, ҡиәфәте, өҫ кейеме, эске кейеме, күңел донъяһы, ғәҙәттәре, ҡылыҡтары, эшмәкәрлеге, телмәре һ.б.

Характеристика – ҡылыҡһырлама.

“Хәмит күпере” хикәйәһендә Вәлит нисек характерлана? Әйҙәгеҙ, балалар, хикәйәнән табып уҡыйыҡ.

*Уҡыусы:*

– “...Олоһо Вәлит электән дә, унан-бынан йәһәт кенә уйлап, ашыҡ-бошоҡ ҡына эшләргә яратҡан... Үҙе үлгәс, уны: “Йәшәне инде шунда бер үләт ялҡау! Шыр тиле ине...”- тип иҫкә алғандар.

*Уҡытыусы:*

– Характеристикала кешенең һөйләшеү үҙенсәлеге лә билдәләнә. Мәҫәлән, Вәлит ҡырҡыу, бик эре һәм тупаҫ итеп һөйләшә. Балалар, текстан Вәлиттең һүҙҙәрен табып, уҡып бирегеҙ.

*Уҡыусы:*

– “...Харап инде, ҙур эш ундырмаҡсы булаһың! Ул күперҙең беҙгә ни хәжәте бар? ...”.

*Уҡытыусы:*

– Хәмит тураһында нимә әйтергә була? (уҡыусылар һөйләй). Хәҙер, уҡыусылар, Вәлит менән Хәмитте йәнәш ҡуйып, уларға сағыштырмаса характеристиканы тулыландырайыҡ. Ике уҡыусы таҡтаға сыҡһын, башҡалар урында эшләй. Беренсе бағанаға Вәлит, икенсеһенә Хәмит тип ҡуйығыҙ, һәм уларҙың характерына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе яҙығыҙ:

| Вәлит | Хәмит |
| --- | --- |
| Ялҡау, эшлекһеҙ, маҡтансыҡ һ.б. | Аҡыллы, эшсән, изге күңелле... |

Текст менән эш итегеҙ.

(Уҡыусылар эшләй, был геройҙарҙың характер һыҙаттарын тулыландыра).

Ә хәҙер, балалар, мин һеҙгә һорауҙар бирәм, ә һеҙ шуларға яуаптар ҡайтарығыҙ:

– Атаһының васыятын Хәмит менән Вәлит ни өсөн икеһе ике төрлө аңлай ?

*Уҡыусы:*

– Вәлит электән дә, унан-бынан йәһәт кенә уйлап, ашыҡ-бошоҡ ҡына эшләргә яратҡан. Үҙе ялҡау, маҡтансыҡ, төптән уйлап эшләмәй, шуға атаһының васыятын аңламай, уның мәғәнәһенә төшөнә алмай. Хәмит иһә, кесе булыуына ҡарамаҫтан, зирәк булған, һәр ваҡыт эшләп йөрөгән. Ул йорт-ҡаралты тирәһен ныҒытҡан, иген иккән, балта эше эшләгән. Һәр ваҡыт аҡыл менән эш иткән, шуға күрә атаһының васыятын аңлай алған.

*Уҡытыусы:*



8. Әҙәби кимәленә һәм ҡиммәтенә баһа бирегеҙ.

9. Ошоларҙы иҫәпкә алып, план төҙөгөҙ,тезис итеп киңәйтегеҙ, рецензия кимәленә еткерегеҙ.

**Картина буйынса инша яҙыу тәртибе**

1. Картинаны ижад иткән рәссам тураһында мәғлүмәттәр менән танышығыҙ.

2.Картинаның исеменә иғтибар итегеҙ. Йөкмәткеһе менән бәйләнешен асыҡлағыҙ.

3.Картинаны иғтибар менән ҡарағыҙ. Нимәләр төшөрөлөүен, ниндәй ваҡиғалар һүрәтләнеүен асыҡлағыҙ.

4. Иншаның темаһын билдәләгеҙ һәм уға исем бирегеҙ.

5. Иншаның планын төҙөгөҙ.

6..Эш барышында төрлө һүрәтләү сараларын ҡулланығыҙ;төҫтәргә, төрлө деталдәргә иғтибар бирегеҙ.

7.Эшегеҙҙе башта ҡараламала яҙығыҙ,хаталарын төҙәткәндән һуң, дәфтәргә күсерегеҙ.

**Иншаны, изложениены тикшергәндә хаталарҙы билдәләү тәртибе**

Уҡытыусы яҙма тексты тикшергән саҡта дәфтәр бите аҫтында төрлө хаталарҙы шартлы тамғалар менән билдәләй:

Ф – фактик хата.
[ ] – артыҡ өлөш (артыҡ һүҙ, һүҙбәйләнеш).
W – низер төшөп ҡалған (һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, фекер).
Z – абзац бүленмәгән.
X – абзац дөрөҫ билдәләнмәгән.
[ I ] – фекерҙә дөрөҫ биреүҙә эҙмә-эҙлелек юғалған.
Й – йөкмәткеһендә хата.
Т – телмәр етешһеҙлеге.
I – орфографик хата.
V – пунктуацион хата.
Г – грамматик хата.

**Унынсы класта М. Буранғоловтың ижадын өйрәнеү буйынса уҡыусыларҙың сығыштары (рефераттары) өлгөһө**

Маҡсат. М. Буранғоловтың тормош һәм хеҙмәт юлы, сәсәнлек ижады менән танышыу. Уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телмәрен

һаналған, орфографик, пунктуацион хаталары булмаған йәки бик аҙ булған иншалар класта уҡыла. Хаталар өҫтөндә эш өсөн бүленгән ваҡыт эсендә, ҡағыҙә рәүешендә, өс-дүрт уҡыусының эше менән таныштырыла. Өлгөлө уҡыу өсөн төрлө стилдәге текстар һайлап алына: материалды һөйләү, һүрәтләү, хис-тойғо аша биреү һ.б. Класс алдында һәр авторҙың отошло яҡтары асыҡ күрһәтелә. Әгәр һирәкләп булһа ла шиғыр менән яҙылған иншалар килеп осрай икән, поэтик камиллығының ниндәй кимәлдә икәнлегенә ҡарамаҫтан, уларҙы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырмау яғында торорға кәрәк.

---

*1. Һөйләү һәм яҙма телмәр үҫешенең үҙ-ара бәйләнешен нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?*

*2. Ҡыҫҡартылған изложение өҫтөндә эш ентекле изложениеға ҡарағанда ауырыраҡ икәнлеген нисек аңлатаһығыҙ?*

*3. Ике төр изложениеның да башҡарылыу тәртибен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.*

*4. Иншаның төрҙәрен асыҡлағыҙ; уларҙы үткәреүгә әҙерлек һәм яҙыу тәртибен, хаталар өҫтөндә эш алымдарын дәфтәрегеҙгә таблица рәүешендә яҙып ҡуйығыҙ. Педагогик практикала улар һеҙгә бик кәрәк буласаҡ.*

* * *

**Уҡылған әҫәргә рецензия яҙыу тәртибе**

1. Әҫәрҙе иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Кәрәк булһа, айырым өлөштәрен ҡабаттан уҡығыҙ.
2. Темаһын һәм төп фекерен билдәләгеҙ.
3. Әҫәрҙә күтәрелгән проблемалар, уларҙың бөгөнгө көн менән ауаздашлығы тураһында яҙығыҙ.
4. Образдар системаһына һәм уларҙың характер үҙенсәлектәренә баһа бирегеҙ.
5. Авторҙың тел-стиль оҫталығына, персонаждарҙың телмәренә иғтибар итегеҙ.
6. Авторҙың үҙе һүрәтләгән хәл-ваҡиғаларға һәм геройҙарға мөнәсәбәтен асыҡлағыҙ.
7. Уҡыусыға йоғонтоһо, рухи үҫешенә тәьҫире тураһында уйланығыҙ.



– Вәлит исеменең тиҙ арала онотолоуының сәбәбе нимәлә?

*Уҡыусы:*

–Вәлит үҙен яҡшы яҡтан телгә алырлыҡ, уның тураһында һөйләрлек бер эш тә эшләмәй. Ялҡау, маҡтансыҡ ҡына була. Кеше араһында уның тураһында насар һүҙҙәр генә йөрөй. Үҙе үлгәс тә, Вәлиттең исеме бер аҙ йәшәгән йәшәүен, тик уны телгә алыу һирәгәйгәндән-һирәгәйә барып, бөтөнләй тынған. Вәлит мәңгегә онотолған.

*Уҡытыусы:*

– Хәҙер, балалар, әйтегеҙ әле, автор был геройҙар менән нимә әйтергә теләгән икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Әҫәрҙең төп темаһы, идеяһы нимәлә? (Уҡыусылар яуап бирәләр, төрлө фекерҙәр әйтәләр). Афарин! Был хикәйәлә хеҙмәт, эш, шулай уҡ ялҡаулыҡ темалары асыҡ сағыла. Дөрөҫ, “Ағасты япраҡ биҙәй, кешене хеҙмәт биҙәй”. Ысынлап та, юҡҡа ғына боронғолар “Хеҙмәт – йәшәү сығанағы”, тип әйтмәгән. Фәрит Исәнғолов беҙҙе хеҙмәт һөйөргә өйрәтә. Хеҙмәт, яҡшы эштәр ҡылыу ярҙамында кеше үҙенең исемен мәңгеләштерә алыуын әйтергә теләй ул. Шул уҡ ваҡытта автор ялҡаулыҡты ҡаты тәнҡитләй.

Балалар, ә һеҙ хеҙмәт, эш, ялҡаулыҡ тураһында ниндәй мәҡәлдәр һәм әйтемдәр беләһегеҙ? Уларҙың ҡайһылары Хәмиткә, ҡайһылары Вәлиткә ҡағыла?

*Уҡыусылар* (мәҡәлдәр әйтәләр, һорауға яуап бирәләр):

Кешене өҫ матурлығы түгел, ә эш матурлығы биҙәй.
Аштан ҡалһаң да, эштән ҡалма.
Хеҙмәттең тире әсе, емеше татлы.
Алйоттоң эше булмаҫ, ялҡауҙың ашы булмаҫ.
Дәртһеҙ кешенән эш сыҡмаҫ.
Ауыр эшкә беләк бар, ҡыйыу эшкә йөрәк бар.

*Уҡытыусы:*

– Хәҙер, балалар, иғтибарығыҙҙы таҡтаға йүнәлтегеҙ һәм ребусты сисегеҙ:

“Ҡарағайға ҡарап тал үҫер, хеҙмәтенә ҡарап дан үҫер”.

Шулай итеп, беҙ бөгөн Фәрит Исәнғоловтың “Хәмит күпере” хикәйәһенең геройҙары Хәмит менән Вәлиткә сағыштырма характеристика бирҙек.

**Әҙәби әҫәрҙең жанрын,**

**композицияһын һәм сюжетын өйрәнеү**

Жанр, композиция һәм сюжет буйынса тәүге төшөнсәләр уҡыусыларға урта кластарҙың башында уҡ бирелә башлай һәм «ябайҙан – ҡатмарлыға, еңелдән – ауырға» принцибы ярҙамында тормошҡа ашырыла. Был төшөнсәләрҙе, бигерәк тә – сюжет, композиция мәсьәләләрен, өлөштәргә бүлеп аңлатырға ярамай, ә бер бөтөн һәм уның айырылғыһыҙ элементтары рәүешендә бирергә тырышырға кәрәк. Мәҫәлән, экспозицияны, төйөнләнеүҙе, кульминацияны һ. б. айырым-айырым аңлатыу мөмкин түгел. «Ябайҙан – ҡатмарлыға» принцибының тормошҡа ашырылыуын сюжетты өйрәнеү миҫалында күрһәтеп ҡарайыҡ. Сюжет һәм уның элементтары тураһындағы теоретик төшөнсәне уҡыусылар VI класта үтәләр. Әммә V класта уҡ улар, был терминдарҙың исемдәрен белмәһәләр ҙә, мәғәнәләре менән таныш булырға тейештәр. Йәғни, уҡытыусы әҫәрҙең өлөштәрҙән тороуын, һәр өлөштөң бүтәндәре менән тығыҙ бәйләнеп килеүен, әҫәрҙең төҙөлөшөндә ниндәйҙер мәғәнәгә эйә булыуын төшөндөрә. Беренсе өлөш, әйтәйек үҙенең фукцияһы менән экспозицияға, икенсеһе төйөнләнеүгә, өсөнсөһө ваҡиғалар үҫешенә һ.б. тура килә. Терминдарҙың үҙҙәре менән эш итмәһәләр ҙә, уҡыусылар сюжет элементтарының мәғәнәһе тураһында тәүге ябай төшөнсәләрҙе ала башлайҙар. Ошондай күнекмәләр йышыраҡ үткәрелһә, VI класта программа буйынса уларҙың исемдәре менән танышҡанда инде, әлбиттә, еңелерәк үҙләштерәләр. Бәләкәй күләмле эпик әҫәрҙең (әкиәттең, хикәйәнең) нигеҙҙә биш өлөштән торғанлығын, уларҙың йә эҙмә-эҙлекле, йә урындары алмашынып килеүен белгән уҡыусылар, сюжет һәм уның элементтары тураһындағы теоретик төшөнсәне үҙләштергәндә, һәр өлөштөң исеме бар икәнлегенә төшөнә, артабан уларҙы аңлы рәүештә еңел хәтерҙә ҡалдыра.

Композиция менән дә шулай. V класта, әҫәрҙең өлөштәрҙән тороуын, өлөштәрҙең үҙ сиратында вағыраҡ деталдәргә бүленеүен белгәс, уларҙың урынлашыу тәртибе тураһында уйланалар. Төрлө текстарҙы күҙәткәндән һуң, өлөштәрҙең, художество деталдәренең эҙмә-эҙлеге бер төрлө генә түгеллегенә, әҫәр төҙөлөшөнөң төрлөсә булыуына ышаналар. VIII класта «композиция» термины менән танышҡас, һәр художестволы әҫәрҙең үҙенә генә хас төҙөлөшө – композицияһы булыуын, уның йөкмәткегә буйһоноп килеүен,



Иншаға әҙерлек бөтә дәрестәр буйы бара. Бигерәк тә, аҙағынан инша яҙыу менән тамамлана торған ҙурыраҡ темаларҙы өйрәнгәндә, уҡытыусы был маҡсатты даими күҙ уңында тота. Әҙерлек эшен балаларҙың үҙҙәренә һиҙҙермәй (ураған һайын иҫтәренә төшөрөп, тылҡып тормай) алып бара. Ә яҙыу ваҡыты еткәс, ҡайһы бер мөһим мәсьәләләр класс менән бергәләп асыҡлана. Ентекле изложение алдынан мотлаҡ үтәлә торған эштәрҙең ҡайһылары бында кәрәкмәй. Әйтәйек, план төҙөү, әҫәр йөкмәткеһен бер уҡыусынан һөйләтеү иншаның ижадилығын сикләй. Ә бына түбәндәге мәсьәләләр хаҡында класта мотлаҡ һүҙ алып барырға кәрәк.

а) иншаның темаһы өҫтөндә уйланыу. Балалар бирелгән теманың тулыһынса асылырға тейешлеген, унан алыҫ ситләшеүҙең маҡсатҡа ярашһыҙлығын, күләм артынан ҡыуып һүҙ бутҡаһы тултырырға кәрәкмәгәнлеген аңларға тейеш;

б) иншаның төп йүнәлешен, идеяһын асыҡлау;

в) материалды һайлау;

г)материалды төркөмләү, төркөмдәр араһында бәйләнеш урынлаштырыу, уларҙың яҡынса күләмен билдәләү; .

д) яҙыу;

е) тикшереү, редакторлау (өҫтәү, ҡыҫҡартыу), хаталарҙы төҙәтеү.

Ваҡыт ҡыҫмаһа, тикшереү ҡат-ҡат үткәрелә: тәүҙә йөкмәткегә, икенсе ҡат – стилистик хаталарға, өсөнсө тапҡырында тыныш билдәләренә иғтибар йүнәлтелә.

Инша уҡытыусы тарафынан баһаланғас, класта хаталар өҫтөндә эш башҡарыла. Хаталар алдан төркөмдәргә бүленә:

– йөкмәтке буйынса хаталар: теманың нисек асылғанлығы, факттарҙың дөрөҫлөгө хаҡында һүҙ бара;

– логик фекерләүгә бәйле хаталар: иншаларҙың композицион төҙөклөгө, эҙмә-эҙлеге тураһында һөйләшелә;

– стилистик хаталар: һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу, һөйләмдәрҙең мәғәнәүи яҡтан төҙөклөгө анализлана;

– орфографик хаталар;

– пунктуацион хаталар.

Бөтә класс алдында эш ошо төркөмдәр буйынса бары тик типик хаталар өҫтөндә генә үткәрелә. Индивидуаль хаталарҙы уҡытыусы иншаны тикшергәндә үк дәфтәр ситенә күрһәтә бара. Айырым уҡыусының бөтә хаталарын да иҫәпкә алып, һәр эшкә ҡыҫҡаса ғына яҙма рецензия яһала. Йөкмәтке һәм стиль яғынан иң һәйбәт тип

тормош, тарих һ.б. хаҡында уйлана. Әҙәби тексты инша теле менән икенсе төр сәнғәт әҫәренә әйләндерергә ҡушыу ҙа балаларҙың реаль ысынбарлыҡ тураһында уйланыуҙарына, уға үҙенең мөнәсәбәтен белдерергә булышлыҡ итә. Әйтәйек, «Мин Айбулатҡа ниндәй һәйкәл ҡуйыр инем» тигән темаға инша яҙыу мәлендә уҡыусы буласаҡ һәйкәлдең урынын, нигеҙен, эргәһендәге сәскәләрҙе йә ағастарҙы, Айбулаттың буй-һынын, сырайын күҙ алдынан үткәрә, шуларҙы яҙма рәүештә тасуирлап бирә, әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар уның аңында бөгөнгө ысынбарлыҡ менән сағыштырыла. Юғары кластарҙа прозаны сәхнәләштереү, әҙәби әҫәр буйынса киносценарийҙар яҙыу кеүек эштәр ҙә ҡушырға мөмкин. Иншаның быйндай төрө, әлбиттә, традицион ҡалыптарҙан айырыла, әммә уҡыусыларҙың яҙма телмәрен үҫтереүҙә уның роле бүтән төрҙәрҙән һис кәм түгел. Был төрҙөң тағы бер мөһим үҙенсәлеге бар. Бөтә уҡыусыларға ла бер үк теманы тәҡдим итергә ярамай. Уҡытыусының эш планында кластағы һәр уҡыусының ҡыҙыҡһыныуы даирәһен иҫәпкә алырлыҡ кимәлдә иншалар исемлеге булырға тейеш. Шулар араһынан һәр кем үҙенең күңеленә ятышлыһын һайлап ала. Юғиһә, «Минең яратҡан геройым...» тибындағы баш аҫтында бөтә класҡа бер үк геройҙы тәҡдим итһәк, ундай иншаның файҙалы самалы ғына булыр ине.

4. Төрлө сәнғәт төрҙәренең үҙ – ара бәйләнешле материалына нигеҙләнгән иншалар. Ғәҙәттә, был осраҡта әҙәбиәттең театр, кино, музыка, һәм һынлы сәнғәткә бәйләнешле материалдары менән эш ителә. Урта кластарҙа уҡыусылар рәссамдарҙың картиналары буйынса иншалар яҙа; яратып ҡараған кинофильмдары, спектаклдәре хаҡындағы тәьҫирҙәрен дә яҙма рәүештә сағылдырыуҙы ойоштororға кәрәк. Был алымды етдийерәк төҫтә юғары кластарҙа ла дауам итеп була. Унан тыш, уҡыусыларҙы «Я. Хамматов эпопеяһы – телеэкранда»; «А. Игебаев һүҙҙәренә яҙылған йырҙар»; «М. Кәрим прозаһы сәхнәлә»; «Шәриғәт ҡорбандары» һәм «Ҡара йөҙҙәр»; «Б. Бикбай геройҙары – опера сәхнәһендә» тибындағы темалар буйынса ла уйландырырға кәрәк. Быйндай төр иншалар өҫтөндә эшләгәндә, уҡыусылар, бер яҡтан, әҙәбиәттең бүтән төр сәнғәт әҫәрҙәре менән уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын күрергә, шуны яҙма телмәрҙә сағылдыра белергә өйрәнһә, икенсе яҡтан, әҙәбиәт дәрестәрендә республиканың театр, кино, музыка, һынлы сәнғәте әҫәрҙәре хаҡында яңы мәғлүмәттәр алып ҡала.



йөкмәткене асыу сараһын үтәүен, әҫәргә матурлыҡ биреүен аңлайҙар. Йорттоң матурлығында уның төҙөлөшө, музыкаль әҫәрҙең тәьҫирлеге яңғырашында гаммаларҙың дөрөҫ урынлашыуы хәл иткес әһәмиәткә эйә булған кеүек, нәфис әҫәрҙең дә бөтә матурлығы – деталдәрҙең үҙ урынында булыуында. Музыкала бер генә клавиша яңылыш баҫылһа ла, көйгә яһалмалыҡ бирә. Әҙәбиәттә лә шулай – ысын мәғәнәһендәге художестволы әҫәрҙең һәр детале үҙ урынында була. Был тәртип ни тиклем ныҡыраҡ боҙолһа, әҫәр ҙә шул дәрәжәлә яһалма килеп сыға. Композиция төшөнсәһен ошондай планда бүтән төр сәнғәт әҫәрҙәре менән сағыштырма планда биргәндә, уҡыусыларҙың хәтеренә ныҡыраҡ һеңеп ҡала. Эпик, драматик әҫәрҙәрҙең сюжет элементтарын, төҙөлөшөн асыҡлау артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмай. Бигерәк тә, һәр әҫәрҙе үткәндә ошо теоретик мәсьәләләр иғтибарҙан ситтә ҡалмаһа, уҡыусылар уларҙы еңел билдәләргә күнегеп китәләр. Шул уҡ ваҡытта лирик, лиро-эпик әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә лә (шиғырҙың төрлө жанр формалары, поэма, баллада һ.б.) сюжет, композиция мәсьәләләрен онотorға ярамай. Алда әйткәнебеҙсә – сюжет – хәрәкәт; лирик әҫәрҙә – лирик геройҙың уй-кисерештәре хәрәкәте. Тимәк, шиғырҙың да экспозицияһы (уй-фекерҙәрҙең, кисерештәрҙең башланышы), төйөнләнеүе, үҫеше, иң юғары нөктәһе һәм тамамланышы була. Конкрет әҫәр буйынса был хаҡта һүҙ йөрөтөү, бер яҡтан, ифрат ҡыҙыҡлы, йәнле һөйләшеү тыуҙыра ала; икенсе яҡтан, әҫәрҙең идея-тематик асылына тәрәнерәк үтеп инергә ярҙам итә. Ә инде лиро-эпик әҫәрҙе (поэма, баллада) өйрәнгәндә, эпик һәм лирик сюжет, уларҙың элементтарының йәнәш килеүе, эпик һәм лирик герой күренештәре менән осрашабыҙ. Бер ҡарамаҡҡа, уҡыусылар өсөн был ҡатмарлылыҡ тыуҙыра, һымаҡ. Әгәр төшөнсәләрҙе бутамайынса, дөрөҫ билдәләү ҡеүәһенә ирешелһә, һис кенә лә ҡатмарлы түгел; әҫәрҙең художестволылыҡ серҙәренә төшөнөргә, ошо матурлыҡты күрергә ярҙам ғына итәсәк.

Артабан, анализ ваҡытында терминдарҙың үҙҙәре менән эш иткәндә уҡыусылар уларҙы бутамаҫҡа, һәр береһенең мәғәнәһен ябай ғына формала булһа ла асыҡ күҙ алдында тоторға тейеш. Жанр – формаһы һәм йөкмәткеһенең үҙенсәлектәре уртаҡ булған художестволы әҫәрҙәр тибы. Композиция – әҫәрҙең йөкмәткеһенән, характерынан, тәғәйенләнешенән сығып башҡарылған төҙөлөшө. Сюжет – әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләү тәртибе. Сюжет хаҡында һүҙ барғанда, уҡыусылар фабуланың да мәғәнәһен аңлай. Фабула

хәл-ваҡиғаларҙың бары тик эҙмә-эҙлекле һүрәтләнешен күҙ алдына баҫтырһа, сюжет элементтары әҫәрҙә төрлөсә урынлашырға мөмкин. Ғ. Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһы сиселеш эпизодтарынан – пароходҡа архитекторҙың ултырыуынан, уның яңы төҙөлөш корпусы проектын тапшырырға йыйыныуынан башлана. Кульминацияның иң тетрәткес һөйләмдәренән башланып киткән әҫәрҙәр ҙә бар (Ғ. Ибраһимов, «Тәрән тамырҙар» – «Фәхриҙе үлтергәндәр!..» А. Иванов, «Вражда» – «В воскресный день 1944 г., 29 февраля, во вторник, старший из 6-и оборванцев Катьки Афанасьевой, Мишуха, застрелил из берданки председателя романовского колхоза Артемия Пилюгина...»

Сюжет, композиция, жанр билдәләре менән танышыу әҫәрҙең төп асылына, туҡымаһына инеү вазифаһын үтәй. Шуға күрә уларҙы анализдың аҙаҡҡыраҡ этабында, образдарға характеристика биргәндән һуң тикшереү маҡсатҡа ярашлыраҡ. Бындай осраҡта сюжет, композиция, жанр өҫтөндә эш әҫәрҙе анализлауҙың үҙенә күрә йомғаҡлау өлөшөнә әүереләсәк.

Әҙәби төр, жанр, жанр формалары төшөнсәләрен конкрет әҫәргә бәйле рәүештә аңлатҡанда ла «ябайҙан – ҡатмарлыға» принцибы һаҡлана. Уҡытыусы һорауҙары буйынса әҫәр тураһындағы иң дөйөм билдәләмәләрҙән вағыраҡ төшөнсәләргә күсә барғанда, уҡыусылар әңгәмә барышында эште тулыһынса тиерлек үҙ аллы башҡарып сыға ала. Мәҫәлән, Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романына ҡарата һорауҙар тәртибе яҡынса түбәндәгесә булыуы мөмкин:

1. Әҫәр ниндәй әҙәби төргә ҡарай? (Эпос).

2. Ниндәй жанрға инә? (Роман).

3. Жанр үҙенсәлеге нимәлә? (Жанр төрө буйынса – роман-эпопея; тематик йүнәлеше буйынса – тарихи-революцион роман).

4. Автор ниндәй композицион хәл ителеш тапҡан? (Вағыраҡ һорауҙар менән композицияһы тикшерелә).

5. Сюжет һәм уның элементтары, сюжеттан тыш күренештәр тураһында һорауҙар.

Бындай алым, әлбиттә, һәр осраҡта ла ярашлы түгел. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең жанрын уҡыусыларға үҙ аллы билдәләүе ауыр. «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ»тың жанрын М. Кәрим атап күрһәтмәгән, Ғ. Хөсәйенов «Рудасы Исмәғил»ен «тарихи проза» тип кенә ҡуйған. А. Радищевтың «Путешествие из Петербурга в Москву» кеүек юл яҙмаһы характерындағы үҙенсәлекле жанр формаһы менән



дуҫым», «Беҙҙең класс», «Тәнәфестә», «Урманда», «Ырҙын табағында», «Малсылыҡ фермаһында», «Зоопаркта», «Музейҙа», «Беҙҙең йәшелсә баҡсабыҙ», «Беҙҙең дача» кеүегерәк темаларҙы тәҡдим итеп була. Инша ирекле темаға арналһа ла, уҡыусыларҙың тормош тәьҫирҙәрен әҙәби ассоциациялар менән нығытыу маҡсатында, уның исемен дәрестә үтелгән әҙәби әҫәр исеме менән тура килтерергә лә мөмкин. Мәҫәлән, «Дуҫ булайыҡ», «Урманда», «Игенсе ҡулдары», «Ләйсән», «Уралым», «Республика иртәһе» кеүек темалар бирелһә, уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәренең фекерҙәренә З. Биишева, А. Карнай, Р. Бикбаев, М. Кәрим, С. Юлаев, Ғ. Сәләм әҫәрҙәренән алынған тәьҫирҙәрҙе лә ҡушып ебәреүе ихтимал.

Юғары кластарҙа бындай типтағы иншалар етди төҫ ала, уҡыусылар алдында үҙ тәьҫирҙәрен генә түгел, ә донъяға ҡараштарын, уй-фекерҙәрен сағылдырыу бурысы ҡуйыла. Шуға күрә иншала публицистик йүнәлеш өҫтөнлөк итә. Бында инде уның темаһы әҫәр исеме менән генә түгел, ә уҡыусыларға яҡшы таныш булған әҙәби цитаталар менән тап килеүе мөмкин: «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде»; «Башҡортостан ере ҡара янған меңәрләгән ҡамсы әҙенән»; «...Ерҙә йәшәү өсөн ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?»; «Европанан Азияға алтын күпер һуҙҙы йәйғор» һ.б. Бай йөкмәткеле, эмоциональ тонлы, ялҡынлы публицистик пафослы инша килеп сыҡһын өсөн уҡыусыларҙың үҙҙәренең тормош тәжрибәһе генә етмәйәсәк, улар һис шикһеҙ әҙәби әҫәрҙәрҙән алған «тәжрибәгә» лә таянасаҡ. Ә инде инша исеменә цитата итеп алынған текстарға (был осраҡта – Ш. Бабич, Б. Бикбай, Ғ. Сәләм, М. Кәрим әҫәрҙәре) иң беренсе сиратта мөрәжәғәт итәсәк.

3. Ә ҙ ә б и  м а т е р и а л ғ а  н и г е ҙ л ә н г ә н  и р е к л е  и н ш а л а р. Икенсе төркөм иншалары өҫтөндә эшләгәндә уҡыусы әҙәби материалды үҙ белдеге менән файҙалана. Был өлкәлә уға тулы ирек ҡуйыла. Балаларҙың ҡайһылары әҙәби әҫәрҙе бөтөнләй телгә алмай, үҙ тәьҫирҙәре менән генә сикләнеүе ихтимал. Ә өсөнсө төркөмдә иһә тормош тәьҫирен әҙәби материал менән аралаштырыу бөтә класс өсөн мотлаҡ. Сөнки иншаның маҡсаты (күпселек осраҡта– темаһы ла) шуны талап итә. «Аҡмулла шиғырҙарында һәм минең тыуған яғымда йыл миҙгелдәре», «Тимер Янһаров – минең яратҡан геройым», «Рәми Ғарипов шиғырҙарын ни өсөн яратам?» һымаҡ темаларҙы асҡанда уҡыусы әҫәр тураһында ғына түгел, тәбиғәт,

уларҙың ҡулынан килә. План, тезис, конспект менән эш итеү реферат һәм докладтар әҙерләүҙе еңелләштерә. Уҡыусылар уларҙың төп өлөштәрен үҙ аллы билдәләп, фекерҙәрен системалы, иҫбатлаулы итеп бирә алыуға өлгәшә.

Бындай төр эштәр балаларҙың һөйләү һәм яҙма телмәрен берҙәй үҫтереүгә булышлыҡ итә. Юғары класс уҡыусыларының һәр ҡайһыһы өйрәнелгән әҫәрҙе анализлағанда уҡытыусы тарафынан бирелгән тема буйынса 4-5-әр минутлыҡ, кәрәк икән – ҙурыраҡ күләмле реферат, докладтарҙы яҙма рәүештә әҙерләп, телдән сығыш яһай ала.

План, тезис, конспект, реферат, доклад иншаға әҙерлек һәм уны баһалау маҡсатында даими башҡарыла; әҫәрҙе өйрәнеүҙең теләһә ҡайһы этабында, бигерәк тә – анализ барышында уңышлы ҡулланыла.

*Инша* юғары кластарҙа яҙма телмәрҙе үҫтереүҙең төп сараһын тәшкил итә. Был эш төрө аша һәр бер уҡыусының ижади һәләтлеге, әҙәбиәтте аңлау, фекерләү кимәле асыҡлана. Йыш ҡына иншаларҙы ике төргә бүлеп йөрөтәләр: әҙәби материал буйынса һәм ирекле темаға яҙылған иншалар. Әммә мәктәп практикаһында һирәкләп уның бүтән төрҙәре лә осрай. Уларҙы, ғәҙәттә, үҙ эшенә ижади ҡараған, әҙәбиәт уҡытыу өлкәһендә алдынғы тәжрибә туплаған уҡытыусылар үткәрә. Шуға күрә иншаны түбәндәге дүрт төргә бүлеп ҡарау маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр.

1. *Әҙәби темаға арналған иншалар.* Улар күбеһенсә өс тематик йүнәлештә ойоштоpола:

а) әҙәби әҫәргә, уның берәй мөһим өлөшөнә дөйөм анализ;

б) образдар системаһы өлкәһендә эш;

в) әҫәрҙе проблема-тематик тикшереү.

Һ.Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы буйынса ошо тематик йүнәлештәргә ярашлы итеп бирелгән ҡайһы бер иншаларҙың исемдәре ошолайыраҡ булыр ине:

1-се тема – «Ырғыҙ буйына революцион идеяларҙың таралыуы».

2-се тема – «Айбулаттың революционер булып формалашыуы».

3-сө тема – «Ырғыҙ» романында халыҡ һәм революция темаһы».

2. *Уҡыусыларҙың тормош тәьҫиренә ҡоролған ирекле иншалар.* Был осраҡта ижади яҙма эштәр балаларға яҡшы таныш булған өлкәләрҙән сығып, улар үҙҙәре күргән, белгән нәмәләр тураһында ғына бирелә. Урта кластарҙа «Минең



уҡыусылар мәктәп программаһында тәүге тапҡыр осраша. Н. Гоголдең «Мертвые души» әҫәре поэма тип аталған. Уҡытыусы ундай ҡатмарлы материалдың художестволылыҡ саралары – жанры, сюжеты, композицияһы тураһында класҡа «бәләкәйҙән – ҙурға» табан һорауҙар биреү юлы менән аңлата.

Бер үк жанрҙағы бер нисә әҫәрҙе рәттән өйрәнгәс, уларҙың уртаҡ үҙенсәлектәр тураһында һүҙ алып барыл була. Был эште уҡыусылар үҙҙәре лә башҡарып сыға ала. Мәҫәлән, юғары кластарҙа Р. Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары”, “Үлтер, улым, фашисты”, “Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Егеттең яуабы”, “Һаҡмар ҡыҙы” поэмалары хаҡында программа буйынса бер үк ваҡытта һүҙ алып барыла. Шулар миҫалында уҡыусы поэма жанрының төп һыҙаттары, сюжет һәм композицион үҙенсәлектәре тураһында ҙур булмаған сығыш әҙерләй ала.

Шулай итеп, урта һәм юғары кластарҙа әҫәрҙең жанрын, сюжетын һәм композицияһын өйрәнеү бер нисә юл менән бара: әҙәби әҫәрҙең күләме ҙур, материал ауыр булғанда, һөйләү-анализ алымы һайлана. Уҡыусыларға таныш, аңлайышлы материал менән эш иткәндә, әңгәмә-анализ үткәрелә. Бер генә жанрҙағы әҫәр менән ҡат-ҡат осрашҡанда, уҡыусылар үҙҙәре үк ҡыҫҡаса доклад, реферат менән сығыш яһай.

Әйтергә кәрәк, әҙәбиәт дәрестәрендә материалды аңлатҡанда, уҡытыусының төрлө график, схема, диаграмма һ.б. саралар ҡулланыуы маҡсатҡа ярашлы түгел. Бындай теләк сюжет, композицияны өйрәнгәндә тәбиғи рәүештә тыуыуы ихтимал: сөнки һүҙ бер бөтөндөң өлөштәре хаҡында бара. Нәфис әҫәр ысынбарлыҡтың художестволы сағылышы булғанға күрә, уҡыусылар уны – йәғни тормоштоң үҙен – абстракт билдәләр, схемалар аша күҙ алдына баҫтырып өйрәнмәҫкә тейеш. Бигерәк тә геройҙарҙы таҡтала квадрат, түңәрәк, өсмөйөштәр менән һыҙып аңлатыуҙан һаҡ булырға кәрәк, тип киҫәтә ғалим-методист В. А. Никольский (20, 217). Ул сюжетты һәм композицияны күргәҙмәле итеп аңлатыу өсөн бүтән төрлө алым тәҡдим итә: әҫәрҙең үҙе өсөн (бары тик үҙе өсөн!) эшләнгән иллюстрацияларҙан сюжеттың төрлө элементтарын, композицион төҙөлөшө үҙенсәлектәрен сағылдырған монтаж төҙөп ҡулланырға була. Ә инде уртаҡ йөкмәткеле һынлы сәнғәт әҫәрҙәренә мөрәжәғәт ителһә, материал сағыштырма планда аңлатыла: тәүҙә картинаның айырым өлөштәре һәм уларҙың бәйләнеше (композицияһы)

анализлана; унан һуң, сағыштырыу рәүешендә, әҙәби әҫәргә күселә.

Жанр, композиция һәм сюжетты өйрәнеү буйынса оҫта ойошторолған дәрестәр үткән материалдың үҙенән-үҙе ҡабатланыуына һәм тәрәнәйтелеүенә булышлыҡ итә, әҫәрҙең үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен асып бирә.

---

*1. Жанр, композиция, сюжет – теоретик өлкәгә ҡараған төшөнсәләр. Әҫәрҙе өйрәнеү барышында уларҙың анализ компоненттары булараҡ урынын билдәләгеҙ.*

*2. Әҫәрҙең төҙөлөшөн, композицияһын, сюжетын һәм уның элементтарын өйрәнеү ниндәй принцип буйынса ашырыла.*

*3. Урта кластарҙа башлыса укыусылар сюжет, композиция хаҡында теоретик төшөнсә булараҡ мәғлүмәт алмайҙар (программа буйынса өйрәнмәйҙәр), ләкин әҫәргә анализ яһағанда уларҙы урап үтә алмайбыҙ. Балаларға был хакта нисек аңлатабыҙ?*

*4. Автор тарафынан жанры билдәләнмәгән әҫәрҙең ҡайһы жанрға ҡарауын нисек асыҡлай алабыҙ?*

*5. Ни өсөн анализ ваҡытында әҫәр геройҙарын төрлө тамғалар (түңәрәк, квадрат, өсмөйөш һ.б.) менән билдәләргә яһамай?*

* * *

### 3. Биишеваның "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәтен өйрәнгәндә жанрын билдәләү өлгөһө

*Уҡытыусы:*

– Уҡыусылар, бөгөнгө беҙҙең дәресебеҙ башҡа дәрестәргә бик үк оҡшаш булмаҫ. Беҙ был дәрестә, "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәтенә анализ барышында , төрлө йомаҡтар, ребустар сисербеҙ, таҡталағы кроссвордты тултырырбыҙ.

"Һөнәре барҙың – ҡәҙере бар". Һеҙ был һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ? (Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтә).

– Эйе, афарин! Ысынлап та, хеҙмәт кешеһе, әгәр ул үҙ эшен намыҫ менән, бөтә тырышлығын, һәләтен, йөрәк йылыһын һалып үтәй икән, ул һәр ваҡыт оло хөрмәткә, ихтирамға лайыҡ була. Ҡәҙерле кеше булып китә. Ә һуң, уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был һүҙҙәрҙең беҙҙең дәрескә ҡағылышы бармы икән?

*Уҡыусы:*

– Әлбиттә бар! Сөнки беҙҙең бөгөнгө дәрестә һөйләшәсәк



Уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү барышында һәм и н ш а ғ а  ә ҙ е р л е к  м а ҡ с а т ы н д а  б а ш ҡ а р ы л ғ а н  к ө н д ә л е к  э ш  т ө р ҙ ә р е (план, тезис, конспект, рецензия, доклад, реферат) яҙма телмәр үҫтереү өсөн дә бик файҙалы. План әҫәрҙең идея йөкмәткеһен, композицион төҙөлөшөн асырға ярҙам итә, ул ғәҙәттә бер үк төрлө стиль менән генә төҙөлә: йә тик атама һөйләмдәрҙән, йә тик һорау һөйләмдәрҙән тора. V–VI кластарҙа күбеһенсә ябай һөйләмдәр менән эш ителә, улар әҫәрҙеге хәл-ваҡиғалар ағышын ғына сағылдыра. VII–VIII кластарҙа план ҡатмарлыраҡ итеп төҙөлә, уның бер пункты ябай пландағы бер нисә пунктты үҙ эсенә ала, әҫәрҙең йөкмәткеһен генә түгел, композицион төҙөлөшөн, идея мәғәнәһен дә асырға ярҙам итә.

IX–XI кластарҙа уҡыусылар план нигеҙендә тезис һәм конспект төҙөргә өйрәнә. Тәнҡит мәҡәләләрен, дәреслек материалын, уҡытыусы лекцияһын үҙләштергәндә юғары кластар йыш ҡына ошо ике форманың береһен файҙалана. Әгәр ниндәй ҙә булһа материал йөкмәткеһе буйынса төҙөлгән пландың һәр пунктын билдәле бер фекерҙе раҫлау рәүешенә еткергәнсә киңәйтеп сыҡһаң, ул тезисҡа әүерелә. Ә инде шул тезис (раҫлау) пункттарына иҫбатлау фекерҙәрен дә өҫтәһәң, ул конспект формаһын ала. IX класс дәреслеге буйынса сәсәндәр ижады өйрәнеүгә арналған бүлеккә ҡарата төҙөлгән пландың тәүге пункты, мәҫәлән, түбәндәгесә булыр ине.

1. Халыҡ тормошонда сәсәндәрҙең ижтимағи роле.

«Раҫлау» фекеренәсә киңәйтеп, уны тезис пунктына әйләндерел була:

2. XX быуатҡа тиклем башҡорт халҡының ижтимағи тормошонда сәсәндәр ифрат ҙур урын тотҡан.

Ошо раҫлауҙы иҫбатлап, тезис пунктын конспекттың бер фекеренә әйләндерәбеҙ:

3. Боронғо дәүерҙәрҙән алып XX быуатҡа тиклем башҡорт халҡының ижтимағи тормошонда сәсәндәр ифрат ҙур урын тотҡан. Сөнки улар шағир ғына түгел, педагог һәм тарихсы, ил-йорт аҡһаҡалы дәрәжәһенә күтәрелгән, һәр ваҡыт ил күләмендәге мөһим хәл-ваҡиғаларҙың уртаһында булған...

Бүлектең бөтә пландарын да ошо тәртиптә киңәйтеп, уның йөкмәткеһе буйынса төҙөлгән тезис йә конспект килтереп сығарырға мөмкин. Конспект төҙөргә өйрәнеп алғас, юғары класс уҡыусылары берәй тема буйынса өйгә бирелгән доклад йә рефератты үҙ аллы еңел әҙерләй ала, берәй әҫәргә рецензия рәүешендә баһа бирергә лә

еңелдән түгел. Әгәр ул текст ятланған булһа, ауырлығы беленмәς ине. Ә үҙ һүҙҙәрең менән биреү өсөн уйларға, фекерләргә кәрәк. Балаларҙың фекерләү тығыҙлығын уҡытыусы өςтәлмә маҡсаттар ҡуйыу ярҙамында тағы ла көсәйтә ала. Әйтәйек, уларға затты үҙгәртеп яҙыу, диалогтарҙы автор һүҙе рәүешендә биреү, авторҙың геройҙарға ҡарашын билдәләү, әςәргә үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү кеүек өςтәлмә эштәр бирергә мөмкин. Ентекле изложение түбәндәге тәртиптә үткәрелә:

а) эштең маҡсаты билдәләнә, уҡытыусының үҙе тарафынан текст тулыһынса тасуири уҡыла; .

б)текстың йөкмәткеһен үҙләштереү маҡсатында әңгәмә ойоштороло;

в) таҡтаға текстағы ҡатмарлы һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр яҙыла;

г) әςәр йөкмәткеһе буйынса план төҙөлә;

д) берәй һәләтле уҡыусыны йәлеп итеп, текст йөкмәткеһен өлгөлө
һөйләү үткәрелә;

е) уҡытыусы тарафынан тағы бер ҡат уҡыла, өςтәлмә маҡсат ҡуйыла;

ж) изложение яҙыу процесы башлана.

Ҡыςҡа изложение әςәрҙең иң мөһим урындарын тотоп алырға һәм шуларҙы яҙмала сағылдыра белергә өйрәтә. Шуға күрә ул ентекле изложениеға ҡарағанда ла көсөргәнешлерәк фекерләүҙе, әςәрҙең сюжеты, идеяһы тураһында ентеклерәк уйланыуҙы талап итә. Изложениеның был формаһы иншаның ҡайһы бер элементтарын үҙ эсенә ала. Уны үткәреү тәртибе лә ентекле изложениеныҡынан бер аҙ айырыла:

а) эштең маҡсаты билдәләнә, текст тасуири уҡыла;

б) йөкмәтке үҙләштереү маҡсатында әңгәмә ойоштороло;

в) план төҙөлә;

г) изложениеның күләме билдәләнә;

д) яҙыу процесы башлана.

Әςәр йөкмәткеһен нисегерәк ҡыςҡартыу тураһында уҡыусылар әңгәмә барышында уҡ уйланырға тотона. Шуның өсөн бында берәй уҡыусының һөйләүе һәм аҙаҡҡы тапҡыр тасуири уҡыу кәрәкмәй – улар иғтибарҙы ситкә йүнәлтә, изложениеның ижадилығына ҡамаса-улай.



хикәйәттең төп геройҙары ла беҙгә уларҙың үтәгән хеҙмәте аша асыла.

*Уҡытыусы:*

– Бик яҡшы. Беҙҙең алда ике герой: Һөнәрсе менән Өйрәнсек. Ә таҡтала кроссворд – ошо бәләкәй генә кроссвордты тултыра барырбыҙ.

| | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ө | Й | Р | Ә | Н | С | Е | К | | | | | |
| | | | | | | Һ | Ө | Н | Ә | Р | С | Е |
| | | | | | Х | Ө | Р | М | Ә | Т | | |
| | | Л | А | Н | Д | Ы | Ш | | | | | |
| | | Б | Е | Л | Е | Н | Ә | | | | | |
| | | | | | | | К | Ү | Р | Ш | Е | |

Кроссвордтың һорауҙарын уҡыусылар уҡый.

1. Хикәйәт башында үҙ ауыл халҡына һыу ташыр өсөн кем көршәктәр яһай? (Өйрәнсек).

*Уҡытыусы:*

– Әлбиттә Өйрәнсек! Бына беренсе һорауға яуап та таптыҡ. Тәүге юлға "Өйрәнсек" тип яҙып ҡуйыр кәрәк. (Һәр бер һүҙҙе тапҡан уҡыусыға көршәк төшөрөлгән һүрәттең бер кисәге бирелә: кроссворд һорауҙары ла, һүрәт кисәктәре лә алтышар. Өйрәнсек образына характеристика бирелә).

Өйрәнсек – хәйләкәр, ялҡау, ике йөҙлө кеше. Үҙ һөнәрен артабан үςтереү, камиллаштырыу өсөн бер ниндәй ҙә көс һалырға теләмәй. Ә, киреһенсә, бөтә ауылды үҙенең тупаς, ауыр, йәмһеҙ көршәктәре менән тултырыуын дауам итә. Ул байлыҡты донъялағы бөтә нәмәнән дә өςтөн ҡуя. Өйрәнсек өсөн "һәр ватылған көршәк – яңы табыш". Булған һәләтен үςтереү, хеҙмәтен яҡшыртыу тураһында уйлап та ҡарамаусы ялҡау һәм хәйләкәр кеше.

2. Өйрәнсеккә ҡапма-ҡаршы герой кем? (Һөнәрсе). (Уҡыусылар Һөнәрсегә характеристика бирә).

3. Көршәктәренә йөрәк йылыһын һалып, кешегә оҙаҡ хеҙмәт итһен өсөн көндәр, төндәр буйына баш та күтәрмәй эшләгән Һөнәрсе

халыҡ араһында нимә яулай? (Хөрмәт).

Уҡыусылар ребус сисәләр. Был ребус аҫтына “Хеҙмәтенә күрә хөрмәте” тигән әйтем йәшеренгән. Әҫәрҙең идея-проблематикаһы тураһында һүҙ бара.

4. Һөнәрсе яһаған көршәктәрҙең тотҡаһы ниндәй сәскәнең япрағына оҡшаған , тип әйтелә әҫәрҙә? (Ландыш).

(Көршәк образына характеристика бирелә).

5. Өйрәнсек алдашҡан, яҙыҡ, ҡырын эш эшләгән. Был ҡырын эшҡырҡ йылдан һуң да нимә эшләй тип яҙа беҙгә автор? (Беленә).

(Әҫәр буйынса намыҫлылыҡ һәм яҙыҡлылыҡ, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ тураһында әңгәмә).

*Уҡытыусы:* Ошо мәҡәлдең һуңғы һүҙе беҙҙең кроссвордтың бишенсе юлына ла инде. Эйе, кеше нисек кенә хәйләкәр булмаһын, ҡылған насарлығын нисек кенә оҫта йәшермәһен, ул ҡырын эш ҡасан да булһа беленәсәк. Быны шулай уҡ “Беҙ ҡапсыҡта ятмай” тигән әйтем менән дә аңлатып була. Минең ҡулымда тағы ла бер ребус. Быныһында нимә йәшеренгән икән? Сисегеҙ әле. (“Күрше хаҡы – тәңре хаҡы”).

Әҫәргә таянып, күршеләрҙең бер-береһен ололап, хөрмәт итеп, дуҫ, татыу йәшәргә тейешлеге хаҡында һүҙ бара икәнлеген аңлайбыҙ.

6. Ә Һөнәрсе менән Өйрәнсек бер-береһенә кем булғандар? (Күрше).

*Уҡытыусы:*

– Уҡыусылар, кроссвордты сисеп бөттөк. Уртала ниндәй һүҙ килеп сыҡты инде? (Көршәк). Кроссвордтағы һүҙҙәрҙе таҡтаға сығып яҙған уҡыусылар, һеҙгә бирелгән ҡағыҙҙарға иғтибар итегеҙ әле. Аңлауығыҙса, уның бер яғында һан бар, шулай бит? Хәҙер мин таҡтаға бына был ҡағыҙҙы эләм, һәм һеҙ һәр берегеҙ үҙ һаны буйынса, ҡағыҙҙарҙың артҡы ҡатламын һыҙырып алып, йәбештереп ҡуйһын. Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ.

(Уҡыусылар таҡталағы ҡағыҙға ҡулдарындағы һүрәтте йәбештерә. Көршәк һүрәте килеп сыға).

Уҡыусылар күмәкләп үҙ фекерҙәрен еткерә:

Әлбиттә, был образ үҙендә ниндәй ҙә булһа мәғәнә туплай. Беренсенән, ул Хасбулат олатай бик ҡәҙерләп һаҡлаған (Салауат Юлаевтың мөгөҙ борғоһо, Ҡаһым түрәнең ҡылысы кеүек үк) ҡиммәтле ҡомартҡы. Был көршәктең үҙе менән хикмәтле тарихы – хикәйәте лә һаҡлана килә. Икенсенән, ошо көршәк беҙгә хикәйәттәге



үҫтереү эҙмә-эҙлекле һәм системалы рәүештә, әҫәрҙе өйрәнеүҙең алдағыраҡ этаптарында – инеш дәрестәрҙә, йөкмәтке үҙләштереү, анализ барышында үткәрелә. Ул ике маҡсатты күҙ уңында тота: уҡыусыларҙың һүҙ запасын байыта һәм бәйләнешле телмәр күнекмәләренә өйрәтә, һөйләү телмәрен үҫтереү әҫәрҙе өйрәнеү барышында һүҙлек-фразеологик эш, һорауҙарға яуаптар, әңгәмәлә, диспутта, конференцияларҙа ҡатнашыу, докладтар, рефераттар менән сығыш яһау аша тормошҡа ашырыла. М. Юлмөхәмәтов һөйләү телмәрен үҫтереү процесында текст һәм уның төҙөлөшө, элементтары, телмәр төрҙәре, мәғәнәүи һәм лексик бәйләү саралары, абзац һәм уның төп элементтары һ.б. тураһында теоретик белем дә бирергә саҡыра, ошо эштәрҙе тейешле кимәлдә үтәү маҡсатында махсус программа тәҡдим итә (29, 5). Юғары трибуналарҙан туған телдә ҡағыҙға ҡарамай иркен телмәр тоторлоҡ, халыҡ алдында сығыш яһағанда кешеләрҙең күңелдәрен тетрәндерерлек кимәлдәге һүҙ оҫталарын мәктәптә әҙәбиәт дәрестәренән башҡа һис ниндәй предмет уҡытыусылары әҙерләй алмай.

Уҡыусыларҙың һөйләү телмәре үҫешенең һөҙөмтәһе, камиллығы яҙма телмәрҙә асыҡ сағыла. Бәйләнешле синтаксик конструкцияларҙы телдән төҙөй алмаған балалар яҙма текста ла хаталар яһай. Әҙәбиәт дәрестәрендә телмәр үҫтереү сараларын йылдан-йылға эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашыра барып, юғары кластарҙа бөтә уҡыусыларҙы ла туған телдә иркен, матур һөйләшергә һәм яҙырға өйрәтеү бурысы ҡуйыла. «Телмәр – кешенең бөтә рухи эшмәкәрлегенең сағылышы,– ти Ф.И. Буслаев,– уҡытыусылар балаларҙа ватан теле һәләтен ойошторроуға телдән генә түгел, яҙма күнекмәләр менән дә ярҙам итергә тейеш» (5, 112).

Яҙма телмәрҙе үҫтереү саралары, ҡағиҙә рәүешендә, айырым теманы, ҙурыраҡ күләмле әҫәрҙе өйрәнеп бөткәс үткәрелә. Урта һәм юғары кластарҙа әҙәбиәт дәрестәренә ҡағылышлы яҙма эштәрҙең төп өс төрө билдәле: 1) изложение; 2) иншаға әҙерлек һәм уны баһалау маҡсатында үткәрелгән көндәлек эштәр: план, тезис, рецензия, конспект, доклад һ.б.; 3) инша.

И з л о ж е н и е башлыса урта кластарҙа үткәрелә. Уның ике формаһы бар: ентекле һәм ҡыҫҡа изложениелар. Тәүгеһе өсөн бөтөн әҫәр йәки мәғәнәүи яҡтан тамамланған өҙөк алына. Уҡыусы үҙ һүҙҙәре менән шул әҫәрҙең йөкмәткеһен яҙма рәүештә бирергә тейеш. Яҡшы үҙләштерелгән йөкмәткене лә яҙыу эше урта кластар өсөн

автор уны ыласын, сапсан менән сағыштыра.

*Уҡытыусы:*

– Аҡсәскә ниндәй ҡыҙ?

*Уҡыусы:*

– Ул тышҡы ҡиәфәте менән атаһына оҡшаған. Тырыш, ауырлыҡтарға бирешмәй, мәрхәмәтле ҡыҙ.

*Уҡытыусы:*

– Ә хәҙер, уҡыусылар, күренекле татар яҙыусыһы Ғәзел Ҡотой әҫәре буйынса эшләнгән "Тапшырылмаған хаттар" спектакленән өҙөк тыңларға тәҡдим итәм. Иғтибар менән тыңлағыҙ.(Өҙөк повесть менән сағыштырыла, оҡшаш яҡтары табыла. Шулай уҡ Ғәлимов Сәләмдең "Бала" поэмаһы иҫкә төшөрөлә, "Аҡсәскә" менән йәнәшлектәр үткәрелә).

– Егеттәр, һеҙ – буласаҡ атайҙар. Бөгөнгө көндә әхмүштәр бармы?

*Уҡыусы:*

– Эйе, бар, хатта күберәктер ҙә.

*Уҡытыусы:*

– Ни өсөн шулай уйлайһығыҙ?

*Уҡыусы:*

– Сөнки заманаһы шундай: элекке йолаларҙы онотоу, ата-бабалар менән бәйләнеште өҙөү, материаль байлыҡ артынан ҡыуыу күренештәре йышая.

*Уҡытыусы:*

– Ярар, уҡыусылар, шулай итеп был ауыр һәм етди әҫәрҙе өйрәнеүҙе тамамланыҡ. Бик матур фекерҙәр яңғыраны бөгөн. Һеҙ, буласаҡ атайҙар һәм әсәйҙәр, моғайын, әҫәр буйынса тейешле һығымталар яһарһығыҙ, фәһем алырһығыҙ.

*Гөлнур Ҡотлобаева, БДУ студенты, 2011.*

**Иҫкәрмә:** Йомғаҡлау оҙонғараҡ һуҙылған. Йыйнаҡлыҡ һәм тығыҙлыҡ кәрәк.

### Уҡыусыларҙың яҙма телмәрен үҫтереү

Уҡыусыларҙың яҙма телмәрен үҫтереү белемде йомғаҡлау, иҫәпкә алыу менән берлектә тормошҡа ашырыла, һөйләү телмәрен үҫтереү менән дә ул тығыҙ бәйле. Балаларҙың һөйләү телмәрен



төп геройҙарҙың – Һөнәрсе менән Өйрәнсектең характерын, уларҙың ысынында ниндәй кешеләр булыуын асыҡларға ярҙам итә.

*Уҡытыусы:* Уҡыусылар, миндә тағы ла бер ребус ҡалды әле. Әйҙәгеҙ, уны ла сисеп ҡуяйыҡ. (Хикәйәт).

Хикәйәт – ул беҙ өйрәнгән әҫәрҙең жанры. Ниндәй жанр икән ул? Ни өсөн хикәйәт тип атаны икән автор? Был жанрҙың үҙенсәлеге нимәлә? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуяйыҡ.

Халыҡ ижады сюжеттарына нигеҙләнгән йәки халыҡ ижады әҫәрҙәре рухындараҡ яҙылған юғары романтикалы, тәрән фәлсәфәле һәм йыш ҡына өгөт-нәсихәткә ҡоролған әҫәрҙе **хикәйәт** тип йөрөтәр.

"Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәте – легенда рухында яҙылған. Көршәк үҙе менән хикмәтле хикәйәт һаҡлай. Ә был образдың тәрән мәғәнәһе беҙгә нимә тураһында өгөт-нәсихәт уҡый?

*Уҡыусылар:*

– Кешегә бер ҡасан да яманлыҡ теләргә ярамай. Хәйлә ҡороп, кеше хаҡына байыу оҙаҡҡа бармаясаҡ. "Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә", "Ялғандың бото ҡыҫҡа".

Башҡарған эшеңде еренә еткереп, кешегә файҙа килтерерлек итеп башҡарырға кәрәк. Хеҙмәтте һөйөргә кәрәк – "Һөнәре барҙың – ҡәҙере бар", – тигән боронғолар.

*Уҡытыусы:*

–Дөрөҫ уҡыусылар. Бөгөнгө дәрестә беҙҙең һөйләшеүебеҙҙе халҡыбыҙ сығарған мәҡәл-әйтемдәр оҙата килде. Улар – халыҡ ижадының бер жанры. Тимәк, З. Биишеваның "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" хикәйәте, легенда-риүәйәт сюжетына таяныу менән бер рәттән, мәҡәл-әйтемдәр рухы менән дә һуғарылған. Был әҫәрҙең жанрын ысын мәғәнәһендә хикәйәт тип атай алабыҙ.

**Иҫкәрмә.** Әҫәрҙең жанрын билдәләү өсөн алдан уҡ, анализдың бүтән элементтары буйынса һөйләшкәндә үк, әҙерлек алып барыу уңышлы килеп сыҡҡан. Хикәйәт жанрына ентекләберәк туҡталып, башҡорт әҙәбиәтенән уҡыусыларға таныш булған бер-ике хикәйәтте иҫкә төшөргәндә, отошлораҡ булыр ине.

### Художестволы әҫәрҙең тел-стиль сараларын өйрәнеү

Әҙәби әҫәрҙең телен өйрәнеү дәрес барышында айырым бер этапты тәшкил итмәй, ул анализдың бүтән компоненттары менән

бергә бара. Йәғни, образ-персонаждарҙы, жанр, композиция, сюжет мәсьәләләрен өйрәнгәндә, хатта әҫәрҙең идея йөкмәткеһен билдәләгәндә лә уның поэтик теле, хикәйәләү стиле тураһында һүҙ ҡуҙғатыла. Бигерәк тә, әҫәрҙең поэтик үҙенсәлектәре, кинәйәлеге, образлылыҡ мәсьәләләре тел-стиль саралары менән тығыҙ бәйле.

Әҫәрҙең тел-стиль саралары тураһында һүҙ барған дәрестәр (анализдың бүтән компоненттары менән берлектә) аңлайышлы һәм отошло килеп сыҡһын өсөн, уҡыусыларҙың аңына «Нәмә ул әҙәби әҫәрҙең теле?» тигән һорауҙың асылын һеңдерергә кәрәк.

Тел – ул аралашыу ҡоралы. Әҙәби әҫәр теле–яҙыусының уҡыусылар менән аралашыу ҡоралы, үҙенең уй-ҡараштарын уҡыусыға художестволы формала еткереү сараһы. Ябай телмәрҙән ул ана шул художестволылығы менән айырыла ла инде. Бер яҡтан, бөтә кешегә аралашыу өсөн бирелгән тел кеүек үк ябай, ғәҙәти һүҙҙәрҙән төҙөлә. (Художестволы әҫәр теле бары тик бөҙрә һүҙҙәрҙән генә торорға тейеш, тигән ҡараш һис тә дөрөҫ түгел). Икенсе яҡтан, яҙыусы ошо ябай, ғәҙәти тел менән геройҙарҙы, күренештәрҙе, хәлваҡиғаларҙы иҫтә ҡалырлыҡ дөрөҫ һәм тапҡыр итеп һүрәтләү оҫталығына – образлы фекерләү талантына эйә. «Тапҡырлыҡ һәм йыйнаҡлыҡ – прозаның беренсе өҫтөнлөгө, – ти А. С. Пушкин. – Ул фекерҙе һәм фекерҙе талап итә. Ялтырауыҡлы һүҙҙәр һис нигә яраҡлы түгел» (24, 10).

Художестволы әҫәр теленең В. В. Голубков биш сифатын билдәләй һәм уларҙы уҡыусыларға урта мәктәптең бөтә курсы буйынса яйлап төшөндөрөргә кәрәк, тип таба.

1. Художестволы һүҙ ярҙамында образ, предмет, күренеш конкретлашырға, шәхси һыҙаттары төҫмөрләнергә, уҡыусы алдында тере, йәнле образ булып килеп баҫырға тейеш.

2. Геройҙың, предметтың, күренештең типик яҡтарын, бүтән геройҙар, предметтар, күренештәр өсөн дә характерлы булған уртаҡ һыҙаттарын аса.

3. Яҙыусының идея позицияһын күрһәтеп бирә, әҫәрҙең идея-эмоциональ йүнәлешен билдәләй.

4. Уҡыусыны тулҡынландырырлыҡ, уның йәмғиәттәге тәртибенә йоғонто яһарлыҡ дәрәжәлә тәьҫир көсөнә эйә; әҫәрҙең үҙен ижтимағи көрәш һәм тәрбиә ҡоралы яһай.

5. Эстетик яҡтан матур яңғырашлы, ҡолаҡҡа ятышлы була (6, 165–166).



Икенсе таҡтала түбәндәге схема.

| | |
|---|---|
| Әхмүш Ямаев | Әхмәди Ямаев |
| Нәғимә Сафарова | Ғәлиә |
| Аҡсәскә | ҡыҙ, ул |

*Дәресте ойоштороу*:

*Уҡытыусы:*

– Хөрмәтле уҡыусылар! Шулай итеп, Баязит Бикбайҙың “Аҡсәскә” повесына йомғаҡ яһаясаҡбыҙ. Эште Ғайса Хөсәйеновтың парсаһы менән башлап ебәрәйек. (Таҡтаға иғтибар йәлеп ителә). Кем класс алдына сығып, парсаны матур итеп уҡып ишеттерергә теләй. (Бер уҡыусы сығып уҡый). Ә хәҙер класҡа һорау: был парсаны нисек аңлайһығыҙ һәм беҙҙең дәрескә уның ниндәй бәйләнеше бар?

*Уҡыусы:*

– Был парса әҫәрҙе тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. Ул повестағы проблема менән бәйле: парсала төрлө кешеләрҙең ғаиләгә ҡарата мөнәсәбәте тураһында һүҙ бара.

*Уҡытыусы:*

– Уҡыусылар, тағы ла таҡтаға күҙ һалығыҙ әле. Унда әҫәрҙәге төп геройҙар исемдәре. Әхмүш Ямаевтың өс ғаиләһе булған. Был хрестоматияла бирелмәгән. Әйтеп үтәм. Мәймүнә Еникеева, улы Рауил. Улар бик күп ауырлыҡтар кисерәләр. Әҫәр аҙағында Әхмүш Рауилды паркта осрата. Ә Рәхимә менән Рәхилә, әсәләре тураһында әйтелмәй. Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә?

*Уҡыусы:*

– 1930-сы йылдар – һуғыштың һуңғы осоро.

*Уҡытыусы:*

– Ни өсөн Әхмүш Ямаев ғаиләһен ташлап китә?

*Уҡыусы:*

– Нәғимәнең атаһына “халыҡ дошманы” исемен тағалар.

*Уҡытыусы:*

– Ни өсөн Нәғимә ҡыҙ фамилияһын кире ала?

*Уҡыусы:*

– Нәғимә ҡурҡаҡ Ямаевтың фамилияһын йөрөтөргә теләмәй, атаһының намыҫы таҙа икәнлеген был эш менән күрһәтә.

*Уҡытыусы:*

– Нәғимә ниндәй ҡатын?

*Уҡыусы:*

–Нәғимә ныҡлы ихтыярлы, ҡыйыу, ҡыйынлыҡтарға бирешмәй,

ниндәй кимәлдә үҙләштергәнен, конкрет әҫәр буйынса белемен 1–2 минутта дөрөҫ һәм тулы итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Әлбиттә, әҫәрҙең үҙен анализлағанда техник саралар менән һаҡ эш итергә кәрәк.

---

*1. Әҙәби әҫәрҙе йомғаҡлау этабының бүтән элементтарҙан төп айырмаһы нимәлә?*

*2.Йомғаҡлауҙың алымдарының традицион методикала киң таралған алымдарына иғтибар итегеҙ.*

*3. Йомғаҡлауға ҡуйылған төп талапҡа (әҫәрҙең бығаса күрелмәгән яҡтарын асып бирергә, уны яңыса балҡытып ебәрергә тейешлегенә) иғтибар иткәндә, һәр әҫәргә ҡарата эҙләнергә, ижади алымдар табырға кәрәк. Урта һәм юғары кластар программаһына ингән бәләкәйерәк бер әҫәрҙе алып, уға үҙегеҙҙең йомғаҡлау алымдарығыҙҙы әҙерләп ҡарағыҙ.*

*4. Әҫәрҙе һәм дәресте (45 минут) йомғаҡлауҙың үҙенсәлектәрен нимәлә күрәһегеҙ? Уҡыусыларҙың белемен баһалауҙа традицион ҡалыптарҙан тыш тағы ла ниндәй юлдар тәҡдим итер инегеҙ?*

*5.Әҙәбиәт дәрестәрендә компьютер ҡулланыуҙы нисек баһалайһығыҙ? Һеҙ уны сикләү яғындамы, әллә киңәйтер инегеҙме?*

* * *

**Баязит Бикбайҙың “Аҡсәскә” повесы буйынса йомғаҡлау өлгөһө**

*Маҡсат:*

1. Әҫәрҙе нығытыу, йомғаҡлау.
2. Бөгөнгө көн ситуацияһы менән бәйләп фекер йөрөтөү.
3. Күтәрелгән проблеманы әҙәбиәттәге башҡа әҫәрҙәрҙә күҙәтеү.
4. Зачётҡа әҙерләнеү.

*Йыһазландырыу:* Баязит Бикбайҙың портреты, әҫәрҙәр йыйынтығы, Ғайса Хөсәйеновтың парсалар йыйынтығы, Ғәҙел Ҡотойҙоң “Тапшырылмаған хаттар” әҫәре буйынса аудио яҙма.

Дәрес алдынан таҡтаны әҙерләргә. Бер таҡтала Ғайса Хөсәйеновтың парсаһы: “Йыш ҡына шулай ҙа була: ябай кешеләр татыу ғаилә ҡоралар, талант эйәләре ундай ғаилә ҡорорға һәләтһеҙ булып сығалар. Ундай заттар ғаиләләре тарҡалыу, бер нисә тапҡыр ғаилә алмаштырыу ябай кешеләрҙән күпкә күберәк”.



Дәреслек уҡыусыһына бер аҙ ҡыйынлыҡ тыуҙырһа ла, миҫалдарҙы пункттар артынса бирмәй, цитата авторына һылтанманан һуң килтерергә мәжбүрбеҙ. Тәүге ике пункт – асылда “художестволы образ” тигән теоретик төшөнсәнең төп үҙенсәлектәре. Хәтергә төшөрәйек әле – художестволы образ конкрет һәм дөйөмләштерелгән һыҙаттарға эйә. Әҫәрҙә кластағы парта йәки ошо партала ултырған уҡыусы образы бирелә икән, беҙҙең күҙ алдыбыҙға шул партаның үҙенә генә хас төп һыҙаттары ла (ҡайһы рәттә, алдамы, арттамы ултыра, уға ҡояш нуры нисегерәк төшә, ҡулсыр уҡыусының ҡәләме, ручкаһы йә бәкеһе тейеп сыйғыланмағанмы; кластағы башҡа парталар менән уртаҡлыҡтары ла (ниндәй төҫкә буялған, ниндәй йәштәге балаларға тәғәйенләнгән, асылмалымы, ауышмы, өҫтәл һымаҡ тигеҙме һ.б.) бирелә. Уҡыусы менән дә шулай уҡ: уның үҙенең генә ҡиәфәте, портреты, кейеме, фиғеле; башҡа уҡыусылар менән уртаҡлыҡтары асыҡ күҙ алдына баҫа. Былар бөтәһе лә яҙыусының образлы телмәре аша ғына күҙ алдына баҫтырыла. З.Биишеваның “Дуҫ булайыҡ” повесының тел-стиль саралары хаҡында һөйләшкәндә, бишенсе класс уҡыусылары Юлдаш, Ғилман, Ҡыҙрас, Гөлкәй, Зарифа, Талиптарҙың һәр ҡайһыһының шәхси һәм уртаҡ һыҙаттарының биреүсе телмәр үҙенсәлектәренә күҙәтеү яһарға мөмкин (1, 2-се пункттар).

Яҙыусы үҙенең теге йәки был әҫәре менән ни әйтергә теләгәнен бер ваҡытта ла уҡыусыға туранан-тура асып һалмай; геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте хәл-ваҡиғалар, кисерештәр, күренештәр, деталдәр һәм башҡа художество саралары аша кинәйәле итеп еткерә. Әммә уҡыусы автор телмәре аша уның ҡайһы герой яҡлы икәнен, ниндәй хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләүен, ҡайһыларын инҡар итеүен һиҙемләй – уның идея-позицияһын, әҫәрҙең идея-эмоциональ йүнәлешен билдәләй ала. Быны “Ҡара йөҙҙәр” повесында М.Ғафуриҙың Ғәлимә образына мөрәжәғәте, уға бәйле хәл-ваҡиғаларҙа, әҫәрҙәге башҡа геройҙарға баһаһы аша ап-асыҡ күреп була (3-сө пункт).

Әҙәби әҫәр уҡыусы күңеленә төрлөсә тәьҫир яһай: хисләндерә, тетрәндерә, ҡыуандыра, һоҡландыра һ.б. Яҙыусының художестволы табыштары уны битараф ҡалдырмай, авторҙың оҫталығы мотлаҡ һоҡланыу тыуҙыра. Р.Назаровтың “Бәхет” шиғырын уҡығанда “Яурынында – бәхет ҡошо һайрай, Эйәренә ҡунып килә таң!” тигән юлдар башҡорт халҡының “Ир баланың күңелендә эйәрле ат ятыр” тигән мәҡәлен иҫкә төшөрә; автор үҙе туранан-тура әйтмәһә лә, ошо

мәҡәлде күҙ уңында тотҡанлығы һиҙелеп тора. Ысын мәғәнәһендәге һүҙ оҫтаһы тарафынан яҙылған мауыҡтырғыс әҫәрҙе уҡығанда, тормоштағы кеүек тәьҫирләнәһең, берәй сәбәп менән унан айырылып торһаң, геройҙары менән ҡабат тиҙерәк осрашырға ашҡынаһың. Авторҙың ошондай оҫталығы уҡыусыны ҡыуандыра, уның күңелендә эстетик зауыҡ уята. Әҫәрҙә художестволы сағылдырылған донъя менән осрашҡанда, яҙыусының уны ысынбарлыҡтағы кеүек бөтә ҡатмарлылығында бирә алыуы, үҙәк өҙгөс хәл-ваҡиғалар, геройҙарҙың аяныс яҙмышы йәки хаҡлы рәүештә яулап алған бәхете беҙҙе тетрәндерә; был тетрәнеү ысын тормошта тәьҫир иткән сәбәптәрҙән һис тә кәм түгел; киреһенсә, автор тарафынан тығыҙландырылып, ҙур мәғәнә һалып бирелеүе менән көслөрәк тә булып сыға. Яҙыусының, шағирҙың телмәре ни тиклем бай, ҡулланған һүрәтләү саралары ниндәй дәрәжәлә үтемле булһа, уҡыусының хисләнеүе лә шул дәрәжәлә тәьҫирлерәк була. З.Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәһендәге кульминацион ваҡиға, моғайын, бик күптәрҙең күңелен тетрәткәндер (4-се пункт).

Яҙыусы телмәре беҙҙең ябай телмәрҙән үҙенең художестволылығы менән айырыла, тигәйнек. Ул беҙҙең көндәлек телмәргә лә йоғонто яһай, эстетик яүғырашын камиллаштырыуға булышлыҡ итә. Донъя һүҙ сәнғәтендә быуаттар буйы йәшәп килгән халыҡ ижады, ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәт ошо вазифаға тоғро ҡалған, әҙәби телмәрҙең матурлығы, ҡолаҡҡа ятышлылығы менән уҡыусы күңелен дә сафландырған.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа Рәсәй күләмендә донъя күргән ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең авторҙары художестволы әҫәр теленә ҡуйылған ошо төп талапты һанға һуҡмай башланы. Быға ниндәйҙер кимәлдә нәшриәттәр ҙә ғәйеплелер. Күп тираж менән ташҡа баҫылып, уҡыусыға тәҡдим ителгән китаптарҙа бәйһеҙ бер төркөмдөң ауыҙынан сыҡҡан әшәке һүҙҙәр һис ниндәй үҙгәрешһеҙ, ҡыҫҡартыуһыҙ урын ала, телеэкрандарҙа, нәфис фильмдарҙа, театр сәхнәләрендә яңғырай башланы. Әлбиттә, башҡорт ерлеге өсөн был әлегә ят күренеш; ләкин нәфис әҙәбиәт телмәренә ҡуйылған талаптарҙың аҙаҡҡы пункты һанға һуғылмай башлаһа, беҙҙең һүҙ сәнғәтенә лә үтеп инеү ҡурҡынысы бар (5-се пункт).

В.В. Голубков билдәләгән ошо сифаттарҙы ҡабат һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтһәк, һәр бер әҫәрҙе өйрәнгәндә телдең был сифаттарының барыһының да тотош асылыуы мотлаҡ түгел. Уҡытыусы үтелгән



теорияһына ҡағылышлы ҡайһы бер мәсьәләләрҙең үҙләштерелеү кимәлен компьютер ярҙамында баһаларға мөмкин. Шуның урта кластар өсөн айырым дәрес аҙағында, әҫәрҙе, теманы өйрәнеп бөткәс, йәки сирек йә йыл аҙағында ойошторола торған ябай бер юлын түбәндәге миҫалда күреп була. Уҡыусылар ҡасандыр дәрестә үткән йә ятлаған берәй шиғырҙың 1-2 строфалыҡ тексы дисплейҙа яҙыла. Артабан уҡыусыға әҙәбиәт теорияһы буйынса ошо шиғырға бәйле бер нисә төркөм (был осраҡта 5 төркөм икән, ти) һорау бирелә. Экранда тәүҙә беренсе төркөм һорауҙар күренә:

1. Юғарылағы шиғри строфаның авторы кем? Яуап биреү өсөн клавишалағы һандарға баҫығыҙ. Салауат Юлаевтыҡы булһа – 3-кә, Мифтахетдин Аҡмулланыҡы – 4-кә, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтыҡы – 5-кә.

Әгәр уҡыусы дөрөҫ яуап клавишаһына баҫһа, компьютер хәтерендә уға бер балл ҡуйыла, һәм экранда икенсе һорау күренә.

2. Был өҙөк Салауат Юлаевтың ниндәй әҫәренән алынған? «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» – 6, «Яу» – 7, «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...» – 8 һ. б.

Тағы ла дөрөҫ яуап алһа, уҡыусыға икенсе балл өҫтәлә. Яңылыш баҫылһа, бер генә балл көйө ҡала. Ошо тәртиптә әлеге шиғыр буйынса төрлө һорауҙар бирергә мөмкин: шағир ижадының ҡайһы дәүерендәрәк яҙылған, ниндәй жанр формаһына, шиғыр төҙөлөшөнөң ниндәй төрөнә ҡарай һ.б. һорауҙар дәрестең маҡсатына, уҡытыусының ихтыярына ярашлы рәүештә һайлап алынған вариантта һәм эҙмә-эҙлектә программалаштырыла. Уҡыусы клавишалағы һандарға баҫып, һорауҙарҙың биш төркөмөнә лә яуап биреп бөткәс, компьютер уға баһа ҡуя:

«Бөтә варианттар ҙа дөрөҫ. Бишле».

Яңылыш яуаптарҙың төрлө осрағында экранда баһа ла төрлөсә бирелә:

«Беренсе һорауҙы белмәнегеҙ. Дүртле. Дәреслектән 86–88-се биттәрҙе уҡып ҡарағыҙ».

«Ике һорауҙы белмәнегеҙ. Өслө. 83–91-се биттәрҙе ҡабатлағыҙ».

«Өс һорауҙы белмәнегеҙ. Икеле. Бүлек материалын насар үҙләштергәнһегеҙ».

Күренеүенсә, ошо ябай система менән дә, һорауҙарҙы төрлө варианттарҙа программалаштырып, уҡыусының әҙәбиәт тарихының билдәле бер дәүерен, әҙәбиәт теорияһының айырым мәсьәләләрен

сағыштырып йомғаҡларға була.

Йомғаҡлау дәрестәрендә урта кластарҙа һирәк-һаяҡ әҙәби уйындар үткәреп алыу отошло. Әҙәби викторина һорауҙары был осраҡта әҫәрҙән ситләшмәслек, уның геройҙарының, айырым хәл-ваҡиғаларының мәғәнәүи ролен көтөлмәгән ракурстан күрә алырлыҡ итеп төҙөлә.

Әҫәрҙәрҙе йомғаҡлау этабынан тыш, һәр дәрестең үҙенә лә айырым йомғаҡ яһала. Был ваҡытта уҡытыусы 45 минут эсендәге һөйләшеүҙең үҙен генә йомғаҡлай, балаларҙың белемен иҫәпкә алып, баһалар ҡуя.

Белемде иҫәпкә алыу әҙәбиәт дәрестәрендә нигеҙҙә ике төрлө була:

1. А ғ ы м д а ғ ы б а һ а һәр дәрестә тиерлек ойошторола, шул ваҡыт эсендә алынған белем өсөн билдә ҡуйыла.

2. Й о м ғ а ҡ л а у б а һ а һ ы ҙурыраҡ теманы, бүлекте өйрәнеп бөткәс иҫәпкә алына. Сиреккә, йыл аҙағына сығарылған билдәләр ҙә йомғаҡлау баһаһына инә.

Мәктәп программаһындағы башҡа предметтар буйынса белемде иҫәпкә алыуҙың төрлө ысулдары (перфокарталар, схемалар, карточкалар, техник саралар һ.б.) файҙаланылһа, әҙәбиәт дәрестәрендә реаль ысынбарлыҡтың художестволы сағылышы хаҡында һүҙ барғанда ундай алымдар маҡсатҡа бигүк ярашлы түгел; шуға күрә традицион таралыш алған ысул – нигеҙҙә һорау-яуап рәүешендә тикшереү тәҡдим ителә. Уның өс төрө бар: а) бөтә уҡыусыларҙан да бер юлы (фронталь) һорау; б) индивидуаль һорау; в) тығыҙландырылған һорау. Фронталь баһалау өйгә эш яҙма рәүештә бирелгән осраҡта үткәрелә. Уҡытыусы тиҙ арала бөтә эштәрҙең дә башҡарылғанлығын тикшереп, ҡарап сыға; бер нисә уҡыусының эшен телдән тыңлап, йомғаҡлап ҡуя. Индивидуаль һорау бөтә класс өсөн өлгө рәүешендә үтә. Бер уҡыусының яуабын барыһы ла тыңлай, аҙаҡ хаталарын төҙәтә һәм төшөрөп ҡалдырылған материалды өҫтәп яуап бирә. Тығыҙландырылған һорау ваҡытында бер юлы бер нисә уҡыусы ҡатнаша: берәү телдән һөйләй, икәү-өсәүһе таҡта янында эшләй, тағы бер-икеһе урындан әҙерләнә. Образдарға характеристика биргәндә был төргә мөрәжәғәт итеү айырыуса уңайлы – ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әҫәрҙең бөтә персонаждары ла тиерлек кластың күҙ алдынан ҡабат үтә.

Хәҙерге заман шарттарында әҙәбиәт тарихына һәм әҙәбиәт



текста уларҙың айырыуса асыҡ күренгән үҙенсәлектәренә генә лә туҡтай ала.

В.В. Голубковтың әҙәби әҫәр телен өйрәнгәндә «стилистик эксперимент» тигән алымды ҡулланырға тәҡдим итеүе лә иғтибарға лайыҡ (6, 172–173). Уҡытыусы текстағы иң характерлы һүҙҙәрҙе уларҙың синонимдары менән алмаштыра һәм яҙыусының үҙ һүҙҙәре менән сағыштырырға ҡуша. Әҫәрҙең йөкмәткеһен һәйбәт үҙләштергән осраҡта уҡыусылар ул һүҙҙең ҡиммәтен, яҙыусы тарафынан ни дәрәжәлә уңышлы һайланғанын һәм текстан ни хәтлем айырылғыһыҙ икәнен беләләр.

Бына Назар Нәжмиҙең «Әпәй, ҡояш» шиғырынан беренсе строфа:

> Бала саҡтар... Аҙым һайын анттар...
> Мутлыҡтарҙың ғәмһеҙ хыялы.
> Бейек ҡойма... Алма баҡсалары.
> Күрше әбейҙең кәкере ҡыяры.

Аҙаҡҡы юлдағы “кәкере” аныҡлаусыһы урынына уҡыусылар икенсе һүҙҙәрҙе табып ҡуйып ҡарап, строфала яҙыусы үҙе ҡулланған һүҙҙең ысынлап та алыштырғыһыҙ икәненә ышаналар. «Кәкере» һүҙе контекста балаларҙың шуҡлыҡтары – баҡсаға тешәүҙәре хаҡында асыҡ хәбәр итә, урланған ҡыярҙың да, ғәмһеҙ балалыҡтағы был ҡырын эштең дә ни мәғәнәлә кәкере икәнлеген белгертеп тора.

Кластың фекерләү активлығын көсәйтеү маҡсатында «стилистик эксперимент» алымын киреһенсә лә файҙаланып була: карточкаларға художестволы текстан өҙөктәр яҙыла, унда әҫәрҙең идея-тематикаһына, айырым деталдәрҙең мәғәнәлелегенә барып тоташырҙай образлы һүҙҙәр төшөрөп ҡалдырыла. Был юлы улар урынына иң кәрәкле тип һаналған һүҙҙәрҙе балалар үҙҙәре эҙләп яҙа. Унан һуң яҙыусы әҫәре менән сағыштырып ҡарайҙар. Әгәр авторҙың үҙенең һүҙе менән тап килгән осраҡ була икән, – был инде уҡыусыларҙың кәйефен күтәрә, класты йәнләндереп ебәрә. Стилистик эксперимент күнегеүҙәре V–VI кластарҙа уҡ башлана. Артабан текстар ауырлаштыра барыла.

Айырым эпизодты тотош яттан һүрәтләү ҙә – әҙәби әҫәр телен өйрәнеүҙең бер алымы. Тәүҙә уҡыусылар уны иғтибар менән уҡып сыға. Унан һуң уҡытыусы биргән план буйынса текстҡа мөмкин тиклем яҡыныраҡ итеп яҙырға тырышалар. Аҙаҡ яҙыусының үҙ һүҙҙәре менән сағыштырып ҡарау шулай уҡ дәрестең йәнле

мәлдәренең береһенә әйләнеп китә.

Стилистик эксперимент тибындағы күнекмәләрҙең бүтән вари-анттарын (береһенән-береһе ҡыҙыҡлыраҡтарын) уҡытыусы үҙе йәки класс менән бергәләп уйлап сығара ала. Тик бер нәмәне иҫтән сығарырға ярамай – тел-стиль саралары өҫтөндә эшләү әҫәрҙең контексынан айырылмаһын, уны нығыраҡ аңларға, үҙләштерергә ярҙам итһен, художестволы текстағы айырым һүҙҙәрҙең ҡиммәтен тойорға өйрәтһен.

Яңы әҙәби текст менән танышҡан һайын, ғәҙәттә, һүҙлек өҫтөндә эш үткәрелә. Уны әҫәрҙең телен өйрәнеү, тип атап булмай әле. Сөнки класҡа (һәр хәлдә, балаларҙың күпселегенә) таныш булмаған һүҙҙәр аңлатыла. Өҫтәүенә, улар йыш ҡына художестволы әҫәр йөкмәткеһенән айырым рәүештә, контекстан ситтә ҡарала, һүҙлек өҫтөндә эш – балаларҙың лексиконын байытыуҙың, һөйләү һәм яҙма телмәрҙәрен үҫтерергә булышлыҡ итеүҙең бер формаһы.

---

*1. Әҙәби әҫәрҙең теле ғәҙәттәге һөйләшеү теленән ниндәй һыҙаттары менән айырыла?*
*2. Әҫәрҙең тел-стиль саралары анализдың ҡайһы этабында өйрәнелә?*
*3. Художестволы әҫәр теленең В. В. Голубков билдәләгән сифаттары анализдың бүтән элементтарын асыуға ла ярҙам итә. Был сифаттарҙы хәтерҙә ҡалдырырға тырышығыҙ.*
*4. Тел-стиль сараларын өйрәнгәндә, “стилистик эксперимент” тип аталған алымдың ниндәй төрҙәрен ҡулланып була?*

### Айырым жанрҙарҙы өйрәнеү үҙенсәлектәре

Яҙыусы реаль тормошҡа үҙенең мөнәсәбәтен төрлө ысулдар аша белдерә. Лирик әҫәрҙәрҙә геройҙың (характерҙың) эске кисерештәре сағыла, авторҙың үҙенең эске донъяһына ла уның ауаздаш булыуы мөмкин. Прозала автор күңеленә ҡарата ситтәрәк торған донъя – тормоштағы хәл-ваҡиғалар һүрәтләнә. Драма әҫәрҙәрендә драма-тургтың уҡыусыға әйтер һүҙе персонаждарҙың үҙ-ара һөйләшеүе, мөнәсәбәте аша еткерелә, авторҙың уларға, әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға мөнәсәбәте бөтөнләй белдерелмәй. Художестволы әҫәрҙе өйрәнеүҙең дөйөм методологик принциптарына таянып, айырым әҙәби төр һәм



дөйөм фекер уятыусы юлдар табылырға тейеш. Бының өсөн балалар алдында яңыраҡ, ҡатмарлыраҡ бурыстар ҡуйыла. Шуларҙың береһе – әҫәрҙең сюжетын уның реаль нигеҙе менән сағыштырып ҡарау. Мәҫәлән, М. Ғафури «Ҡара йөҙҙәр» повесында үҙенең тыуған яҡтарында ҡасандыр булып үткән хәл-ваҡиғаларға таяна, герой-ҙарҙың прототиптары итеп үҙенең ауылдаштарын ала. Ғәлимә обра-зын, билдәле булыуынса, шағирҙың үҙенең апаһы Сафияның яҙмышы нигеҙендә ижад иткән, ләкин прототип менән художестволы образ араһында теүәл уртаҡлыҡ булыуы мөмкин түгел. Сафия, Ғафуриҙың иҫтәлектәре буйынса, фәжиғәле ваҡиғанан һуң ауырып үлһә, Ғәлимә аҡылдан яҙып, үҙен-үҙе үлтерә. Реаль ысынбарлыҡтағы «материалды» үҙ ихтыяры буйынса үҙгәртеп, автор төп геройға йөкмәтелгән идея мәғәнәһен көсәйтә төшкән; уның образын, А. Островскийҙың «Гроза» драмаһындағы Катерина образы кеүек үк, «ҡараңғылыҡ батшалығындағы яҡтылыҡ нуры» яһай алған, ә үлемен йәшәп килгән йәмғиәт ҡоролошона ҡаршы сығыу билгеһе итеп күрһәтеүгә ирешкән. Йомғаҡлау этабында әҫәрҙе уның нигеҙе итеп алынған реаль ысынбарлыҡ менән сағыштырып, идея йөкмәткеһен уҡыусылар һис көтөлмәгән аспекттан күрә ала.

Әҫәрҙең уҡыусыларға таныш булмаған варианты тураһында һүҙ йөрөтөү ҙә ошо уҡ маҡсатта файҙаланыла. З. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» повесының ике баҫмаһы бар. Уҡытыусы уның икеһен дә алдан белгән булырға тейеш. Повесты йомғаҡлағанда ул ике баҫманың айырмалы яҡтары тураһында һүҙ йөрөтә, уларҙы сағыштырып ҡарап, аҙаҡҡы варианттың художество яғынан өҫтөнлөгөн асып бирә..

Класҡа яҡшы таныш булған, элегерәк үтелгән материалды иҫкә төшөрөү ҙә йомғаҡлау дәресендә кин ҡулланыла. Ғалим-методистар В. В. Голубков менән М. Ғ. Ғималова тематик билге буйынса, жанр тәбиғәте буйынса, геройҙарҙың үҙ-ара оҡшашлығы йәки ҡапма-ҡаршылығы буйынса сағыштырыу юлдарын күрһәтә, бер үк яҙыусының төрлө әҫәрҙәрен бер-береһе фонында ҡарау юлын тәкдим итә (6, 199–200; 9, 160–161).

Ошондай уҡ маҡсат менән икенсе авторҙың ауаздаш йөкмәткеле, образдар системаһы, художество уртаҡлыҡтары булған әҫәренә мөрәжәғәт итеп, ҡыҙыҡлы һығымталарға килергә мөмкин. Юғары кластарҙа С.Мифтаховтың “Һаҡмар”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт” драмаларын өйрәнгәндә, уларҙы Н.Ҡәриптең “Алма” пьесаһы менән

төҙөлөшө – йәғни, уның формаһы хаҡында ғына тәүге мәғлүмәтте алдыҡ. Ә йөкмәткеһе, художество саралары нисек булырға тейеш – был хаҡта киләсәктә дәрестән-дәрескә, кластан-класҡа белемебеҙҙе арттыра барырбыҙ”, - тигән фекергә яҡыныраҡ һүҙ өҫтәп ҡуйырға була.

### Йомғаҡлау дәрестәре үткәреү

Әҫәргә дөйөмләштереүсе анализдан уҡытыусы эште йомғаҡлау этабына күсерә. Был күсештең һиҙелмәҫтән генә тормошҡа ашырылыуы мөһим. Сөнки йомғаҡлау – әҫәр менән хушлашыу түгел, ә дөйөмләштереүсе анализдың дауамы, уның мөһим бер мәле.

Ниндәйҙер конкрет әҫәр тураһында һүҙҙе тамамлар алдынан артҡа әйләнеп ҡараһаҡ, ошондай картина күҙгә ташланыр: барыһы ла эшләнде – яҙыусының биографияһы, ижад юлы өйрәнелде, әҫәрҙең йөкмәткеһе үҙләштерелде, өлөштәргә бүлеп анализ яһалды, ул төрлө позициянан энәһенән-ебенә тиклем тикшерелде. Шулай ҙа нәмәлер, ниндәйҙер мөһим һүҙ әйтелмәй ҡалды. Ул һүҙ быға тиклем әйтелгәндәрҙән бер баҫҡысҡа юғарыраҡ булырға тейеш. Сағыштырыу өсөн: йыш ҡына әҙәби текстың, музыкаль әҫәрҙең аҙағы башта йәки уртала бер нисәшәр тапҡыр рефрен рәүешендә ҡабатлана килгән мотив менән тамамлана. Ләкин аҙаҡҡы мотив тәүгеләренә ҡарағанда байтаҡҡа көслөрәк, бер баҫҡысҡа юғарыраҡ була, уның йөкмәткеһе, яңғырашы аша алдағы ҡабатланыштарҙың дә мәғәнәһе нығыраҡ аңлашыла. Әҙәбиәт дәресенең йомғаҡлау этабын да ошо һуңғы рефрен менән сағыштырырға мөмкин. Йомғаҡлау әҫәрҙең быға са күрелмәгән яҡтарын асып бирә, уны яңыса балҡытып ебәрә. Шуға күрә был этапта төп роль уҡытыусыға тейә. Ул үтелгән әҫәрҙең яңы офоҡтарын асып, яҙыусы тураһында киңерәк мәғлүмәт бирә, ҙурыраҡ һығымталар яһай. Ысын мәғәнәһендәге юғары художестволы әҫәр уҡыусыларҙың төрлө кимәлдә ҡыҙыҡһыныусыларына һәм төрлө йәштәгеләренә бөтмәҫ-төкәнмәҫ зауыҡ бирә. Кристалл формаһындағы саф гәлсәргә ҡояш нуры ҡайҙан төшһә, шул яғы балҡыған кеүек, уҡытыусы балаларға әҫәр матурлығының теләһә ҡайһы яғын күрһәтә ала.

Йомғаҡлау ваҡытында әҫәрҙе тәүҙә өйрәнгән юлдан барырға ярамай. Ул ҡабатлауға, сәйнәп ҡаптырыуға оҡшап китә. Анализ барышында ҡаралмаған өлкәләргә мөрәжәғәт итеп, әҫәр тураһында



уға ҡараған жанрҙарҙы анализлауҙың традицион методтары формалашҡан. Әҙәби төр һәм жанр үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп тикшереү уҡыусыларға әҫәрҙе йөкмәтке һәм форма берлегендә ҡабул итергә, яҙыусының ижади эшмәкәрлек серҙәренә яҡын килергә ярҙам итә.

«Методик алымдар әҫәрҙең тәбиғәтенә буйһона, – тип яҙҙы М.А.Рыбникова һәм ҡайһы бер жанрҙарҙы өйрәнеүҙең төп методик йүнәлештәрен атап күрһәтте. – Лирик әҫәрҙе тасуири уҡыу, музыкаль эшкәртеү аша биреү һәйбәт; драматик әҫәрҙәр ролдәргә бүлеп уҡыла, сәхнәлә ҡарала, сәхнәләге кәүҙәләнеше тикшерелә; романда образдар системаһы, уның ҡатмарлы комплексы асыҡлана...» (25, 58).

Мәктәптә әҙәбиәт уҡытыу программаһында иң күп урын проза әҫәрҙәренә бирелә. Урта кластарҙа балалар прозаның бәләкәйерәк жанрҙары – очерк, хикәйә, повесть менән эш итә, публицистик сығыштар, иҫтәлектәр менән таныша. Хикәйә һәм повесть нигеҙендә образдарға характеристика биреү, сюжет һәм уның элементтарын асыҡлау ҡеүәһе үҫтерелә, композицияны билдәләү өҫтөндә тәүге күнекмәләр алына. Юғары кластарҙа, был жанрҙарҙан тыш, романдар, роман-эпопеялар ҙа өйрәнелә. Уҡыусылар ҙур күләмле проза әҫәрҙәренең идея йөкмәткеһен еңел билдәләй, сюжеттан тыш элементтар, ҡатмарлы композиция, авторҙың уй-ҡараштары, шәхси стиле, ижад методы кеүек төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Ҙур күләмле әҫәрҙәрҙең идея-художество йәһәтенән мөһим бүлектәренә, эпизодтарына, күренештәренә нығыраҡ баҫым яһала, дөйөмләштереүсе анализ ваҡытында ла авторҙың теленә, художество деталдәренә таянып эш ителә. Юғары кластарҙа әҙәби процестың, әҙәбиәт үҫешенең ҡайһы бер мөһим мәсьәләләре – традиция һәм новаторлыҡ, ысынбарлыҡты дөрөҫ һәм масштаблы һүрәтләү, образдарҙың психологик тәрәнлеге, әҫәрҙең халыҡсанлығы кеүек төшөнсәләр – проза әҫәрҙәренә бәйле рәүештә өйрәнелә.

Лириканы уҡыусылар аңлай белһен өсөн, урта кластарҙың башынан уҡ класҡа уның тәбиғәтен төшөндөрә барырға кәрәк. Алда әйтелгәнсә, лирик геройҙың күңел торошон, кисерештәрен сағылдырғанға күрә, лирик әҫәрҙәрҙә эпик хикәйәләүгә урын ҡалмай. Уҡытыусы балаларҙы ғәмәлдә автор кисерештәренең эсенә алып инә. Шуға күрә ул лирик әҫәрҙәрҙе өйрәнеүҙең мөһимлеген онотмаҫҡа, авторҙың үҙ кисерештәре, күңел донъяһы аша әйтергә теләгән төп уйын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейеш. Лирика менән эш итеү

балаларҙы хисләнә белергә, тормошто күңел аша үткәрергә, матурлыҡта нескә тойорға өйрәтә. Лирик әҫәрҙәрҙе анализлау тасуири уҡыу аша башҡарыла. Уҡытыусының тойғоло уҡыуы йәки тасуирилыҡтың башҡа саралары ярҙамында уның йөкмәткеһе уҡыусыларҙың күңеленә тәьҫир итерлек итеп еткерелгәс, артабан инде әҫәрҙең художество үҙенсәлектәре тураһында һүҙ алып барыу өсөн уңайлы шарттар тыуа.

Драма иһә үҙенең формаһы менән үк уның йөкмәткеһен ҡабул итеүҙе, анализлауҙы ҡыйынлаштыра. Бында ла әҫәрҙең жанр тәбиғәтенә төшөнөү ярҙамға килә. «Пьеса – драма, комедия – әҙәбиәттең иң ауыр формаһы... – тип яҙҙы А. М. Горький. – Пьеса һәр ҡатнашыусы берәмектең үҙ һүҙе һәм эше менән үҙ аллы характерланыуын, авторҙың ситтән әйтеп тороуынан тыш асылыуын талап итә» (7, 414). Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡытыусы драманың ошо үҙенсәлеген мотлаҡ иҫәпкә ала. Өҫтәүенә, әҫәрҙәге геройҙарҙы һәм хәл-ваҡиғаларҙы тағы ла аныҡыраҡ аңлау өсөн, сәхнәләге ҡуйылышын күҙ алдына баҫтыра. Спектакль сәхнәлә 2-3 сәғәт самаһы ғына дауам итә. Драма әҫәре, ғәҙәттә, ҡыҫҡа ваҡытты үҙ эсенә ала; ошо ваҡыт һуҙымындағы хәл-ваҡиғалар тығыҙландырып, көсәргәнешле итеп бирелә. Шул арҡала геройҙар йыш ҡына үҙ яҙмыштарының һынылышлы, яуаплы дәүерендә һүрәтләнә. Драматик персонаждарҙы анализлағанда, уларҙы әҫәрҙең конфликтынан, хәл-ваҡиғаларҙан айырып ҡарарға ярамай. Бары тик әҫәрҙең бөтә художество үҙенсәлектәре берлегендә генә геройҙың төп һыҙаттары тулыраҡ асыла. Юғарыраҡ кластарҙа, жанрҙың тәбиғәтенә ныҡлабыраҡ төшөнгәс, драманы анализлауҙың тәүҙә ауыр һымаҡ тойолған яҡтары хәҙер, киреһенсә, бүтән жанрҙарға ҡарағанда еңелерәк тә бирелеүе ихтимал. Әйтәйек, төп персонаждар драмала күбеһенсә ап-асыҡ һыҙаттары менән кәүҙәләнә; әҫәрҙең сюжеты, бигерәк тә уның төп элементтары (ваҡиғалар үҫеше, кульминация) бүтән жанрҙарға ҡарағанда шулай уҡ ҡабарынҡыраҡ итеп бирелә. Анализ барышында драма әҫәрҙәрен (күпселек осраҡта – уның айырым өҙөктәрен) ролдәргә бүлеп уҡыу мөһим. Теге йәки был һүҙҙең персонаждар тарафынан ҡулланылышы, уның нисегерәк яңғырашы, һөйләмдәрҙең иң ҡулай мәғәнәлә әйтелеше хаҡында фекер йөрөтөү аша уҡыусылар әҫәрҙең асылына – тимәк, авторҙың әйтергә теләгән ниәтенә ныҒыраҡ үтеп инә.

Урта кластарҙа халыҡ ижады әҫәрҙәре үтелә. V–VIII кластар



*Уҡыусы:*

– Был строфаның 1-се, 3-сө юлдары унар ижектән, 2-се, 4-се юлдары туғыҙар ижектән килгән.

*Уҡытыусы:*

– Афарин! Был шиғырҙың башҡа строфалары ла ошо тәртипкә буйһонған. Строфала юлдар һаны төрлөсә ритмға ҡоролорға мөмкин. 10-9, 8-7, 7-7 ижекле юлдар башҡорт шиғриәтендә йышыраҡ осрай. Ҡалғандары менән алдағы дәрестәрҙә тағы ла ентекләберәк танышырбыҙ.

IV. Йомғаҡлау:

*Уҡытыусы:*

– Шулай итеп, шиғырҙың төҙөлөшө тураһында һөйләшкәндә, беҙ иң тәүҙә нимәләргә иғтибар итергә тейешбеҙ?

*Уҡыусы:*

– Строфаға, рифмаға, ритмға иғтибар итергә тейешбеҙ.

*Уҡытыусы:*

– Дөрөҫ, әйҙә, таҡтаға сығып, “Гөлдәр баҡсаһында” шиғырының һуңғы строфаһындағы ритм һәм рифмаларҙы асыҡлап, иптәштәреңә күрһәт! (уҡыусы таҡтала эшләй). Хәҙер мин һеҙгә шундай эш тәҡдим итәм. Дүрт юллыҡ шиғырҙың беренсе 2 юлын таҡтаға яҙам, артабан 3, 4-се юлдарын үҙегеҙ дауам итегеҙ.

1. Аҡбай исемле этем бар,
   Үткер күҙле, һаҡ ҡолаҡ. (дауамы).

2. Минең бесәйем бик уңған,
   Иртән тороп йыуынған. (дауамы).

3. Минең көсөгөм бик матур,
   Исеме уның Батыр. (дауамы).

Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһалау.

VI. Өйгә эш:

– Уҡыусылар, бөгөн үтелгән темаға таянып, үҙегеҙ шиғыр яҙып ҡарағыҙ. Строфалағы юлдар һанын, рифмаларҙы, юлдарҙағы ижектәр һанын үҙегеҙ теләгәнсә һайлағыҙ.

*Мансурова Л. Р. БДУ студенты, 2008.*

**Иҫкәрмә:** Уҡытыусыға дәрес аҙағында: “Бөгөн беҙ шиғырҙың

Замандашым!
Һине йырға һалып,
Йырым менән һиңә өндәшәм;
Үҙебеҙсә ябай ғына итеп,
Һинең менән "һин" тип һөйләшәм.

Миҫалдан күренеүенсә, яҙыусы үҙ әҫәренең лирик геройына йәки уҡыусыға үҙ исеменән мөрәжәғәт итә.

Хәҙер 6-сы таблицаға иғтибарҙы йүнәлтәйек. Теҙмә телмәрҙең үҙенә генә хас төҙөлөшө була. Шиғыр төҙөлөшөн тәрәнерәк аңлар өсөн **строфа** төшөнсәһен асыҡлайыҡ: Ғ. Хөсәйеновтың "Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге"ндә: " строфа – рифмалар ярҙамында йәки уртаҡ интонация менән берләшкән шиғыр юлдары", - тип аңлатыла. Шиғырҙың бер строфалағы юлдар һанына ҡарап, строфалар төрө 2 юл, 3 , 4, 5, 6, 7, 8, 9 һәм унанда күберәк булырға мөмкин. Әйҙәгеҙ, "Гөлдәр баҡсаһында" шиғырына мөрәжәғәт итәйек. Был шиғырҙан строфаларҙы табып, һанап ҡарайыҡ әле (уҡыусылар һанай). Дөрөҫ билдәләнегеҙ, был шиғыр ете строфанан тора.

Хәҙер **рифма** нимә икәнен асыҡлайыҡ. Рифма – шиғыр юлдарында оҡшаш һүҙҙәрҙең бер төрлөрәк яңғырашы. Ул һүҙҙәр башлыса шиғыр юлдарының аҙағында килеп, төҙөлөшө яғынан, алда әйткәнебеҙсә, ике, өс, дүрт, унан да күберәк юллы строфаларҙы барлыҡҡа килтерә. Рифмалаш һүҙҙәр һуҙынҡы өнгә бөтһә, асыҡ рифма тип, ә тартынҡы өнгә бөтһә, ябыҡ рифма тип атала. Әйҙәгеҙ, "Гөлдәр баҡсаһында" шиғырына мөрәжәғәт итәйек:

10 Кү/ңел/ле / эш/, ма/тур/ тор/мош/ ме/нән/
9 Йыл/ ар/ты/нан/ йыл/дар а/ғыр/ҙар/...
10 Эш/сән/ е/гет ме/нән/ эш/сән/ ҡыҙ/ҙар
9 Һеҙ/ҙе/ түш/тә/ре/нә/ ҡа/ҙар/ҙар.

Был дүрт юллыҡта ниндәй юлдар рифмалаша?

*Уҡыусы:*

– Шиғырҙың 2-се юлындағы ағырҙар, һәм 4-се юлындағы ҡаҙарҙар һүҙҙәре рифмалашып килә.

*Уҡытыусы:*

– Дөрөҫ. Шиғыр төҙөлөшөндә **ритм** да мөһим урын алып тора. Ритмға билдәләмә биреп ҡарайыҡ. Ул – тәбиғәттә, хәрәкәттә өндәрҙең билдәле бер тәртиптә бер тигеҙ ҡабатланыуы. Әлеге строфаның һәр юлдағы ижектәрен һанап ҡарайыҡ. Кем тиҙерәк билдәләр?



программаһында башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадынан бөтә мөһим жанрҙар ҙа тиерлек урын алған: әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, йырҙар, бәйеттәр, таҡмаҡтар, көләмәстәр, сеңләүҙәр, легендалар, ҡобайырҙар, эпостар һ. б. Уларҙы өйрәнгәндә художестволы әҙәбиәттән айырмалы һыҙаттары һәм жанр үҙенсәлектәре иҫәпкә алына. Фольклорҙың әҙәбиәттән иң төп айырмаһы – коллектив рәүештә ижад ителеүендә һем телдән-телгә таралыуында. Ауыҙ-тел формаһында йәшәүе уның йөкмәткеһенә йоғонто яһамай ҡалмай. Шуға күрә дәрестә ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре мөмкин тиклем тасуири уҡылырға, уҡыусылар һүҙҙәрҙең яңғырашын, әйтелеш буяуҙарын драмалағы кеүек тойорға тейеш. Йырҙы, мәҫәлән, күңелдән үткәреү өсөн, В. В. Голубков әйтмешләй, «уны йырламаған хәлдә лә, һис юғында музыкаль-вокаль башҡарылышын тыңларға кәрәк» (6, 185). Халыҡ ижады әҫәрҙәренең идея йөкмәткеһен асыҡлағанда, уларҙың ауыр тормошта интеккән-хеҙмәтсән халыҡ тарафынан сығарылыуы, шуға күрә массаларҙың уй-хыялдары, яҡтыға, бәхеткә ынтылышы сағылыуы иғтибарҙан ситтә ҡалмаҫҡа тейеш. Фольклор сюжеттарында күпселек осраҡта яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеп сығыуы, хәл-ваҡиғаларҙың бәхетле тамамланышы коллектив ижадсыларҙың оптимистик рухы менән аңлатыла. Был сифат төп геройҙарҙың бирелешендә лә асыҡ сағыла. М. Горький һүҙҙәре менән әйткәндә - «Геройҙарҙың иң тәрән һәм асыҡ, художество йәһәтенән камил типтары фольклор тарафынан, хеҙмәтсән халыҡтың ауыҙ-тел ижады тарафынан сығарылған» (8, 305). Урал батыр, Илья Муромец, Прометей кеүек көслө, бай рухлы, халыҡ яҙмышын үҙ ғүмеренән өҫтөнөрәк ҡуйған геройҙарҙа коллектив ижадсылар кешелектең иң күркәм сифаттары тураһында үҙҙәренең хыялдарын, идеалдарын сағылдырған. Эпос, ҡобайыр, әкиәт, легенда-риүәйәт һ. б. әҫәрҙәрҙең персонаждарын анализлағанда уҡытыусы иң алда ошо критерийҙы күҙ уңында тота. Фольклорҙың эпик жанрҙарының сюжет, композиция үҙенсәлектәрен иһә Ә. М. Сөләймәнов түбәндәгесә билдәләй: «Фольклор әҫәрҙәренең сюжеты ла әҙәби әҫәрҙәрҙәгесә, экспозиция, төйөнләнеү, кульминация, сиселеш кеүек элементтарҙан тора. Ләкин, әҙәби әҫәрҙәрҙән айырмалы рәүештә, ул элементтарҙың урындары алмаштырылмай, хронологик сигенеүҙәр яһалмай. Фольклор әҫәрҙәрендә ваҡиға тормоштағысараҡ баштан-аяҡ эҙмә-эҙлелегендә бирелә. Уларҙа һәр саҡ хәрәкәт берлеге күҙәтелә: сюжет тармаҡланмай. Шул уҡ ваҡытта фольклор әҫәрҙәренең сюжеты

тормош ваҡиғаһын туранан-тура ҡабатламай» (27, 5). Уҡыусылар халыҡ ижадының һәр жанрына хас булған традицион формалар тураһында ныҡлы төшөнсә ала. Мәҫәлән, әкиәттең үҙенә генә хас башламы, хикәйәләнеше, тамамланышы, хәл-ваҡиғаларҙың өс тапҡыр ҡабатланышы һ. б. поэтик сараларҙың функцияһы, легенда-риүәйәттәрҙең стиле, вариантлылығы, ҡобайырҙар үҙҙәренә генә хас поэтикаһы тураһында беләләр. Уларға фольклорҙың әҙәбиәт менән бәйләнеше, әҙәбиәткә йоғонтоһо, фольклорҙы интерпретациялау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән әҙәби әҫәрҙәр тураһында конкрет миҫалдар нигеҙендә мәғлүмәт бирелә.

Төрлө жанрҙарҙы өйрәнеү үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ йөрөткәндә, башҡорт һүҙ сәнғәтендәге ауыҙ-тел әҙәбиәтенең урынын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Уҡыусылар халыҡ ижады менән ауыҙ-тел әҙәбиәтенең – йырауҙар һәм сәсәндәр ижадының уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын урта кластарҙан уҡ төшөнә барырға тейеш. Ауыҙ-тел әҙәбиәте телдән сығарыла, телдән тарала, әммә ул коллектив ижад түгел, ә исеме билдәле булған айырым шәхестең уй-караштары, индивидуаль үҙенсәлектәре сағылдырылған, нигеҙҙә шиғри формала сығарылған әҫәрҙәрҙе күҙ уңында тота. Уның иң төп жанрҙары – ҡобайыр, әйтеш (ҡайһы бер осраҡта – йыр, бәйет). Халыҡ ижады жанрҙарынан улар ауыҙ-тел һүҙ оҫтаһы йәшәгән замандың иң көнүҙәк, хатта ошо ҡобайыр йәки әйтеш халыҡ алдында сығарылған мәлдә үк булып яткан мәсьәләләргә, хәл-ваҡиғаларға мөрәжәғәт итә. Йырау, сәсән импровизацияларының поэтик үҙенсәлектәре ошо талаптарға буйһона: тыңлаусы ихтияждарын иҫәпкә алып, ҡабул итеү, хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ҡолаҡҡа ятышлы, уңайлы, ритмик яҡтан камил, фекере тығыҙ, оло мәғәнәле, тәрән фәлсәфәгә һәм тәрбиәүи маҡсатҡа эйә була.

Урта һәм юғары кластарҙа Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыз йырауҙарҙың, Ҡобағош менән Аҡмырҙа, Ерәнсә, Ҡарас, Байыҡ, Мәхмүт һ.б. сәсәндәрҙең ижадын өйрәнгәндә был үҙесәлектәрҙе иҫәпкә алмау мөмкин түгел.

---

1. *Әҙәби төрҙәрҙең бүленеш принцибын иҫкә төшөрөгөҙ.*
2. *Лирик, эпик, драматик жанрҙарҙы өйрәнгәндә, уларҙың һәр ҡайһыһына хас булған ниндәй үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алабыҙ?*
3. *Халыҡ ижады әҫәрҙәрен анализлағанда яҙма әҙәбиәттән*



– Дөрөҫ яуап бирҙегеҙ, афарин! Әйҙәгеҙ, хәҙер инде шиғыр төҙөлөшөнә иғтибар итәйек. Һеҙҙең алдығыҙҙа 21-се таблица эленгән. Был таблицала шиғри жанрҙар 2 принципҡа бүлеп ҡаралған. Беренсеһе – тематикаһы буйынса: тәбиғәт лирикаһы, гражданлыҡ лирикаһы, мөхәббәт лирикаһы, философик лирика. Уҡыусылар, һеҙ ниндәй лирикаға ҡараған әҫәрҙәр үтәһегеҙ?

*Уҡыусы:*

– Беҙ күп ваҡыт тәбиғәт лирикаһына ҡараған әҫәрҙәр үтәбеҙ.

*Уҡытыусы:*

– Граждандыҡ һәм философик лирикаға ҡараған әҫәрҙәр менән өлкән синыфтарҙа танышырһығыҙ. Ә мөхәббәт лирикаһы – күп тармаҡлы. Тыуған илгә, тыуған төбәккә, халыҡҡа, телгә, ата-әсәләргә, дуҫтарға, шул уҡ тәбиғәткә мөхәббәт хистәре бирелергә мөмкин.

Икенсе принциптан сығып, шиғри жанрҙар шиғыр-монолог, шиғыр-диалог, шиғыр-өндәшеү, шиғыр-хат формаларына бүлеп ҡаралған. Хәҙер, уҡыусылар, *шиғыр-монологҡа* билдәләмә бирәйек: ул – әҙәби әҫәрҙәге персонаждың үҙ алдына уйланыуҙары.*Ә шиғыр-диалог* – әҙәби әҫәрҙә ике кешенең һөйләшеүе. Диалог персонаждарҙың уй-тойғоларын, һөйләү рәүешен, телмәр үҙенсәлеген, характерын аңларға, фекерҙәр ағышына хәрәкәтсәнлек, үткерлек бирергә ярҙам итә. Хәҙер мин һеҙгә Рәми Ғариповтың “Алғы һыҙыҡ” шиғырынан өҙөк уҡып (һөйләп) ишеттерәм:

– Һаман әле китмәнеңме? – тиҙәр,
– Юҡ әле, тим, һаман китмәнем.
– Ниңә, әллә кире уйланыңмы?
– Юҡ, тим, әле эшем бөтмәне.

Был шиғырҙа һорау ҡуйыла һәм яуап бирелә – ике кешенең үҙ-ара әңгәмәләшеүе. Артабан, *шиғыр-хат* формаһы Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” әҫәре миҫалында асыҡ күренә:

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнөңдө күреп хурланам.

Шиғырҙан күренеүенсә, автор бында башҡорт теленә: “Туған телем минең!” – тип хат рәүешендә мөрәжәғәт итә. *Шиғыр-өндәшеүгә* миҫал итеп Әнғәм Атнабаевтың “Замандашым” әҫәренән өҙөк уҡып ишеттерәм.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.

II. Өй эшен тикшереү.

III. Яңы тема.

*Уҡытыусы:*

– Уҡыусылар, һеҙ “Гөлдәр баҡсаһында” шиғыры менән таныш. Уны үткән дәрестә өйрәндек, ятлап килдегеҙ. Бөгөн үтәһе тема: “Мәжит Ғафуриҙың “Гөлдәр баҡсаһы” шиғыры миҫалында шиғыр төҙөлөшө тураһында төшөнсә”. Әйҙәгеҙ, дәфтәрегеҙҙе асығыҙ, бөгөнгө числоны, яңы теманы яҙып ҡуйығыҙ.

Матур әҙәбиәттә телмәрҙе проза һәм шиғри төрҙәргә айырып йөрөтәләр. Әйҙәгеҙ, проза һүҙенә билдәләмә биреп ҡарайыҡ. Бының өсөн беҙ К. Әхмәтйәновтың “Әҙәбиәт теорияһы”на таянабыҙ. Проза әҫәре кешеләр үҙ-ара аралашҡанда, аңлашҡанда нисек һөйләшһә, шундай уҡ ғәҙәти телмәр менән яҙыла. Артабан, Ғ. Хөсәйеновтың “Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге”ндә: “Проза – ғәҙәттәгесә һөйләү, хикәйәләү рәүешендә яҙылған әҫәрҙәр”, - тип әйтелә. Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә шиғыр менән яҙылған әҫәрҙәр “теҙмә әҫәрҙәр” тип исемләнһә, проза менән яҙылғандары “сәсмә әҫәрҙәр” тип тә атала. Проза әҙәби төр булараҡ сәсмә формала яҙылған хикәйә, очерк, хикәйәт, новелла, повесть, роман кеүек жанрҙарҙы үҙ эсенә ала. Прозаның серенә төшөнөү өсөн, дәреслектең йөкмәткеһен асайыҡ та, “Ғ. Хөсәйеновтың “Ете ырыу” хикәйәһе ниндәй төргә инә?” тигән һорауға яуап бирәйек.

*Уҡыусы:*

– Ғ. Хөсәйеновтың “Ете ырыу” хикәйәһе проза төрөнә инә.

*Уҡытыусы:*

– Артабан, Яныбай Хамматовтың “Төньяҡ амурҙары” әҫәре ниндәй төргә ҡарай?

*Уҡыусы:*

– Жанры буйынса роман, шуға күрә был әҫәр ҙә проза төрөнә ҡарай.

*Уҡытыусы:*

– Салауат Юлаевтың “Тыуған илем”, “Уралым”, “Егеткә” шиғырҙары ниндәй төргә инә?

*Уҡыусы:*

– Салауат Юлаевтың был шиғырҙары шиғри төргә инә.

*Уҡытыусы:*



*ниндәй айырмалы яҡтарын иҫәпкә алырға кәрәк?*

4. *Ауыҙ-тел әҙәбиәтенең (йырауҙар, сәсәндәр ижадының) фольклор менән уртаҡ һәм айырмалы яҡтары нимәләргә ҡайтып ҡала? Ауыҙ-тел шиғриәтен өйрәнгәндә, яҙма әҙәбиәткә һәм халыҡ ижадына ярашлы алымдарҙың барыһын да ҡулланып буламы? Ни өсөн?*

**Тасуири уҡыуҙы ойоштороу**

Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү барышында уның тексы бер нисә тапҡыр уҡыла. Һәр ҡайһыһының тәғәйен маҡсаты бар.

1. Белеүебеҙсә, иң тәүге уҡыу, әҫәр менән танышыу өсөн өйҙә үҙ аллы уҡыла. Бында тасуирилыҡ хаҡында һүҙ ҡуҙғатылмай.

2. Дәрестә, инештән һуң, өйрәнеләсәк әҫәр йәки уның мөһим өлөштәре класта тасуири яңғырарға тейеш. Был осраҡта балаларҙы тасуири уҡыуға өйрәтеү маҡсаты ҡуйылмай, уҡыусыларҙың күпләп ҡатнашыуы кәрәкмәй. Текст мөмкин тиклем тасуири яңғыраһын өсөн йә уҡытыусы үҙе уҡый, йә кластағы иң матур уҡыған уҡыусы йәлеп ителә, йә булмаһа бүтән сараларға – фонограммаға, видеопроекторға урын бирелә. Саралар киң: был хаҡта “Әҙәби әҫәрҙе класта уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү” темаһында һүҙ йөрөтөлгәйне.

3. Анализ этабы башланғас, уның төрлө элементтары хаҡында һүҙ барғанда, әҫәр тексының айырым өлөштәре – абзацтар, фразалар, строфалар, шиғри юлдар, һүҙбәйләнештәр –төрлө күләмдәге өҙөктәр, әлбиттә, уҡылмайынса ҡалмай.

4. Анализдан һуң, махсус ваҡыт бүлеп, йәки уңайлы мәлде файҙаланып, өйрәнелгән текст нигеҙендә уҡыусыларҙы махсус рәүештә тасуири уҡыуға өйрәтеү маҡсаты ҡуйыла. Түбәндә тап ошо осраҡ хаҡында һүҙ барасаҡ.

Класта әҙәби әҙәрҙе тасуири уҡыуҙы ойоштороу йыш ҡына анализдың йомғаҡлау этабын тәшкил итә. Тасуири уҡыу уҡыусының текст йөкмәткеһен ни дәрәжәлә аңлауын күрһәтә. Класс алдында ҡысҡырып уҡыр алдынан бала әҫәрҙе ҡабат иҫкә төшөрә, һәр һүҙҙең мәғәнәһе, яңғырашы хаҡында уйлана. Икенсе төрлө әйткәндә, анализ һаман, йәшерен формала булһа ла, дауам итә; уҡыусының тексты үҙ аллы йомғаҡлау процесы бара. Әммә ҡайһы бер балалар, әҫәрҙе ниндәйҙер дәрәжәлә үҙләштергән хәлдә лә, класс алдында ла, үҙ аллы ла тейешле кимәлдә тасуири уҡый алмай. Бигерәк тә, урта

кластарҙың тәүге йылдарында күпселек уҡыусы тексты бер генә тон менән, көйләп уҡый. Шуға күрә ошо дәүерҙән үк уларҙы интенсив рәүештә тасуири уҡыуға өйрәтеү башлана. Был эш – балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереүҙең бер төрө. Кластағы һәр уҡыусы үҙенең иптәштәре алдында әҫәрҙе ҡысҡырып уҡырға һәм ятларға даими йәлеп ителергә тейеш. Урта кластарҙа тасуири уҡыу өсөн ҙур булмаған әҫәр йәки теүәл өҙөк алына.

Тасуирилыҡтың төп элементтары – тон, пауза, баҫым, тойғо, темп – һәр ваҡыт үҙ-ара тығыҙ берлектә йөрөй. Уларҙың айырылғыһыҙ бөтөнлөгө арҡаһында тасуири яңғырашлы уҡыу килеп сыға.

Һәр жанр әҫәрен уҡыуҙың үҙенә күрә үҙенсәлектәре бар. Сәсмә текстың тасуирилығы хикәйәләү һәм диалогтар тәбиғәтенә бәйләнһә, драма әҫәрҙәрендә ролдәрҙең характеры бирелергә тейеш. Шиғриәттә иһә ритм һаҡланышы, рифмалар яңғырашының аныҡлығы талап ителә, строфаларҙың тамамланыуы еңелсә паузалар менән билдәләнә.

V–VI кластарҙа тасуири уҡыу һәм шиғырҙы ятлау мотлаҡ рәүештә анализдан һуң үткәрелә. VII–VIII кластарҙа анализ менән бер аҙ аралаштырып алып барырға мөмкин. Ә юғары класс уҡыусыларын әҫәр менән тәү ҡат танышҡандағы уҡыуға ла йәлеп итеп була. Йәғни, IX–XI кластарҙа уҡытыусы әҫәр тексы өҫтөндәге эштең теләһә ҡайһы этабында ла тасуири уҡыу талап итергә хаҡлы.

Әҙәбиәт дәрестәрендә тасуири уҡыуҙың өс төрө айырыуса йышыраҡ таралған:

1. Я ң ғ ы ҙ у ҡ ы у – тасуири уҡыуға өйрәтеүҙең төп формаһы. Урта кластарҙа ул киңерәк ҡулланыла, балалар класта яңғыҙарлап уҡыуға мөмкин тиклем күберәк ылыҡтырыла. Класс алдына баҫҡан уҡыусынан тасуирилыҡ һәр ваҡыт – тексты уҡығанда ла, һөйләгәндә лә, шиғыр ятлағанда ла, цитаталар килтергәндә лә талап ителә. Йыш ҡына яңғыҙ уҡыу уҡыусы менән уҡытыусы араһындағы мөнәсәбәткә генә әйләнеп китә, ә класс эшһеҙ ултыра. Бындай хәлгә юл ҡуйылмаһын өсөн, уҡытыусы алдан уҡ бөтә балаларҙың да иғтибарын йүнәлтергә тейеш. Улар класташының уҡыу сифатын ентекле күҙәтә, аҙаҡ уңышлы яҡтарын һәм етешһеҙлектәрен күрһәтеп бирә.

2. Р о л д ә р г ә б ү л е п у ҡ ы у. Драма әҫәрҙәрен, мәсәлдәрҙе йәки прозалағы диалогтарҙы уҡыр өсөн ролдәрҙе балаларға алдан биреп, уларға «образға инергә» әҙ генә булһа ла ваҡыт бүленә. Был осраҡта әҫәрҙең геройҙары, уларҙың характерҙары, үҙ-ара мөнәсә-



геройҙың типик һыҙаттарын таныта.

Конкрет шағир шиғриәтенең лирик геройы образы уның бер нисә лирик шиғыры йәки бөтә лирик поэзияһы менән тулыһынса танышҡандан һуң ғына тулы һәм асыҡ булып күҙ алдына баҫыусан була. Р. Ниғмәти, М. Кәрим, Н. Нәжми, Р. Ғарипов, Р. Назаров йәки бүтән башҡорт шағирҙарының лирик әҫәрҙәре менән тулыһынса танышып сыҡҡандан һуң уларҙың лирик геройының ҙур тойғолар, оло уйҙар йөрөтөүсе патриоттар образы икәнлеген асыҡ күрәбеҙ.

Ҙур күләмле лиро-эпик әҫәрҙәрҙә – поэмаларҙа, шиғри повеста йә романдарҙа – лирик герой хәл-ваҡиғаларҙы һөйләүсе йәки уларҙа үҙе лә ҡатнашыусы шәхес булып сығыш яһауы мөмкин. Мәҫәлән, А. С. Пушкиндың “Евгений Онегин” романында шағир үҙе лирик герой булып ҡатнаша. Ғ. Сәләмдең “Бала” поэмаһында шағир – лирик герой – шундай уҡ ролдә бирелә.

VI. Дәрестә үтелгәнде ҡабатлау.

V. Өй эшен биреү.

VI. Йомғаҡлау.

*БДУ студенты, 2010.*

**Иҫкәрмә:** Айырым лирик әҫәрҙең, лирик циклдың лирик геройы һәм шағир ижадының лирик геройы, төрлө дәүерҙәр шиғриәтенең уртаҡ лирик геройы хаҡында аныҡыраҡ һүҙ йөрөтөргә, уҡыусыларҙы дәрескә активыраҡ йәлеп итергә , әҙәби әҫәрҙәрҙән күберәк, сағыуыраҡ миҫалдар килтерергә мөмкин ине. Лирик әҫәрҙәрҙә лирик геройҙың уй-кисерештәр, хистәр хәрәкәте – лирик сюжет элементтары хаҡында ла һүҙ булырға тейеш.

### VII класта “Шиғыр төҙөлөшө тураһында төшөнсә” темаһына дәрес өлгөһө

Маҡсат: 1. Сәсмә һәм теҙмә телмәр, шиғыр төҙөлөшө тураһында мәғлүмәт биреү.

2. Шиғыр яҙыу серҙәренә төшөндөрөү.

Йыһазландырыу: К. Әхмәтйәновтың “Әҙәбиәт теорияһы”, Ғ. Хөсәйенов “Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге”, Р. Ғарипов “Алырымҡош менән Бирмәмҡош” исемле китаптары, әҙәбиәт теорияһы буйынса таблицалар (№6; №21).

II. Өйгә эште тикшереү.

III. Яңы теманы аңлатыу.

*Уҡытыусы:*

– Хөрмәтле уҡыусылар! Хәҙер дәфтәрҙәрегеҙҙе асып, бөгөнгө датаны, теманы яҙып ҡуйығыҙ: “Лирик герой тураһында төшөнсә”. Бөгөн беҙҙең дәрес, лекция формаһында үтәсәк. Мине иғтибар менән тыңлап, кәрәкле урындарын яҙып барырға тура килер.

Әҙәбиәттең лирик төрөндә авторҙың уй-кисерештәре, теге йәки был ваҡиға , күренеш уңайы менән тыуған тойғолары сағыла. Шағир быны үҙе йәки берәй кеше исеменән тасуирлай. Ул күберәк үҙе исеменән “мин” тип һөйләүсән була.

Лирик поэзияла шағирҙың үҙе йәки берәй кеше исеменән һүҙ алып барған шәхесте **лирик герой** тип атайҙар.

Лирик герой йөҙөндә йыш ҡына шағирҙың үҙен күрәбеҙ. Ләкин лирик герой шағирҙың фәҡәт үҙе генә, уның әҙәби портреты, уның уй-тойғоларын һөйләгән фәҡәт үҙ шәхесе тип кенә аңларға ярамай. Шағир, ғәҙәттә, лирик герой исеменән үҙенең һәм күптәрҙең уй-тойғоларын дөйөмләштереп, типиклаштырып бирә.

Былa, мәҫәлән, Р. Ниғмәтизең, М. Кәримдең һ.б. шағирҙарҙың лирик геройы – үҙ замандаштарының алдынғы вәкиле, шуларҙың лирикала дөйөмләштерелгән образы. Шағирҙың һәм уның замандаштарының уртаҡ яҙмышы, дөйөм характер һыҙаттары, уртаҡ уй-тойғолары был лирик геройҙың типиклығын билдәләһә, шағирҙың үҙ биографик үҙенсәлектәренә хас сифаттар лирик геройҙы индивидуалләштерелгән асыҡ һыҙатлы образ итә. Уның үҙенә генә хас ҡылыҡтары, шатлыҡ һәм ҡайғылары ла асыҡ күренә.

“Лирик герой мотлаҡ шағир үҙе тигән һүҙ түгел, - тип яҙҙы Мостай Кәрим. – Ләкин ул шағир натураһының художестволы бирелеше. Шуға күрә, шағир шәхесе уның поэтик “мин”енән айырылғыһыҙ. Ул үҙ биографияһынан һәм тәжрибәһенән әһәмиәте аҙ, ваҡ нәмәләрҙе ташлап, уҡыусыға мөһимдәрен генә тәҡдим итеүсән”. Әгәр М. Кәрим “Дуҫтар һорауына яуап” шиғырындағыса, үҙенең әлифба тотоп мәктәпкә кергән, беренсе ҡат байраҡ күтәреп урамдарҙан уҙған, хыял ҡыҙын һөйәм тип, тәүге һүҙен әйткән, Тыуған илгә тоғролоҡҡа яу яланында ант иткән, окопта партбилет алған, дошманды еңеп, тыуған ауылына ҡайтып төшкән иң әһәмиәтле, иң бәхетле минуттарын берәм-берәм хәтерләй икән, быларҙа шағирҙың үҙ замандаштары биографияһының да уртаҡлығы сағылып, лирик



бәттәре тураһында тағы ла бер ҡат уйланырға мөмкинлек тыуа. Ролдәр буйынса уҡырға әҙерләнеүҙе өйгә лә биреп ҡайтарырға мөмкин. Ул сағында әҫәрҙе «йәшерен» анализлау, геройҙарын ҡылыҡһырлау оҙағыраҡ дауам итә.

3. К о л л е к т и в  у ҡ ы у урта кластарҙа ғына үткәрелә. Уның өсөн ғәҙәттә шиғри текст алына. Уҡыусылар тауыштары буйынса өс төркөмгә бүленә: ҡалын, уртаса һәм нәҙек тауышлылар. Текстҡа уҡытыусы алдан партитура яһай – ҡайһы өлөштө кем уҡырға тейешлеген билдәләп сыға. Бер өлөшөн яңғыҙ уҡыусы, икенсеһен – нәҙек тауышлылар уҡый, артабан – уртаса, ҡалын тауыштар, хор менән һ.б. Мәҫәлән, Р. Ниғмәтизең «Һинең кәләшеңдең хаттары» поэмаһынан тамамланған йөкмәткеле түбәндәге өҙөккә шундай партитура яһап булыр ине:

| | |
|---|---|
| Кем ғәйепләр мине, оҙатҡан саҡта<br>Ике бөртөк йәшем сыҡҡанға? | Бер уҡыусы<br>(ҡыҙ бала) |
| Береһе уның –<br>һине һөйөү ине, | Нәҙек тауышлылар |
| Береһе нәфрәт ине дошманға. | Ҡалын тауышлылар |
| Ике бөртөк йәштең икеһен дә<br>Һинең йөрәгеңә тамыҙҙым. | Уртаса<br>тауышлылар |
| Береһе –<br>Һөйөү булып әсеттерһә, | Нәҙек тауышлылар |
| Береһе –<br>нәфрәт булып ҡабынһын. | Ҡалын тауышлылар |
| Шатланырмын,<br>әгәр шул һөйөүем<br>Ярҙам итһә яуға инергә.<br>Ҡыуанырмын,<br>әгәр шул нәфрәтем<br>Дошманыңды уттай көйҙөрһә. | Бөтә<br>класс<br>менән |

Тасуири уҡыуға өйрәтеү һәр класта йыл буйына планлы рәүештә алып барыла. Уҡытыусы ниндәй әҫәрҙәрҙе нисегерәк уҡытырға икәнен август айында төҙөлгән йыллыҡ календарь планында алдан уҡ билдәләп ҡуя. Ҡайһы бер текстарҙы тасуири уҡыуһыҙ анализлауҙы

күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Әйтәйек, Ғ. Сәләмдең “Республика иртәһе”, М. Кәримдең “Ләйсән”, “Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа”, Р.Ғариповтың “Туған тел”, Ш.Бабичтың “Халҡым өсөн”, “Башҡортостан”, Н.Нәжмиҙең “Тыуған ҡалама йыр”, З.Биишеваның “Башҡорт теле”, Ә.Атнабаевтың “Салауат менән һөйләшеү”, М.Харистың “Онотмаһын мине тыуған ил”, С.Юлаевтың “Тыуған илем”, “Уралым”, Р.Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырҙарының, рус әҙәбиәтенән А. С. Пушкиндың “Себергә”, Н. В. Гоголдең “Тарас Бульба” (айырым өҙөктәр) әҫәрҙәренең тәбиғәтенә үк тасуири уҡыу кәрәклеге һалынған. Уларҙы үткәндә уҡытыусы үҙе лә актив ҡатнаша, класс алдында бер нисә ҡат (йөкмәтке үҙләштергәндә, анализ барышында, тасуири уҡыуға өйрәтеү этабында) яттан һөйләп күрһәтә; балалар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, уға оҡшатып уҡырға тырыша.

Программа буйынса өйрәнелгән һәр әҙәби әҫәр йәки уның өҙөгө класта тасуири яңғырарға тейеш. Ләкин уҡыусыларҙы махсус ваҡыт бүлеп тасуири уҡырға өйрәтеү һәр дәрестә үткәерлмәй. Уҡытыусы тарафынан йыл башында уҡ алдан билдәләнеп, урта кластарҙа йөкмәткеһе яғынан балаларға таныш булған, тасуири уҡыуҙы һорап торған текстар ярҙамында тормошҡа ашырыла. Шул хәлдә, юғары кластарға етә бара, уҡыусылар ҡатмарлы текстарҙы ла ауырлыҡһыҙ уҡый аласаҡ.

1. Әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү барышында уның тексына нисә ҡабат мөрәжәғәт ителә? Һәр ҡайһыһының тәғәйенләнешен аңлатып бирегеҙ.

2. Уҡыусыларҙы тасуири уҡырға өйрәтеү әҫәрҙе өйрәнеүҙең ҡайһы этабында башҡарыла?

3. Тасуири уҡыуға өйрәтеүҙең һәр төрөнөң маҡсатын, үҙенсәлеген асыҡлағыҙ.

* * *

## Тексты тасуири уҡыуға талаптар

1. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Унда нимә тураһында һүҙ барыуын күҙ алдына килтерегеҙ.

2. Темаһын, төп фекерен билдәләгеҙ.

3.Авторҙың әйтергә теләгәнен тыңлаусыға еткереү сараларын асыҡлағыҙ.



Юғары кластарҙа конкрет текстар өҫтөндә ошондай күнекмәләр үткәреү классицизм, романтизм, сентиментализм, реализм методтарының һәр ҡайһыһының төп үҙенсәлектәрен тотоп ала белергә, уларҙы бер-береһенән еңел айырырға өйрәтәсәк.

Мәктәптә уҡытыла торған башҡа пердметтар шул фәндең законлыҡтарын өйрәнеүен күҙ уңында тотҡанда, әҙәбиәт теорияһы – әҙәби әҫәрҙең, әҙәбиәттең, әҙәбиәт тарихының законлығы икәнен иҫәпкә алып, уны өйрәнеүгә иғтибарҙы һис тә кәметмәҫкә кәрәк. Әгәр әҙәби-теоретик төшөнсәләргә программала бирелгән сәғәттәр менән генә сикләнһәк, был ғына етмәйәсәк. Теорияға һәр әҫәрҙе өйрәнгәндә, һәр сәғәттә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул әҫәрҙең үҙен өйрәнеүҙең бөтә этаптары менән бергә, тығыҙ бәйләнештә барырға тейеш. Бигерәк тә, анализ этабы үҙе үк теоретик төшөнсәләр менән эш итеүҙе һорап тора: идея-проблематика, жанр, сюжет-композиция, поэтик образлылыҡ, тел-стиль, һүрәтләү саралары һ.б. Улар хаҡында тексттың үҙенән сығып ҡына түгел, ә нескә генә итеп художестволы ижад законлыҡтарын да йәлеп итеп һүҙ алып барыу уҡыусының теоретик белемен бермә-бер арттырасаҡ.

---

*1. Урта һәм юғары кластарҙа әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙ эсенә алған мәсьәләләргә иғтибар итегеҙ. Әҙәби әҫәргә анализ яһағанда уларҙың һәр ҡайһыһының ҡатнашлыҡ кимәлен билдәләгеҙ.*

*2. Әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе өйрәнеүҙең төп принцибын тағы бер ҡат асыҡлағыҙ. Әҫәрҙе өйрәнгәндә, ул нисек тормошҡа ашырыла?*

*3. Яҙыусының ижад принцибы, әҙәби методтар хаҡында әҙәбиәт теорияһына ҡағылышлы баҫмаларҙан белемдәрегеҙҙе яңыртығыҙ.Был һеҙгә юғары кластар менән эшләгәндә ярҙам итәсәк.*

* * *

## Унынсы класта лирик герой тураһында төшөнсә биреү өлгөһө

Маҡсат: Уҡыусыларға лирик герой тураһында төшөнсә биреү, уларҙа әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу, тыңлау һәм яҙыу һәләттәрен үҫтереү.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.

яугирҙәрҙең батырлығының асылын инде көрәш яланында татый; шиғырҙа уларҙы тағы ла айбарлыраҡ һуғышырға реаль шарттарҙан сығып саҡыра:

Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар,
Асылһын әйҙә иҫке яралар!
Яраларҙы ирек уңалтыр,
Яуыз дошман башын юғалтыр!
Ҡурҡмаҫ булһа ирҙәр яранан,
Уҡ та үтмәҫ беҙҙен аранан!

Күҙгә бәрелеп торған романтик пафос менән һуғарылған кеүек булһа ла, был ҡобайыр реаль ысынбарлыҡ ерлегенә таянып, реалистик метод йүнәлешендә сығарылған. Әлбиттә, Салауаттың реализмы (ихтилал дәүерендәге һәм унан һуңғы шиғриәтен тотош күҙ уңында тотоп әйтәбеҙ) стихиялы рәүештә барлыҡҡа килгән; шулай ҙа хәҙер беҙ күрергә өйрәнгән реализм методы ҡанундарына тап килә.

Поэтик әҫәрҙәрҙең ҡайһы ижад методына ҡарағанын айырырға өйрәтеү күнекмәһе өсөн ғалим-методист М. Г. Качурин рус әҙәбиәтенән тағы бер ҡыҙыҡлы сағыштырыу тәҡдим итә. А. С. Пушкиндың киң ҡатлам уҡыусыға һәйбәт таныш булған бер шиғырының тәүге строфаһы:

Я помню чудное мгновенье;
Передо мною явилась ты,
Как мимолетное виденье,
Как гений чистой красоты.

Уны ла, лирик геройҙың күңел торошона таянып, романтик әҫәр тип атап булыр ине һымаҡ. Ләкин В. А. Жуковскийҙың уртаҡ яңғырашлы юлдары булған шиғырының түбәндәге строфаһы менән сағыштырып ҡарау уларҙың икеһенең дә йүнәлешен асығыраҡ күрергә ярҙам итә.

Ах, не с нами обитает
Гений чистой красоты.
Лишь порой он навещает
Нас с небесной высоты (19, 262).

В. А. Жуковский шиғырының лирик геройы хыялындағы «саф гүзәллек генийы» – ҡайҙалыр күктә, ә А. С. Пушкин героиняһы – реаль ысынбарлыҡта, беҙҙең арала. Бөйөк шағир ошо мөхәббәт хистәрен татыған һәр бер кешенең илаһи кисерештәрен реаль дөрөҫлөктә биргән.



4.Текстың *тонын*, *логик*_баҫым төшкән һүҙҙәрҙе, *паузаларҙы* билдәләгеҙ.

5.Телмәр *темпы*, тауыш көрлөгө, *хис-тойғоларҙы* еткереү сараларын нисек файҙаланыу тураһында уйлағыҙ.

6. Әйтелгән талаптарҙы үтәп, тексты яңынан уҡып сығығыҙ.

**Әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереү**

Балалар яҙыусы, әҙәби әҫәр, уның геройҙары тураһындағы тәүге мәғлүмәттәрҙе башланғыс кластарҙа, хатта мәктәпкәсә йәштәрҙә үк ала башлай. Балалар баҡсаһы йәшендә әкиәттең, шиғырҙың ни икәнен аңлай, башланғыс кластарҙа байтаҡ жанрҙар менән танышып өлгөрә. V–VI кластарҙа уларға әҙәби әҫәрҙең бер бөтөн ижади текст икәнлеге, уның айырым деталдәрҙән торғанлығы, һәр деталдең мәғәнәһе барлығы, йөкмәткегә ниндәй ҙә булһа йоғонто яһағанлығы – ҡыҫҡаһы, авторҙың ижади хеҙмәте икәнлеге еткерелә. VII – VIII кластарҙа уҡыусылар художестволы ижад – тормошто образлы сағылдырыу икәнен белә, яҙыусының быға ижади фантазия ярҙамында өлгәшеүен аңлай, уйҙырма ярҙамында тормош дөрөҫлөгө асылыуына төшөнә. Юғары кластарҙа әҙәбиәт халыҡ тормошо тарихын художестволы сағылдырыусы процесс булараҡ өйрәнелә башлай. Уҡыусыларға әҙәбиәт тарихы, әҙәби ағымдар, әҙәби традициялар һәм яңылыҡ индереү, яҙыусы шәхесе, ижад стиле, ижтимағи тормошта уның тотҡан роле тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Тимәк, урта кластарҙа һүҙ айырым әҫәргә ҡағылышлы теоретик төшөнсәләр тураһында бара, ә юғары кластарҙа әҙәбиәт, уның тарихи үҫеш үҙенсәлеге, әҙәби процесс терминдары һәм уларҙың асылы өйрәнелә.

В.В. Голубков урта кластарҙа әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереү түбәндәге мәсьәләләрҙе үҙ эсенә ала, тип ҡарай:

1. Әҙәбиәт – тормошто танып белеүҙең үҙенсәлекле сараһы, ижтимағи көрәш ҡоралы. Яҙыусы – әҫәрҙең авторы.
2. Художестволы әҫәрҙең состав өлөштәре.
3. Композицияһы.
4. Теле.
5. Шиғыр төҙөлөшө нигеҙҙәре.
6. Әҙәби жанрҙар (6, 105).

Был төшөнсәләрҙең һәр төркөмөн сиратлап, бер-бер артлы

өйрәнеп булмай. Бер үк ваҡытта (әйтәйек, урта баҫҡыстың иң түбәнендә – V класта булһын, ти) үтә ябай формала булһа ла балаларға уларҙың барыһы хаҡында еткерелә. Артабан кластан-класҡа күсә килә «ябайҙан – ҡатмарлыға», «еңелдән – ауырға», «дөйөмдән – конкретҡа» принцибы буйынса шул уҡ төшөнсәләр тәрәнерәк аңлатыла. Әйтәйек, шиғыр төҙөлөшө, сюжет, композиция тураһындағы дөйөм мәғлүмәттән конкретлыҡҡа күсә килеү тәртибе түбәндәгесә барырға мөмкин:

V–VI класс – шиғри әҫәр (үлсәмле), проза әҫәре (сәсмә).

VI класс – ритм, рифма, строфа, үлсәмдәр.

VII класс – шиғыр төҙөлөшө системаһы (силлабик, тоник, силлабо-тоник системалар).

Йәки:

V класс – әҫәр планы. Уның өлөштәре араһында бәйләнеш.

VI класс – әҫәрҙең композицияһы, сюжет һәм уның элементтары.

VII-VIII кластар – композицияның ҡатмарлы формалары, сюжет һыҙыҡтары, сюжеттың төп һәм ярҙамсы элементтары.

Юғары кластарҙа теоретик төшөнсәләр әҙәбиәт тарихына бәйле рәүештә тарихи аспектта сағылдырыла. Мәҫәлән, уҡыусылар бүтән мөһим фәнни проблемалар менән бергә әҙәби йүнәлештәр хаҡында ныҡлы белем ала, тигәйнек. Әҙәби йүнәлештәрҙе, яҙыусының ижад принцибын өйрәнгәндә, 1917 йылғы революцияға тиклемге һәм унан һуңғы дәүерҙәге башҡорт әҙәбиәтендә ижад методтарының ҡайһылары таралған һәм кемдәр ижадында сағылған, ҡайһылары беҙҙә ерлек таба алмаған икәнлеге аңлатыла. Реализм методының тарихи үҫеш этаптары – мәғрифәтселек реализмы, тәнҡитле реализм, демократик реализм – уларҙың уртаҡлыҡтары һәм айырмаһы хаҡында конкрет әҫәрҙәр миҫалында ентекле һүҙ алып барыла. Уҡыусылар теге йәки был әҙәби тексттың ҡайһы ижад методына ҡарағанлығын айыра белергә тейеш. Алда әйткәнебеҙсә, әҙәбиәттә һәм әҙәбиәттең тарихи үҫеш үҙенсәлектәренә ҡағылышлы теоретик төшөнсәләр үҙәккә ҡуйып өйрәнелә. Әйтәйек, тормош ҡатмарлыҡтары, ҡапма-ҡаршылыҡтары, геройҙарҙың көндәлек эшмәкәрлеге, уй-тойғолары, ынтылыштары реалистик әҙәбиәттә генә сағыла; классицизм, сентиментализм, романтизм һ.б. йүнәлештәрҙәге юғары пафослы йә төшөнкө тондағы әҫәрҙәрҙә тормош картиналарын объектив реаль һүрәтләү ниндәйҙер кимәлдә сикләнергә мөмкин. Уҡыусылар реализм методы элементтарын хатаһыҙ билдәләргә



өйрәнә; Мәғрифәтселек реализмы тәнҡитле, демократик реализм күренештәренең һәр ҡайһыһы үҙ тарихи эпохаһы менән тығыҙ бәйле икәнен аңлай. Ғәҙәттә, проза әҫәрҙәренең ниндәй әҙәби йүнәлешкә ҡарағанын танып белеү юғары кластар өсөн әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Ә поэзия, драматургия өлкәһендә уларға ярайһы уҡ баш ватырға тура килә. Әммә уҡытыусы ярҙамындағы тәүге күнекмәләрҙән һуң улар һәр методтың төп үҙенсәлегенә әкренләп төшөнә баралар һәм артабан үҙ аллы ла хатаһыҙ билдәләй алалар. Мәҫәлән, Салауат Юлаевтың «Яу» һәм «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» шиғырҙары тәү ҡарамаҡҡа бер үк ижад методы менән яҙылған һымаҡ тәьҫир ҡалдыра. Уҡыусылар уларҙың икеһендә лә йә күтәренке романтик рух күреп, йә реалистик һүрәтләү элементтарын табып, бер үк йүнәлешкә индереү яғын ҡарай. Әммә хатаһыҙ һығымта яһар өсөн уларҙың яҙылыу тарихын һәм шарттарын белергә кәрәк. «Яу» шиғыры Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышына тиклем үк, Салауаттың ир-егет ҡорона яңы инеп килгән дәүерендә ижад ителгән. Ул дәүерҙә йәш батыр бөтә донъяға романтик күҙлектән ҡарай, үҙенең башҡа шиғырҙарын да романтик рухта ижад итә. «Яу» шиғырының XIX быуатта Р. Г. Игнатьев рус телендә баҫтырған тексында:

> Было время, время храбрых,
> Божьих век богатырей;
> Были Гали, Абуталип,
> Сами и Няриман, –

тигән юлдар бар. (Р. Ниғмәтиҙең башҡортсаға тәржемәһендә батырҙарҙың исемдәре телгә алынмай). Икенсе төрлө әйткәндә, Салауат Көнсығыш әҙәбиәтендәге дини-дидактик дастандарҙың мифик геройҙарының батырлыҡтарына һоҡлана, үҙе лә шулар кеүек булырға хыяллана; батырлыҡтың ерлеген мифик-фантастик көстәрҙә күрә, үҙе лә шуға ынтыла. Романтик рух Р. Ниғмәти тәржемәһендә лә һаҡланып ҡалған: “Рухым күтәрелде минең дә...”. Ә инде өс-дүрт йыл үтеүгә, уның ҡараштары үҙгәрә. Крәҫтиәндәр һуғышы дәүерендә ижад ителгән әҫәрҙәрендә батырлыҡ тураһында реаль ысынбарлыҡ ерлегендә фекер йөртә. «Ыласындай төҫлө батырҙар ҙа бер төшмәһә аттан, бер төшә», – ти ул үҙенең бер шиғырында. «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» ҡобайыры Крәҫтиәндәр һуғышының иң дәһшәтле айҙарында тыуған. Был ваҡытҡа атаҡлы полководец кимәленә күтәрелгән Салауат ирек, бәхет өсөн көрәштә